**Йыһат Солтанов**

# ДҮРТ ПОВЕСТЬ



Ун ете томлыҡ бай ижадымды, бер ниндәй ҙә гонорар-аҡса алмайынса, электрон текстар рәүешендә сайтыма (адресы зигатсултанов.рф) һалып, ХАЛҠЫМА бүләк иткәнмен, сөнки (кемдәргәлер был оҡшаймы-оҡшамаймы – барыбер!), сөнки мин – ХАЛЫҠ ЯҘЫУСЫҺЫ. Теләгән һәр кем ул файлдарҙы, һис бер түләүһеҙ-ниһеҙ, асып йәки компьютерына күсереп алып, электрон китапханаһына теркәргә һәм яйлап уҡырға мөмкин. Әле тәҡдим ителгән дүрт повестең береһе лә бер ҡасан да ташҡа баҫылып ҡағыҙ китап булып сыҡмаған.

# ТЕГӘНӘК

Сағылдан ул көтмәгәндә гөмбөрләне.

Алйотлоҡ килеп сыҡты, әйтәһе түгел. Геологик партияла ер ҡаҙыусы ҡара эшсе булып дүрт ай эшләп, бындай хәлгә тарығаны юҡ ине. Бөтәһе шул “оҙон аҡса” көҫәүе арҡаһында...

Ошо айҙың аҙағында уҡ расчет алып, ауылға ҡайтырға йыйынғанлыҡтан, Зәйни һуңғы аҙналарҙа айырыуса ныҡ көсәнде – тин өҫтөнә тин өҫтәйһе килгәйне шул. Донъя бит, барыһы ла кәрәк. Ә ауылға ҡайтыр алдынан – бигерәк тә. Егетте унда һаласаҡ йорто, аласаҡ кәләше көтөп тора. Алда сығымдары ҙур. Ҡулға төшкән һәр тин-баҡырҙы осло моронло кирка менән таш ҡырҡып алырға тура килә. Бында арыу-марыуыңды күп уйлап тораһы юҡ. Янсыҡ бөтәйткең килһә, беләгеңде лә, көнөңдө лә йәлләмә.

Зәйни бөгөн дә иптәштәренән шаҡтай һуң ҡалып эшләне. Тәңгәленә эре ҡырсын ҡатыш яман ҡомташ ҡатламы тура килеүгә ҡарамаҫтан, саба-саба шурфты тағы ла метр ярымға тәрәнәйтте. Ҡара тиргә батып, ах-ух килеп, ул тар ҡоҙоҡтан үрмәләп сыҡҡанда, күктә иң эре йондоҙҙар балҡып күренә башлағайны инде. Һыулы шешәһе таш төшөп селпәрәмә килгән. Егет, алҡымын уйнатып, ватыҡ шешә боғаҙын асыу менән тибеп ебәрҙе. Уныһы, зарланғандай салтыр-солтор килеп, аҡсәс-бүтәгә араһындағы “водка” тип яҙыулы үҙ тиҫтерҙәре араһына барып ятты. Сисеп һалған кәзәкейен тирле яурын башына арҡыры йөкмәп, егет, тар шурфта бәлтерәгән быуындарын ҡатыра алмай, алпан-тилпән килеп атланы. Һаҡмар яры башындағы партия көн иткән палаткаларға тиклем сағыллы текәне күтәреләһе лә, оҙон ҡырла бөткән киртләс ҡабырыйҙағы бормас тар һуҡмаҡтан ике саҡрымдай йәйәүләгәс, һулға ҡырт-боролоп, кәкере-бөкөрө сибек уҫаҡтар һырыған һөҙәгерәк битләүҙән түбәнләйһе бар ине. Тау башына Зәйни ҡабаланып саҡ менеп етте. Яҫы өҫтәлташҡа йәйелеп ултырыу, хәл алыу теләге ни тиклем көслө булмаһын, туҡталманы. Ашнаҡсының йоҡлап ҡалыуы, йәки ашты йылыға ҡуймауы ихтимал...

Тимер юл таҫмаһы кеүек оҙон һәм яҫы арҡа буйына тиңәлгәс, һулышы еңеләйҙе. Елкәлеген сиңәртәй бармағына элеп йөкмәп килгән кәзәкейен ябынды, Етегән ҡойроғондағы аҡ йондоҙға күҙ ташланы. Ҡойроҡ осо ергә ҡарай байтаҡ боролған – сәғәт ун икеләр китте самаһы. Бөгөн көндәгегә ҡарағанда ла күберәк эшләп ташлаған, ҡул мускулдары һуйылғандай ҡалтырай. Эш хаҡын ҡаты тоҡом иҫәбенән сығарһалар, расчетҡа байтаҡ ҡына аҡса тейәсәк. Зәйни бөгөн эш сәғәтенән тыш ҡаҙған метр ярымға күпме өҫтәлмә һум төшәсәген иҫәпләп бара башланы. Тап шул ваҡыт, һуҡмаҡ ҡырыйына яҙа баҫып, иҫләмәҫтән ҡая аҫтына мәтәлде...

Зәйни иҫенә килеп күҙен асҡанда, үҙен бик дәү аждаһа ауыҙында ярым сәйнәлгән килеш ятҡандай тойҙо; ян-яғында зәңгәр күк фонында баяғының осло аҙау тештәренә оҡшап бейек-бейек сағылдар тора сурайып. Ҡояш әле ҡалҡмаған, ҡалҡһа ла, уны тау ышыҡлай һымаҡ. Егет ятҡан тар үҙәндә дымлы һалҡынлыҡ тиртә. Таштар йөҙөн таңғы томан ялап үткән – биттәре илап торған һымаҡ ысыҡлы. Зәйни йөҙөнә лә бик мул яғылған ул. Егет, уң яҡ ҡабырғаһында ятҡан килеш, ҡуҙғалмайынса таң аттыртҡан булһа кәрәк. Сәғәтенә күҙ һалырға итһә лә, барып сыҡманы: һул беләге, эргәләге йоморо таш һыртында бөкләнеп, бүтән кешенеке кеүек йәнһеҙ ята, көллө тәне үлтереп һыҙлай... Зәйни сәғәт быялаһының селпәрәмә килеүен, минут уғы, ҡармаҡҡа оҡшап, кәкерәйеп сығыуын абайланы. Һәр хәлдә, иртәлер әле, сәғәт етеләр ҙә юҡтыр – бал ҡорттары ла осмай бит.

Торорға итеп, тубыҡтарын бөкләне. Шул саҡ ҡаты ыңғырашыу һурылды күкрәгенән – һул аяғын, әйтерһең, тракторға эләктереп тарттылар. Күҙҙәрен йомдо, башы ҡабат лып итеп тәгәрәне...

Күпме ваҡыт үткәндер – билдәһеҙ. Ҡабат күҙен асҡанда керһеҙ күк йөҙөндә күкәй һарыһылай йомшаҡ август ҡояшы һәленеп тора ине. Әйтерһең, шул бер урынында төртөлөп ҡалған, йылмайып, Зәйни йөҙөнә баҡҡан. Аҙаутеш сағылдар уның һары нур ептәренән тарталар. Зәйниҙең баш өҫтөнән генә, арт яҡтараҡ, ус яҫылыҡ бер күкшелт тимгел күҙгә салынды; күпме генә тырышһа ла, ятҡан килеш ентекләү мөмкин түгел. Уҡмашҡан ағас япраҡтарына ла, ниндәйҙер таныш сәскәгә лә оҡшай ул. Тик был тимгел, торғаны һайын йөрәк һыҙҙыртып, күңелгә үтә яҡын башҡа ни нәмәнелер хәтерләтә. Ҡайсаҡ унда турғай килеп ҡуна, сурт-сурт һайрап, ары пырылдап оса. Ҡунып киткәне, йәнләнгәндәй, оҙаҡ бәүелеп тора...

Инде Зәйни ҡымшанырға ла ҡурҡа. Бөтә һул яҡ һыны, йәнде алырҙай интектереп, үлтереп һулҡый. Имгәнгән ҡулмы был, аяҡмы, әллә ҡабырғамы икәнен дә белер әмәл юҡ – бөтә өҫкә самаһыҙ ҙур ҡыҙыу үтек баҫтырғандар, тиерһең. Хәҙер егет баш ҡалҡытыр ҙа хәл ҡалмауын тоя. Һулышы ла хырылдап, тамаҡ яндырып сыға. Их, бер генә йотом һыу булһасы, һыу...

Сеү, ни тауыш? Юғарыла, тау һыртында, Зәйниҙең эштәштәре күмәкләшеп һөрән һалалар. Улар төн буйынса берсә ҡысҡырып, берсә мылтыҡтан атып, уны эҙләп сыҡтылар. Инде бөтә партия менән таралышып, тау-таш араларын, урман шырлыҡтарын һөҙәләр. Был саҡырыу ауаздарын Зәйни ишетмәй. Көллө аңы, иләҫ-миләҫ килеп, барлыҡ менән юҡлыҡ араһында ҡалғый. Үлем тигән ҡурҡыныс йәр ҡосағына инеп барғанлығын иғтибарламай ҙа ул. Бөтөү – булыу һымаҡ уҡ типә-тиң, тәбиғи торош икән...

Зәйни инде үҙен тәрән тыныслыҡ, мәлйеү эсендә тоя. Ҡуҙғалырға ла, һыу эсергә лә, яраһын бәйләргә лә теләк кисермәй. Ошолай ҡатып ятҡан килеш, һары ҡояштың һаман-һаман тоноҡланып һүрелә, ҡарая барыуын күреү ҡәнәғәтләндерә уны. Көндөң бөтөнләй ҡарайып, күмергә әүерелеүен тик бер генә нәмә тотоп тора, ул да булһа әлеге баш осондағы турғай тирбәлдертеп киткән күк тимгел. Ниндәйҙер сихырлы көс ағыла шул тимгелдән, һүнеп барған аң шәменә әленән-әле ялҡын ләүкетеп уята. Зәйниҙә шул борсоғос көстө аңлап-белеү сәме көсәйә. Ағас ботағымы, сәскәме, берәй үләнме – нимә һуң әле был йәнгә шундай яҡын тимгел?..

Шуның тәңгәлендә генә күк яҡтыһын кинәт ҡара ҡапланы, “Ҡар-р-р!” тигән ҡараңғы-йәмһеҙ тауыш ярҙы һауаны. Ҡанат еле биткә килеп бәрелде... “Үлеп ятаммы әллә?” тигән сәйер уй ойҡотто. Һөмһөҙ ҡарға ҡунған тимгел, сатаһынан һабағы айырылып, Зәйниҙең нәҡ битенә бөгөлөп төштө. Әҙәм башының ҡыймылдағанын күреп тертләгән ҡарға, бер ҡарап алды ла, ҡанаттарын ялп-йолп болғап, кинәт үргә сорғоно, сағыл осона ҡунды. Асыулы-һаҡ ҡарашын аҫҡа – кәүҙә өҫтөнә йүнәлтте.

Зәйни иһә алдындағы әлеге күк тимгелле һабаҡҡа текләй. Көллө мейеһе, йоҡоһонан уянғандай, йәһәт-йәһәт был донъяға алҡына, ашҡынып, үҙ вазифаһын башҡарырға тырыша. Тәрән итеп һуланы әҙәм балаһы. Бығаса йән тойҙортмай ҡатҡан күҙҙәре терелеп шар-асылдылар. Серле тимгел тәүҙә турғай башы ҙурлыҡ айырым-айырым тупалсыҡтарға, унан һуң, бара-тора, аҫ яғы йомшаҡ аҡ төк менән һибәләнгән, өҫкөһө сағыу балҡыған зәңгәрһыу-ҡыҙыл түшле нәфис сәскәләргә әүерелде.

Туҡта-туҡта, тегәнәк түгелме был? Тегәнәк дуҫҡайым бит!

Йығылғандан биреле һыҙлау тәү ҡат егеттең тәнен түгел, ә йөрәген татлы әрнетеп үтте. Ҡыҙғылт-күкшелт тегәнәк артында муйылдай сөм-ҡара күҙҙәр йылтырап алйытты, артынса уҡ иҙәнгә ҡойолған бер ус көмөш тәңкә селтерәүеләй саф ауазлы көлөү салынды ҡолаҡҡа. Туҡта, һылыуҙарҙан-һылыу ҡараҡай, Нәғимә-Нәғимәкәй бит был!..

...Хеҙмәт күләме тулмаһа ла, былтыр көҙ генә льгота менән армиянан ҡайтарылғайны Зәйни. Ауылда әсәһе ҡапыл үлеп, береһенән-береһе ваҡ алты балалы ғаиләһен саҡ аҫырап торған инвалид атаһы ул ҡайтыуға үгәй инә алһа ла, йорт-ҡураға

бер ҡаҙыҡ та ҡаҡмаған. Элеккеләре лә ҡайһыһы ҡыйшайышып, ҡайһыһы ауып, тигәндәй, донъялары бөләүгә тартҡан. Шуларҙы әҙәм ыңғайына килтерә-килтерә көн артынан көн үтте. Бер яҡҡа ла сығып йөрөмәне. Хатта ауыл ҡыҙҙарына күҙ һалырға ла өлгөргәне юҡ ине әле. Атаһы Мотиғулла, себен кеүек быжылдап, уны эшкә төрткөсләп кенә торҙо, үгәй әсәй иһә ауыҙын турһайтып йөрөй гелән... Ә ауыл осонда Һаҡмар буйы Бәйге тауында һәр кис һайын йәштәр уйыны ҡыҙа, гармун моңо, егеттәрҙең һәм ҡыҙҙарҙың шат тауышы йөрәкте семерҙәтә... Түҙмәне, бер кис Бәйге тауына менеп баҫты. Бейеүселәр түңәрәгенең ситендә генә тороп, күңеле иләҫ-миләҫ килеп күҙәтте. Бына унан бер-нисә йәшкә өлкәнерәк буйҙаҡ егет, малсылыҡ фермаһы йәғни МТФ мөдире Ғәйнулла, бер ҡыҙҙы сарылдатып ҡосоп алды ла түңәрәк уртаһына һөйрәне:

-- Әйҙәсе әле, өҙҙөрә баҫайыҡсы әле, Нәғимәкәй!

-- Көн һайын фермала күреп еләп бөткәнмен, һинең менән бейергә теләмәйем! – тип өҙҙө ҡыҙ.

-- Ә мин теләйем! Мифтахитдин, ниңә аңшайып ҡаттың – тарт күрегеңде!

Мифтахитдин, ауыл лафкыһының (“лавка” һүҙенең башҡортсалаштырылыуы, магазинды шулай атайҙар) мут һатыусыһы, гармунын бөтә көсөнә шарылдатҡайны, МТФ мөдиренең йылтыр хром итектәре, Ай яҡтыһында ялт-йолт килеп, ҡыҙҙың ыҡсым туфлиҙәрен шат эйәртмәк итһә лә, Нәғимә ҡапыл тартылды ла һыпырылып китеп Зәйни тәңгәленә атлыҡты, уны ҡулынан эләктереп һөйрәне:

-- Кемде күҙләйһең, һалдат, минеме?  -- Муйыл кеүек сөм-ҡара күҙҙәре менән егетте тамам иҫәңгерәтте: “Бәй, мин хәрби хеҙмәткә киткән саҡта итәгенә баҫып тәгәрәп ҡалған оҙонтороҡ ҡыҙыҡай Нәғимә бит был! Ҡайһылай ҙа матурайып буйға еткән, ҡуңыр сейәләй өлгөргән! Өҫтәүенә, колхоздың уңған һауынсыһы ла тиҙәр үҙен!” Шулай уйлап та өлгөрмәне егетебеҙ, ҡыйыу һылыуҡай тултырып уның күҙҙәренә ҡараны: -- Бына ул мин – төш бейергә! – Һәм егетте баш тартмаҫлыҡ ҡороҡланы – шунда уҡ бейеп тә киттеләр, Ғәйнулла мөдир ике күҙе аҡшайып тороп ҡалды...

Ә шулай ҙа һемәйгән егет уйын таралышҡан саҡта Нәғимәне ҡабат ҡамтарырға булды – бер ситтәрәк күҙәтеп торған Зәйнигә яғымһыҙ ҡарап:

-- Киттек, һылыуым, өйөгөҙгә тиклем көндәгесә үҙем оҙатып ҡуяйым! – тине.

-- Юҡ, бөгөн оҙатыу кәрәкмәй. Зәйни ағай менән миңә юл ыңғайы. – Ҡыҙ, ҡырҡышйәндән ҡырҡа айырылып, йүгереп килеп, Зәйниҙе етәкләп алды. – Китттек-киттек, Ай ҙа байып бара ана!

-- Ҡыҙыҡай, ысматри, комсомолка башың менән иртән эшеңә һуңлама! Һыйырҙарыңды һалдат килеп һауышмаҫ! – тип ҡысҡырып ҡалды мөдир. – Был кварталда һауын буйынса алдынғылыҡты һин яуларға, маяҡ булырға тейешлегеңде онотма! – тип өҫтәне.

-- Аныһын һинһеҙ ҙә беләм!

-- Ысматри!

Һалдаттың башы әйләнде. Әллә ниңә бер күреүҙән, бер ҡағылыуҙан уҡ йөрәгенә кереп ултырҙы ла ҡуйҙы был һылыу... Икеһе тиң бер үк хис кисерешепме, бер килке өнһөҙ барҙылар.

-- Был МТФ Ғәйнуллағыҙ бөтә һауынсыларын да ошолай ҡурсалаймы? – тине егет.

-- Кемдән?

-- Мәҫәлән, миңә күҙҙәрен яман аҡшайтып ҡараны.

-- Аҡшайғанды уғата аҡшайтайыҡ! – Бер ус көмөш тәңкә сылтырап һибелгәндәй йәнгә үткәҙеп көлдө.

-- Ниндәй алдынғылыҡты лыҡылдай ул? Ниндәй маяҡ?

-- Бәй, әллә ҡайҙа автомат йөкмәп йөрөп, сәйәсәттән артта ҡалғанһың икән. Һауынсылар араһында МТФ, колхоз, район, өлкә буйынса кварталда иң күп һөт һауып алып, алдынғылыҡҡа сығыу өсөн социалистик ярыш бара бит хәҙер. Шундай алдынғылар илдә яҡты маяҡ буласаҡ.

-- Ә һыйыр апайҙар үҙҙәре нимә ти һуң?

-- Һыйырҙың һөтө телендә, тип, ифрат ҡарыша улар.

-- Һе! Ул ҡарышыуҙы нимә менән еңәһегеҙ?

-- Ҡағыҙ менән, ҡағыҙ! Күп һөт һауып алырға, тип райондан да, өлкәнән дә көн дә ҡағыҙҙар яуа, ә беҙ, һауынсы комсомолдар, шуның менән һыйлайбыҙ һәүкәшкәйҙәрҙе...

-- Аңлайҙармы һуң?

-- Юҡ шул, аңларға теләмәйҙәр. Аң кимәлдәре түбән...

-- Алайһа, комсомолға алырға кәрәк уларҙы. Ә иң оло еленлеләрен хатта партияға ла!

Әйтеп бөтөрөр-бөтөрмәҫтән артта киҫәтеү ишетелде:

-- Һине, һалдат, ауыл советына саҡыртып, ҡыҙыу табаға баҫтыртырға тура килер, антисоветчина һөйләйһең!

Әйләнеп ҡаранылар: Ғәйнулла үҙе һөйрәлеп килгән дәһә!

-- Бәй, һәүкәшкәйҙәрҙе һыйламайынса уларҙан күп һөт талап итеү советчина буламы?

-- Ул турала тейешле ваҡытта тейешле урынға саҡыртып һөйләшербеҙ! Ә һин, һылыуҡай, бындайҙарҙың кәмәһенә ултырып, комсомол билетыңдан яҙып ҡуйма! – Ҡырт боролоп, ҡыҙыу-ҡыҙыу атлап олаҡты.

-- Вәт, ә-ә-әй! – Һыҙғырып ҡалды Зәйни. – Һөрһөп бөткән бюрократ икән дә был МТФ мөдире тигәнегеҙ – ниңә һинең тирәлә ныҡ урала?

-- Үҙенән барып һора.

-- Ә шулай ҙа...

-- Ә шулай ҙа... мине кәләш итергә йыйына ул. – Ҡыҙ, кинәт боролоп, үҙҙәренең ҡапҡаһы яғына йүгерҙе.

-- Туҡта... Нәғимәкәй! – тип кенә әйтә алды шаңҡыған егет. Кәйефе ныҡ ҡырылып, ҡом йотоп ҡаҡалған ата ҡаҙҙай интегеп ҡайтты өйгә...

Атай иһә ағас игәүен игәй ҙә игәй һаман:

-- Беҙгә лә инде әҙәмсә йәшәргә ваҡыт, -- тип туҡый, күп эсеүҙән ҡарлығып, ғыжылдаған тамаҡ төбө менән. -- Әнә, күрәһеңме береһенән-береһе бәләкәс ҡусты-һеңелдәреңде? Көнөнә бер мейес икмәк етмәй. Һис туҡталыу белмәйҙәр, байҙан ашаған ялсы кеүек ҡайыралар. Һәр ҡайһына ыштан да, итек тә, бишмәт тә кәрәк. Тапҡан-таянғаның шуларҙың төпһөҙ ҡойоһона китеп тора. Берҙе бишәүләтеп йәшәмәй булмай хәҙер!

Зәйнигә был мыжыу урынлы һымаҡ күренде. Ысынлап та, өйрә шыйыҡ ине шул тыуған өйҙә. Армияға киткәндәгенән бер иле лә артмаған.

-- Халыҡ шөйлә кеҫә ҡалынайтты хәҙер, -- тип ағас аяғын түҙемһеҙ туҡылдатты атай. – Үрмәләгән, күттән шыуғаны шаңғырҙап торған бүрәнәнән бура бөтөрөп керә. Тәк ышту, беҙҙең өлөшкә лә аҡмаһа ла тама. Әле ырамын, әле ишек-тәҙрә яңағын яһатырға килтерәләр. Ә үҙ ағасыңдан әтмәләһәң, уғата файҙалыраҡ. Ҡуллы кешегә көрәп алырға була, ашата беҙҙең кәсеп!

-- Мин колхозда эшләрмен, атай.

Мотиғулла иҙәнгә сарт-төкөрҙө:

-- Һи алйот, колхозға эшләп кем байыҡҡан? Ярай ҙа, бер-берәй түрә остоғо булһаң, мәҫәлән, келәт асҡыстарын услаған Ғәйзулла, йәки МТФ мөдире Ғәйнулла һымаҡ. Ә инде

осло ҡәләм тотоп өҫтәл артында ултырһаң, бигерәк тә шәп! Ләкин ундай төшөмлө урындар беҙгә тәтемәҫ – көллөһө үҙ-ара бүлешеп алынып бөткән...

-- Аяҡ-ҡулым һау – һәнәк-көрәк тотоп та төшөрәсәкмен ул төшөмдө!

-- Һәнәгең менән тырнап, көрәгең менән көрәпме?

-- Колхоз үҙебеҙҙеке, намыҫлы хеҙмәт үҙ баһаһын аласаҡ.

-- Ноль бөтөн дә нолдән ноль иҫәбенәнме? Тот ҡапсығыңды киңерәк! – Мотиғулла, үҙе яһап кейгән ағас аяғы менән туйтаңлап, сайыр еҫе аңҡытҡан аласығына атланы. Ярһып таҡта йышҡаны ишетелде:

-- Колхозға бил бөгөп кем бөтәйгән, кем туйған? Әҙәм эрәтле тимер аяҡлыҡ та эшләп ала алманым!..

Саң һырған бысраҡ тәҙрә үтә атаһының маңлайына аҡ ҡылған сәсе ялбырап төшкән тирле йөҙөн шәйләп һыҙланып ҡуйҙы Зәйни. Белә-белгәндән үк шулай ағас йышып тамаҡ туйҙыра. Ике усы ҡалын үгеҙ тиреһенән иләнгән күндәй ҡатҡан, бер-береһенә ышҡылғанда ут сәсрәй. Һаман берҙе бишәү итеү, бөтәйеү хаҡында хыяллана. Ләкин тапҡанының яртыһын эсеп торғанлыҡтанмы, әле булһа йортҡа ҡот ҡунғаны юҡ...

Зәйни, атаһы артынан инеп, һары таҫмаларҙың йышҡы аша шажлап атлығыуын ҡыҙығып күҙәтте. Көрәк ҡулдар талыу белмәй етеҙ хәрәкәтләнә, Мотиғулла улының баҫып тороуына иғтибар итмәгәндәй. Тоҙло тиргә ҡатҡан керле күлдәген өлпәйткән көмөрө арҡаһын төҫмөрләгәс, Зәйни күңелен тәрән ҡыҙғаныу хисе күмде. Өндәшмәй, икенсе верстакта өйөлөп ятҡан ҡорамалдар эргәһенә килде. Тупаҡланған нәҙек ҡул бысҡыһын алып, тештәрен игәүләне. Улар шулай бер-береһенә һүҙ ҡатмай байтаҡ эшләнеләр. Бысҡы үткерләнеп бөткәс, Мотиғулла улына яҡынланы. Осло ҡорос тештәргә баш бармағын сыйҙыртып ҡараны. Етеҙ хәрәкәтләнеп, бер шаҡмаҡты бысып төшөрҙө.

-- Маладис, улым. Ҡулдарың икмәккә йәлсерлек. Һөнәремде биреп ҡалдырыр кешем бар икән әле.

Ҡушарлашып йыштылар.

-- Атай, кемгә эшләйһең был ырамдарҙы?

-- Ғәйнулла түрәгә ине лә. Яңы төкөтмәһенә веранда үҫтергән бит. Кәләш алырға итә, ти

-- Кәләш?! – Егеттең ҡолағы ҡарп итте. – Ниндәй кәләш, кемде ала?

-- Кемде тип ни, түпрә йораты -- түрәнән яусылай инде ул. Йыуанҡорһаҡ келәтсебеҙ Ғәйзулланыҡын, тиҙәрме шунда.

-- Нәғимәнеме?

-- Нәғимә, тиҙәр, буғай.

Атаһы үлсәп-бысып һалған киҫәктәргә шикле ҡараш ташланы Зәйни:

-- Ғәйнулла түрәгә, тиһең инде... Әйтәм, колхоз таҡтаһына оҡшап тора.

-- Унда һинең эшең булмаһын, улым, -- тип өтөрәйҙе Мотиғулла.

-- Ферма алдына бит өсөнсө көн генә килтереп бушатҡайныҡ.

-- Шыма таҡта аҙмы ни был донъяла? Юҡты-барҙы күрмә алай, йүнһеҙ бисәләр кеүек.

-- Был бит күрәләтә урлау!

-- Шыш! Телеңде тешлә, улым. Атайыңдың кәсебенә тығылма. – Тәҙрәгә ҡараны ла, ҡабаланып, таҡта өйөмөнә алама брезент ярпыһы япты. – Темеҫкенеп инеп тә килә инде анауы ярғанат. Көн дә эттәй бер еҫкәнеп сыҡмаһа, тамағы туймай торғандыр! – Күрше Мохтар бабайҙың бирегә ыңғайлауы күренде. Ул ингәндә Мотиғулла, йышҡыһын йәһәт йәшереп, верстагы өҫтөндә тәмәке урап ултыра ине.

-- Әссәләмәғәләйкүм, шабра[1]! – Ҡарт, ҡолғалай нәҙек-оҙон һынын саҡ бөгөп, тәбәш ишектән ҡыйынлыҡ менән үтте.

-- Вәссәләм, шаҙра. – Бабайҙың йөҙө ысынлап та эре шаҙра – быжыр ине. – Ниңә йыландай ҡырҡҡа бөгөлөп этләнеп йөрөйһөң? Йомошоң булһа, тәҙрә сиртһәң, үҙем үк сығыр инем.

-- Этләнергә ваҡыт юҡ әле, мырҙам. Үҙең беләһең, ферма һөтөн сепаратҡа ташыйым. Эште яйға һалғым килә.

-- Йә, хуш?

-- Әрйә әтмәләйһе ине арбама.

-- Әтмәлә.

-- МТФ Ғәйнулла үҙе ебәрҙе һиңә. Ана, таҡта тейәп килтерҙем.

-- Ваҡыт юҡ! – тип ҡырт-киҫте Мотиғулла.

-- Атай, мин үҙем...

-- Сеү! Колхоз өсөн ҡулың ҡысытып торамы әллә? Бар, күрше, бүтән оҫта эҙлә. Бында аңғыралар юҡ.

Мохтар ҡарт, иҫе китмәй, әлеге брезент ярпыһы япҡан таҡталар өҫтөнә сүгәләне. Япма аҫтын тарамыш ҡулы менән һәрмәп ҡараны. Күҙен алмай шәйләгән Мотиғулла ярһыны:

-- Ниңә һыйырҙай ларҡайҙың? Күт тырнар ҙа ваҡытым юҡ, әйтәм бит! Әйҙәгеҙ, сыҡтыҡ! – Аласығын йоҙаҡлай торған баулы асҡыстарын шалтыратты.

-- Атай, туҡта әле. Йүнәтеп бирәйек олатайҙың арбаһын.

Мохтар бабай йәнә лә брезент аҫтын ҡамшаны:

-- Тап ошоноң ише матур итеп юнылған, бынамын тигән шыма таҡталар килтерҙем, мырҙа, фермаға ҡайтарылғандан... – Күҙҙәрен сөкөрәйтеп, Мотиғуллаға хәйләле тексәйҙе. – Колхоздыҡын – колхоз мәнфәғәте өсөн, әлбиттә. Ә һиңә ҡасан шылдырып өлгөрҙөләр?

-- Һәй һәптән, буғыңа тайып йығылғыры! Күпте күрһәң, күҙең сығыр йәки тиҙ ҡартайырһың.

-- Һәптәндәр ылау йөрөмәй, йәки таҡта ла йышмай, ә осло ҡәләм услап өҫтәл артында ултыра, мырҙам.

Мотиғулла ҡаж-ҡож йүткеренде.

-- Бушатайыҡ, олатай, таҡтаңды – үҙем эшләп бирәйем, -- тине Зәйни, атаһының ҡырыҫлығын йомшартырға тырышып. Мотиғулла өндәшмәне.

-- Әле генә әрменән ҡайтҡан балаңды ла үҙ көйөңә йырлатырға самалайһың бит, мырҙам. Аҡылың булһа, һин уның колхозға ылығыуына аяҡ салма. Донъя уларҙыҡы хәҙер.

-- Уларҙыҡы булһа, ете ҡат тиреһе туҙғансы тырышһын, әйҙә. Ҡарап ҡарарбыҙ: күпме тамыҙырҙар икән!

-- Аҙмы, күпме – бөтәбеҙ тиң шул хаҡҡа йөрөйбөҙ ҙәһә! Ил күргәнде күрәбеҙ. Зарланмайбыҙ.

-- Зарланмайһығыҙ шул – иҫәүәнгә тары көбө лә ярма! – Мотиғулла, дөбөр-шатор килтереп, верстактағы шаҡмаҡтарҙы иҙәнгә быраҡтырҙы. Күбәләй һары йомосҡаны яҫы еңе менән ышырып төшөрҙө.

-- Әйҙә, киттек олатай. Тауарыңды күрһәт, -- тине Зәйни. Ҡапҡа алдында ҡарттың егеүле алашаһы ҡамтарылған икән дә. Таҡталарҙы ихатаға индереп ауҙарҙылар.

-- Ай-һай, күберәк сумырғанһың! – тине Зәйни.

---

[1] Шабра (урыҫса) – күрше.

-- Мин түгел бит, Ғиндулла түрә үҙе күп итеп тейәтте. Артһа, күҙ күрер, тине.

-- Арбаңа сирек өлөшө лә етәсәк. Тағы ла нимә яһарға кәрәк, олатай?

-- Әлләсе. Түрә уныһын әйтмәне. Биргән тиклемен ауыҙ асмай тейәнем дә киттем. Аръяғын үҙенән белешерһең. Бәлки, икенсе берәй нәмәгәлер, колхоздың тишеге күп бит..

Зәйни ылауҙы, борошоп, ҡапҡанан сығарып ебәргәс, бабай уның яурынына ҡулын һалды:

-- *Дөрөҫ бараһың, улым.* Атаң һүҙен ал, *ләкин үҙеңсә эшлә.* Ололар ҙа ҡайсаҡ яңылышалар. – Арбаһына ултыра-ултыра өҫтәне: -- Хәҙер колхоз һин хеҙмәткә киткәндәге кеүек үк фәҡир түгел инде. Шөйлә йән керҙе. Беҙ ҙә аҙлап ҡабырғаларға май һырыта башланыҡ. Әүәлге таяҡ урынына тос ҡына һум бирәләр. Йән башына ашлығы ла эләгә. Тик шуныһы хилаф, улым: хеҙмәтеңде баһалау әүәлгесәрәк һаман. Эшләгәндең ҡатарынан эшләмәгән дә тешләй, йыйын мутйән етәкселеккә үрләй. Ә эш хаҡыбыҙ анауы күрше генә совхоздыҡынан күпкә ҡайтыш, шуға күрә халыҡ китә, коллектив хужалыҡтың ҡомо ҡойола. Юҡҡамы ни атайың, оторо*һо* тотоп, тәртә тибеп һындырырға сығынлай. Әммә һин, йәш быуын, тоғро юлды табырыңа иманым камил.

Зәйни, арба әрйәһенә етерлек таҡталарҙы үлсәп бысып, һурҡытырға аласыҡтың һыулыҡ буйына һөйәне. Ҡалғандарын лапаҫ аҫтына тәңкләп өйҙө. Атай кеше, аласыҡ мейесендәге сүп-сарға ут төртөп, киҫкә бүкән өҫтөндә уйланып ултыра ине. Бармаҡ араһына тәмәкеһе ҡыҫылған. Ялҡын теле бәйҙән ысҡынырға сапсып торған дағалы аттай дөһөрҙәп бейей. Шунан күҙен алмайынса, утыҙынсы йылдар башында тәүге колхоз ойоштороуҙарын хәтерләйме был, әллә фин һуғышында ҡатнашыуынмы? Йәиһә Бөйөк Ватан һуғышында Мәскәү эргәһендә аяғын юғалтыуынмы? Хоҙай белһен.

Ҡыҙыл ут шәүләһе, күбәләктәй елпенеп, ҡырынмаған ҡырыҫ бите өҫтөндә уйнай. Күк һипкелгә оҡшаған дары төртөктәре уғата йәмһеҙләтә. Кем белә, бәлки, ошо мәлендә ул ни бары бер “ярты” тураһында хыяллана торғандыр. Эштән бушанғас, кис эсеп ятырға. Унан һуң иртүк тороп баш төҙәтергә. Яһаған тәҙрә ырамдарын ҡиммәтерәк хаҡҡа “осорорға”. Бергә эсешкән ревкомиссия ағзаһы арҡылы тағы ла бер тоҡ аҡ он эләктереп, Зәйниҙең әсәһе үлгәндән һуң алған йәш бисәһенең шыңшыуҙарына сик ҡуйырға.

Тәртә араһында ҡартайған йөк атын хәтерләтә был атай. Иҫ белгәндән әле -- он тип, әле -- утын тип, әле -- бесән тип, ағас аяғын туҡылдата-туҡылдата бөрсә кеүек һикереп йөрөүе генә ярылып ҡалған. Һәм пенсия алғаны һайын ҡаты тамаҡ ҡырып араҡы эсеүе, колхоз бригадиры, МТФ мөдире менән, бисәһе менән әрләшеүе. Шунан һуң көнө-төнө сыҡмай аласығында юнышыуы. Рәхәтләнеп аяҡ бөкләп ултырғанын хәтерләмәй Зәйни...

Инеүенә иғтибар итмәһә лә:

-- Колхоз аҡса биргәс, беҙҙең тиҫтер йәштәр аулағаш ҡорорға йыйына... – тип тынлыҡты боҙорға баҙнат итте.

-- Ҡатыш. Ата-бабанан ҡалған йола.

-- Үҙең беләһең, ҡайтҡандан биреле колхозда урыҡ-һурыҡ эшләйем. Уның хаҡы ла бик аҙ – айлығымды тулыһынса электр, радио өсөн тотоп ҡаласаҡтар... – тип ситтәнерәк уратты һалдат.

-- Шунан?

-- МТФ мөдире Ғәйнулла менән уртаҡ тел табырға булдым. Колхоз эштәренән һуң кистәрен олатайҙың арба әрйәһен үҙем ипләп бирермен...

-- Иплә һуң.

-- Эш хаҡы һинең исемгә яҙыласаҡ, һинән, инвалидтан, тотмаясаҡтар, -- тип ҡоро белдерҙе Зәйни.

-- Әһә, колхоздың ҡыҫыр һыйыр икәнен төшөндөңмө инде хәҙер?!

-- Шуның эсенән аулағашҡа етерлеген үҙемә бирерһең...

Мотиғулла бот сабып, хахылдап, уның күҙҙәренә ҡарап көлдө:

-- Ул таҡта ҡаҙ ояһы өсөн күпме юҡмыш һум да юҡмыш тинде көрәп алырға самалайһың, балаҡай?

-- Мин бит өр-яңынан яһап, тимерләп, ыҫтанына үҙемултыртып бирәм. Иң кәмендә ун тәңкә.

Мотиғулла шыйылдатып һыҙғырҙы.

-- Ҡуй, улым, елдән быуаҙып, ҡойондан ҡолонлап йөрөмә улай. Мә, бынауы әҙер ике ырамды ҡултыҡла ла арғы ос Фатиманың биш тәңкәһен усыңа йомоп ҡайт. Ҡурҡма, үтескә генә бирәм – байығас ҡайтарырһың.

-- Левак аҡсаң кәрәкмәй миңә, атай. – Зәйни, кәйефе ҡырылып, үҙе эйәрләгән верстакты артыҡ-бортоҡ нәмәләрҙән арындырҙы. Атаһының көйһөҙ мисәү атылай һаман ҡырын тартыуы көйҙөрҙө йәнен. Ҡаш емереп ул тәмәкеһен бер талай төтәткәс, егет түҙмәне, ҡырҡа ғына һорай ҡуйҙы:

-- Атай, ниңә колхозды яратмайһың? Элек былай уҡ түгел инең. Үҙең ойошторошҡан коллектив хужалыҡ бит.

Сыжылдатып йышҡыларға керешкән Мотиғулла, ҡулына балта сабылғандай ҡырт-туҡтап, улының күҙҙәренә текләп ҡараны. Йышҡыһын быраҡтырып, верстак өҫтөнә менеп ултырҙы, яйлап икенсе тәмәке төрөргә тотондо. Уның ауыҙынан төтөн, ҡара мунса тындығынан бәргәндәй, ҡуйы боролдап, һөрөмләнеп сыҡҡандай ине. Быуыла-быуыла йүтәлләгәнендә Зәйни яғына пушка көбәгеләй тоҫҡалған ағас аяҡҡа ҡаҡырығын яңылыш төшөргәйне, янынан йәһәт йомосҡа услап алып, ышырып ырғытты уны. Таҙарыуына мөрәхәтһенмәй, кәштәләге ҡасауына ҡул һуҙҙы, тапланған аяҡты оҙаҡ мауығып ҡырсыны... Зәйни быны ярым сирҡанып, ярым ҡыҙығып күҙәтте.

-- Ҡайҙан алып әйтәһең ул һүҙҙе, маңҡа малай? Беләһең килһә, колхозды мин үҙем бына ошо ҡулдарым менән күтәрҙем! – тип екерҙе, ниһәйәт.

-- Колхоздан һырт ҡайыраһың бит үҙең.

Мотиғулла ярһыны:

-- Мин – инвалид! Бөйөк Ватан һуғышыныҡы! Ни теләһәм, шуны ҡылам. Теләмәһәм, ботомдо күтәреп түшәмгә төкөрөп ятам. Бына ҡандай кеше мин!

-- Элек андай түгел инең дәһә, атай... – тине Зәйни йомшаҡ тауыш менән, үпкәләберәк. Мотиғулла маңлай тирен еңе менән һелтәп төшөрҙө.

-- Элек йәшерәк инем, түҙемлерәк инем. Теште ҡыҫып тәбил таяғына ла, нолгә лә эшләнем дә эшләнем. “Яҡты киләсәк өсөн” кәрәк ине... Ләкин туҡтауһыҙ киләсәк көтөп буламы? Ҡараңғыраҡ бөгөнгөлә лә әҙәмсәрәк йәшәргә кәрәктер бит? Тамағын ҡайғыртмай көнө-төнө ҡыуылған йөк атылай, тамам ыйыҡланып бөттөк бит инде! – Тәмәкеһенең төтөнө менән ҡуша ауыр һуланы. – Ғүмер тигәнең уҙа, улым, аҡҡан һыу менән барәбәр. Һеҙҙе асҡа үлтермәҫ өсөн нимәләр генә эшләмәнем! Ҡартлыҡ көнөмдә мин дә бит, түккән хәләл көсөмә тейешлеһен алып, кәмһенмәй һәм кәмһетелмәй йәшәргә теләр инем. Түләһендәр, хәтәбе, анауы совхоздағыса, дәүләттәгесә -- йығылып ятып тартырмын төп тәртәнән! Ә был хәлдә миңә ҡырыйҙан ҡайырыуым файҙалы. Балыҡ та бит, урыҫтар әйтмешләй, тәрәнерәк һыуҙы һайлай.

-- Үҙең беләһең, атай: беҙҙә совхоз түгел, ә колхоз.

-- Совхоз ерекмәне менән минең арала ни айырма? Ул – эшсе, ә мин колхозсы тип исемләнгән өсөн генәме? Икебеҙ ҙә ҡара ер бағып, ҡара тир түгеп көн күрә. Илгә бер үк икмәк үҫтереп бирәбеҙ. МТФ-ла һауып оҙатҡан һөттәребеҙ ҙә бер төҫлө. Ләкин түккән көстәребеҙ ике төрлө баһалана...

Зәйни был дәғүәгә яуап таба алманы.

-- Кем ерендә тороуыңды онотма, атай! – тип кенә ҡуйҙы. – Колхоз ере!

-- Уны мин онотмайым. Онотор инем дә, Ғәйнулла түрә оноттортмай. Әле бәрәңге ерен тартып ала, әле утынға ат бирмәй, әле бесән саптыртмай. Шул ҡытлыҡтарға тарымаҫҡа, илке-һалҡы булһа ла, уның йомоштарын да башҡараһың...

-- Шәхси йомоштарынмы? – тине Зәйни, атаһы тап шул Ғәйнуллаға тип яһап ҡуйған тәҙрә яңаҡтарына, ырамдарына төртөп күрһәтеп.

-- Түрә намыҫлы булһа ғына түрә ул. Шуныһын юйҙымы – настаяшший пан, йәғни ни ҡылһа ла ирке бар, йәне тартҡан тарафҡа бора ала. Сөнки егем атынан алып ашар ашлығыңа тиклем ауылдағы бөтә тормош сығанағы уның үҙенә ҡарай кәкере ҡулында. Теләй икән – тамыҙа, теләмәһә тарта ла ала. Барып ошаҡлап ҡара, башың ике булһа...

-- Бына ни өсөн һин шул панға тырышып эшләйһең, урланған колхоз таҡталарынан тәҙрә ырамдары ҡоршайһың! – тип көйөндө Зәйни.

-- Унда ҡыҫылышың булмаһын, башың йәш әле, балам! Тора-бара Ғәйнулланың һәм башҡаларының да асылы кем икәнен, бәлки, үҙең дә белерһең. Телеңде арҡылы тешләп, арбаңды ғына эшләп бөтә күр!

Колхоздың төрлө тармаҡтарына йүгереп йөрөгән Зәйни иртә-кисен, шул эштәрҙән бушанған арала, атаһы янына аласыҡҡа инеп китә лә Мохтар олатаһының баяғы заказын тырышып үтәй. Аҙна араһында таҡталарын бынамын тигән итеп тоташтырып, кәрәкле урындарын тимерләп тә ҡуйҙы. Мохтар бабай килтереп туғарған арба ыҫтанына күмәкләшеп күтәреп ултырттылар. Һөт фелләктәрен ике буй теҙеп тейәрлек тәпәш кенә, уңайлы ғына фургон ишараты килеп сыҡты. Ҡартлас иһә ҡыуана-ҡыуана атын егеп, яңы эште Ғәйнулла түрәгә күрһәтергә лә Мотиғулла оҫта исеменә “нәрәт яптыртырға” дөбөр-шатор елдерҙе. Уны оҙатып ебәреп, ҡапҡаны япҡас, Мотиғулла нигеҙ буйында ятҡан, арба әрйәһенән артып ҡалған биш буй таҡта эргәһенә килде.

-- Метр ҙа етмеш биштән үлсәп бысҡыла, улым, өсәүһен, -- тип бойорҙо ул, шөйлә уйланып торғас.

-- Нимәгә ул, атай?

-- Ишек эшләйбеҙ, ишек. Ғәйнулла үҙе ҡушты.

-- Ғәйнулла? Нимәгә ул ишек, кемгә? – Зәйни төпсөнә бирҙе.

-- Уныһында беҙҙең ҡыҫылыш юҡ. Ҡушҡас, үтәргә кәрәк.

Улының һаман тешегеп тороуын күргәс, Мотиғулла, йомшарып, ярамһаҡлы тауыш менән дауамланы:

-- Кемгә булһын, ҡарауыл йортоналыр. Иҫең киткән икән иҫке сәкмәнгә! Үҙең әйткән дөйөм хужалыҡтың тишек-тошоғо аҙмы ни?

Ых-бых килеп ишекте эшләп бөткәс, тышҡа сығарып һөйәнеләр ҙә артып ҡалған ике буй таҡта өҫтөнә бөксәйешеп ултырҙылар, бышлыҡҡан Зәйни кәзәкейен һалып ташланы.

-- Нимә, бешерәме? Яланда саф һауала ғына колхоз эшендә әштер-өштөр ҡыбырҙап йөрөү түгел шул, -- тине Мотиғулла.

-- Кем нисек бит. Мин анда ла ихласланып тир түгәм.

Атаһының талсыҡҡан күҙҙәре ҡойма өҫтөнән йүгереп, баҫыу ҡапҡаһы артындағы һарыланып бешеп килгән арыш ҡырҙарын иңләне:

-- Их, бар ине беҙҙең дә һабан һөрөп, ыҙан башына орлоҡ күкәйҙәре күмеп йөрөгән саҡтар! – Үкенепме, дәртләнепме, таҡта ҡырыйына ағас аяғын тыҡылдатты.

-- Ат һабаны артынан йөрөү ҡыйын булғандыр, атай?

Мотиғулла тәмәкеһен урта биленә еткергәнсе баҙлата һыуырып яуапланы:

-- Ҡыйын булһа ла, күңел көр ине, балам. Хистәр саф-таҙа ине. Ас-яланғас булыуыбыҙға ҡарамай, ысын күңелдән егелеп тарта инек. Яҡты киләсәк тураһындағы шиғар ҙа ҡанатландырғандыр. Һеҙҙең ише аяғөҫтө йоҡлап йөрөмәй инек.

Зәйни, алдарында ятҡан һыйыр буғына сытырҙата төкөрөп, әсе йымайҙы:

-- Үлгән һыйыр һөтлө була шул, атай. Ҡарттар гел боронғоно маҡтай, хәҙергене яманлай. Уға ҡалһа, хәҙергеләр ҙә насар эшләмәй!

-- Бәғзеләре, бәлки, күберәк тә, шәберәк тә эшләйҙәрҙер – һүҙем юҡ. Әммә илһам даръялары ҡороған – аҡса ғына көҫәйҙәр...

-- Һин үҙең дә шул яҡты ғына ҡайыраһың түгелме һуң? Бушлай эшлә, булмаһа. Яҡты киләсәк өсөн.

Тегенең кәйефе ҡырылды:

-- Мине үҙең менән тиңләмә алай. Етерлеген егелеп тарттым инде. Хәҙер бушлай ел ҡыуыр сағым уҙған.

-- Бәлки, бер һинең генә түгел, ә ғөмүмән халыҡтың андай сағы уҙғандыр, атай? Лозунгылар гөрләтеп кенә алдырып булмай хәҙер, билбау аҫтың ныҡ булыуы ла кәрәк.

-- Ә мин нимә тим һуң һиңә? Хатта бала ла бит, сабыйлыҡ осоронан сыҡһа, тәтәй-мәтәйгә, алдаштырыуға ышанмай башлай...

-- Алайһа был мәсьәләлә икебеҙ тиң бер һап та бер ҡалып икәнбеҙ шул, атай. Ләкин, ләкин...

-- Ләкин ана шул әтнәкәһе бар шул уның! – Мотиғулла, тамаҡ ҡырып, мыйығын бороп ҡуйҙы.

Өр-яңы әрйәле арбаһын шығырлатып еккән Мохтар бабай килеп туҡтаны ҡапҡа алдына. Ат башын ҡамтарып, оло резинка итектәре менән лап-лоп баҫып, хужалар эргәһенә үтте:

-- Әссәләмәғәләйкүм, ишек-мишек әҙерме?

-- Ишеге әҙер, мишеге булмаһа ла. Күтәрҙек, улым!

Зәйни яңғыҙ үҙе йөкмәп апарып һалды арбаға.

-- Ҡайҙа илтәһең, олатай?

-- Аныһын түрә үҙе белә.

-- Ғәйнулланың яңы һипләткән өйөнә түгелдер бит?

-- Әлләсе, әлләсе, балам. – Олатай тиҙерәк олағырға тайшанды. Арбаһына менеп ултырғас, башын бороп ҡысҡырҙы: -- Шабра, кәнсәләрҙә аҡса бирәләр. Кеше күбәймәҫе элек ишек-мишектәрең өсөн тейешлеһен барып ал!

-- Бер тин ҡуян, ун тин зыян өсөн туйтаңдап йөрөмәм инде. Улым, үҙең барып кил, ҡағыҙҙарына мин булып имза һуғырһың, -- тине Мотиғулла. Улының йәһәтләүен күреп өҫтәне: -- Аулағашлығыңдан артһа, Мифтахитдин дөкәненә һуғыл -- кеҫәңә бер суҫҡа балаһын[2] ҡыҫтырып ҡайт!

Ағай-эне ҡайнашҡан кәнсәләр алдында Зәйниҙең тиңдәштәре өйкөмләнешеп, буласаҡ аулағашҡа бишәр һумдан “колхоз ойошторалар” имеш. Ситтәрәк ҡыҙҙар ҙа тора. Нәғимә тигәне, муйыл-ҡара күҙҙәре менән көйҙөрөп, Зәйнигә төрттөрҙө:

-- Һалдат, ҡасан уйынға сығаһың? Бер күренгәнең дә боҫтоң -- әллә үгәй әсәйең ебәрмәйме? – Эргәһендәгеләре хихылдашып тотанаҡланы. Ҡолаҡтарынаса ҡыҙарынған егет ни тиергә лә белмәне. Ахырҙа баш-күҙ алып:

-- Мин сыҡһам, һинең ише муйыл күҙҙәрҙе тиген ҡалдырмам! – тигән булды.

-- Уй, эсем ауырыуы, нимә тигән була бит әле! Шул телең булмаһа, ҡарға күтәреп алып китер ине үҙеңде!

---

[2] Суҫҡа балаһын – сирек литр араҡылы шешәне, тигән һүҙ.

-- Белмәйем әле, кемде кем күтәрер ине икән?

-- Ҡарға тиклем ҡарғаны күтәрә алырһың инде һин, шикләнмәйем!

-- Абайла аны, үҙеңде күтәреп алып китмәйем тағы! Хатта атайыңдан рөхсәт тә һорамайынса!

Ҡуңғыр йөҙө сейә кеүек ҡыҙарынған Нәғимә, матур-нәфис йөҙөн ситкә йәшереп:

-- Ҡалай тигән буласы мынауы, оялмай ҙа... – тигән булды. Ҡыҙҙың оҙон керпектәре аҫҡа һәленеүен күреп, Зәйни йөрәген ҡайнар тулҡын бәүелтеп үтте. Кәнсәләрҙең бейек болдоронан бөркөт кеүек ҡанатланып менде ул. Был муйыл күҙҙәрҙе онотоуы мөмкинме!..

Инеүен бик дәртле инһә лә, ҡанаты һынған тауыҡтай көштәйеп сығып китте егетебеҙ. Бәхеткә ҡаршы, ҡыҙҙар таралып бөткәйне.

-- Аулағашҡа байыңды, байыңды! – тип ҡысҡырҙы иптәштәре. Зәйни туҡтаны, кеҫәһен ҡамшап, икеләнеп торҙо. Ахыры ҡул һелтәне:

-- Хәҙергә булмай, егеттәр. Ауырыҡһынып торам әле. Ҡатнашыр булһам, кискәсә килтереп еткерермен.

Лафкыла шығырым-тулы ир-ат, ҡатын-ҡыҙ; шунда уҡ асып һемереүселәр ҡушаһында “яғаһы аҫтына төшөрөп” ҡыҙарынып алған Мифтахитдин елкенеп һатыу итә. Ҡулға аҡса ҡунғанда, тип, көллөһө йүгерешкән. Кәрәген дә, кәрәкмәгәнен дә һыпырып алалар, сөнки тауарҙың булғанынан булмаған сағы күп. Ир-ат фәҡәт үҙ мәнфәғәтен ҡайғырта: аҡһурғыс башлы “суҫка балалары” кеҫәләргә шыпылдап кереп кенә тора. Бәғзеләре стаканға Мифтахитдиндең үҙ ҡулынан ҡойҙортоп та эсә, ҡойоп биреүсе лә, әлбиттә, улар өлөшөнә керә. Талымһыҙыраҡтары тышта, кибеттең нигеҙ буйында уҡ, табын ҡороп ебәргәндәр. Ахылдай-ухылдай йоталар ҙа тоҙло балыҡ арҡаһын кимерәләр йәки еңдәре менән ауыҙ һөртөп кенә мөрәхәтһенәләр. Бер ағай ҡап-ҡара батҡаҡ эсендә хырылдап ята йоҡлап.

Зәйни әйтелгән шешәһен аласыҡта түҙемһеҙләнеп көткән атаһы алдына шыпылдатып ултыртты.

-- Һәй сәбәке малай, уңған булып сыҡтың бит, әй! Нисә тәңкә сумырҙылар? – тип ҡыуанды Мотиғулла. Зәйни өндәшмәне.

-- Аулағашыңа һалдыңмы һуң?

-- Ҡулға ни бары өс һум эләкте, атай.

-- Арба өсөн дә, ишек өсөн дәме?

-- Эйе.

Мотиғулла елкәһен ҡашыны:

-- Әйттем бит, елгә еленләп, боҙға быҙаулап йөрөмә, тип.

-- Был тыиклем үк оторҙар тимәгәйнем.

-- Отолмаҫҡа беҙҙә иң кәмендә хисапсы булырға -- ҡағыҙ-ҡәләм тотоп ултырырға кәрәк. Беҙҙең һымаҡ хөрәсәндәргә баһа эт илағыс бында.

-- Күрәләтә көс елгә осто! – тип килеште йәш быуын да.

-- Бармаҡ башындай ғына булһа ла шешкә ул, Ғәйнулла: үҙ хөкөмкәйҙәре үҙ ҡулында, ни ҡылһа ла уның хаҡы бар.

-- Шуға ла эш бармай беҙҙә.

-- Беҙҙә генә түгел – бөтә ерҙә. Йәғни бөтә совет илендә...

-- Атай, телеңде ҡыҫҡараҡ тот! – Зәйни тирә-яғына ҡаранды.

-- Совет иле тигәнем – үҙебеҙ булабыҙ инде... Эш хаҡын күтәреү өсөн, йәнәһе, тәүҙә колхозды байытыу кәрәк, тибеҙ. Ә бушлай кем эшләһен? Эшләмәгәс, нисек байыһын? Алйотлоҡ! Ошоноң менән биҙҙертәләр халыҡты...

Ҡапҡанан Мохтар бабайҙың онға батҡан тараҡандай ала-ҡола кәзә һаҡалы күренде. Мотиғулла, ҡабаланып, араҡыны йомосҡа аҫтына тыҡты:

-- Элмәңнәр ҙә йөрөр инде ошо ярғанат! Темеҫкенеп инеп килә.

Мохтар бабай аҙыраҡ ҡыҙмаса ине.

-- Әссәләмәғәләйкүм, шабра!

-- Вәғәләйкүм, шаҙра.

-- Бына аҡса алдым әле мин дә бөгөн. Эстә айғыр кешнәгәс, иллалла менән әбей ҡулынан өс тәңкәлекте ҡайырып, улымдың ҡул әжерен ҡайтарайым тип килдем әле. Рәхмәт, һүҙемде йыҡманы – бынамын тигән итеп әтмәләп бирҙе, таҡта фургонда рәхәтләнеп ҡуҡырайып йөрөйөм. Мин дә кеше бит! – Ҡартлас верстакка “сусҡа балаһы”н ултыртты. Мотиғулла ла, йөҙө яҡтырып китеп, сүп аҫтына боҫторған шешәһен һөйрәп сығарҙы.

-- Ултыр-ултыр, күрше. Улым, бар әле, әсәйеңдән икмәк менән бер-ике баш һуған һорап килтер.

Зәйни кире ингәндә шешәләрҙәге өс соҡортайға тигеҙ бушатылғайны.

-- Йә улым, яҡынла. Ир ҡорона керҙең инде хәҙер, гәрсә өйләнмәһәң дә. Атайың алдында аҙ-маҙ еппәреү әллә ни яҙыҡ булмаҫ, шулай бит, күрше?

-- Балиғ булған инде улың, үҙ тамағын үҙе туйҙырырлыҡ. Тик самаһын ғына белһен, шайтан ҡотҡоһоноң, тим... Әйткәндәй, күҙләп йөрөгән ҡыҙ-ҡырҡының бармы һуң?

-- Булмай буламы инде – баяғы шул келәтсе Ғәйзулланың Нәғимәһе, тиҙәр бит. – Мотиғулла, хәйләкәр йылмайып, мыйығын һыпырҙы.

-- Шулай икән... хәйерле булһын. Тик Ғәйнулла түрә күҙ һалып йөрөй бит әле уға. Йортон да яңыртты – көҙгә туйлап алмаҡсы. Баяғы Нәғимәне, тим...

-- Һе! Ҡыҙ үҙе нимә тип әйтер әле? – Атай кеше улына күҙ йүгертте.

-- Атаһы ла шул Ғәйнулланы, бына-бына буласаҡ кейәүем, тип әйтә, ти...

Хәмерҙән ҡыҙа төшөп, эсе бошоп тыңлаған Зәйни кинәт кенә:

-- Ишекте ҡайҙа илттең, олатай? – тип ҡырт-киҫте.

-- Ҡайҙа булһын, туп-тура шул Ғәйнулла ихатаһына. Үлсәп эшләнгән, тирһең – яңы верандаһына шап итеп ҡалды!

Зәйни ырғып торҙо:

-- Колхозға эшләйбеҙ, тигәйнең түгелме ни, атай?

-- Әйтһәм, ни йомош? Уймаҡтай ғына булһа ла, түрә -- фармандарын үҙе бирә. Ҡайҙа ҡуйһа ла, ҡуя – үҙ ирке.

-- Бирермен мин уға иректе! Колхоз таҡтаһынан өйөнә ырамдар яһатыуы етмәгән, инде ишекте үҙләштерә! Атыңды егеп кил, олатай: ҡалған анауы ике таҡтаны кире фермаға алып кит!

Инде Мотиғулла түҙмәй һикереп торҙо:

-- Бирермен мин һеҙгә, бирмәй ҙә ни! Ҡағылаһы булмағыҙ. Улар минең таҡта!

-- Ҡайҙан килеп ул һинеке булһын, ти?

Мотиғулла улының ҡолағына эйелеп шыбырланы:

-- Иҫәрләнмә. Ул таҡталарҙы миңә Ғәйнулла ишек эшләткәне хаҡына һибәләне.

-- Әһә, шулаймы ни әле? Урлап үҙенә эшләтеүе етмәгән, өҫтәүенә, урланған таҡтаны эш хаҡы итеп тә бирә икән. Аҡылға ултыртырмын мин уны!

-- Аҡылың булһа, ярыҡ барабанланып шаулап йөрөмә, күтеңде биш ерҙән ҡыҫ! Мә алты һум. Бөкләп кеҫәңә тыҡ та аулағашыңа һыпырт. Бая Фатиманан болдорон йүнәтеп биргәнем өсөн алғайным, -- тип, улының йөрәгендә ҡуҙлаған утты баҫырырға тырышты Мотиғулла.

-- Ярамай, мырҙам, ярамай, -- тип Мохтар ҡарт та өгөтләне. Ләкин ҡаны ҡыҙып өлгөргән Зәйни, атаһының аҡса һонған ҡулын кире ҡағып, сығыуға йәһәтләне. Кирза итектәре менән урам буйы лап-лоп атлап, МТФ мөдире Ғәйнулланың быйыл ғына һаламын ҡуптарып ташлап, ап-аҡ шифер менән ябылған алты мөйөшлө йортона яҡынланы ла асыҡ ҡапҡанан ихатаһына күҙ һалды. Балауыҙҙай һары таҡталарынан сайыр еҫе аңҡытып торған верандаға, ысынлап та, бая ғына арбаға үҙе һалышып ебәргән ишек ҡаптырылғайны. Күп уйлап тормаҫтан, ишекте шытырлатып күгәндән һурып алды. Соландан, сыр-сыу ҡубып, түрәнең оҙон тороҡло әсәһе йүгереп сыҡты, аҙбар яғынан хужа үҙе лә күренде.

-- Разбу-у-уй, өйҙө емерәләр! – тип һөрән һалды Ғәйниямал, ҡарсығалай осоп килеп, егетте яғаһынан алды. Кинәт йолҡа тартыуҙан Зәйни сайҡалып китте, ике ҡуллап тотҡпан ишеген ергә ауҙарҙы. Шул арала ҡулына көрәк тотоп, ҡашы-күҙе емерелгән Ғәйнулла үҙе килеп етте.

-- Эсеп-иҫереп ҡоторған был хулиган! Ауыҙынан араҡы аңҡып тора! – тип сарбайланы Ғәйниямал; бот-сатын килбәтһеҙ тарбайтып, егеттең йән еренә тибергә самаланы. Әммә Зәйни уны үҙ иңенән ҡуптарып, маҙаһына тейгән күгәүендәй һелкеп ырғытты. Шул арала башы өҫтөнә Ғәйнулланың дуға һыҙып төшөп килгән көрәгенән саҡ тайпылып өлгөрҙө.

-- Ни эшең был, Ғәйнулла?! Үлтерәһең бит егетте! – тигән тауыштар ишетелде. Ни арала тәңгәлгә халыҡ эркелгән дә бушлай ҡуйылған кәмитте тамаша ҡылып торалар. Шуға күрә түрәнең ҡулы ҡалтыраны, көрәген йәһәт кенә ситән буйына ырғытып, көсөргәнештән шабыр тиргә батҡан йөҙөн ең осо менән һөрттө.

-- Башыңды төрмәлә серетермен, хулиган! – тип, теш араһынан ҡыҫылдырып сығарып ышылданы. Оҙон күлдәк итәген ыштан бөрмәһенә ҡыҫтырып, улының дошманына ташланырға әтәсләнгән әсәһе яғына асыулы ҡул һелтәгәйне, уныһы елтерәп өйөнә инеп китте. Төркөм араһынан был икәүҙең кеменәлер яуҙырылған әсе һүҙҙәр ишетелде.

-- Күрҙегеҙме, армиянан ҡайһындай шәп һөнәргә өйрәнеп ҡайтҡан! – тип ярһыны Ғәйнулла. – Көпә-көндөҙ эсеп-иҫереп, кеше йортон килеп баҫа, ишектәрен ҡайырып ала!

-- Ҡайырып түгел, ә һурып, -- тине Зәйни, шаңҡыуынан ҡабат иҫенә килеп. – Сөнки ишек һис тә һинеке түгел, ә дөйөм хужалыҡтыҡы!

-- Ни лыҡылдайһың, кем ул дөйөм хужалыҡ?

-- Колхоз ул, һин колхоздыҡын урланың!

-- Дакажи, шул клеветаң өсөн яуап бирерһең!

-- Докажу! Мин был ишекте колхоз таҡтаһынан колхоз өсөн тип үҙ ҡулдарым менән эшләп, бөгөн иртәнсәк ҡына Мохтар олатайҙың арбаһына һалышып ебәргәйнем, шуның өсөн хисапсығыҙ наряд та тултырғайны. Ә һин шуны, намыҫһыҙ түрә-мүрә, үҙ йортоңа ҡаратып сәлдергәнһең! – Зәйни ишекте күтәреп алырға иткәйне, болдорҙан Ғәйниямал ҡабат дау һалды:

-- Разбу-у-уй, талайҙар! Йәмәғәт, ярҙамға килегеҙ! Был ни хәл, ниңә ауыҙ асып тик тораһығыҙ?

-- Дружинниктар ҡайҙа? Ҡулдарын ҡайырығыҙ дыуамалдың! – Ғәйнулла, ишек өҫтөнә боттарын тарбайта баҫып, ҡыҙыл еңеләрҙең исемен атап саҡырҙы. Төркөм эсенән хисапсы, клуб мөдире, пожарник айырылып сыҡтылар; күҙҙәрен аҫҡа төбәп, ҡыйыуһыҙ ғына, түрә бойороғон үтәргә итеп ҡаранылар, әммә “дыуамал” уларға баш бирмәне. Тамаша ҡылыусылар төркөмө кейәһенә таяҡ тығып болғатылған умарта күселәй гөжләне:

-- Ниңә тик-томалдан уға дружинниктарҙы һөстөрәһең? Егет дөрөҫ һөйләй!

-- Башҡаларға тәтемәгән шиферҙы ҡайҙан сумырҙың?

-- Верандаң да баштан-аяҡ урлап ҡоршалған!

-- Дакажи һин аны, дакажи! – төркөм яғына бер аҙым атлап күҙҙәрен аҡайтты мөдир.

-- Нимәһен уның даказайт итергә инде? Ферманан ҡайтҡаның һайын арбаң төбөнә таҡта һалып ҡайтҡаныңды күреп йөрөнөк.

-- Килтерегеҙ бау, ҡараҡтың үҙенең ҡулдарын шаҡарайыҡ!

Дружинниктар, бер-береһенә ҡарашып, албырғанып ҡалдылар. Шул арала Мохтар ҡарт килеп сығып, Зәйниҙе ҡултыҡлап алды:

-- Ҡуй, мырҙам, эт менән эт булма алай! Хаҡлығыңды бүтән ваҡытта иҫбатларһың. Абайламай һөйләгән – ауырымай үлгән, тигәнде онотма.

-- Күрәләтә нисек түҙеп ҡалмаҡ кәрәк, олатай?

-- Боронғолар, буҡҡа ҡағылма, һаҫыһы таралыр, тигәндәр...

Арттан Ғәйнулланың ярһып ҡысҡырыныуы ҡыуалатты:

-- Кемдең кем икәнен белмәй йөрөһәң, бер юлы белдертермен – ике аяғыңды бер ҡуныҫҡа тығырмын мин һинең, эшкашмаған! Ғәҙел законға тарттырып, бер таҡтаға баҫтыртып бейетермен! Осаңды тырнай-тырнай ыуаланырһың!

-- Күрербеҙ кем ыуаланғанын! – тине Зәйни, атлап барышлайы башын ҡайырып. Мохтар бабай кире боролорға ирек ҡуйманы.

Сисенгән һыуҙан таймай, тип, Зәйни эште аҙағынаса еткерергә самаланы. Иртән тороп, почта бүлексәһендәге телефондан колхоз идараһына шылтыратты. Рәйес үҙе өйҙә юҡ, тинеләр; трубканы колхоздың партком секретаре алды. Мәсьәләнең үтә дефицит тауар – төҙөлөш материалына бәйле икәнен белгәс, дилбегәне колхоздың рәйес урынбаҫарына тапшырҙы. Айыу үкереүеләй ҡалын тауышлы уҙаман, иренеп кенә тыңланы ла, хәлде урында энәһенән ебенәсә тикшереү өсөн кисекмәҫтән халыҡ контроле ағзаһын йүнәлтергә вәғәҙә итте. Һөйләшеү шуның менән осланды.

Төш ваҡытында лафкысы Мифтахитдиндең, уның ҡатарында ҡултығы аҫтына ҡыҙыл папка ҡыҫтырған хисапсының, ғауғалы ихатала ала-ҡола бер төркөм ир-ат йыйып, ҡулдарын болғай-болғай, дәғүәле ишек эргәһендә донъя бутап тороуҙары күренде. Ҡыҙыл папкалағы зәңгәр тышлы дәфтәргә нимәләр яҙып алып, эшем эйәләре кәнсәләргә ыңғайланы. Арауыҡ ваҡыт үткәс, аталы-уллы оҫтаҡулдарҙың аласыҡ ишеген кәнсәләр йыйыштырыусы ҡатынҡай килеп шаҡыны. Егеткә ишеттермәҫкә тырышып, үҙ-ара ғына ҡолаҡтан-ҡолаҡҡа шыбырҙашып аңлашҡастары, ул Мотиғулланы эйәртеп алып китте. Әлеге шау-шоуҙан һүң даими емерек ҡиәфәтле атаһынан һорарға ҡыйманы Зәйни. Билдәһеҙлек ҡосағында байтаҡ интектергәс кенә, ауыҙы ҡолаҡтарына еткән Мотиғулла, туҡ-туҡ атлап, бик елле ҡайтып керҙе. Улына ауыҙ һүҙ ҡушмай, арба йүнәтеүҙән артҡан ике буй таҡтаны саж-сож бысып тураҡларға кереште.

-- Бына шулай! – тип ҡәнәғәт һөйләнде, киҫәктәрҙе теҙеп ҡуйғас, мыйығын ялт-йолт бороп. – Бынан ары алай, яман тай һымаҡ, атаңдан алға сыҡма сапсып!

-- Ниңә киҫкеләнең быларҙы, атай?

-- Аныһын мин үҙем беләм. Субственный минеке был материал. Аҡылың булһа, Ғәйнулланан хәҙер үк барып ғәфү үтен. Әле һуң түгел.

-- Ярар, елкә соҡорон күрмәгәндән үлмәгән! – Ҡул һелтәне Зәйни.

Ҡояш байығас, Зәйниҙе лә саҡырттылар тегендә. Өҫтәл артында Ғәйнулла-мөдир үҙе, парторг Муллаян, ә өҫтәлдең ике башында хисапсы менән Мифтахитдин күҙле бүкәндәй тексәйеп ултыра ине. Биргән сәләмен иғтибарһыҙ ҡалдырҙылар. Ҡыҫыҡ ишектән соландағыларҙың һәм ишек төбөндә тәмәке бысҡытыусыларҙың ҡыҙыҡһынып һағалаған күҙҙәре ялтыраны. Һәммәһенең ул ингәс тә шым ҡалыуы шомландырҙы. Шулай ҙа ул, сер бирмәҫкә тырышып, стена буйындағы буш эскәмйәгә йәпләнде.

-- Йә, һалдат, бутканы шәп ҡайнатаһыңмы? -- Күҙлек быялаларын ялтыратып һүҙ ҡатты, ниһәйәт, Муллайән.

-- Боҫландырып.

-- Ҡаҙаныңдың төбө көйөп ҡуймағайы.

-- Көйһә, болғатырҙар. Болғатыусылары әҙер бит. -- Өҫтәл эргәһендәгеләргә ымланы егет. Ғәйнулла талағы ташыуын баҫа алманы:

-- Ниңә шул хулиган менән мәмәйләшеп маташырға? Тотҡан тәңгәлдән шартлатып һындырыу кәрәк!

Муллаян, уңайһыҙланып, ҡалын ирендәрен ялап алды. Ул математика уҡытыусыһы булып эшләй, ҡасандыр Зәйниҙе лә уҡытҡайны. Бригадаға парторг итеп быйыл ғына һайланғас, ығы-зығы араһына башкөлләй сумып өлгөрмәгән, ғауғалы был ваҡиғаға тығылыуы уның өсөн утҡа кереү менән бер ине, буғай.

-- Шартлатып һындырырға, ағас түгел бит был – кеше, әҙәм балаһы! – Мөдиргә боролоп ҡарап, ҡоро киҫәтте Муллаян. Зәйнигә төбәлеп дауамланы: -- Ниңә былай бик оторо ҡыланаһың, ҡустыҡай? Ни ҡыйраттың, баһадирлыҡтарыңды теҙеп бир.

-- Теҙәһе юҡ бында. Кәрәкһә, Ғәйнулла-түрә теҙһен. Ундай һөнәргә шәп бит ул.

-- Мин, унан түгел, ә һинән һорайым! – Парторг дилбегәне ҡыҫҡартты. – Ниңә үҙеңдән өлкәндәрҙе ихтирам итмәйһең, һорауға яуап бирмәйһең?

-- Завферма үҙенең нисек итеп колхоз милкен сәлдергәнен хикәйәтләһен, тим. Ҡыҙығыраҡ булыр.

Ғәйнулла, өҫтәлгә усы менән шартлата һуғып, осаһын ҡорт саҡҡандай ырғып торҙо:

-- Дакажи һин, дакажи! Пулный законлы дөкәмиттәргә таянып дакажи. Ҡайҙа ҡағыҙҙарың?

-- Мин һинең арттан көндәлек яҙып йөрөмәгән. Колхоз таҡтаһынан үҙеңә ишек яһатыуыңды иһә ошо күҙҙәрем менән күрҙем!

-- Күҙ – яҙыулы ҡағыҙ түгел. Нимәгә таянып әйтәһең?

-- Мин ул ишекте, колхоз фермаһына икән, тип, бына ошо үҙ ҡулдарым менән яһаным!

-- Ә бына был документты күрҙеңме? – Хисапсы ҡыҙыл папкаһынан ус яҫылыҡ ҡағыҙ киҫәге сығарып болғаны. – Иптәштәр, таныш булығыҙ: Ғәйнулла Ғимадиевичтың колхоз идараһынан шәхсәнә үҙ кәрәк-яраҡтары өсөн бысҡы материалы яҙҙыртып алған ҡағыҙы. Колхоз председателенең урынбаҫары Вәлитов иптәш үҙе ҡул ҡуйған!

Өҫтәл янындағылар шөйлә йәнләнеп, ҡағыҙҙы үрелеп ҡаранылар, баш сайҡап, тел сытылдаттылар.

-- Ғәйнулла бөгөн яҙҙыртып ҡайтҡанмы ул ҡағыҙҙы? Быға саҡлым ҡағыҙһыҙ шылдыра торғайны! – тип, соланда тыңлап тороусыларҙың береһе сәнстерҙе.

-- Кем ул унда тел болғай? Яҡтыға сығып күрен, тараҡан, исем-фамилияңды әйт! – тип екерҙе Ғәйнулла-мөдир. Ғауғалы ауыҙ йомолдо. – Числоһын ҡарағыҙ, иптәштәр: ҡағыҙ бер ай элгәре яҙып бирелгән!

Зәйни үҙенең бик шыма итеп кәкере ҡайынға терәтелеүен төшөндө.

-- Так што, етәксегә нахаҡ яла яҡҡаны өсөн ғәйепле кеше үҙ кәрәген алыр! – тип ҡағыҙын болғаны хисапсы. Кибетендә яғаһы аҫтына йөҙ грамды төшөрөп килеп, йоҡомһорап ултырған Мифтахитдин дә, башын ҡалҡытып:

-- Бына мин дә, халыҡ контроле ағзаһы булараҡ, Ғәйнулла Ғимадиевичтың таҡтаны ҡануни юл менән алғанын тулыһынса иҫбат итәм! – тип дөрөҫләне.

-- Ниңә һатыусы йораты колхоздың халыҡ контроленә һайланған? – тип ҡыҫтырҙы соландан баяғы тауыш.

-- Уның магазинға эшкә кереүенә өс көн тулып бер аҙна ла түгел бит әле. Электән һайланған килеш йөрөй, -- тип аңлатты парторг.

-- Эште тикшерергә уны билдәләмәҫкә кәрәк ине.

-- Һин, кем, әллә ышанмайһыңмы? Бөтәбеҙҙән аҡыллыраҡ булып киттеңме? – тип күҙҙәрен аҡайтты мөдир. Муллаян, ҡорғаҡһыған графинға ҡәләме менән сиртеләп, тыныслыҡ урынлаштырҙы:

-- Шауламағыҙ, иптәштәр, тәртип менән һөйләгеҙ! Һуған баҙары түгел бында. Бәлки, теге иптәштең әйткәне дөрөҫтөр ҙә. Төбөнә туҙ ҡуйып, энәһенән-ебенәсә тикшерербеҙ. Кәрәкһә, Мифтахитдин иптәш урынына бүтәнде һайларбыҙ. Ләкин сөй бында түгел. Эш шунда тора: Ғәйнулла Ғимадиевичтың төҙөлөш материалын законлы юл менән алыуы асыҡланды. Ҡануни документы бар. Тимәк, Зәйни иптәштең әйткәндәре дөрөҫләнмәне... -- Өҫтәл янындағылар, тупһа төбөндәгеләр, күҙҙәрен сөкөрәйтешеп, хихылданылар. Зәйни, ниндәйҙер билдәһеҙ көстәр арҡаһында үҙенең шыр-тилегә ҡалып барыуын тойоп, сыҙай алмай, ырғып торҙо. Үҙен-үҙе тота алмай ярһып ҡысҡырҙы:

-- Ялған! Ниңә ҡағыҙға ышанаһығыҙ ҙа миңә ышанмайһығыҙ? Тере кеше мөһимме һеҙгә, ҡағыҙмы? Әгәр ҙә бик шикләнһәгеҙ, атайымдан барып һорағыҙ. Ғәйнулланың, ишекте яһатып алғас, эш хаҡына биреп ҡалдырған таҡталары әле лә аласыҡта ята!

-- Туҡта! Йыйыштырыусыға әйтегеҙ, килтереп еткерһен Мотиғулла ағайҙы! – тип бойорҙо ике бите ҡалтыранған Ғәйнулла. -- Ә һин, теләгән берәүгә яла яғырға өйрәнеп ҡайтҡан мөртәт, китмәй тор!

Ағас аяғын шығырлатып та туҡылдатып, ахылдап-ухылдап, атаһы килеп етте – кисәге хәмер һөрөмө китмәгәйне. Парторг шунда уҡ теҙгенде ҡулына алды:

-- Мотиғулла ағай, әйтегеҙ әле: ошо көндәрҙә һеҙ таҡта ишек яһанығыҙмы?

-- Яһаныҡ, улым менән икәүләп.

-- Кемгә?

-- Ғәйнулла түрәбеҙгә.

-- Кем таҡтаһынан?

-- Уның үҙенекенән.

-- Бына улың, оятһыҙ, күҙен дә йоммай мине оклеветайт итеп, колхоздыҡынан, ти бит һуң? – тине Ғәйнулла.

-- Ул ни белә? Бер нимә лә белмәй бит ул колхоз мөхитенән, ауыҙынан әле һалдат һурпаһының тәме лә китеп бөтмәгән. Уйлмай һөйләгән – ауырымай үлгән, тигәндәй, теле нимә тылҡығанын ҡолағы ишетмәй уның, башы йәш бит әле, кисерегеҙ һеҙ уны.

-- Атай! – тип талпынғайны ла Зәйни, парторг артыҡ фәлсәфәгә сик ҡуйҙы:

-- Аңлашылды. Ултырыш тамам, эштәрегеҙгә таралышығыҙ, иптәштәр! – Һәм барсаһы һеперелешеп сығып та киттеләр. Зәйни иһә туйтаңлаусы атаһына йәнәш атланы.

-- Ниңә дөрөҫөн әйтмәнең, Ғәйнулла ысын ҡараҡ бит! – Үпкәләп өндәште ул.

-- Эй улым-улым, ҡараҡтар араһында көн күрәбеҙ бит... Ух, баш сатнап бара, балам... – Ҡайырылып, быяла ҡойонан ҡойоп биреүсе Мифтахитдин төйәгенә ыңғайланы...

Улар ауылында иртүк ирҙәр, еткән егеттәр көтөүгә мал ҡыуа сыға. Ҡыуғас, һәммәһе ауыл осондараҡ урынлашҡан Мифтахитдин кибете эргәһенә өйөрөлә һәм, махраларҙы бороп, төтөнөн борхолдатып, иртәнге сәйгә тиклем әңгәмә ҡороп ебәрәләр. Яңы ғына тыуған тоҙло-боросло көләмәстәр ошонда һөйләнә, телдәр ошонда сарлана. Тәбәҙ буйлы, ҡарпыш ҡолаҡлы ҡарт егет – һатыусы Мифтахитдин дә, лафкыһы эсендә ҡалып түҙмәй, сығып, телмәрселәрҙең теленә үҙ боросон һибеп тора. Колхоз

һауынсылары ферманан көн дә ошо лафкы алдынан ҡайта. Улар күренеүе менән үк йәмәғәт, иркен тын алып, төртмә телдең бөтә үткерлеген ҡыҙ-ҡырҡынға йүнәлтә. Тегеләр ҙә ҡалышмай, һағыҙаҡтыҡылай энә ҡаяулы һүҙҙәрен осоропмо осора. Әйтешә-әйтешә тегеләр үтеп китҡәс, йыйын тарала; фәҡәт баштары "махмур"лылар ғына тура Мифтахитдин лафкаһына йомола.

Шундай иртәләрҙең береһендә баштан-аяҡ йәшел һалдат кейемле Зәйни ҙә, һауынсылар төркөмө яҡынлауын күҙәтеп тора ине лафка алдында. Был юлы ҡыҙҙар ғәҙәттәренсә алыҫтан уҡ һүҙгә ҡушылып сыуылдашманылар: "Иҫебеҙ китмәй әле һеҙҙең кеүектәргә!" – тигәндәй, күнәктәрен беләктәренә ғорур элеп, шым ғына яҡынланылар. Әммә күҙҙәрендә осҡон уйнай, матур ирендәрен ҡымтып, көлмәйенсә саҡ түҙеп киләләр һымаҡ.

-- Былар берәй этлек уйлағандар бит, әй, -- тине Мифтахитдин, -- һаҡланығыҙ, егеттәр! – Бармағы менән төртөп күрһәтеп өҫтәне: -- Әгәр миңә алай-былай була ҡалһа, мине бынауы иң алдан килгәненең ҡуйынында шәһит киткән тип һанағыҙ!

-- Һин, иҫерек баш! Бәлки, хәҙер үк минең ҡосаҡта тонсоғорһоң?! – МТФ Ғәйнулла ҡарт егетте, яғаһынан бөрөп алып, ике иле ерҙән күтәреп дер-һелкетте.

-- Разбу-у-уй, баш ауырта, лафкасыбыҙҙың башына етә күрмә! – тип яр һалды "махмур"лылар.

-- Башы ҡәҙерле булһа, телен тешләһен, юҡһа кемдең кеме икәнен абайламай ысҡындыра! – тине, ҡыҙышып, Ғәйнулла, ә шулай ҙа ысҡындырҙы лафкысыны.

-- Һинең кәләшең икәнен ул ҡайҙан белһен, маңлайына яҙылмаған бит! – тип этләште береһе.

-- Мулла никах уҡымаған, Бюрозагста яҙылышмағанһығыҙ – тауыш күтәрмәй тороң! -- тип әзерәйҙе яғаһының һүтеген һәрмәштергәләгән Мифтахитдин.

-- Яҙылырбыҙ, күп ҡалмаған! Ошонан һуң кем дә кем шуны иҫәпкә алмай – ауыҙына бына ошо! – Йоҙроғон тегенең танауына терәп алды ла Ғәйнулла бригада кәнсәләренә ыңғайланы – түрә кешенең эштәре күп ине шул. Зәйни иһә быға иғтибар итмәй, күкрәк киреп алдан килеүсе ҡыҙҙы, тәүгә күргәндәй, күҙҙәрен ҙур асып, тулҡынланып ҡараны. Мәрйәләрсә ҡара юбка, ап-аҡ сарафан кейеп, ҡамыш бәйләмеләй йыуан толомдарының береһен – алға, икенсеһен артҡа ташлап, аҡ өҫтөндә һумалалай ҡарайтып, баҙыҡ атлаған тумалаҡ таҙа кәүҙәле, тулы битле ҡараҡай ҡыҙ үҙенең күҙ ҡарашы менән генә лә егет күңеленең иң ныҡ йәшерелгән нескә ҡылын сиртеп зыңлатты – баяғы Нәғимә ине. Зәйни, күҙҙәрен ала алмай, үҙе лә аңғармаҫтан, уны тәүкүргәндәй шаҡ-катып текләне. Ҡыҙ ҙа быны ныҡ тойҙо – ирендәре ҡалтыранды һәм ул күҙ ҡараларын, шаян осҡондар сәсрәтеп, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә уйнатты. Быныһын, моғайын, ҡыҙ үҙе лә Зәйни генә белгәндер...

-- Нәғимә, ниңә ауыҙыңа йөҙөк йәшерҙең? Иң яратҡан һәүкәшкәйең мөгөҙ бәлеше менән һыйланымы әллә? – тине түрәнең янауына иҫе китмәгән Мифтахитдин.

-- Һәүкәшкәйҙәрем ул бәлеште һинең туйыңа һаҡлай!

-- Бәй, икебеҙҙең туйғамы?

-- Утыҙ йәшеңәсә әллә нисәмә туй яһағанһыңдыр инде һин.

-- Ышан: бер тапҡыр ҙа кәләш алмаған әле мин.

-- Ал һуң.

-- Алыр инем дә -- бармайҙар бит.

-- Тырышып ҡара, бәлки, барырҙар.

-- Үҙеңде генә алайым да ҡуйыймсы, ҡараҡай! – Ҡыҙҙы беләгенән эләктерергә маташты. -- Тамам өлгөрөп еткәнһең: олатайың әйтмешләй, көләпәрә менән һуҡһам, йығылмаҫһың, шәт?

-- Кит, ҡотһоҙ! – Нәкиә әрһеҙҙең ҡулын этеп ебәрҙе. – Башыңа тай типтеме әллә?

-- Ҡыҙҙар, әйҙәгеҙ, туптар атып аҡылға ултыртайыҡ әле ошо лафкы һаҡсыларын! – тип алға сыҡты Миңниса. -- Ә һин, Нәғимә әүкәйем, анауы һүҙ әйтергә лә йыбанып торған йәшел кейемлененң кәрәгенә бир!

-- Ур-ра-а-а! – Һауынсылар, сыр-сыу ҡубынып, күнәктәренә тығылдылар ҙа егет-елгәҙәк халҡын юл буйында ҡотороноп үҫкән, яңы ғына бешеп еткән тегәнәк йомарлаҡтары менән тупларға тотондолар. Нәғимәнең ҡушйоҙроҡтай тегәнәге Зәйни яурын башына килеп ҡунды. Егет уны гимнастеркаһынан шытырлатып айырып алды ла, көлә-көлә, ҡыҙҙар төркөмөндә йүгереп китеп барған Нәғимә арҡаһына ултыртҡайны, уныһы ҡапыл туҡтаны.

-- Әһә, эшең шулаймы? – тине, әйләнеп ҡарап. – Туҡта, һалдат, мин һинең үҙеңдең эшеңде килтерәйем әле! – Буш ҡулын улай ҙа, былай ҙа һуҙып, ҡалаҡ һөйәктәре араһындағы йомарлаҡты ала алмай йөҙәне.

-- Эләктеңме?! – тине Зәйни, һылыуҙы беләгенән услап, күҙ төпкөлөнә текләп.

-- Уй, нығ йәбештергәнһең, һалдат.

-- Һалдат кеше үҙе лә нығ йәбешәсәк – ҡуптарып ташлай алмаçһың!

-- Ә мин ташламаçмын да!

-- Килештек! -- Тегәнәкте алып, уның ҡулына тотторҙо. – Ҡара аны, ҡараҡай, әйткәнеңде онотма!

-- Ә онотһам нишләтерһең?

-- Бына ошолай итермен! – Зәйни эйелеп ҡыҙҙың битен үбергә итте, ләкин уныһы танау булып, уңайһыҙ килеп сыҡты. Был мәлдә улар лафкы артындағы буш әрйәләр өйөлгән мөйөштә ышыҡланып торалар ине.

-- Ә шулай ҙа мәргән түгелһең икән, һалдат, яҙа атаһың! Бына ошолай аталар аны! – Тегәнәк йомарлағын егеткә йәбештерҙе. Йүгергәне ыңғайға күнәк ҡылысының сиҡылуын ишеткән хәлдә, йәбешкәк йомарлаҡты күкрәгенә ҡыҫып тотоп, зиһене һүрелеп торҙо. Шул арала лафкы алдын көр тауыш яңғыратты:

-- Нәғимәкәй, матурҡай, бер минутҡа ғына туҡта әле! – Мифтахитдин дөбөрләп төштө болдорҙан.

-- Йә, ни йомош?

-- Йомош, тип ни... әйтәһе бер һүҙем бар.

-- Ни һүҙ тағы?

-- МТФ Ғәйнуллаға барма һин, миңә бар. Ул минән, күп булһа, дүрт-биш йәшкә генә кесерәк...

Ҡыҙ, туҡталып, ҡарт егеттең күҙҙәренә ҡараны:

-- Шунан башҡа бер-берегеҙҙән ни яғығыҙ менән айырылаһығыҙ?

-- Аңа барһаң, МТФ тиреçенә биләңдән батасаҡһың. Ә миңә барһаң лакированный түфли, сәмсәле ситектәр генә кейеп йөрөрһөң.

Ҡыҙ ҡысҡырып көлдө:

-- Шул ғынамы айырма? Икегеҙ тиң бер һап та бер ҡалып икән шул.

-- Йырлап ҡына йоҡлатырмын, гармун уйнап ҡына уятырмын. Минең һымаҡ өҙөлөп ҡыҙ һөйә белгәндәр тиреç араһында аунап ятмай ул.

-- Прилавка өҫтөндә шешәнән ҡойоп биреп ултырамы?

-- Мин... мин... – Мифтахитдин, артында аяҡ тауыштары ишетеп, яҡынлап килгән Зәйнигә боролоп ҡараны.

-- Нимә һин? – Зәйни асыулы өтөрәйҙе.

Нәғимә лә Зәйнигә әйләнеп ҡараны ла кеткелдәп көлә башланы:

-- Ҡара әле, әй, Мифтахитдин ағайым да мине һөйәм ти бит әле, нишләргә икән?

Ике егет ике ата бесәй һымаҡ ҡапма-ҡаршы килеп бер-береһенә текләшкән арала ҡыҙ йәһәт кенә иңкәйҙе лә, буй-буй кәртә аралығынан һыпырылып, бер туған апаһының ихатаһына инеп юғалды, көләүе байтаҡҡаса быларҙың ҡолаҡ төптәрендә сыңлап ҡалды.

-- Һин, ниңә минең арттан йөрөйһөң?! – тине Мифтахитдин, кинәт иҫенә килеп, ҡаштары аҫтынан һөҙә ҡарап.

-- Артыңдан йөрөргә, ҡыҙмы ни һин?

-- Ҡара аны, икенселәй ҡабатлаһаң, ботоңдо һуғып һындырырмын!

-- Белмәйем, кем-кемдекен һындырыр икән?

-- Телеңде лә тый, малай, һалдаттан ҡайтҡан икән, тип тормам... – Мифтахитдин, бармаҡ янап, лафкыһына ашыкты – болдоронда “махмур”лылар зарығып көтә ине. Ирәйеп башын юғары ҡалҡытып бара, аяҡ баҫҡаны һайын ике сикәһенең ҡабарынҡы ите терт-терт һелкенә һәм ул таҡта һымаҡ яҫы, ләкин ҡыҫҡа кәүҙәһе менән күршенең әтәсен ҡыуып ебәргәндән һуң ҡуҡырайған ҡарт әтәсте бик хәтерләтә ине. Уның бая Нәғимә ҡолағына үрелеү өсөн аяғосо баҫып кирелеүен дә ҡабат күҙ алдына килтергәс, Зәйни ирекһеҙҙән ҡысҡырып көлдө.

-- Нимә шарҡылдайһың? – тине Мифтахитдин, асыулы әйләнеп ҡарап.

-- Буйың етмәҫтәйгә үреләһең, тим.

-- Кемдеке етмәҫ бит әле. Алма минең ауыҙыма үҙе өҙөлөп төшәсәк.

-- Бына һиңә алма! – Саңда аунап ятҡан тегәнәк йомарлағын тырнап алып, лафкыһының шаран-асыҡ ишегенә ырғытты.

Ошонан һуң әллә ниңә ҡупсыны ла ҡуйҙы Зәйниҙең йөрәге. Ҡайҙа ғына бармаһын да йөрөмәһен, ҡолағынан Нәғимәнең көмөш кеүек сыңғырлатып көлөү ауазы китмәне. Күмер-ҡара күҙҙәренең көйҙөрткөс осҡоно күҙ алдынан һүрелмәйенсә уйнаны. Аҡ сарафаны өҫтөнән ҡара ҡамыш бәйләмдәреләй һуҙылған, билдән түбәнерәк төшкән ҡалын толомдары ҡытыҡланы йәнен. Шул саҡта әйткән һәр-бер һүҙе, күҙ ҡарашы юйылмаҫҡа һүрәтләнеп, инде күңел даръяһында өп-өр яңы тулҡындарҙы тулата...

Ошо хистәр менән Зәйниҙең ҡышы үтте, өнһөҙ ағас бөрөләренең шартлап ярылыу осорон да еткерҙе. Тиртеп сыҡҡан ыуыҙҙай йәш япраҡтар кирелделәр, көндән-көн баҙыҡландылар; шаян елгә лепер-лепер бәрелешеп, иҫерткес сер һөйләнеләр донъяға. Улар леперләүенең бер сихыры Зәйни тамырҙарын бүрттереп типте. Яңы һауған һөттәй пак һәм ҡуйы һауа алйыткыс сайыр еҫен аңкытты.

Колхоз һыйырҙары йәйләүгә сығарылды, һауыу урыны итеп, йылдағыса, шишмәгә мул Садиҡ һаҙы билдәләнде. Был иркен һыулау тау битендәге иген баҫыуҙарына тартылған оло юл яҡаһында булып, йөк машинаһында орлоҡло тоҡтар өҫтөнә тейәлеп үткән-һүткән сәсеүселәр (араларында Зәйни ҙә бар) киске һауын ваҡытында көн дә бында туҡтала, машина йөрөтөүсе дырылдағына һыу “эсергән” арала төшөп, һалҡын шишмәгә бит-ҡулын сайыштырғалай, ә егеттәр сая телле ҡыҙ-ҡырҡын менән йор һүҙ әйтешеп, бер-береһенә үткер уҡ атышып алырға ла өлгөрә. Зәйни быңдай минуттарҙа, ниңәлер, ҡараҡайға яҡын килергә, һүҙ ҡушырға тартына – бөтәһе лә, ни булырын һағалап, уларҙы аңдығандай. Егетебеҙ, әйтешһә лә, башҡалар менән әйтешә, шаярһа ла, бүтәндәр менән шаяра. Ләкин бөтә уйы-хисе Нәғимәлә. Кемгәлер өндәшһә лә, ирекһеҙҙән, бүтән яҡтараҡ һис ни абайламағандай вайымһыҙ ҡиәфәт күрһәтеп һыйыр имсәген тартҡыслаған Нәғимәгә ишеттерерлек итеп әйтә, нимәгәлер көлһә лә, шул теләк менән ҡысҡырыбыраҡ көлә. Сөнки уның ҡыҙға еткерер тойғолары шул юл менән генә атҡарыла ала... Был йәшертен һөйләшеү телен Нәғимә лә аңлай кеүек, шуға күрә лә ул Зәйни яғына боролоп ҡарамай, туранан-тура уға төбәп һүҙ ҡатмай...

Егеттәр шулай илке-һалҡы ғына шаярышып алалар ҙа машина ғыжлай башлауы менән урындарына ырғышып менеп ултыралар. Ҡуҙғалып киткән саҡта ғына Нәғимә

башын ҡалҡыта, баштар араһынан Зәйниҙе эҙләп таба – күҙгә-күҙ осрашалар. Ҡыҙҙың һылыу йөҙөндә еңелсә йылмайыш төҫмөрләнә. Машинаның туҙан болото яҙлыҡтыра күҙҙәрен...

Бер мәртәбә Зәйнигә, сәскесе ватылып оҙайлыға туҡтаҒас, ауылға көндөҙ йәйәүләп ҡайтырға тура килде. Төшкөләккә һыйыр һауа төшкән ҡыҙҙарҙы күреп, һыулауға бороллдо. Ғәжәпләнеүенә ҡаршы, шишмә ситендәге ерек күләгәһенә еңел өҫтәл ҡуйылған, өҫтөндә папирос һәм шырпылар, кәнфит, ирҙәр тарағы кеүек нәмәләр теҙеп һалынған.

-- Был ни ғәләмәт тағы? – Аптырабыраҡ һораны Зәйни шишмәгә быхылдап һөтлө феләк төшөрөп маташыусы Мохтар бабайҙан.

-- Күрмәйһеңме ни – Мифтахитдин купистың ҡырҡтартмаһы. Ҡыҙҙар артынан тәмәке лә ирҙәр тарағы тейәп килгән, мәнеһеҙ... Ултырып ҡайтам, тиһәң, ана тора ат-арбаһы. Миңә эләгәм тип өмөт итмә, йөгөм ауыр! – Алдан алдыртып һөйләнде бабай аҡтығы. Зәйни ҡул һелтәне:

-- Ҡуйсы әле, олатай, ташла шул ғәҙәтеңде! Ауыҙ асыр әмәл юҡ – алашаңды ҡурсаларға тотонаһың.

-- Ҡурсаламай ни, атайыңдың ағасы түгел бит ул. Һеҙгә нимә -- ларҡайышып тейәләһегеҙ ҙә китәһегеҙ, ә ат өсөн мин яуаплы.

-- Юҡҡа баш ҡатырғансы, был һатыусы йоратын баҫыуға ебәрер инең, исмаһам. Анда егеттәр бер урап тартырлыҡ тәмәке өсөн ҡыҙыша -- әҙәм башын ашарҙай булып йөрөйҙәр. Ҡайҙа олаҡты үҙе?

-- Ҡайҙа булһын, әлеге лә баяғы шул яулыҡлылар эргәһендә урала. Ыжлап бирә, ти, ул һинең әйткәнеңә! Икмәк күргән көсөк кеүек күҙе тоноп, келәтсе Ғәйзулланың ырғаңдағын һағалай һаман. Бына күрәһең бит, хатта ҡаҙна тауарҙарын да күҙ-ҡолаҡ ҡалдырмайынса ташлап китте. Ә бахыр аты, туғарылмаған килеш, ҡаҡ ҡояшта тора шаҡырайып. Уға нимә, мөртәткә, үгеҙ үлһә -- ит, арба ватылһа утын...

Зәйни, йөрәгенә утлы тимер һуҡҡандай, ҡырт-боролоп, һыйыр һауған ергә атлыҡты. Күҙенә аҡ-ҡара күренмәй, бүтәгә-үлән төбөндәге һуҡырсысҡан убаларына һөрлөктө. Ырҙын табағылай таҡырға сығып, бер һәүкәштең тимерсыбыҡ шикелле ҡаты ҡыл ҡойроғо битенә сыртлата һуҡҡас ҡына, айнып киткәндәй итте, тертләп, артҡа салҡайҙы. Миңниса тигәндәре, һауыуын туҡтатып, уға ҡарап көлөп ултыра ине.

-- Ни булды һиңә, һаллат, әллә ҡорт саҡтымы? Күҙең аларып, һыйыр өҫтөнә менеп киләһең бит, әй!

-- Ярар, ләпелдәмә. Менеү мәсьәләһен һинән һорамам.

-- Аһ-аһ, әллә эсеп килгән инде бынауы ағайым?

-- Шулайҙыр шул! – Зәйни ары атланы.

-- Ҡарағыҙсы бынауҙы – осаһына ут ҡапҡандай йүгерә!

Нәғимә һыулауҙың арғы башында һауып ултыра ине. Буралай ала һыйыры, ташыу елене бушаныуға мәлйерәп, күҙҙәрен йомған килеш, тыныс ҡына көйшәнеп тора, уның дағы кеүек текә мөгөҙҙәренән Мифтахитдин батыр ҡуш ҡуллап тотҡан... Гөбөр-гөбөр һөт тауышы уны ла иҙерәткән, буғай: әллә шунан, әллә оҙаҡ хәрәкәтһеҙ тороп ялығыуҙан йоҡомһораған кеүек күренә.

-- Аҡҡа бәрәкәт! Һаумы, буласаҡ маяҡ! – Арттан килеп ҡыҙға өндәште Зәйни, мөгөҙ тотоусыға бөтөнләй иғтибар итмәҫтән. Нәғимә һиҫкәнде, гөбөр-гөбөр һөт ағылыу кинәт кенә туҡтаны. Алаһыйыр, быға ризаһыҙланып, ҡойроғон һелтәп ҡуйҙы. Һауынсыһы йәһәт әйләнеп ҡарағайны, ултырғыс итеп ҡулланылған буш күнәге дөңгөрләп ауҙы.

-- Йәнеңә һаулыҡ! Ҡотто осора яҙҙың бит, һаллат!

-- Осһа ни, ҡот ҡойоусың янында тора бит һерәйеп. Һыйыр мөгөҙөнә ике ҡуллап йәбешкән. – Зәйни үҙе үк тауышының асыулы сығыуын һиҙенде.

-- Һин, һалдат, Мифтахитдин ағайҙы алай бик рәнйетеп барма әле, -- тине Нәғимә. – Ул миңә һыйыр һауыша.

-- Эшем эйәһенән башҡаһы юҡмы ни?

-- Ҡайҙан булһын? Ана, һыйыр ҡойроғон тотоп тороусы ла кәрәк.

-- Икенсе ҡулы менән лафкасың тотһон.

--Тотор ҙа. Ярҙам итә ул миңә.

-- Ҡулындағы себен уйынын ҡарапмы?

Мифтахитдин күҙҙәрен аҡайтып екерҙе:

-- Эй, кирза! Икмәк шүрлегеңде томала, юғиһә менеп төшөрмөн!

-- Һинме?! – Зәйни йоҙроҡтарын йомарланы -- "кирза"лауы был урында түҙеп торғоһоҙ ине. – Кил әле, ҡабырғаларыңды һанап ҡайтарайым!

-- Үҙең кил, эсеңде ҡойолдорайым! – Һыйыр башын ебәреп, кеҫәһенән йылтыр бәке сығарҙы.

-- Шулаймы ни әле, эшең! – Бәкесенең үксәһенә кинәт тибеп ебәргәйне, унынһы, сәсе көлтәләй туҙғып, салҡан әйләнеп төштө. Сирғып киткән бәкене Зәйни шишмә төбөнә бырағтырҙы. – Бына шулай, ағай кеше. Көсөңдән килмәгәнгә икенсе тотонма! – тине.

Мифтахитдин торҙо, ҡалтыранған ҡулдары менән өҫ-башын ҡаҡҡыланы. Бер яҡҡа ҡыйшайған галстугын төҙәтте. Был әкәмәт шундай күҙ асып йомғансы уйналды – хатта егеттәр үҙҙәре лә, эштең нимәлә икәнен тойомламай, шаңҡыбыраҡ ҡалды, буғай. Аптырап ҡарап торған Нәғимә иҫен йыйып өлгөрҙө:

-- Ағайҙар, ни эшегеҙ был? Ыстырам, оятһыҙҙар. Әллә бер-береһенең күҙен соҡошорға итәләр инде!

-- Туҡта, балам, был эшең өсөн яуап бирерһең! – тип әзерәйҙе Мифтахитдин.

-- Ҡарап ҡарарбыҙ.

-- Ҡуйсы-ҡуйсы инде, ағайҙар, юҡҡа әтәсләнмәгеҙ, әҙәмдән оят! – Нәғимә тулы күнәген тотторҙо Мифтахитдингә. – Ағайым, аҡыллым, ифрат аҡыллы бит һин. Барсы, тиҙ генә ошо һөттө феләккә бушатып килсе. Туҡта, үҙеңде бер генә үпәс итәйем! – Ярһыуҙан ҡалтыранып торған ҡарт егетте ысынлап та маңлайынан бер супылдатып алды. Мифтахитдин, ашыҡмай ғына, феләктәре менән мәш килеүсе Мохтар бабай яғына атланы.

-- Ярамай инде алай көпә-көндөҙ кешегә ҡул күтәреү! – тине Нәғимә, Зәйнигә ғәйепләүсән текләп.

-- Үҙе бит. Ниңә бәке менән киҙәнә?

-- Киҙәнмәҫе борон уҡ төртөп йыҡтың.

-- Эсемә бысаҡ тыҡҡанын көтөп тораһым ҡалған икән!

-- Ярай-ярай, тилермә, -- Һөтлө усы менән егеттең маңлайынан һыпырҙы. – Абау-абау, ҡайһылай ҙа етдиләнеп һырланған! Теләйһеңме, үҙеңде хәҙер бер тәмлекәс менән һыйлайым?

-- Ҡарап ҡарайыҡ.

-- Уй, ниндәй ҙә етди ағай! – Халат кеҫәһенән кәнфит алып, айбарлы ҡағыҙын аҡтарып ташлап, егеттең йәберһенеп ҡалтырап торған ирендәренә терәне. Зәйни башын артҡа тартты, кәнфит бүтәгә араһына бырағты.

-- Ниңә алайтаһың? – Үпкәләне.

-- Моғайын, шул ҡарпыш ҡолаҡтың нәмәһелер әле.

-- Булһа ни... унан беҙгә ни зыян? Ҡарпышлығы йоҡмаҫ әле.

-- Шунан бүләк алып тормаһаң инде...

-- Алһа ни... Биргәндең битенә ҡарама, тиҙәр түгелме? Күстәнәс – мең төрлө сиргә дауа, ти, бит ул.

Зәйни кәнфитте иҙә баҫты.

-- Бәй-бәй-бәй! Ағайым ғына килеп етһен әле, кәрәгенде бирер! – тип көлдө Нәғимә, бармаҡ янап. – “Баҡса емеше түгел – аҡса емеше, белеп ҡап!” – тип биргән күстәнәсе ине...

-- Буржуй ҡыҙҙарына оҡшап, купис бүләктәре алаһың икән. Ә үҙең комсомолка...

-- Булһа ни... комсомолканың ауыҙы юҡмы әллә?

-- Ә шулай ҙа талымһыҙ булмаҫҡа кәрәк. Кемдән – алырға ярай, ә кемдән – юҡ...

Нәғимә ауыҙын ҡыйшайтты:

-- Бигерәк талымлы икәнһең! Бар, кеҫәңде тултырып кил – һинән ҡабул ҡылырмын! – Ҡырт-боролоп, һыйырҙары араһында юғалды. Күнәк бушатып килеп еткән Мифтахитдин алыҫтан уҡ Зәйнигә сәнстерҙе:

-- Һәй, бешмәгән баш! Ҡыҙ һөйөргә иртәрәк әле һиңә. Тәүҙә һөйләшергә өйрән!

-- Ә һин кәнфиткә атланып тауға үрләмәксеһең?

-- Йәйәүләп тә менермен!

-- Ҡайһы яғынан баҫҡыс һөйәмәксеһең?

-- Баҫҡыс һинеке түгел –минеке!

Эштәрен тамамлап тыңлап торған һауынсылар, шау-гөр килеп, шарҡылдап көлдөләр. Мифтахитдин өндәшмәне, яғаһы аҫтына башын тартып, ат-арбаһы яғына ыңғайланы.

Зәйни, көтмәгәндә килеп сыҡҡан ҡылыҡтарынан эсе бошоп, туҙанлы юлдан ҡайтыу яғына атланы. “Ниңә былай тик-томалдан эләгештем һуң әле, Нәғимәне лә ҡыйырһыттым?..” булды уның уйҙары. Әйтерһең, йөрәкте ҡаты ҡул менән ҡыҫып тоттолар. Бынан һуң ҡыҙ сәләм дә бирмәҫ, ҡалҡынып та ҡарамаҫ төҫлө... Яртылыҡ юлда Мохтар бабай ҡыуып етте.

-- Ултыр, балам. Ниңә бик мөшкөлләндең?

-- Кәйеф юҡ.

Ул ултырғас, ат тартыуын һүлпәнәйтте.

-- Бына күрҙеңме? – тине Мохтар бабай. – Кәйефең атҡа ла ауыр. Әллә таш тултырҙылармы?

Егет өндәшмәне.

-- Был замандың йәштәре үтә сәйер: ялҡынланыуҙары ла, туңыуҙары ла тиҙ ара.

-- Һеҙҙең заманда нисек була торғайны һуң, олатай?

-- Беҙ һеҙҙәрҙәй китап аша танымай инек донъяны. Барыһы ла бик ябай ине.

-- Хатта ҡыҙ һөйөү ҙәме?

-- Аныһы ла.

-- Нисек итеп һөйә инегеҙ?

-- Сыраҡ яғып кис ултырһалар, тәҙрәләрҙән күҙләргә йөрөй инек, ҡарындыҡты тишеп йыр әйтешә инек. Күстәнәскә ярты ҡаҙаҡ лампасый, йәки сәтләүек, араһына һалып ҡош телендәй хат килтерә инек. Шунан һуң атайға әйтеп, яусы ебәрә инек. Ә йыш ҡына быларҙың береһе лә булмай: кәләште атай үҙе күҙләп таба ла, һине тейәп алып барып, ҡауыштыра ла ҡуя торғайны...

-- Бүләк иткән сәтләүек һәм кәнфиттәрегеҙҙе ҡыҙҙар ҡабул итеп ала инеме һуң?

-- Һәй, улым, тәмле тел һәм татлы тәғәмдән ҡыҙ-ҡырҡын ҡасан баш тартҡан?!

Зәйни, аяҡтарын һәлендереп ултырған килеш башын эйеп, оҙон сыбыҡ осо менән юл туҙанын һыҙырҙы. Тәгәрмәстәр, бер-береһен ҡыуышып, тығыр-тығыр тәгәрләне.

-- Әлбиттә, бүләк менән бүләктең дә заманаһына күрә айырмаһы бар, -- тип һүҙен дауамланы олатай. -- Әгәр, мәҫәлән, минең уйлауымса, хәҙерге заман ҡыҙҙары һинең сәтләүегеңде алмай ҡуйыуы ла ихтимал, сөнки ҡыҙҙар мәсьәләһендә “дөйә лә -- бүләк, төймә лә -- бүләк” тигәнебеҙ һис тура килмәй.. Шуға күрә бүләктең дә ярарҙайын ғына һайларға кәрәк, улым. Әгәр ҙә ки, мәҫәлән, Мифтахитдин лафкысы кеүек, ҡыҙ артынан кәнфит тотоп әрһеҙләнеп йөрөһәң, көлкөгә лә ҡалыуың бик ихтимал. Татлы тәмдән башҡа ни бирһен ул әҙәм йәненә? Ә инде әгәр, мәҫәлән, егетмен тигән егет шул уҡ ҡараҡай-һауынсыға көн дә кәнфит услап килеү урынына ул ултырып һыйыр һауһын өсөн ябай ғына таҡтанан булһа ла дүрт тояҡлы бүкәнкәй эшләп килтерһә, беләһеңме, ул нимә булыр ине? Күңелендә йылы усаҡ дөрләтер ине һылыуҙың! Бына шулай ул, улым, донъяның мәсьәләһе.

-- Алай тиһең дә бит, олатай… – тине шөйлә уйға тарыған Зәйни. – Ләкин хәҙерге заман ҡыҙҙарының да ҡайһы берҙәре һаман кәнфит һурырға, сәтләүек ҡайыҙларға ярата шул…

-- Яратһын. Шуның өсөн дә бит, ҡыҙҙар, тип атала улар. Үҙең егет була бел, улым, үҙең егет булып ҡал!

Ат арҡаһын дилбегәһе менән һыйпаны ла Мохтар бабай, күҙҙәрен уйсан йомоп, күкрәгенән тормош кеүек оҙон эстәлекле көй һыҙҙырып ебәрҙе.

Зәйни элек эштән ҡайтҡас йыуына ла, ашап, мәктәптең спорт майҙанына волейбол уйнарға китә торғайны. Эштән алмашынған көллө ир-ат шунда йыйыла, бөтә донъяһын онотоп, тамам күҙ бәйләнгәнгә тиклем, уйын зауҡы менән мәшғүл. Гөп тә гөп туп һуҡҡан, ваҡыт-ваҡыт берҙәм ғоһолдашып көлөшкән тауыштар ауылды бер осонан бер осонаса иңләй. Зәйниҙең атаһы ауылдағы ир-аттың был мауығыуын насар ғәҙәт тип һанай, алтындай ҡиммәтле ваҡыттың, эш эшләмәй, туп ҡыуып үткәрелеүенә сикһеҙ йәне көйөп, ҡыр эшендә ике усы ҡара туҙанға буялып тирләп-бешеп ҡайтҡан улын үпкәле баш сайҡап ҡаршылай.

Һуңғы көндәрҙә Зәйни кинәт кенә туп уйынын онотоп, буш ваҡыттарын аласыҡтағы верстак янында соҡсоноп үткәрә башлағас, Мотиғулла ағай шатланып бөтә алманы. Ағас аяғын туҡылдатып, улы тирәһендә уралды, уға ниндәй бысҡыны, ниндәй йышҡыны, ниндәй ҡасауҙы ҡулланырға кәрәклеген өйрәтеп торҙо.

-- Бына был – һөнәр, исмаһам, ата-бабайыңдың икмәк ашатҡысы! – тип кинәнеп һөйләнде ул, Зәйни ҡулы аҫтынан сыжлап осҡан урайлы йомосҡаларҙы тотҡолап. Яңы таҡта тәненән мул ҡалҡҡан әсе ҡарағай сайыры еҫен тәрән һулап, үҙенең яратҡан урынына – ағас киҫкәһенә ултырҙы, ҡараһыуланған ҡыҙыл сатин янсығын һул усы аҫтында һәлендерә ҡыҫып тотоп, иренмәй генә тәмәке ураны. Винтовка патроны гильзаһынан эшләнгән утсаҡҡысын (зажигалкаһын) ләүкетеп тоҡандырҙы. Ялҡын телле гильзаһын күтәреп тотҡан килеш, уйланып, тәмәкеһен өҙөк-өҙөк һыуырҙы. Тәрән һулыш алды ла күкрәк төбөнән урғылған ҡуйы төтөн ағымы менән өрөп һүндерҙе.

-- Нимә әтмәләйһең, улым?

Унынһы ыҡ-мыҡ итте:

-- Эй… бер нәмә инде шунда.

Мотиғулла ағай бүтән ныҡыманы. Янсығы менән утсаҡҡысын бөхтә төрөп, кеҫәһенә батырҙы.

-- Эскәмйәме, тиһәм, үҙе бик бәләкәс, боттары ла ҡыҫҡа ғына… Балалар ултырғысымы әллә? – тине. Зәйниҙең ҡолаҡ остары семерләне:

-- Шулайыраҡ бер нәмә инде шунда…

-- Алайғас, боттарын бераҙыраҡ йоҡарт. Бала-сағаға күп кәрәкмәй – ана теге нәҙек брустар ҙа ярап ятыр ине. Ағасты баштан уҡ бәрәкәтле тотона белергә кәрәк, улым. Һин яһаған боттар – былар бит ҡәҙимге ултырғыс өсөн яраҡлы.

Егет ҡулындағы йышҡы ашығып йүгерә башланы, йышҡысының маңлайынан таҡтаға тир тамып төштө.

-- Ярар инде, атай, нығыраҡ булыр! – тип ҡәнәғәтһеҙләнеберәк һөйләнде ул. Ҡартлас, уның кәйефен тойоп, башҡаса маҙаһыҙламаны, ҡоролманы үҙ ҡулы менән шыплашты. Киҫәктәр беркетелгәс, ҡәҙимгесә, матур ғына бер әйбер килеп сыҡты.

-- Бына бит ул – оҫта ҡул ағасты нишләтә! – тип маҡтап ҡуйҙы атай кеше. Ең осо менән ышҡып, таҡтаның шымалығын һынап ҡарағас, өҫтәне: -- Ҡулың эш һөйә, улым, ҡалас ашатырлыҡ. Тик ҡәҙерен генә бел!

Елеме ҡатһын өсөн ултырғысты ҡыҫтырмала ҡалдырып, икеһе лә бик ҡәнәғәт килеш йоҡларға ятты.

Иртүк тороп ҡыр эшенә йүгергән Зәйни көнө буйына сәскесе өҫтөндә хыялланып, ултырғысҡа һырлап төшөрәсәк гөлсәскәле биҙәктәр уйлап йөрөнө. Нәғимәнең шул семәрле ултырғысҡа ултырып һыйыр һауыуын күҙе алдына килтергән һайын, татлы тойғолар тулҡынландырҙы йөрәген. Төрлө үлән һәм ағастарҙы, уларҙың япраҡтарын, сәскәләрен бер-бер артлы күҙҙән кисергәндән һуң, үҙ уйынса һөйгәненә тиң булырҙай ике һүрәткә туҡталды.

Был эште ул атаһынан йәшереп, аҙбар башында аулаҡта ултырып башҡарҙы. Бәхетенә күрә, сәсеүҙә уларҙың киҙеүе (сменаһы) алмашынып, төнгөлөккә йөрөй ине. Иртәнсәк эштән арып ҡайтҡас, яҡты көндөң тәүге яртыһын ятып йоҡлаһа, икенсеһен баяғы матур һөнәренә бағышланы. Үткер ҡасау, бәке осо ярҙамында хыялдағы биҙәк һырҙары ағас йөҙөнә күсте. Аҙаҡ йәшел, һары, көрән төҫлө буяуҙар эшкә егелде. Мауығыуы тотоп ҡарарлыҡ булғас, аҙбар башынан төшөрөп, ултырғысты атаһы алдына ҡуйҙы.

-- Бәй-бәй-бәй-бәй, нимә күрәм?! Алтын бит һинең ҡулың, алтын! Ҡайҙан өйрәндең, улым, бындай аҫыл һөнәргә? – тип ҡысҡырып ебәрҙе Мотиғулла.

-- Армияла, атай. Мин унда һүрәт төшөрөүселәр түңәрәгенә йөрөгәйнем.

-- Ә-тә-тә-тә, бынағайыш тамаша! Былайғас, атайыңдан уҙҙырҙың һин, шылма малай, уҙҙырҙың!

Ултырғыстың дүрт ботонда һүрәтләнмеш нәҙек кенә һоро сыбыҡтан тере йәшел төҫлө ҡайын япраҡтары ярылып асылған, ә түңәрәк ултырыу таҡтаһы Ҡояш кеүек көләс ҙур көнбағыш сәскәһенә әүерелгән...

Зәйни инде уңайһыҙ хәл кисерҙе: матур бүләгеп эйәһенә ни рәүешле тапшырырға ҡыймайынса йөрөнө. Бер ыңғайҙан теге ваҡыт Мифтахитдин менән ыҙғыш арҡаһында боҙола биргән аралары ла уңалыр, әүәлгеләй еңеллек менән һөйләшеп китеп булыр, тип өмөтләнде ул.

Семәрле ултырғыс тоҡ эсендә бер-нисә көн хужаһы менән бергә эшкә барып ҡайтты, әммә һыйыр һыулауына бер ҙә юл төшмәй ине. Механизатор иптәштәре Зәйниҙе тәүҙә: “Был хан тәхетен ҡайҙан алдың? Ниңә аны үҙең менән йөрөтәһең? – тип йөҙәттеләр. “Күрмәнегеҙме ни, беҙҙә электән бар бит ул!” – тип яуапланы уңайһыҙланған егет. Ә икенсе һорауға: “Машинала эскәмйә етешмәй бит, үҙемә ултырыр урын итеп йөрөтәм”, -- тип аңлатты. Хәйер, быныһы менән бер ни тиклем хаҡлы ла ине.

Һауынсылар төйәге урынлашҡан Садиҡ һаҙына, ниһайәт, туҡталһалар ҙа, иптәштәренән тартынып, бүләген тапшырманы – сөкөрәйеп көлгән күҙҙәрҙән биҙәрләне. “Был һармаҡтарға ниңә күрһәттем икән?” – тип үкенде. Ахыры, уңайы табылмағас,

эштән бер ҡайтып барыуҙарында, күҙ йомоп, ултырғысын күрһәтеп тотҡан килеш, иртәнге һауын мәлендә машина әрйәһенән бер үҙе һыулауға төшөп ҡалды.

-- Ҡайтмайһыңмы ни? – Аптыраштылар үрҙән. – Көтөргәме һине?

-- Юҡ, ҡуҙғалығыҙ.

-- Ағас аты ҡулында бит – шуға атланып ҡайталыр, -- тип көлөштөләр. Машина алыҫлашҡас, семәрле “ат”ын артына йәшереберәк, сағыулыҡтан күҙҙәрен ала алмай, ҡәҙимгесә тутыҡ күнәге өҫтөндә һауып ултырған Нәғимә эргәһенә килде – ҡараҡайҙың башында аллы-гөллө өр-яңы яулыҡ ине. Ҡыҙ ҙа уны алыҫтан уҡ абайланы, яулығының ситенән генә ҡайырылып, йөҙөнә теклəп ҡараны.

-- Беләһеңме, Нәғимә, минең артымда нимә? – тип һалдырҙы был, үҙен ҡыйыуландырырға тырышып.

-- Нимә булһын, күләгәңдер, -- тине ҡараҡайы, иҫе китмәҫтән. Эргәһендәге Миңниса ла ялғанды:

-- Юҡ, яҡын әшнәһе Мифтахитдин ҡушарлап киләлер артында.

-- Белмәнегеҙ! – тигән булды үҙенең дә һис иҫе китеп бармауын белдергән Зәйни.

-- Нәғимә, әүкәйем, ғишыҡ хаты тотоп киләлер ул, моғайн. Дуҫы Мифтахитдиндән дә уҙҙырып ижад иткәндер!

-- Ярай, һеҙҙеңсә булһын, -- тине Зәйни. – Эйе, ижад иттем – бына ул! –Йәшергәнен ҡапыл ғына алға һоноп, Нәғимәне тартып торғоҙҙо, тутыҡ күнәк эргәһендәге ултыраҡай бүкәнде доңғорлатып типкәс, урынына семәрле бүләген ҡуйҙы. – Ултыр, һау! – тине. Ләкин һауынсы, ултырырға уйламай, Ҡояш кеүек сағыу көнбағыш сәскәле семәрле ултырғыстан күҙен алмай ҡатып тора ине. Уның урынына Миңниса сыуланы:

-- Ай-буй, ысынлап та әллә Ҡояшмы, әллә көнбағыш сәскәһеме, тип торам! Хатта күҙҙәрем алаң-йолаң итеп китте. Әүкәйгенәм, ҡотло булһын бүләгең, ҡанә, үҙем ултырып ҡарайым әле!

-- Юҡ инде, апайым, -- тине кинәт иҫен йыйған Нәғимә, тәүҙә -- үҙем, юғиһә ҡото китә! Бисмилла! -- Йәһәт кенә “Ҡояш” өҫтөнә йәпләнеп, һыйыр имсәктәрен гөбөр-гөбөр тартҡыланы, ә йөҙө көндәй балҡыны.

-- Абау, был егеттәргә ни булған?! Бер-бер артлы Нәғимәгә бүләк ташый ҙа ташыйларсы! – тип аптыраны Миңниса. – Кисә генә Мифтахитдине, ә бөгөн былыһы...

-- Ә?! Нимә килтерҙе?! – тип тертләне егетебеҙ.

-- Аһ-аһ, күрмәйһеңме ни башындағы кешмир яулығын?

-- Мифтахитдинме?

-- Шул булмай ни! Өсөнсө көн лафкыһында шул яулыҡты әләктерергә иткәйнем – бирмәне. “Аның эйәһе бар!” – тине...

Зәйниҙең күҙе тондо, аҡ-ҡара күренмәне. Бер ни белештермәй, юлһыҙ-ниһеҙ шырлыҡ ярып ҡыуаҡлыҡтар араһынан ауылға ҡарай дондо.

-- Зәйни ағай... Зәйни, туҡта! – Ялынысլы тауышы эйәрҙе Нәғимәнең. Уға Миңнисаныҡы ла ялғанды:

-- Миңә лә айбарлы ултырғыс яһап килтер – аҡсаһын түләп алырмын!

-- Беҙгә лә, беҙгә лә! -- тип ҡалды башҡалары ла...

Егет инде ҡараҡайҙы бөтөнләй онотторға тип ҡарар ҡылды. Ниңә ундай ике яҡҡа ҡойроҡ болғаған төлкөгә ымһынырға? Донъяла ҡыҙҙар бөткәнме ни? Бынамын, тигәндәре бар – Нәғимәнән мең-мең тапҡыр матурыраҡтары. Комсомолец башың менән шуның ҡармағына ҡабып, үҙеңдән өлкән кеше менән бысаҡҡа-бысаҡ килешеп йөрө әле! Уныһы ғына ла етмәгән, лафкысынан уҙҙырмаҡ булып, шул ҡыҙыйҙың буржуазлыҡ ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерергә бүләк һайлап маташтың. Оят, оят!

Инде Нәғимә йөрөгән яҡҡа күҙ һалмаҫҡа, тауышын ишетмәҫкә, исемен иҫкә төшөрмәҫкә тырышты. Атаһының алмаш верстагын тамам үҙләштереп, бөтә буш ваҡытын юнышып үткәрҙе. Аҙна араһында ҡарттың ырам эшләргә тәғәйенләгән барлыҡ таҡта-тоҡталарын береһен-бер ҡалдырмай эшкәртеп бирҙе. Улының был сәйерлегенән аптырап, баш ҡына сайҡап ултырҙы ҡарт. Әммә Зәйни был эшенән дә ҡәнәғәтлек кисермәй: уға нимәлер етмәй, күңелен нимәлер, ҡайҙалыр елкендертеп һөйрәкләй.

Уттай ҡайнар яҙғы сәсеү тамамланған, бесәнгә төшкәнсе яйлап ял итә халыҡ. Был миҙгелдә һәр кем үҙ йорт тирәһен ҡарай: ауғанситәндәрҙе торғоҙа, тирмәнгә йә баҙарға бара, өй һыларға балсыҡ килтерә (ҡаты буранлы дала яғында бураны эсле-тышлы һылайҙар). Кистәрен дыу килешеп бер-береһенә ҡунаҡҡа йөрөй.

Колхоз да был буш арала тырышып мал торлаҡтарын, иген келәттәрен йүнәттерә, тиреҫ өйҙөрә, балсыҡ һылата. Һабан туйына тиклем ҡойма-ҡураларын ялт иттереп ағартырып ҡуя. Был осорҙа һауынсылар һыулауҙан ҡайталар ҙа көндөң-көнө буйына ферма тирәһендә эшләйҙәр, ҡышҡылыҡҡа әҙерләйҙәр. Ошо мәшәҡәттәр осланып, бераҙ йән тынғас ҡына, шаулатып-гөрләтеп һабан туйы үткәрергә ҡарар ҡабул итә колхоз идараһы. Был эш бесәнгә төшөр алдынан – июнь аҙаҡтарында була.

Зәйниҙәр ҙә арып-талып тимерлек алдына ҡайтҡан сәскестәренең дискыларын ҡатҡан тупраҡтан таҙартып, йүнәтеп-майлап, таҡтаға баҫтыртып ҡуйғас, ҡыштан артып ҡалған һәм түбәләре йәмерәйгән һалам эҫкерттәрен төҙәтеп өйөргә сыҡтылар ҡырға (алты йылдан арыш һаламы ла алтынға әйләнә, тиҙәр бит). Яҙғы сәсеү эше бөткәс ни, ошоғаса быуындарҙы баҙыҡ тотҡан яуаплылыҡ тойғоһо ла кәмегән – егеттәр бик иренеп, һүлпән генә ҡуҙғала, әйләнгән һайын ултырып тәмәке тарталар, кәрт һуғалар, ҡыҙҙар тураһында ләстит һаталар. Бик йыш ҡына был ыңғайҙан Нәғимә һәм Ғәйнулла менән Мифтахитдин исеме ҡабатлана.

-- Кеме отор икән, әй? Ул ҡараҡай икеһенә лә ҡойроҡ болғай, өҫтәүенә, башын бороп өсөнсөһөнә лә күҙ ҡыҫа... -- Һәм Зәйнигә берҙәм ҡараш атыла.

-- Мифтахитдин аҫыл ҡошто тәпәйенән быйыл уҡ эләктерәм, ти бит.

-- Барырмы икән шул ҡарпышҡа?

-- Бәй, ниңә бармаһын, ти? Лафкысы бит!

-- Уның лафкысылығын да ташҡа үлсәйем инде...

-- Һәр хәлдә, һинең менән мин түгел – иртәнән ҡара кискә тиклем һәнәк-көрәк тотоп, телен арҡылы тешләп йөрөмәй ҡырҙа. Галстук таҡҡан килеш кенә шешә-мешәләрен шылтыратып, эш сәғәтен тултырып ҡайта ла “беломор”ҙы урта биленән ҡырын тешләп кенә ята.

-- Аныһын да әйтер инем инде...

-- Эш хаҡын да числоһын үткәрмәй көрәп ала. Һинең менән минең кеүек, колхоз кассаһына килем кергәнен көтөп, папирос урынына махра тартып йөрөмәй. Шулай бит, Зәйни дуҫ, ниңә өндәшмәйһең?

-- Уның галстугы ни ҙә “беломор”ы ни – үҙе сәбәкә булғас, -- тине Зәйни. – Майлап ташлаһаң да эт яламаҫ...

-- Дөрөҫ. Барыһынан да элек, түрә йораты МТФ Ғәйнулла эләктерер ул аҫыл ҡошто. Минеңсә, хатта атаһының да башын әйләндергән инде.

-- Хаҡ һүҙ был. Келәтсе менән бергәләшеп шешәне бушатканда: “Кейәү булырҙай кеше – башҡа бер кем дә түгел, ә түрәбеҙ Ғәйнулла!” – тигәнен үҙ ауыҙынан үҙ ҡолағым менән ишеттем!

Шым ҡалдылар, һүҙ ҡуйышҡандай, Зәйни яғына берҙәм күҙ һирпенеләр. Береһе әйтә һалды:

-- Ә Зәйни? Беҙҙең Зәйни дуҫ нимә уйлай икән һуң? Юл ҡуйырмы таҙғараларға?

-- Үҙе әйтһен!

-- Был йәһәттән был уланға күшеккән тауыҡтай шомторайыу йоҡ түгел – бөркөт булырға тейеш ул! – тине кәбәнселәргә айран килтергән, аты менән булашып, бер ситтәрәк ҡолаҡ һалып торған Мохтар бабай. Зәйни үҙен ысынлап та күшеккән тауыҡ һымаҡ итеп күҙе алдына баҫтырҙы ла, тештәрен шыҡырлатып, ырғып торҙо, ос һәнәгенә йәбеште; йән көсөнә ҡаҙап күтәргән һалам өйөмдәре бөркөт һымаҡ сорғолоп күккә осто...

Зәйни инде оялыуҙы, тартыныуҙы ситкә ташларға, бер туҡтауһыҙ һөжүм итеп алға барыу юлы менән Нәғимә күңелен үҙ яғына ауҙарырға тәүәккәлләнде. Эштән ҡайтҡандарында теште ныҡ ҡыҫып, бының өсөн нимәләр эшләргә кәрәклеген уйланы. Урам башына кергәс, улар ферма эргәһенән үттеләр. Унда эш ҡайнай ине: ырҙын табағылай түңәрәкләтеп сей балсыҡ йәйелгән, МТФ Ғәйнулла етәкселегендәге һауынсылар шуға һәнәкләп һалам һала ла күнәкләп һыу һибә, ә түңәрәк өҫтөндә һыбайлы Мифтахитдин, балаҡтары тубыҡтарынаса төрөлгән яланаяҡтары менән ат бөйөрөн типкесләп, баҫым тапатып йөрөй. Егеттәрҙең килеүен абайлағас ул, күрмәмешкә һалышып, “һөш-һөш-һөш!” тип атын уғата ныҡ ҡабаландырҙы.

-- Һәй эшем эйәләре, ниңә шулай бик һуңлап ҡайтып бараһығыҙ, Ҡояш күптән байыған бит! – тигән шаян ауаз салынды ҡолаҡҡа. Быны бейек баҫҡыс башында ферма бинаһының һыулыҡ буйын һылап торған Нәғимә ҡысҡыра ине. Егеттәр, туҡталып, ҡыҙҙың яланғас аяҡтарына аңшайғас, арҡалыҡ буйы бейеклектә көлөп торған сағыу Ҡояшҡа төртөп күрһәтте, әммә тегеләрҙең иҫе китмәне:

-- Колхоз эше бүре түгел – урманға ҡасмаҫ. Ташлағыҙ, ҡыҙҙар, иртәгә һабан туйы бит -- әҙерләнергә кәрәк!

-- Нисек инде алай “ташлағыҙ”?! Баҫылған балсыҡтымы? – Төтәп килеп сыҡты ферма мөдире. – Ҡайтаһығыҙ икән – барығыҙ, олағығыҙ, аҡсағыҙ баҡыр, юлығыҙ таҡыр. Бында килеп, эшләгән халыҡты дезорганизовайт итеп йөрөмәгеҙ!

-- Балсыҡты ни аны, өйөп һалам ҡаплайһың да ҡуяһың... – тигәйне лә Мохтар бабай, ауыҙынан өҙөп алды тегеһе:

-- Как это так – ҡаплайһың да ҡуяһың? Байрам үткәнсе көтөп ятырмы һине? Һаҡалың биленә еткән, шул көйөңсә уңды-һулды белмәйһең!

-- Ниңә юҡҡа сапсынаһың, осаңды ҡорт саҡҡандай? Беҙгә тимәгәйе, төндөң-төнө буйына ыйыҡлап ек өнһөҙ мәхлүҡтәреңде. Әйҙәгеҙ, егеттәр, ысҡындыҡ! – тине береһе.

-- Туҡтағыҙ, ҡайҙа ҡасаһығыҙ? Һылаусыларға балсыҡ ташышып биреп китегеҙ, исмаһам. Бына Мифтахитдин ағайҙан ғына үрнәк алығыҙ, күҙе тонған игелекһеҙҙәр! Һуғымлыҡҡа хәләл аҡсаһын биреп һатып алған супственный алашаһына менеп, колхоз эшенә өлөш керетеп йөрөй! – тип сәрелдәне күлдәк итәктәрен ыштан бөрмәһенә ҡыҫтырып, тубыҡтарынаса лайға батҡан Миңниса.

-- Көт аларҙан игелек! Юҡты бушҡа бушатып, ҡайырып икмәк ашарға ғына беләләр! – Эләктереп һелкене МТФ Ғәйнулла. Ә Нәғимә, балсыҡлы баҫҡысынан Зәйнигә ҡайырылып ҡараған килеш, өнһөҙ-тынһыҙ тик ҡатып тора ине.

-- Әйҙәгеҙсәле, егеттәр, аҙыраҡ ҡул ялғайыҡ! – тине Зәйни.

-- Һәнәк услап ҡысыуың ҡанмаһа, бар – ялға, ҡәҙереңде белерме икән? Был түрәнән ҡыш көнө яғыр утыныңа ла ат һорап ала алмаҫһың!

Иптәштәрҙән яңғыҙы айырылып ҡалыу бик үк уңайлы түгел ине. Шулай ҙа Зәйни, бая үҙенә биргән һүҙен хәтерләп, һәнәген ситәнгә һөйәне, еңдәрен һыҙғанды. Нәғимә шат йылмайҙы; һиҙмәһендәр, тигәндәй, тиҙерәк арҡаһын биреп, һыулы балсығын бураға шапылдатып һуға-һуға, шәп-шәп һыларға тотондо.

-- Зәйни туғаным, һин миңә балсыҡ әпиреп тор! – тигәйне Миңниса, ҡараҡайы юғарынан ялт итеп әйләнеп ҡараны:

-- Һиңә Мифтахитдин үҙе булашыр, әүкәйем – ана, атынан төштө бит. Ә был һалдат миңә тырышып хеҙмәт итһен, буйы оҙон – бында бейеккә алып-биреп торорға бик йәтеш бит.

-- Аһ-аһ, Мифтахитдиндең һиңә генә буйы етмәç, тиһеңме әллә?

Сикәһе ҡыçылып тыңлап торған Мифтахитдин балсыҡ алырға йүгерҙе. Ләкин Зәйни алданыраҡ ҡуҙғалып, Нәғимә күнәгенә килтереп һалғайны инде – маңлайға-маңлай төкәштеләр. Һемәйгән Мифтахитдин, ҡырт-боролоп, усындағы балсыҡ йомарлағын Миңнисаға илтергә мәжбүр булды. Нәғимә менән Зәйни, отточ бит быны, тигәндәй, икеһе бер юлы күҙ ҡарашып алдылар. Ошо ҡыçҡа мәлдең уты бөтә тәнен көйҙөрөп үткән Зәйни, йыш-йыш һулап, яңы балсыҡ йомарлағы килтерергә атлыҡты.

Ҡояш тышау буйы түбәнләгәйне, ә Нәғимә баçҡысында һануз мәш килә ине. Икеһенең дә күңел күтәренке, был күтәренкелек уларҙың хәрәкәтендә, тын алышында һиҙелә. Нәғимә Зәйни менән дә, иптәш ҡыҙҙары менән дә әленән-әле ҡыҙыҡ һүҙ әйтешеп ҡысҡырып көлә, ярышып балсыҡ ташыған ике һантыйҙы үртәй, күкрәк төбөнән генә көйләп тә ебәрә. Зәйнигә уның балсыҡ һылаған йүгерек ҡулдарын, бөгөлөп-һығылмалы билен, балсыҡ сәсрәп матур миңдәй биҙәлгән ҡуңыр йөҙөн күреү шундайын да рәхәт, шундай яғымлы ине. Күңел төпкөлөндә ошо гүзәл затҡа ҡарата йылы туғанлыҡ хистәре уяна, уны ғүмерлеккә-ғүмерлеккә үҙ эргәңдә генә күрәһе килә. Мифтахитдин дә уяу: әйләнгән һайын юл яҙлыҡтырып Нәғимә эргәһендә урала, әле баçҡысын шыуҙырып, әле күнәген алып биреп уңғанлығын күрһәтергә тырыша. Тик Зәйни ҙә сос икән: алдан уҡ тегенең ынтылышын тойомлап, алданыраҡ өлгөрә, уны яурын башы менән тыныс ҡына этәрергә лә тартынмай. Мифтахитдин ҡаштарын емерә, тешен ҡыçа, ләкин сер бирмәй. Көндәшенең бер осҡондан ҡоро һаламдай дөрләп-ҡабынырға әҙерлеген күрә лә, әлбиттә, ауылдағы көн дә галстук тағып йөрөгән берҙән-бер “культурнай” зат булараҡ, ил алдында ыҙғышырға баҙымай. Баçҡыс төбөнә баça ла, күҙ ҡарашын бер – Нәғимәгә, бер – Зәйнигә күсереп, тилегән күргән ата ҡаҙҙай тыныcһыҙланып, торған ерендә тапанырға тотона, папирос артынан папирос ҡабыҙа. Күренеүенсә, Нәғимәнең ҡолағына ғына бер мөһим һүҙ әйтергә самалай, ләкин йәшел һалдат кейемле шаһит быға мөмкинлек бирмәй. Тапанып тора-тора ла, папиросын атып-бәреп, китергә мәжбүр була.

-- Һәй маладис Мифтахитдин ағайыбыҙ: үҙенең ял көнөн беҙгә ҡорбан итте! – тип йүпәләйҙәр ҡыҙҙар.

-- Әммә тыңлаусан да инде: ат эсерә төшкән еренән генә барҙыҡ та алдыҡ бит! – тиҙәр.

-- Аны бында магниттай кем тартты икән: бөтәбеҙ ҙәме, әллә аранан берәүебеҙ генәме?

-- Бөтәгеҙ ҙә, ҡыҙҙар, бөтәгеҙ ҙә! – тигән була баҙаған Мифтахитдин, үҙе йәһәт Нәғимәгә күҙ һала.

-- Ай-һай, бөтәбеҙ ҙә түгелдер...

Бер Нәғимә генә өндәшмәй бында...

Баçҡан балсыҡты һылап бөтөрә яҙҙылар, ҡалғанын иртәгәгә суҡайтып өйҙөләр ҙә, һалам менән көпләп, өçтөнә һыу һиптеләр – бер-нисә тәүлек буйына ҡатмаяçаҡ.

-- Етте, ҡайтайыҡ, ҡыҙҙар! – тине Миңниса. – Түрәбеҙ ҙә боçланып осто, инде беҙгә сират!

Тимер киçмәктәге һыуҙан шаптор-шоптор йыуынырға, күнәктәрен сайҡарға керештеләр. Нәғимә лә, һыламын бөтөрөп, күнәкте ергә төшөрҙө. Үрҙә оҙаҡ баçып

тороуҙан талған аяҡтарына ял алдырырға ниәтләнеп, баҫҡысҡа ултырҙы. Тубыҡтарын төҙәйтеп кирелгәйне, матур йөҙөн һыҙланыулы йыйырсыҡтар үҙгәртте:

-- Уй-уй, Зәйникәйем, харап булдым, аяғымды көҙән йыйыра! – Күҙҙәрен ғазаплы йомоп, ике ҡуллап аратаға йәбеште, төшөргә итеп маташты. Зәйни, уҡталып, аны ҡулынан тотто:

-- Йығылып ҡуйма, Нәғимә, ипләп!

-- Уй-уй, йығылам инде, Зәйникәйем,йығылам!

Егет ҡыҙҙы беләктәренә һалып күтәреп алды, ә тегеһе уның муйынынан һығып ҡосаҡланы. Көтөлмәгән хәлдән Зәйни ҡаушаны, ни итергә лә белмәне. Йөрәге дөп-дөп ҡағып, ҡәҙерле йөгө менән ҡуша һалам өйөмөнә йығылды.

-- Ни эшләйһең, тиле! – тине Нәғимә. Өндәшмәй, ҡыҙҙың балсыҡ ҡатҡан аяҡ бармаҡтарын, тығыҙ балтырҙарын ыуаланы

-- Уй-уй!

-- Түҙ, хәҙер бөтә, хәҙер бөтә.

Нәғимә еүеш-һалҡын ҡулы менән уны битенән һыйпаны:

-- Тиле, тубығыма тиклем балсыҡ һыланың... – Һис ни булмағандай ырғып торҙо ла эргәһендә калуштары көтөп ятҡан, әхирәттәре сыр-сыу ҡубынып йыуынған һыулы киҫмәк эргәһенә йүгерҙе.

Зәйни, Нәғимә әйткән ябай һүҙҙәрҙең серле моңонан иҫереп, урынынан ҡуҙғалмайынса ултырҙы. Ҡулдары һаман тығыҙ балтырҙарҙы тоя, ә битендә һөйөп һыйпау йылыһы яғылып тора. Эргәһенән Мифтахитдин, дөпөлдәтеп, ат саптыртып уҙғас ҡына аңына килде, тороп, ҡыҙҙар яғына атланы. Анда инде ҡайтырға ҡуҙғалалар.

-- Иллә шәп эшләнек бөгөн!

-- Балсыҡ әпкилеп биреүсе ике ағай күтәрҙе бит.

-- Әүкәйгенәм, әйт әле, бая Мифтахитдин ағай ҡолағыңа нимә тип шыбырланы? – Быны Нәғимәнән Миңниса һораны. Зәйни, һағайып, аҙымдарын аҡрынайтты. Нәғимәһе бераҙ өндәшмәй торҙо. Төрлөһө төрлө яҡтан сыулашып ҡыҫтаҡлағас, тишергә мәжбүр булды:

-- Мәскәү ГУМ-ынан лафкыға посылка килгән. Эсе тулы ебәк тә атлас, тағы әллә нимәләр, ти. Мифтахитдин шуны илгә күрһәтмәй, иң шәп һауынсыларға, тип тотоп тора икән.

-- Әйгенәм, кемдәргә тәтер икән?

-- Иң шәп, тигәне билдәле – Нәғимә була инде ул!

-- Юҡты һөйләмәгеҙ, ҡыҙҙар! Шәп булмаған әҙәм юҡ арабыҙҙа! – тине Нәғимә.

-- Әммә-ләкин беҙҙе түгел – һине маяҡ итеп күтәрәләр бит!

-- Һи һантый, ниңә сәбәләнәһең? – тине уға Миңниса. – Бер кемдән дә кәм түгелһең, йөҙ тиһәң – йөҙ, күҙ тиһәң – күҙ бар үҙеңдә. МТФ Ғәйнуллаға тик бер генә йылмайып күҙ ҡыҫһаң, маяҡ булғаныңды һиҙмәй ҙә ҡалырһың.

-- Нәғимә түгел шул мин.

-- Нимә Нәғимә, нимә Нәғимә?! – тип ябырылды быныһы. – Минең кеүек гөбөрләтеп һәр һыйырҙан фәләнсә литр һауып бирегеҙ әле!

-- Бирәһең шул, төркөмөңә ун ете һыйыр беркетеп, һауылған һөтөн ун ике баш һыйырҙан тип яҙып күҙ буяғас...

-- Был колхоздың таяғы ла, маяғы ла ялған шул...

-- Һабан туйына бынамын тигән итеп кейенеп сығырһың әле! Лафкысы үҙеңдеке бит!

-- Оятһыҙҙар! – тине Нәғимә. – Маяҡсыһын да, лафкысыһын да үҙегеҙгә алығыҙ! Нисә һыйырҙан һауһам да, һауыным ялған түгел! Һеҙҙең кеүек шишмә һыуы ҡушмайым!

Зәйни өсөн көтөлмәгән мәғлүмәттәр ине был – һыйыр башынан һөт һауынын арттырыу ҙа, юғарынан бик тырышып йәйелдерелгән “маяҡ” хәрәкәте лә ҡомдан ишелгән арҡан икәнен аңланы.

Хәтәр сәкәшә башлаусыларҙы Миңниса араланы:

-- Ай-буй, ни булды һеҙгә, ҡыҙҙар?! Кемебеҙҙе генә маяҡ ҡылһалар ҙа, яҡтыһы уртаҡ бит аның – бөтәбеҙҙе, бөтә ферманы яҡтырта. Бөгөн маяҡ һин, иртәгә мин! Ә Мифтахитдиндең яғаһынан алырға хәлебеҙҙән килә. Электр яҡтыһы менән лафкы асам, тине. Аймылыш булып ҡалмайыҡ, әхирәттәр!

Ауылға электр яҡтыһы колхоздың дизель моторлы электр станцияһынан иртәнге сәғәт биштән – етегәсә, ә кисен алтынан ун икегәсә бирелә, шуға күрә әйтелгән ваҡыт һәр кемгә билдәле ине.

Ҡыҙҙар төркөмө таралғас, Миңниса менән ыңғайлаған Нәғимәне туҡтатты Зәйни:

-- Һылыуҡай, һиндә йомош бар ине!

-- Йә, йомошла.

-- Аҙыраҡ ҡалып тор әле.

-- Булмай, яңғыҙын ҡалдырмайым! – тине Миңниса.

-- Саҡ ҡына...

Нәғимә икеләнде:

-- Бараһы ер бар ине бит әле... ашығыс... Ярай, бер минутҡа ғына.

-- Ни һүҙең был, Нәғимә? Һуңлайбыҙ бит! – Миңниса, ашыҡтырып, әүкәйен ҡулынан һөйрәне. – Хуш булып тор, Зәйни ағай, йомошоңдо иртәгә йомошларһың!

-- Эйе, иртәгә... – Нәғимә, егеткә ғәфү үтенеүсән ҡарап, иптәшенә эйәрҙе...

Шашып һикергән йөрәге сәмле үкенестән әрнеп, Зәйни киске йылға буйына төштө. Тубыҡҡаса кисеп барып, ҡатҡан батҡаҡтарын йыуып ағыҙғас, ярға сығып, ҡабаланмай ғына сисенде лә һыуға ырғыны. Тын ярҙарҙың буйында һыу шапылдатып оҙаҡ сумды һәм йөҙҙө. Ҡыҙышҡан тәнгә һалҡын сафлыҡ йүгереп, тынысланғандай булды. Әммә күктә ҡырын ятып йөҙгән кәкере Ай Мифтахитдинде хәтерләтә -- уға төртөп күрһәтеп көлә төҫлө...

Һабан туйы иртән Ҡояш менән ҡуша тороп килде. Таңғы урамдарҙы тәүҙә бригадир юрғаһының тояҡтары дөп-дөп һиңкәндертеп үтте. Ул да булмай, ҡаҙан, көрәк, һауыт-һаба тейәгән арбалар ауыл осондағы әрәмәлеккә ҡарай шығырлап уҙҙы. Унда МТФ Ғәйнулла бер төркөм ағай-эне менән бысаҡ ҡайрай, ит сабырға балта, түңгәк яйлаштыра. Ергә соҡоп ултыртылған унлап ҡаҙан тәңгәленән бер юлы төтөн бағаналары күтәрелде. Ең һыҙғанып керешкән бешкәксе инәйҙәр һәм еңгәйҙәр йүгереп йөрөп аш-һыу яраштырҙылар. Күпереп үҫкән йәшел үләнгә ҙур торпошалар түшәп, киндер ашъяулыҡтар йәйеп, балауыҙҙай һары, яҫы ҡунатаҡталарҙа ап-аҡ ондан баҫылған ҡамырҙы уҡлау менән тызҡылдатып, ҡағыҙҙай йоҡа итеп йәйҙеләр; күңелдә ниндәйҙер рәхәт тойғолар уятып, етеҙ хәрәкәттәр менән, мырт-мырт иттереп, туҡмас киҫтеләр. Ҡайһылыр ҡаҙандарға һалырға ҡайын япрағылай еңел һалма ҡырҡылды. Яҙ башынан уҡ махсус ашатып һимертелгән тыу һыйырҙы ике-өс ир-ат етәкләп килтереп, ҡаҙандарҙан ун аҙым түбәндәрәк йылға буйында арҡанлап бөкләнеләр. Күп тә үтмәй, йәш килендәр ағын йылға һыуында, сыр-сыу ҡубып, эс-ҡарын йыуырға ла кереште. Бригадир һәм МТФ мөдире итте келәтсе Ғәйзулла (Нәғимәнең атаһы) арҡылы үлсәтеп алып, һәр береһе үҙ ҡаҙандарына бүлеп бирҙеләр.

Шул арала әрәмәлек ҡосағына байрамса фырт кейенгән йәш-елкенсәк ағыла башланы. Гармун моңдары күңелдәрҙе ҡытыҡлап һауала тирбәлде, ҡыуаныслы ҡысҡырып көләү, шаян таҡмаҡ әйтеүҙәр елкендерҙе йәштәрҙе. Һуҙып-һуҙып оҙон көйгә һыҙҙырыуҙар ҙа йышайҙы. Тантаналы йыйылыш булаһы урында ҡыҙыл япмалы өҫтәл өҫтөндәге патефон донъя шаңғыртып моңланды. Теремек йәндәр төркөм-төркөм ошо тәңгәлгә тартылдылар, ҡыҙыл япмалы алдындағы йәшел үләнгә уҡмашып ултырҙылар. Патефондың йылтыр боғаҙы артына ҡайырылып, еңелсә тынлыҡ урынлашты, йыйылыш башланды. Парторг Муллаян ил һәм донъя хәлдәре тураһында сәйәси доклад һөйләгәс, шаулатып ҡул сабыуҙарҙан һуң, бригадирға һүҙ бирелеп, ошо ифрат яуаплы сәйәси мәлдәге колхоз хәлдәре, һуғыш уты ҡабыҙыусы донъя капиталының ҡарыуына коммунистик яуап итеп яҙғы сәсеүҙең уңышлы осланыуы, унда кемдәрҙең социалистик ярышта еңеп сығыуы, кемдәрҙең улар ҡатарында шулай уҡ һынатмауы тәфсилләп иғлан ҡылынды, әйтелгән алдынғыларға оҙон исемлек буйынса бүләктәр тапшырылды. Зәйни ҙә был бүләкләнеүселәр араһында үҙенең дә исемен ишетәсәгенә иманы камил ине, сөнки берәүҙән дә ҡалышмай тырышып эшләгәйне. Өҫтәүенә, аллы-гөллө сәскәгә күмелгән ялбыр өҫкат төбөндә һауынсылар төркөмөндә ҡараҡайҙың да тыңлап тороуын күрә, бригадир ауыҙы исемлектән нәүбәттәге фамилияны атарға асылғаны һайын, йөрәге тулҡынып-тулҡынып тибә ине. Исемлек уҡылып бөтөп, йомғаҡлау һүҙҙәре әйтелгәс, өмөтөнөң аҡланмауынан тәрән үкенеү рәнйетте. Нәғимә лә башын күңелһеҙ һәлендергәндәй күренде, быныһы бигерәк тә аяныс ине...

Парторг Муллаян МТФ мөдире Ғәйнуллаға һүҙ биреп, ул фермала социалистик ярыш арҡаһында һыйыр башына һауындың ҡырҡа артыуы, һауынсылар араһынан бөтә районға күренерлек яҡты маяҡ төҫмөрләнеүе тураһында кинәнеп тирә башлағас, талағы ташып барған Зәйни түҙмәне:

-- Ялған! Һөткә шишмә һыуы ҡушып арттыраһығыҙ, ун ете һауын һыйырын ҡағыҙға ун ике һыйыр тип яҙып, маяҡ яһайһығыҙ! – тип енләнеп ҡысҡырҙы.

-- Дөрөҫ, ниңә дәүләтте, партияны алдарға?! – тигән яңғыҙ ғына ауаз салынды ла юғалды. Уның ҡарауы парторг мәктәп ҡыңғырауын шалтыратып тынлыҡ урынлаштырҙы. Зәйнигә уҫал төбәлеп:

-- Кем ул ялған маяҡ, исем-фамилияһын әйт! – тине.

-- Аны үҙегеҙ ҙә яҡшы беләһегеҙ, сөнки серек маяҡтарҙы үҙегеҙ яһайһығыҙ!

-- Ауыҙын ябығыҙ контрҙың, үҙ башына шашына! – Ғәйнулла өҫтәлгә йоҙроғо менән һуҡты. – Бөйөк Совет илен яҡты коммунизм таңына күкрәтеп алып барыусы бөйөк партиябыҙға һәм социалистик ауыл хужалығының намыҫлы хеҙмәткәрҙәренә ҡара яла яға!

Оторо һөйләп яман ымһынғаны өсөн үҙенән-үҙе оялып, алдын-артын абайламай, ситкә ташланды Зәйни. Телен ниңә тыйманы, Нәғимә күҙенә нисек күренер хәҙер?! Туғай араһында бер арауыҡ яңғыҙ үҙе ҡыҙырынып ғәрен аҙыраҡ баҫҡас, кире әйләнеп ҡайтты. Аҡланда бәйге башланған, бер урында көрәшселәр алыша. Күрше ауылдың дәү генә бер ағай ҡыҙыл башлы һөлгөнө бөкләп тотҡан да, башы осонда болғай-болғай, көс һынашырға саҡыра. Ауылдың бер-нисә егетен тәкмәстереп өлгөргән, шул сәбәпле башҡалары баҙнат итмәй торалар. Ағайҙың майҙан бирмәйем тип күкрәк киреп шапырынып йөрөүе Зәйниҙең ҡыҙған ҡанын уғата ҡайнатыбыраҡ ебәрҙе. Фуражкаһын атып-бәреп, түңәрәк уртаһына сыҡты, шунда уҡ алыш һөлгөһө тотторҙолар. Ағай кеше мыҡты кәүҙәле булһа ла, Зәйни ҙә ҡаты тарамыш – һалдат хеҙмәтендә физик сынығыуҙар үткәйне. Батыр менән батыр, бүгәйҙәрҙәй һөҙә ҡарашып, бер-берећенә ҡаршы килделәр, елп иттереп билдән дә алыштылар. Һырт бирмәҫкә тырышып, икеће тиң алға бөгөлдө, күпер барлыҡҡа килде. Шул рәүешле улар, ыхылдашып, бер-берећен йыға алмай бер

сула аҙапланды. Ниһайәт, Зәйни, уңайын тура килтереп, башы аша ағайҙы гөрһөлдәтте – арҡаһына яткырҙы. “Ах әттәгенәһе, хәйләнде һиҙмәй ҡалдым бит!” – тигән булды теге, ләкин үҙе, еңелгәнен таныһ, еңеүсегә ҡул бирҙе. Өҙлөкһөҙ һөрәнләп-гөжләп торған тамашасылар араһынан Нәғимәнең күҙҙәрен эҙләп тапты Зәйни. Ҡыҙ, бүтәндәрҙән айырмалы рәүештә, тыныс ҡына баҫып тора, әммә көллө ҡиәфәте тәрән тулҡынланыу, ғорурланыу менән тулышҡан...

Алыш батыры һөлгөһөнә маңлай тирен һөртөп, түңәрәкте бер-ике әйләнгәс, көтмәгәндә, майҙанға Мифтахитдин сыҡты. Зәйни аптырап уҡ ҡалды: ҡарыш буйлы лафкысыны иҫенә лә килтермәгәйне. Теге көндә һыйыр һыулауында уны нисек итеп самбо алымы менән тәкмәстереүен хәтерләп, кыҙғанып та ҡуйҙы бахырҙы. Һөлгөләр йәнә лә һелтәнделәр, һырт бирмәҫ арҡаларҙан түбәнерәк һығып алдылар. Зәйни тәбәзде бер һелтәүҙә күтәреп бәрергә көсәнде һәм... шаҡмаҡ кеүек дүрткел һынды бер иле лә айыра алманы ерҙән. Асышынан шөйлә хәүефләнеп, һөлгөнө уғата ҡыҫкартты, шул арала Мифтахитдин уны күтәреп бәрә яҙҙы, ярай, Зәйни боттарын тарбайтып өлгөрҙө. Эйе, башҡорт көрәше самбо түгел икән шул – уның үҙ алымдары, ҡанундары... Икеһе лә бер-береһенең көс-һәләтен самалағас, ысынтылап керештеләр; дуғалай бөгөлгән арҡаларҙа ҡалын һөлгөләр шытырлап, яйлана алмай йөҙәне. Беләк, балтыр һум иттәре баҡыр туптай ҡабарҙы, биттәрҙән шыбыр тир аҡты. Зәйни ике тапҡыр оһолланып тегене ҡалҡытһа ла, уңышҡа ирешмәне: тамырлы бүкәндәй ултыраҡлы кәүҙә ишараты тарбаҡ аяҡтары менән ергә йәпләште ҡабат. Түңәрәкте әллә нисә тапҡыр әйләнеп сыҡтылар, йәшел үләндәрҙе иҙеп бөттөләр. Мифтахитдингә тағылып килмеш дүрт-биш иҫерек бәндә, майҙан ситендә боғаҙ йыртып, Зәйнигә аяҡ салырға маташтылар. Дөйөм һөрән ике яҡты ла сәмләндереп гөжләне. Көрәшселәр икеһе тиң ышылдап, саҡ тын ала башланылар. Зәйни билен һыҡҡан һөлгө ҡыҫымы шаҡтай кәмене, һөлгө эйәһе бер-нисә тапҡыр ҡыңғырайып сайҡалды. Был саҡта күпселек Зәйни алымын хуплаһа, иҫерек ҡор лафкысыны тотанаҡлап дәғүәләне. Зәйни көндәшен арытыу өсөн өҙлөкһөҙ һөжүмгә күсте, бер туҡтауһыҙ эҙәрлекләне. Ул үҙенең бына-бына еңәсәгенә ышанды. Ләкин хәл иткес минутта иҫеректәр майҙанға бәреп керҙе, көрәшселәрҙе бер-береһенән айырып, бәйге ҡартына бәйләнделәр:

-- Эшкә ашмаған судъя, ниңә һатыусыны эшенә ебәрмәйенсә тотаһың?

-- Ике яҡ та бер тигеҙ икәне асыҡ!

-- Лафкыһын асһын, тамаҡтар сатнаны бит! Халыҡты тилмертәләр, байрам көндә лә тамаҡ сылатырға бирмәйҙәр!

-- Эйе, ике яҡ та тиң – ебәрегеҙ һатыусыны! – Йоҙроҡ болғап һүгенделәр. Бәғзе берәүҙәр быға ҡаршы нәфрәтләнеп ҡараһа ла, сығырынан сыҡҡандарҙы тыйыусы табылманы. Тәкәте ҡороған бәйге ҡарты ҡул һелтәргә мәжбүр булды:

-- Ярар инде, уҙамандар, алыш тамам. Икегеҙ ҙә еңеүсе, икегеҙ ҙә арҙаҡлы. Бына һеҙҙең икегеҙгә лә берҙәй бәйге бүләге. Һатыусыны тиҙерәк ебәрәйек, лафкыһы көтә, тиҙәр бит... – Мифтахитдин, әшнәләренә ышыкланып, ҡәнәғәтһеҙ геүләүселәр күҙенән ысҡынды йәһәт. Зәйни иһә йәне көйөп, һил урында йыуынырға йылға буйына төштө. Осраған бере туҡтатып уны ҡотлай, маҡтай, ҡулын ҡыҫа. Әммә йылы һүҙҙәр дәртләндермәне – ҡулына ингән еңеүен ысҡындырҙы бит! Башҡаһы булһа – бер хәл, әммә Мифтахитдин менән бер тиң һаналыу уға сикһеҙ йән асыуы килтерҙе. Нәғимә алдында оят!

Шау-шоу тамамланды, күңел асып арыған халыҡ аш ашарға ултырҙы. Һәр бригада йәки ферма кешеләре айырым-айырым табынға эркелештеләр. Ситтән килгән ҡунаҡтар өсөн махсус табын ҡоролдо. Шул тирәлә өҫтәл ҡуйып “лафкы” асҡан Мифтахитдин, тирләп-бешеп, һатып алыусыларының күнәктәренә биш йөҙ литрлы күпкәк ағас

мискәнән ҡандай көрәнһыу-ҡыҙыл арзанлы шарап ағыҙҙы. Резин шылангынан һауыттарға һурып төшөрә-төшөрә, унын үҙенең дә күҙе тонған, итләс йөҙө шул эсемлек төҫөнә кереп елһенгәйне. Зәйни ҙә, аш алдынан күңел күтәреү өсөн, иптәштәре менән бергә шарап ҡойҙорторға килде. Сиратта ул бригадиры менән һүҙгә кереште:

-- Ниңә беҙҙең сәспеүселәр сменаһына бүләк тәтемәне ағай?

-- Тимәк, не заслужили, ҡустым.

-- Нисек инде? Беҙ бит көндәлек нормаларҙы арттырып үтәнек.

Эргәһендәге сеналаш иптәштәре лә: "Дөрөҫ әйтә, ниңә беҙгә премия шомотор? Беҙ башҡаларҙан кәмме ни?" – тип шаулаштылар.

-- Ә Тирәкле һыртында бер төн күкәй баҫып ултырыуығыҙҙы оноттоғоҙмо?

-- Анда бит беҙ орлоҡһоҙ ултырҙыҡ, орлоҡ ташыған машинаны башҡа яҡҡа ебәргәнһең. Бында һин ғәйепле!

Бригадирҙың күҙҙәре аҡайҙы:

-- Минме? Ауырыуҙы райбольницаға илттергәнем өсөнмө? Уважительный присина!

-- Ә беҙ ниңә ғәйепле булып ҡалдыҡ?

-- Аныһын инде, ҡустылар, юғарынан белешегеҙ. Алар беҙҙән һорап тормай, кемдең кемлеген өҫтән үҙҙәре күрә.

-- Ә һин нимәнде ҡараның? – тип ҡыҙҙы Зәйни. – Ысын хәлде идараға бригадир аңлатып бирергә тейеш түгелме ни? Колхозсыларың өсөн янып-көймәйһең һин – шул ғына!

Баяғы иҫерек әргендектәрҙең береһе, теле шөйлә көрмәлеп, Зәйни ҡаршыһына баҫты, "ниңә бригадир ағайға тел тейҙерәһең?!" тип, сәпәп ташларға маташты. Танауына төшөп килгән йоҙроҡто кире ҡағып ебәргәйне Зәйни, йоҙроҡ эйәһе артына салҡайып китте лә, һөрлөгөп, буш шешәләр тултырылған ҙур әрйәне ауҙарҙы. Шулар шалтор-шолтор иткән арала, ҡыҙарып бүртенгән Мифтахитдин Зәйниҙең яғаһынан алды:

-- Һин, әҙәм аҡтығы! Ниңә ҡул күтәрәһең?!

Әзерәйеп һаман өҫкә менеп килеүенә Зәйни түҙмәне, ҡаны ҡайнап, кирза итегенең көсөн һөжүмсенең үксәһенә төшөрҙө. Яңағы шалҡ итеп, ауған әрйәһе өҫтөнә тәкмәсте лафкысы. Шуның аҡырып һүгенеүенән биҙгән Зәйни сиратын ташлап китте...

Һабан туйы гөрләгән ошо әрәмәлек, йәшел өсмөйөшләнеп, текә ярлы Бәйге тауы йылға менән киҫешкән ерҙә ослайып ята. Тау үҙе бейек түгел, ләкин алыҫҡа һуҙылған, ә түбәһе өҫтәл кеүек тигеҙлек. Яҫы арҡала борон-борондан ат бәйгеләре уҙғарылған, тирә-яҡтың иң шәп юрғаларына данлы бирнәләр бирелгән. Алтмышынсы йылдар еткәс кенә, ҡылғанлы һырт йылғыр тояҡтарҙың саҡма сағыуҙарын оноҡҡан. Сөнки колхоздың өйөр-өйөр йылҡылары, "ит, һөт, йөн бирмәүҙә" юғарынан ғәйепләнеп, баш һандары йылдан-йыл кәметелгәс, ауыл халҡына утын-бесән ташырға ла етмәҫлек булып ҡалған. Һуғыш йылдарында шул ат көсө менән генә мең гектарҙар һөрөп-сәселгән ауылдарҙа хәҙер әҙәм ауырыһа больницаға оҙатырлыҡ ылау таба алмаҫһың. Ат булмағас, бер кешене илтергә лә утыҙ дүрт ат көслө трактор ҡыуыла...

Йәй көндәре Бәйге тауында йәш-елкенсәк уйын ҡора. Уларҙың шат тауыштары таң атҡансы шау-гөр килеп көр ағыла ауылға. Әсәйҙәр һәм атайҙар шул ауаздарҙы ишетеп, йоҡоларынан уяналар ҙа, үҙҙәренең йәшлектәрен хәтерләп, оҙон-оҙаҡ күҙ йома алмай яталар. Йоҡоһоҙ инәй һәм олатайҙар Бәйге тауының ат бышҡырған, ҡолонсаҡтар һауа ярып кешнәгән тауыштарҙан шаңғырап торған саҡтарын, үҙҙәренең шундағы бәйгеләрҙә алған затлы бүләктәрен һағынып иҫкә төшөрә. Ә тауҙағы гармун тартып туҙан туҙҙырған йәштәргә быларҙың береһе лә булмаған кеүек...

Бына бөгөн дә кис булып, ҡараңғылыҡ ауыл өҫтөнә йәйелгәс, һабан туйы бөткән шаулы әрәмәлек кешеләрҙән бушанды аҡрынлап. Өйҙәрҙә гөлтләп электр уты ҡабынды. Ауыл урамдарында бер сулаға аяҡ тауыштары баҫылды. Был мәлдә һәр кем байрамдан арып ҡайтып, ғаилә түңәрәгендә күңелле хистәре менән уртаҡлаша; берәүҙәр кискелеккә ашай, берәүҙәр йоҡларға әҙерләнә...

Әммә тағы урамдар хәрәкәткә килде, тош-тош кешеләр күренде. Кемдәрҙер, гармунда һыҙҙырып уйнай-уйнай, Бәйге тауына тартылды.

Зәйни, тауға менеп барған йәштәр төркөмөндә Нәғимәне күрмәгәс, ҡапыл бойоғоп, ауылға кире төштө. Һәр саҡ бындай уйындарҙың үҙәгендә йөрөгән ҡыҙҙың юҡлығы хәүефләндерҙе: бер-берәй хәл булмағанмы?.. Кискә табан ул Нәғимәне күрмәне, иптәштәре менән йылғала балыҡ һөҙөп йөрөнө. Ә шулай ҙа осратырға өмөтләнеп, дәртле уйҙар кисерҙе. Гармун тауыштары ишетелеү менән, үгәй әсәһенең һуҡраныуына ла иғтибар итмәҫтән, табын ташлап йүгергәйне. Ниңә сыҡмай ҡалды икән Нәғимә?

Ошо минуттарҙа егет ҡараҡайҙың үҙе өсөн сикһеҙ ҡиммәт икәнлеген төшөндө. Уны бөгөн күрмәй ҡалыу – ярты ғүмереңде юғалтыу кеүек. Йөрәк төбөндә ҡуҙғалған татлы ҡайғыһынан ут йотоп, ике яғын бейек тегәнәк үләне баҫҡан ауыл урамдары буйлап Нәғимәләр өйөнә ыңғайланы. Был юҫығы кешеләр алдында оят һымаҡ тойолһа ла, аяҡтары туҡталмайынса һөйрәне. Нәғимәләр өйө тәңгәленән, боролмайынса, тегеләй ҙә, былай ҙа уҙғыланы. Селтәр пәрҙә ҡоролған тәҙрәләр телен йотҡандай өнһөҙ ине. Ахыры булманы, боролоп, бесәй аҙымдары менән яҡынланы. Йөрәге дөп-дөп тибеп, тәҙрә яңағына ике ҡуллап йәбеште. Селтәр араһынан электр нурына ҡойонған мейес алды, ҙур ялғашта ҡамыр баҫып торған Гөлзифа апай (Нәғимәнең әсәһе) күренде. Ғәйзулла ағай үҙе күҙгә салынмай – ҡараңғы бүлмәлә йоҡлай, йәки ҡайҙалыр киткән. Нәғимә, ике ҡулы менән яңаҡтарына таянып, өҫтәл ҡырыйында ҡатып ултыра. Алдында – асып һалған китап, әммә күҙҙәре ҡайҙалыр алыҫтағы билдәһеҙ нөктәгә төбәлгән. Йөҙө уйсан, хәрәкәтһеҙ...

Нәғимәне ошо хәлендә күргәс, өйгә бәреп инерҙәй йөрәкһене Зәйни. Ҡыҙҙы ҡуш ҡуллап тәҙрәнән тартып алғыһы, ҡосағында бәүелтеп иркәләгеһе килде. Күңел тигәнең шулай боларып торғанда, өйҙөң икенсе яғындағы тәҙрәнең ҡапҡасы ҡаты дыңғырланы – Зәйни һымаҡ уҡ уға йәбешкән кемдеңдер ҡулы ысҡынып, йығылып төштө, буғай...

-- Ә? Кем ул? – тине Гөлзифа апай. Нәғимә, тертләп, ҡалҡынып ҡараны ла, йәһәт тороп, дыңғырлаған тәҙрә янына килде, үрелеп тышҡа баҡты. Тап шул мәлдә тышта һиллек боҙолған тәңгәлдә иҫерек Ғәйзулла ағайҙың ярһып һүгенеүе ишетелде, нигеҙ буйынан кемдер, дөпөлдәп, урам яҡҡа ҡасты. Шундай көтөлмәгәндә килеп сыҡты ки, хатта Зәйни ҙә, үҙ-үҙен белештермәй, йүгерек эҙенән ташланды, ә Ғәйзулла ағай, һуйыл болғап, арттарынан ҡыуа төштө; Зәйни иһә алдан доноп барған тәбәҙ кәүҙәле бәндәнең Мифтахитдин икәнлеген таныны: ул да, баҡһаң, тәҙрәнән ҡыҙ күҙләргә барған, имеш... Зәйни ҡолаҡтарында ҡан шауланы, быға өҫтәлеп, Нәғимәнең мыҫҡыллы көлөүе яңғыраны. Зәйни шаңҡып ҡырт-бороддо, Ғәйзулла ағай менән йөҙгә-йөҙ бәрелеште...

-- Һәй, әпсәгеҙҙе эт ялағырҙары, нигеҙ ташын ишелдертеп бөткәндәре етмәгән, инде килеп тәҙрә ҡапҡастарын ҡайырырға керештегеҙме?! – тип һелтәнгәйне һуғырға, һуйылын Зәйни тотоп аҫҡа баҫыуҙан ҡаушап ҡалды. – Ат ҡойроғона сат-йәбешкән тегәнәктәй әрһеҙ булып сыҡтығыҙ...Оят түгелме һиңә, һалдат киҫәге, төнө менән тәҙрә шымартып йөрөү?

-- Шымартыусың ана бара тегәнәк араһында!

-- Ә һин ниңә эттәй аҙып йөрөйһөң?

-- Нәғимәне уйынға алырға килдем.

-- Әһә, шулаймы ни әле? Кемең ул һинең?

-- Комсомолка иптәшем, яратҡаным.

-- Үҙе яратамы һуң?

-- Ярата.

-- "Серек маяҡ" тип атап, йыйылышта йөҙөн йыртҡан эттеме? Этте нисек ратһын?

-- Ярата.

-- Ә мин бына яратмайым! Мин яратмағас, ҡыҙым да яратмай. Ҡыҙ һөйөргә иртәрәк әле һиңә. Хеҙмәт итеп ҡайтһаң да, танауыңдың аҫты кибеп етмәгән. Тәүҙә өҫ-башыңды бөтәйт, былай шапшаҡ йөрөмә. Ғәйнулла һымаҡ матур итеп йорт торғоҙ, алкаш атайың менән үгәй әсәйеңдән айырылып донъя ҡор – бына шунан һуң килерһең ҡыҙ күҙләргә, ләкин беҙгә түгел! Пош-шол, вон! – Һуйылы менән һелтәнеп, Зәйниҙе уҫал ҡарашы менән ҡыуҙы. Нәғимә баҡкан тәҙрә сылтылдап ябылды...

Төнө буйына урам ҡыҙырып ауыр уйҙарға талып алйыған Зәйни, үгәй әсәһенең һуҡраныуын ишетмәҫ өсөн, аҙбар башына менеп, бесәнгә күмелеп ятты. Таң һарыһынан тороп, һалҡын ҡоҙоҡ һыуы менән ҡойондо. Сәйгә ултырғас, өндәште:

-- Атай, бында ҡала алмайым.

-- Нимә, табан аҫтың янамы? – Башын сайҡап көрһөндө.

-- Беләһеңдер, күрше районда геология разведкаһы эшләй, шунда эшселәр кәрәк тигән иғлан уҡыным гәзиттән. Барып, эшләп ҡарайым әле, бәлки, өйҙө һиплэтерлек аҡса табып ҡайтырмын. Былай йәшәргә ярамай.

-- Нимә, түрәләргә отороңдо күрһәтеп, кәрәгеңә алдыңмы? – тине үгәй әсәһе.

-- Алдым шул.

-- Әйттем бит, бөтәһе менән килешеп йәшәргә кәрәк, тип!

-- Ярар, әсәһе, юҡты тизыма! – Мотиғулла сынаяғын ҡапланы. -- Ашарыңды ашамаҫлыҡ ҡылаһың, һинән дә биҙгәндер ул.

-- Юҡ, әсәйҙән мин биҙмәнем, -- тине Зәйни. – Ауыл һауаһы килешмәй башланы миңә.

-- Ҡасан юлланаһың һуң?

-- Бөгөндән. Киске поезға әләгеп китергә кәрәк.

-- Алайһа, хәйерле юл, балаҡай. Мә, ваҡ-төйәк кәрәк-яраҡҡа. – Кеҫәһенән аҡса сығарып һондо. – Шулай ҙа беҙҙе онотма.

-- Онотмам.

Көнөндә үк урынына барып етеп, иртәгәһенә үк эшкә лә тотонғайны, йәй буйына, ең һыҙғанып, егәрле эшләп йөрөгәйне... ҡая башынан осоп төшөп бына аяғын һындырҙы...

Ҡала больницаһында ике ай буйы гипста ятып, ваҡытлыса кәкере таяҡҡа таянып сыҡты Зәйни. Тырышлығын, уңғанлығын күреп өлгөргәйнеләр – ҡалала Геологразведка идаралығының хужалыҡ бүлегенә мөдир итеп эшкә ҡалдырҙылар, йыйнаҡ ҡына айырым бүлмә лә бирҙеләр. Әгәр өйләнә ҡалһаң, айырым фатир ҙа алырһың, тип өмөтләндерҙеләр. Ундағы тормошо шөйлә яйға һалынғас, етәкселәрҙән һорап, ауылға ҡайтып килергә уҡталды егет.

Үҙҙәренә яҡын тимер юл станцияһынан уҙғынсы йөк машинаһына эәгеп китеп, ауыл осондағы күпер ауыҙында төшөп ҡалғайны, һыуалғыста, көтмәгәндә, Миңнисаны осратты.

-- Һә, туйға тып итеп ҡалдыңмы, зимагор? – тине шаталаҡ йән.

-- Ниндәй туй?

-- Бәй-бәй, шуны ла белмәйһеңме? Ҡараҡайың Ғәйнуллаға сыға бит.

Егет ҡойолоп төштө:

-- Ҡасан?!

-- Маладис, бөгөн какрас никах мәжлесенең уртаһына баҫтың! Әле генә ҡыҙлы йортҡа мулла-суллалары йыйылып ята. Бер аҙнанан туйҙары гөрләйәсәк.

-- Никах... никах... – Ҡапыл башы зыр-әйләнде Зәйниҙең. – Нишләргә?!.

-- Нишләргә, тип ни... күрһәт егетлегеңде! Әллә егет түгелһеңме, әйгенәм?

-- Ярар, күп ләпелдәмә! – тине егет.

-- Аһ-аһ, егет кеше һөйгән ҡыҙын һис нимә әйтмәй ташлап китәме ни? Атаһы көсләп бирә Нәғимә әүкәйемде... һине генә һөйһә лә... Ике аҙналыҡ ял бирҙеләр, һыйырҙарын һауырға бүлешеп алдыҡ. Үҙең ташлап киткәс ни... өмөтө өҙөлдө шул.

-- Мин ташлап китмәнем! – Үҙен белештермәй ҡысҡырҙы Зәйни. – Бына, алдыңда баҫып торамын!

-- Аһ, шулаймы ни? Күрмәй ҙә торам икән! Алайһа, һуң түгел әле, бар, ҡуйынына ҡара йылан инмәҫе борон тартып ал Нәғимәңде!

Келәтсе Ғәйзулла өйөнә ҡарт-ҡоро йыйылып бөткәйне, буй һикелә аяҡ бөкләп тәсбих тартмыш “таш мәсеткә ағас мулла” ишараты, изге йоланы үтәүгә тамам әҙерләнеп, бына-бына кейәү-баланың килеп етеүен көтәләр; түр башындағы айбарлы шаршау артында Нәғимә һулҡылдай... Ыҫпай кейәү Ғәйнулла урынына көтмәгәндә кәкре башлы таяҡ таянған, аяҡтарын юл саңы баҫҡан Зәйниҙең пәйҙә булыуы барыһын шаңҡытты.

-- Аб-ба, кемде күрәм?! – Аптыраны хужабикә Гөлзифа. – Атаһы, “аны инвалид арбаһына ултырткандар” тигәйнең дәһә?

-- Ул хәбәрҙе ҡаланан Ғәйнулла кейәүең алып ҡайтты.

-- Йәрхәмикалла, кейәү-бала ошо үҙе буламы? – тине мулла. – Бисмилла әйтеп башлайыҡ, йәмәғәт.

Ғәйзулла, ырғып тороп, мосафирға ташланды:

-- Выжт! Бында кем саҡырҙы һине?

-- Выжтылдамай тор, ағай. Саҡырылмайынса килдем, Нәғимәне алырға!

-- Мына мынауыны алырға теләмәйһеңме? -- Өй хужаһы бала башындай йоҙроғон терәне егеттең моронона.

-- Өҙөлөп һөйгәнемде, үҙем менән бер ойошмала торған комсомолканы шаршау артында томалап, һөймәгәненә бирергә, көсләп никах уҡытырға юл ҡуймам!

-- Һөймәгәне – һин үҙең, яҡшы сағыңда сығып кит! Һөймәне лә һәм һөймәй ҙә ул һине!

-- Үҙе әйтһен!

-- Эйе шул, атаһы. Беткә үсегеп туныңды утҡа яҡма, ауыҙына һуҡма яңғыҙ ҡыҙыбыҙҙың!

-- Эше бөткән инде хәҙер, килешелгән!

-- Атай! – Нәғимә шаршау артынан атлығып сыҡты ла, барыһының һушын һүреп, Зәйниҙең муйынына аҫылынды. – Бер нәмә лә бөтмәгән, бөтмәгән!

-- Йәнкәйем, йән киҫәгем, һағынып-һағынып алырға ҡайттым һине, бараһыңмы? – тип һулышын саҡ алып әйтте егет, һалҡын маңлайынан үбеп.

-- Барам, барам, тегәнәктәй йәбешәм! – Күҙ йәштәрен ҡойоп илап ебәрҙе, ыңғайына әсәһе һулҡылданы. Ҡаушауынан ирендәре ҡалтыраған атай кеше ултырғысҡа әүшәрелде. Шул саҡ тышта эт өрөп, ихатала ыҫпай егет Ғәйнулланың килгәне күренгәйне, йәһәт тороп ишек keләһен элде, шым ҡалдылар.

-- Асығыҙ, был – мин, кейәү-бала! – тине тыштағы, түҙемһеҙ шыҡылдатып.

-- Һе-һе, һинме ни? Кейәү-бала былай һуңлап йөрөмәй – ул инде күптән бында! – тине хужа. -- Ә икенсе кейәү-бала кәрәкмәй, икенсе ҡыҙыбыҙ юҡ беҙҙең.

-- Юҡ шул, юҡ! Йә Алла, кисер беҙҙе! Кит, артыңа ҡарама көлө! – Хужаһының әйткәнен дөрөҫләп сәрелдәне хужабикә. Тороп-тороп уҫал һүгенгән Ғәйнулла, табандары менән ерҙе дөпөлдәтеп, ихатанан олаҡты.

-- Йә, алайһа никах уҡыйыҡ та... – тине тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға ашҡынған мулла.

-- Юҡ! Беҙ туп-тура ауыл советына – ЗАГС бюроһына барабыҙ!

-- Эйе, ЗАГС бюроһына! – Элеп алды Нәғимә. Ҡосаҡлашып ҡушарлашҡан килеш сығып та киттеләр...

Зәйниҙең машина йөрөтүсе яҡын дуҫы шул көндә үк икеһен тимер юл станцияһына сығарып ҡуйҙы, киске поезға ултыртып ебәрҙе. Юлдарын киҫеүсе булманы.

Йәштәребеҙ ошолай олаға ауылдан...

Һунарсы ауылы, 1964.

# КИПАРИСТАР СӘСКӘ АТҠАН САҠТА

## 1

Фәхерниса йөрәге һыҙлап уянды.

Үрелеп ҡул сәғәтен алды: теүәл алты ине.

Бына аҙна-ун көн инде, ул тап ошо ваҡытта һыҙланып уяна.

Тәҙрәнән һары ҡала таңы – электр яҡтыһы һарҡылған таң түгелә. Ҡала халҡы теле менән әйткәндә, “лимонный” итеп буялған бүлмә эсе лә был нурҙарҙан һап-һары – лимон төҫлө. Ауылдан күсенеп килгәндәренә теүәл биш йыл тула инде, Фәхернисаның иртәнге күкшелт-алһыу шәндаҡлы күкте күрә алғаны юҡ. Бында таңдар электр уттары һүнеп бөткәс кенә ағарып ата.

Тышта тағы ла ҡар яуған булһа кәрәк: дыңғыр-даңғыр көрәк тауыштары килә. Бында ҡарҙы, ергә лә тейҙертмәй, тиерлек, төшкән берен көрәп алып торалар. Көрәктәре ана нисек тыҡырлай! Ҡар көрәүселәрҙең береһе Фәхернисаларҙың тәҙрә төбөндә генә: хатта ҡатындың ышылдап тын алышы ла ишетелә кеүек. Был бәндә, моғайын, бер туҡтауһыҙ хәрәкәттән кинәнеп, сөгөлдөр төҫлө ҡыҙара-бүртеп эшләй. Маңлайына бөрсөкләнеп кенә тир ҙә сыҡҡандыр. Елбер-елбер ҡар тәңкәләре дебет шәле йөнтәктәренә эләгеп уралғандыр. Фәхерниса ҡар көрәүсенең һулыш алышынан, көрәк тауышынан һәр хәрәкәтен күҙ алдына килтерә. Әле ниңәлер туҡтаны.

-- Ҡулы ҡороғоро! – тип ишетелде уның рәнйеүле мыңғырлауы. Артабаныраҡ дыңғырлаған көрәк тә тынды.

-- Әү, нимә тиһең? – тине икенсе ҡатын.

-- Бынауы ҡулы ҡороғороноң, тим, эсендә йәне бармы икән? Икмәк һыныҡтарын аяҡ аҫтына һалып тапаған! – Ҡаһ-ҡоһ йүткеренеп тамаҡ ҡырҙы.

-- Тир сығарып эшләгән бәндә түгелдер. Икмәк ҡәҙерен белер ине, юғиһә.

Ҡатындар шул хаҡта тағы ла бер-ике фекер тирҙеләр ҙә тындылар: йәнә ыш-ыш һулыш алыу, туң асфальтте тыҡыр-тыҡыр ҡырсыуҙары ишетелде. Бер быуа тынмай эшләгәс, түҙмәне, биргеһе йәнә өндәште:

-- Көрәгеңдең алымы бик шәп күренә, әллә яңымы?

-- Әү?

-- Көрәгең яңымы әллә, тим?

-- Эйе, тегеһе һынды бит, -- тине серҙәше.

-- Алмаштырып бирҙеләрме?

-- Эйе.

-- Ә минекен күрмәйҙәр, ҡороғорҙары. Ҡырҡ еренән ярсылып, ямалып бөттө инде. Күтәреп барһам, үҙең ҡағып-һуҡҡылап ал, ти ҙә ебәрә.

Тегеһе өндәшмәне.

-- Беҙҙең нәсәлникте әйтәм, кеше айыра ул... күҙеңдең төҫөнә ҡарап.

-- Был ни тигән һүҙең тағы, апай? – тине тегеһе, ҡылтайып. – Мин дә былтырҙан биреле тәүгә яңыртып торам.

-- Ә минең икенсе йыл китте инде, -- тине берегеһе. – Бына күрәһең бит: ус аяһындай ҡалды. Күҙен дә йоммай, ҡороғоро: “Көрәктең яҫыһында, тарында ни йомош, ҡар өсөн ул барыбер. Яҫы булһа, ауыр алаһың да һирәк ырғытаһың, тар булһа, еңел һоҫаһың да йыш ташлайһың – икеһендә лә бер үк сама көс сыға, ти. Физика законы, ти. Ал, аңлатып ҡара уға...

-- Хужа кеше бит, беләләр.

-- Бер генә көн ошонда үҙенең бисәһен сығарып ҡарарға ине, белер ине шунан!

Быңдай саҡта тел осонан сәсрәмәле шул бер йомғаҡлау һүҙенән һуң, күңеле ҡанып, эшенә тотондо тағы. Фәхерниса уның рәнйеп түбән эйелгән йөҙөн, ергә төбәлгән уйсан ҡарашын күргәндәй булды. Ҡыҙҙың ниңәлер кинәт кенә күңеле тулып, ошо минутта үҙенең һис ни шәйләмәй ап-аҡ япмалы түшәктә ятыуы өсөн нисектер уңайһыҙ, ауыр булып китте. Ҡала халҡы йоҡонан тормаҫы борон – таң тишегенән эшләүсе был апайҙарҙың бөтәһе лә күбеһенсә ҡырҡ-илле йәштәр тирәһендәге тол ҡатындар – элекке һалдат һөйөклөләре...

Тәҙрә төбөндә көрәк тыҡырлауы менән аралаш яңы моң: яй ғына, күкрәк төбөнән генә сыңрап ҡойолған һағышлы йыр һүреп инде, күңелде ул шунынса уҡ илке-һалҡы килтереп, алыҫтарға, ғүмер төпкөлдәренә уралтып алып китте. Әллә ҡайҙан – уйламаған ерҙән – моңһоу көйҙөң һүҙҙәренә әүерелеп, ҡыҙға бөтөнләй башҡа яҡтан, башҡа кеше ауыҙынан ишетелгән ниндәйҙер бер сәйер шиғыр юлы килеп ылыҡты; шул, ләззәт ҡатыш әсенесле тылсымы менән арбап, күңелдән һис һүрелмәй, йөрәк тибешеләй һулҡылдап тик тора:

...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...
...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...

Психология ғилми-тикшеренеү институтына башлап эшкә килгәнендә Кипарис ҡушаматлы дворник ҡарттың ауыҙынан ишетте ҡыҙ ошо йөрәк һыҙлатҡыс ауазлы шиғри һулҡылдауҙы...

Беҙҙең һалҡын яҡтарҙа, Уралда, үҫмәй торған, һәм ғөмүмән сәскә атыуы ла шикле булған көньяҡ диңгеҙ буйҙарының наҙлы ағасы кипарис һәм үтә сәйер исемле ҡартлас Кипарис...

Фәхерниса, йөрәген тотоп, урынынан ҡуҙғалды. Ошо йәшенә тиклем ул үҙ йөрәгенең барлығын да тойоп белгәне юҡ ине, һуңғы көндәрҙә белдерҙе... Үҙ уйынан һиҫкәнеп, ҡыҙ йәһәт ҡулын алды, ут тоҡандырып тормай, ишекте һаҡ ҡына асып залға сыҡты.

-- Торҙоң дамы ни инде, бәпесем? Иртә бит әле, йоҡлаһаң ни була инде? – тип өндәште диванда ятҡан әсәһе. Былтыр көтмәгәндә генә атайҙы илтеп ерләгәс, әсә кеше, бына-бына ҡайҙалыр китергә йыйынған, бында ваҡытлыса ғына торған әҙәмдәй, ошонда ишек төбөндәге диванда ғына урын һала, ә мейештәге көмөш буталлы ҙур карауат, урын-ере ҡабартыулы килеш, кемделер көтә, көтә...

-- Иртә түгел инде, әсәй, -- тине Фәхерниса, залдан нисек тә тиҙерәк һыпырылырға итеп. Әсәһенең маҙаһыҙланып ҡалҡына башлауын күреп, туҡталды:

-- Һин ят, ят, әсәй, сәйҙе үҙем ҡуйырмын.

-- Ишетеп ятам: көн дә теп-теүәл сәғәт алтыла уянаһың, -- тине әсәһе. – Ни булды һиңә, бәпесем?

Фәхерниса, тынысландырырға иткәндәй, ғәмһеҙ тауыш менән көлөмһөрәне:

-- Аптырайым мин һиңә, әсәй. Әллә, тимен, баш осоңа сәғәт аҫып ҡуйғандар: көн дә теп-теүәл алтыла икәнен ҡайҙан беләһең?

-- Анау өйҙөң тәҙрәләре сәғәтеңдән дә былайыраҡ ул, бәпесем. Күрәһеңме бынау тос ҡыҙғылт нурҙы? – Стенаны сыбарлаған тимгелдәргә төртөп күрһәтте. – Абажурҙары ҡыҙылдыр... Ҡаршы йорттағы ул кеше, теүәл бер йыл инде, алтыла тороп китә. Ә бына был һарғылт нур – сәғәт дүрттә тора торғандыҡы. Төнгө икенән үк уянаҡайы ла бар әле уларҙың, тик киткәндә утын һүндереп китә, хәҙер күренмәй...

Фәхерниса, бер һүҙ ҙә әйтә алмай, әсәһен ҡыҙғанып, ирекһеҙҙән, ул күрһәткән тарафҡа боролоп ҡараны. Шул саҡ йөрәге һурылып төшкәндәй булды: ҡабырый яҡ тәҙрә төбөндәге гөл сүлмәгендә кисә генә балҡып асылған сәскә, ул үҙе эштән ҡайтҡас, бөтә донъяһын онотоп, әсәһе менән ҡушарлашып ҡыуанышып ҡарап торған берҙән-бер аҡ сәскә -- Фәхерниса йәндәй күреп һөйгән аҡ балҡыш -- күмерләнгән ҡағыҙ төҫлө һөрөмө ҡойолоп ултыра, яман янғын ҡосағында көйөп сыҡҡандай, ҡап-ҡара төҫтә ине. Фәхерниса аңғармаҫтан йәнә йөрәген тотоп ыңҡтап ҡуйҙы, утҡа осҡан күбәләктәй һонолоп, тәҙрә шаршауын асты. Һәм шул саҡ ул, албырғанып, сәскәне ҡабат ап-аҡ хәлендә күрҙе, хатта бүртек таж һыртында төнәп сыҡмыш көмөш һыу тамсыһында үҙенең муйылдай ҡара-йылтыр ике төртөк күҙ ҡараһын да осратты, буғай... Ҡыҙ, болоҡһоп, тәҙрә янындағы аяҡлы көҙгө алдына ултырҙы. Баҡтиһәң, тәҙрә шаршауы ҡаплаған да шуның артынан гөлдөң шәүләһе ҡарайып төшкән икән...

Әсә лә тороп ултырғайны инде, ҡыҙы яғына төбәлеп, уның сәйер ҡылыҡтарын аңларға тырышып баш вата ине. Фәхерниса, йөрәкһеп барып, тоҡандырғысҡа баҫты, бүлмә эсен гөлт итеп нур бөркәне. Әсә менән ҡыҙ, өндәшмәй, аллы-артлы кухняға йүнәлделәр.

Фәхерниса сәй эсеп өйҙән сыҡҡанда, ҡар көрәүсе ҡатындар юҡ ине инде. Ситкә ырғытылған ҡар өйөмөндә көрәктәре генә терпе һыртылай тырпайып тора. Моғайын, бөйөрҙәрен сәйҙә йөҙҙөрөргә кереп киткәндәр.

Бындай ваҡытта атаһы бахыр ултырып тынмаҫ ине... Фәхерниса уның ерҙе һиңкетеп баҫҡан аяҡ тауыштарын ишеткәндәй булды, артына әйләнеп ҡарағыһы килде. Ул барҙа был көрәктәр ҡарға сумып тормаҫ ине. Ҡулараһы саҡ ҡына бушанымы, дворник ҡатындарҙың ҡулынан алыр, ҡар бураны туҙҙырып, ишек алдарын таҡырлап ташлар ине. Ошо мәлдә йорт буйынса форточкалар шартлап асыла, күрше-күләндең ҡәнәғәтһеҙләнеп һытылған йөҙө күренә:

-- Ул һинең эшме ни? Әргендектәрҙе яман өйрәтеп йөрөйһөң?

Атаһының иҫе китмәй:

-- Эш кешеһе кемдер эшләгәндән яман өйрәнмәй ул, ә кеше эшләгәнде тәҙрәнән ҡарап ултырған бәндә генә яман өйрәнә! – тип ауыҙҙарын яптырта ла ҡуя торғайны. Ошо иҫенә төшөп, Фәхерниса йылмайҙы, ҡары көрәлгән тротуар буйлап атланы.

Аяҡ аҫты тап-таҡыр, буйҙан-буйға ыуылдырыҡ кеүек эре ҡыҙғылт ҡом да һибелгән. Кешеләрҙең йоҡонан тороп тышҡа сығыуына бында көн дә шул бер күнегелгән күренеш: бөтәһе ялт итеп ята, әйтерһең, бәкәлдәргә етерлек ҡарҙар ҙа яумай, ә йәйгеһен күҙҙе әсеттереп ҡом бурандары ла иҫмәй, кешеләре лә аяҡ аҫтына тәмәке төпсөгө ташлап китмәй. Хатта кисә кис эштән ҡайтҡанда йөрөр юлдарын сүпләп үткән иң әрпешйәндәр ҙә бөгөн таҡыр, таҙа асфальттән һис иҫтәре китмәй генә юғары ҡарап уҙалар...

Шаҡтай иртә ине әле, эш башланырға сәғәт ярым самаһы ҡалғайны. Таң тишегенән институтҡа барып инеп суҡайып ултырыуы килешмәҫ тә төҫлө ине. Фәхерниса әсәһенең һүҙен тыңламай иртә ҡуҙғалғанына үкенеп тә ҡуйҙы. Трамвай көткән булып, туҡталышта байтаҡ ҡайҡайып торҙо: бөгөн ниңәлер саҡ ҡына ла яңғыҙ ҡалғыһы килмәй, күмәкселек янына тартыла күңел. Дөбөр-шатор трамвай килде, бер килкеләр тейәлеп китте, урынына башҡалары эркелде, улары ла һәп булды. Чехолдарға төрөп музыка ҡоралдары тотҡан шаулы төркөм һырып алды туҡталышты. Ниндәйҙер завод клубының үҙэшмәкәр һәүәҫкәрҙәре икән, тимер юл вокзалына төшөргә көтәләр, буғай. Янып торған эшсе егеттәр. Һөйләшеүҙәренә ҡарағанда, улар шефлыҡ иткән ҡайһылыр колхозда дәүләткә йыллыҡ ит һатыу планын арттырып үтәгәндәр, шул айҡанлы бөгөн кис тантаналы йыйылыш була – концерт бирергә тейештәр. Вокзалға йөрөмәле трамвай әллә йоҡлап ҡалған инде, әллә бөгөн шулай һирәк үтә -- егеттәргә шаҡтай көтөргә тура килде.

Тик һәммәһенең күңеле көр, әллә ни иҫтәре китмәгәндәй. Музыка ҡоралдарын күбәләй өйөп һалғандар ҙа, бер тәңгәлгә өйөрөлөшөп, ваҡыт уҙҙырыу өсөндөр, тел сарлап маташалар, әленән-әле Фәхерниса яғына күҙ аталар. Мәҙәк һайын гөр килеп көлөшәләр – тынлы оркестрҙан бер ҙә кәм түгел. Ике бөртөк үтә етди, үтә мөкиббән егет бар. Ҡара-ҡаршы сумаҙандарына ултырышып алғандар ҙа, алдарына нота ҡуйып, һоҡландыртҡыс ныҡышмалылыҡ менән торбаларынан йәшелле-күкле ауаз сығаралар – билдәле дәү көйҙө эйәрләп маташалар:

Широка страна моя родная...

Тик ул арғымаҡ харап баш бирмәҫ сапсан йәнле күренә: инде ҡороҡланым, йүгәнләнем, тигәндә генә, дүрт тояғын ҡарышлата ҡапыл артҡа сигенеп, сапсып, ҡороғон һөйрәлтеп төтәп сыға ла китә. Ҡороҡсоларҙың әмәлһеҙлеген күрһәтеп кешнәп көлгәндәй, берҙән-бер ялған-фальш ауаз ғына тирбәлеп ҡала һауала...

Бына тынғыһыҙ торба уҙамандары ла тынды, бары менән байрам, тигәндәй, музыка ҡоралдарын ҡуйып, ҡыҙға борола биреберәк ултырҙылар, аҫтыртын ғына күҙләп, ентекләй башланылар. Уларҙан тыш та байтаҡ халыҡ төбәлгәйне был яҡҡа. Фәхерниса һөмһөҙ күҙ ҡараштарының, һәр саҡтағыса, туп-тура үҙенә йәбештерелгәнлектәрен: уның ҡырағай тарпан ялылай туҙғып-боларып, иңдәренән ағылып төшкән сөм-ҡара сәс шарлауығын, йоҡа пальто аҫтынан төртөп йомороланған килбәттәрен ҡармалауҙарын тойҙо. Йәшерәһе юҡ: һәүетемсә генә урамдан уҙғанында ла, эш урынында яҙыу машинкаһы эргәһендә ултырғанында ла ир-ат затының ентекле ҡараштарын һиҙә, берсә әллә нисек ҡыйын булһа ла, был уға йәшерен кинәнес, рәхәтлек бирә ине. Тик был юлы әллә ниндәй ытырғаныу солғаны, эйәк остарынаса уттай янып, шәп-шәп атлап китте. Аяҡтары ла сәңгей башлағайны инде, юл ыңғайындағы баҡса эсенән йөрөштөрөргә булды. Ҡандай сөм-ҡыҙыл емештәре тәлгәш-тәлгәш һәленешкән әүеш миләш төбөндәге эскәмйәлә ир менән ҡатын сөңкөлдәшеп әрепләшә:

-- Баш сатнай, Фая, баш! Ҡанә, бер ярты табып килтер, инде һинең сират! – тине, асыуланып, ҡалын ғырылдауыҡ тауышлы ир кеше.

-- Юҡ, был юлы һин тейеш! – тине ҡатын, һыуыҡ тейеп тоноҡланған тамаҡ төбө менән ыхылдап. Ҡапыл тындылар, ике яҡҡа ҡайырылышып ултырҙылар. Арзан буҫтау “бутый”лы аяҡтары эргәһендә -- эсеп бушатылған һары алма һүрәтле шешә, төкөрөп ташланған миләш орлоҡтары... Фәхернисаның уҙып китеүен өнһөҙ көтөп алып, йәнә бер-береһенә әйләнешеп ултырҙылар, ыҙғышты яңырттылар:

-- Фая, бөгөн һинең сират!

-- Юҡ, һинеке!

-- Бар, күп лыҡылдама!

-- Үҙең бар!

“Эй Аллам, ниндәй генә бәндәләр, яҙмыштар юҡ донъяла!..”

Башҡа саҡта әллә ни иҫ тә китмәҫ ине, әммә бөгөн Фәхернисаға хатта төймәләй сүп тә дөйәләй күренде. Өҫтәүенә, ошолар кеүек үк, ҡарлы тышта баяғы бер шиғыр юлын мөңгөрләй-мөңгөрләй шешә боғаҙынан ғорҡолдатып эскән Кипарис ҡартты күҙ алдынан кисерҙе...

Абайламаҫтан, оторо саған ботағына түбәһе төртөлдө лә, бер алап ҡар ишелеп төшөп, ҡысҡырып ебәрә яҙҙы; елкәһенә тулған ҡарҙы һоҫоп ыҙаланғанында саған артында хихылдашып көлдөләр. Бәй, үҙе лә абайламай, кире әйләнеп килеп, әлеге ике иҫерекле эскәмйәгә юлыҡҡан... Әммә байғоштарҙың уға ҡарап ҡыҙыҡһыныуы һүрелдe, арҡаларын көмөрәйттеләр.

-- Өшөйһөң бит... – тине ир, тегеһенең тубыҡтарын салғыйы менән ябырға итеп.

-- Мин өшөгәндән донъя бөлмәç, -- тине ҡатын.

-- Юҡ, өшөйһөң һин, Фая, -- тип ныҡыны ир. -- Әйҙә, киттек, һыуыҡ тейҙерәһең бит!

Тороп, өç-баштарын ҡағыштылар. Ҡатын ерҙәге буш шешәне алып сөмкәһенә сумырҙы. Тап йәштәрсә билдәренән ҡосошоп, ян-яҡтағы ботаҡтарҙы ҡулдары менән этәрә-этәрә, китеп барҙылар. “Былар ҙа бер-береһен аңлай, бер-береһенең ҡәҙерен белә бит!” тип, ни өсөндөр әсенеберәк уйланы Фәхерниса. Ошо минутта ниндәйҙер ҡола диңгеҙ уртаһында ҡыҙғаныс хәлдә сайҡалған ишкәкһеҙ һәм ишеүсеһеҙ ҡайыҡтай тойҙо үҙен.

## 2

Институттың ишек алды төн сыҡҡансы ғәҙәттәгесә таҡыр итеп көрәлгән, һеперелгән, табан тайғыс тәңгәлдәре ҡом менән нағышланған. Бурысын теүәлләп йәне тынған Кипарис ҡарт, ирнәүҙәре ҡырылып ҡайышланған ҡара ҡуян бүрек аçтынан ялбыр-ҡуйы ҡаштарын, оҙон-һәленке мыйыҡтарын ҡатыҡ һөрткәндәй ағартып, ялтыратып ҡырған эйәген яçы фанир көрәгенең ҡуш ҡуллап услаған һабы осона терәп, үҙенә генә билдәле хәтер һандығын, буғай, аҡтара. Өçтөндә ҡатҡан ҡыптыр тун, аяҡтарында автомашина баллонынан йәбештереп яһалған резин калуштар кейҙертеүле дәү “ҡаҙна быйма”. Тупаç брезент бейәләйҙәре тундың ике кеçәһенән тырпайған. Ҡартлас бына ҡымшанды – ҡуйынынан йәлпәк килбәтле аҡ ҡорос шешә алды, бормаслы ҡапҡасын асып, бер-нисә уртлам ғорҡолдатып һемерҙе. Хәмер утының тәненә таралыуын ҡәнәғәт тамаҡ ҡырып кисерҙе. Шул саҡ шәп-шәп атлап эшкә килеүсе ир-аттың бер килкеһе, тура юлынан яҙлығып, Кипарисҡа һуғылды, бормаслы шешә ауыҙынан йәһәт кенә бер йотом һемереп китте – кисә кистән ҡунаҡ булып баштары шаңҡығандыр...

Быҙауҙай дәү һары күн портфель тотоп яңғыҙы ғына йүгерә-атлай килгән, энәнән-ептән кейенгән ыçпай егет күренде.

-- Ренард улым, туҡта әле! – тине ҡарт, һыңар ҡулын күтәргән килеш көтөп. Тегеһе әйләнеп ҡараны:

-- Я не твой “улым”, старый черт, знай себя! – тине лә, бер юлы бер-нисә баçҡысты аша ырғып, ялтыр ишек артына инеп юғалды. Башын сайҡап тәрән тын алды ла ҡарт, шешә бормасын тағатып ғорҡолдатты. Ҡул һелтәп, бераҙ уйланып торғас, шиғри юлдарға һалынған шул бер таныш моңон үҙәге буйынан иңрәтте:

...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...
...Кипаристар сәскә атҡан саҡта... –

Күҙҙәренән бөрсөк-бөрсөк борсаҡтай йәш ҡойолдо, әллә ҡайҙа, йәненең төпкөлөндә, тауышһыҙ тартышып үкһеүҙән яурын баштары терт-терт һелкенде.

-- Кипарис ҡарт тамам алйыған! -- Өмөтһөҙ баш сайҡап уҙҙы береһе.

-- Эйе, шулай, буғай. Алкашланған ҡарт алаша һаташа. Үҙенең сәскә атыусы ниндәйҙер кипаристарын, ниндәйҙер юҡ “улын” иçенә төшөрә... бахыр...

-- Әллә ысынлап та аспиранттың атаһымы икән ул?

-- Ҡайһы аспиранттың?

-- Бәй, әле генә ошонан тәпәйләгән Ренардтың һуң?

-- Кит бынан, ошо ҡыптыр тун алкашмы?!. Булмаç!

-- Бер өйҙә торалар, ти бит һуң?

-- Торһа ни, фатирсыһы ғына, ти, ул Кипарис ҡарт. Ренардҡа аҡса кәрәк бит: күрмәйһеңме ни, ҡама кеүек ялтырап, энәнән-ептән генә кейенеп йөрөй!

Был ваҡытта Фәхерниса, башын һәлендергән килеш, уйҙар моңонан һығылып, бина алдындағы кескәй баҡса аллеяһынан килә, күңеле төбөндә талғын ғына ағыла ятҡан сихри донъя ҡосағында тирбәлә: йомшаҡ йәш ҡарҙан ап-аҡ нәҙек шәл бөркәнеп һалҡынлыҡта талығыусы ағастар ҙа, баш осонда көбөлә бешелгән айрандағы йомарлаҡ күбекмайҙай ағарып йөҙгән тумалаҡ Ай ҙа, күҙ күреме аҡ юрған ябынып йоҡлап ятҡан мәңге серле, сихриәтле уйсан ер ҙә -- бөтәһе лә был мәлдә ҡабаланмаҫҡа, моңға сумырға өндәй һымаҡ. Эре күҙле ҡыҙыл ҡом һибелгән таҡыр юл Фәхернисаға бынан бер йыл элек кенә атлап ингән институт тупһаһының ҡыҙғылт гранит таштарын хәтерләтте. Эйе, бер йыл үтеп тә китте...

Атаһы ҡапыл донъя ҡуйғас, ауырыу әсәһен ҡыҙғанып, Фәхерниса, университеттың психология факультетында һәүетемсә генә уҡып йөрөгән еренән, үҙе ғариза биреп, ситтән тороп уҡыу бүлегенә күсте лә ошо ғилем төйәгендә лаборантка булып урынлашты. Эше лә әллә ни ҡаты түгел: ғалим-ғөләмәләрҙең һәм аспиранттарҙың ғилми хеҙмәттәрен машинкала баҫыу ҙа килгән-киткән хаттарҙың иҫәбен алып кенәгәгә теркәп барыу ине. Кешеләре лә йәш студентка өйрәтергә-кәңәшләшергә бик һәүәҫ, атлығып ҡына торалар, алсаҡ йөҙ күрһәтәләр, сөнки бындағы хеҙмәткәрҙәр гелән генә ир-ат халҡы ла йәше ҡырҡтан уҙған етди ҡатын-ҡыҙ затынан булып, алсаҡ күңелле Фәхерниса араларында бер генә, шуға күрә бөтә ҡояш та уға ғына төшә ине. Ҡыҙҙың бүлмә ишеге оҙон коридорҙың иң башында – вахтер апай өҫтәленә яҡын уйылғанлыҡтан, эшкә килеүселәрҙең ҡөллөһө асыҡ ишектән үрелеп сәләм биреп үтәләр; ә йәшерәктәре, ниндәй ҙә булһа ҡыҙыҡ һүҙ табып, ҡыҙҙы шаяртып, уның ҡаршыһында нисек тә балҡып алырға, оҙағыраҡ тел сарларға тырыша; был йәһәттән бигерәк тә буйҙаҡ аспиранттар өлгөрлөк күрһәтә ине. Ҡайнап торған ошо ала-ҡола ғәләм араһынан уйсан бер егет үҙенең ғәжәп баҫалҡы тәбиғәте, Фәхернисаға сабыйҙарса һоҡланып алсаҡ ҡарашы менән айырыла ине. Йәмил тигән был эшсе егет, моғайын, Фәхернисанан саҡ ҡына кесерәк булып, ниндәйҙер заводтан электрик булып килгән, шунда уҡ үҙен институттың комсомол башлығы иткәндәр. Төпһөҙ йыһан кеүек ҡара күҙҙәрендә бөткөһөҙ тәрән мәғәнә, сер мөлдөрәп ятҡандай... Әммә барыһы араһынан тәү күргәндә үк Ренард Асылғужин тигән береһе, олпатланып ир ҡорона кереп барған аспирант, ҡыҙ күңеленә айырыуса мас килде. Оҙон һомғол буйлы, башҡорттарға хас булмаған һуҙынҡы аҡ йөҙлө, матур ҡырлас танаулы, һәр саҡ ҡара йөн костюм, ҡарҙай аҡ нейлон күлдәк кейеп, алтын ҡыҫтырмаслы ала-ҡола галстук тағып йөрөй торған күркәм егет ине был. Барлы-юҡлы заманаға яраҡлашҡан тиңдәштәре араһында шул өҫ-башы менән үк ныҡ айырылғанлыҡтан, берәй түрә, йәки һатыусы балаһылыр был, шул тиклем дә затлы кейенмәҫ ине, тип тел сағалар ине артында; әммә яҡындары уның бер ҙә улай түгеллеген, әсәһенән ҡалған йорт-йыһазлы иркен өйөнә ошонда эшләгән дворник Кипарис ҡартты фатирға керетеп, өҫтәлмә табыш алыуын, оҫта ҡәләм тибрәтеүсе булараҡ, гәзиттәргә йыш яҙған мәҡәләләре лә тос төшөм килтереүен хәбәр итәләр ине. Ҡулында даими күпкәк һары портфель булыр, аяғына кейгән һары туфлиҙары ла баҫҡаны һайын шығырлап сәләм биреп барыр. Түрә-ҡараға ярамһаҡлы татлы телле лә булғанлыҡтан, институтта уға дөйөм ихтирам, иркәләүгә яҡын йомшаҡ мөғәмәлә хөкөм һөрә. Ҡорҙаштары араһында ла күптәр ихтирам итеп, ул -- беренсе дәүмәлле сағыу йондоҙ, бына-бына фән офоғона ҡояш булып ҡалҡынырға өлгөрөп еткән ғалим, даһи, тиҙәр ине. Һәләтле һәр студенттан да йондоҙ һөйрәп сығарырға әҙер торған аҡ һаҡалы профессорҙар ғына түгел, хатта егеттең көндәштәре – аспиранттар ҙа быңдай хәлгә күнеккәндәр, елкәләрендә үрләп

барыусы даһи культен, өҫтөнләгән һүҙһеҙ танығандар ине. Ренард иһә ошоно яҡшы белеп, һыуҙағы балыҡтай йөҙә, һәр ҡайҙа ла бәйгеһе алдан йөрөй. Өйкөмләшеп ябай ғына һөйләшеп тороу булһынмы, әллә ғилми ултырышта фекер алышһындармы – йәштәр араһынан тос һүҙ уныҡы. Шуныһы ҡыҙыҡ һәм фәһемле: фекерҙәр ярышында үҙе хаҡ булмаған сүрәттә лә ул, ниндәйҙер хис-тойғоһо менән хатаһын йәһәт аңлап, теүәл йөҙ һикһән градусҡа ҡырт-боролоп, кемдер әйткән хаҡ һүҙҙе үҙ һүҙе яһап, ҡаш менән күҙ араһында хаҡ һүҙленең елкәһенә хужаларса атланып өлгөрә ала һәм теге меҫкен, үҙе лә һиҙмәй, йылғыр һыбайҙы шөһрәт түбәһенә йөкмәп-елдереп мендерә... Фәхернисаның иғтибарынан шул да яҙлығып ҡалманы: эргәһендә ир-ат затынан берәйһе һырныға башлаһа, ҡыҙ өс ауыҙ һүҙ ҡатырға ла өлгөрмәй, йылп итеп Ренард пәйҙә була ла уны “һалдыртып ала”. Теге асығауыҙ артҡы планда, нурын юйған йондоҙҙай тоноҡланып, тамам күшегеп ҡала, йор һүҙленең тел төбө бүҫкәреүен көтөп, башы ҡатып тапанып тора-тора ла мәсхәрәле хәлдә табан тайҙыра – Ренард бында ла беренселекте өлөшөнә төшкән көмөшө һанай... Ҡулъяҙмаһын оҙон ҡулында ялпылдатып машинкаға килтергәнендә лә бүтәндәрҙәй ялынып-ялбарып һорамай, күҙгә ҡарап инәлмәй, ә Фәхернисаны үҙ кешеләй иңендәге ҡабарынҡы сәс көлтәһе менән ҡуша ҡыҫып ҡосаҡлап ала ла, баҫылып ятҡан ҡағыҙҙарҙы валиктан һурып алып ташлап, үҙенекен тыға; “һылыуҡайым, тиҙерәк!” тип кенә бер өндәшә. Башҡаларҙың ҡулын иңенә ҡағылдыртыу түгел, ул хаҡта уй йөрөтөргә лә сәбәп ҡалдырмаған Фәхерниса был егеттең бәйһеҙ ҡылығын тәбиғи хәл һымаҡ итеп кисерә. Яҙылмаған ҡанун буйынса институтта ҡулъяҙмаларҙың баҫылыу тәртибе, сираты дәрәжәгә-һанға ҡарап йөрөмәһә лә, ең һыҙғанып тәүҙә Ренардтыҡына тотона ине. Ниңә йәшерергә: был егеттең егетлеге бик тә оҡшай ине уға.

Донъя тигәнең ҡыҙыҡ: кемдең дә булһа күҙе артында уның ваҡ-төйәк ғәйбәтен һатып, еңелсә генә тел сарлап ала торған эскерһеҙ ғәҙәт була бит. Фәхернисаға шундай бер мәлдә Ренард хаҡында иптәштәренең тел ҡаҡҡанын ишетергә тура килде. Өлгөр аспиранттың, кеше булараҡ, уны башҡаларҙан айырып торған төп сифаты хаҡында бара ине һүҙ. Бында ла үҙәгәйлек – үҙәгәйлек булып ҡалалыр инде: уның хаҡындағы фекерҙәр, һис тә йәпкә йөп килмәй, ҡапма-каршыға бүленеп сәкәләшә.

-- Йыртҡыс ул, акула ул! – ти бер яҡ, шаярыпмы-ысынмы, аспиранттың йылғырлығы хаҡында. – Бөтәһен дә көтөргә була унан. Әгәр берәй мәлдә “яңылыш” ҡына муйының бөкләнеп, саҡ ҡына ҡан еҫең һиҙелһә, сабып килеп ҡабырғаңды умырып алмаҫ тимә!

-- Йыртҡыслыҡ түгел, ә күптәребеҙгә етешмәгән ***сослоҡ*** тип атала был! – Ренардты хөкөм ҡулына бирергә теләмәй икенселәр.

-- Ундай сослоҡ беҙгә хас түгел!

-- Ләкин беҙ быға мохтаж. Беҙҙең халыҡ ул үтә баҫалҡы, ябай: ауыҙындағы ҡалъяһын тартып алып китһәләр ҙә “эһ!” итмәҫ. Әшептән тыш улай булырға ярамай: ҡалъяны көтөп ятып түгел, ә йолҡоп алып ҡабыу заманы хәҙер!

-- Тимәк, йыртҡыстарса эш ҡылырға кәрәк, тиһегеҙ инде?

-- Юҡ, джентельмендәрсә.

-- Америка гангстерҙары кеүекме?

-- Америка түгел беҙ!

-- Һеҙҙең сослоҡ тап шуға тартмаймы һуң?

-- Юҡ, беҙҙең сослоҡ башҡаса.

-- Шулай ҙа ул сифат беҙгә битәбиғи.

-- Ә беҙ тәбиғи итербеҙ!

-- Кем теләр икән быны?

-- Майлы ҡалъянан телем – теләгәнгә ҡарап ҡына йөрөмәй.

-- Тимәк, шул сослоҡто беҙҙәргә көсләп таҡмаҡсыһығыҙ?

-- Ниңә көсләп? Юл ғына ҡуйығыҙ – үҙе ялғанып үрәсәк. Ҡырағай алмағасҡа ашлап-ялғаған груша ботағы кеүек.

-- Ялғауығыҙ ятбауыр – шайтан таяғы булып сыҡһа?

-- Ниңә башҡа халыҡтарҙа һис тә ятбауыр түгел?

Ҡарыулашыусылар, бармаҡтарын бөкләй-бөкләй, әлеге сослоҡ сифатын иш иткән донъяға билдәле халыҡтарҙың исемдәрен атап-һанап китәләр. Аҙаҡтан ошо һәләкәтле һорау килтереп сәпәлә:

-- Әллә улар ҡырағай -- беҙҙән түбәнерәк баҫҡыста тора тип беләһегеҙме? Мәҙәниәтһеҙ тимәксеһегеҙме?

-- Юҡ, тимәйбеҙ.

-- Бәй, шулайғас? Беҙҙең халыҡ уларҙан ни яғы менән ҡайтыш? Ниңә башҡорт тап шуларҙай сос булырға, өҙөп-йолҡоп алырға тейеш түгел? Башҡалар өсөн тәбиғи сифат ниңә беҙгә битәбиғи? Донъяла улар – күпселек, шуға күрә беҙҙәргә лә донъя кимәлендә фекер йөрөтөргә кәрәк!

Ошо урында ике яҡтың да фронт һыҙыҡтары юйылып, һөжүмселәр бер-береһенең сафтарына үтеп инеп, дөйөм буталыш китә. Берҙән-бер баҫалҡы тауыш ҡына, ҡая кеүек ҡалҡынып, ҙур ышаныс менән һығымта яһай:

-- Юҡ, егеттәр, ул донъяның кимәле бында урынһыҙ. Масштабҡа һыймаған дәүмәл бит ул халыҡ. Халыҡҡа битәбиғи сифат – кешелеккә лә һис тәбиғи түгел ул!

-- Дөрөҫ, халыҡ ул үҙе сифат! Сифаттарҙың сифаты! – тип ҡушыла янындағыһы. Фәхерниса был икәүҙең береһе – Рәхимйән, икенсеһе Йәмил икәнен белә, сәмләнеп, фекерҙең үсешен көтә. Әммә бәхәссе ике яҡ был табышты, төптө иғтибар итмәй, аяҡ аҫтарына һалып тыныс ҡына тапап үтә; төп яуаптың, сәтләүек эсендәгеләй, шул йөмләгә йомолғанын баштарына килтереп ҡарамайҙар. Фәхернисаға үкенес тә, ауыр ҙа был: ниңә һаман бер балыҡ башын сәйнәргә? Донъя гармонияһына үгәй килмәҫтәй йәтеш итеп халҡыбыҙ үҙ еренә, үҙ күгенә, үҙ күңеленә хас иң ҡәҙерле сифаттарҙы һайлап-һаҡлап ҡалдырғанын, артабан үҫтергәнен, теге йә был сифат уға етешмәй тип, йәки артыҡ тип ғәйепләү – быуынһыҙға бысаҡ салыу икәнлеген, әйтерһең дә, белмәйҙәр...

Шулай ҙа был ваҡиға ла Фәхерниса ҡарашында Ренардтың күркәм абруйын һындырманы, киреһенсә, юғарыраҡ күтәрҙе генә. Телдәрҙе тибрәтерлек көскә эйә икән, тимәк, унда нимәлер бар, тимәк, ул – күҙ күнеккән ваҡ-сыбарлыҡтан өҫтөнөрәк, мөһәбәтерәк, тип уйланы ҡыҙ. Ысындан да: Ҡояш тиклем Ҡояштың нурҙары ла, тура баҡһаң, осло уҡтай ҡаҙалмаймы ни күҙҙәргә? Үҙенең ошо уйҙарында нығынып, Ренард һынын бөтәһенән өҫтөн ҡуйып, баяғы ҡарыулашҡан Рәхимйәндең һөйләмендә лә бәндә күҙенең Ҡояшҡа ҡарата ҡарыуы һымаҡ ваҡ бер ғиллә боҫоп ятмаймы икән, тип тә уйлай ине Фәхерниса...

## 3

Күрше Химия институтынан килеп йөрөгән өндәшмәҫ һәм оялсан егет Рәхимйән менән танышып китеүе сәйер ҙә, мәрәкә лә башланды. Үткән йәйҙең йәмле көндәре ине, көндәгесә эш бүлмәһендә машинкаһын йырлатып ултыра ине ул, яңыраҡ ҡына урынлашҡан сағы ине. Эшкә ағылыусы ағай-эне бирәһе сәләмдәрен биреп, комплименттарын тиреп, таралышып бөткйне. Тәрән эшсән тынлыҡ баҫҡайны бинаны.

Ошо һил мәлдә коридорҙа яңы бәндә пәйҙә булды. Килеүсе, бүлмә ишегенең ярым ҡыҫыҡ тороуын шәйләп, буғай, яҡын юламайынса ғына, әкрен генә һуҙып өндәште:

-- Мөхлисә-ә-әү! Ренард бармы-ы-ы?

-- Мин Мөхлисә түгелә-ә-әү, -- тине Фәхерниса, тегенең үҙе шикелле һуҙып. – Ренард барә-ә-әү, үҙ бүлмәһендәлерә-ә-әү!

Ренардтыҡы һымаҡ уҡ һимеҙ күн портфель тотҡан урта буйлы, яҫы яурынлы, һоро костюмлы мыҡты егет килеп керҙе бүлмәгә. Түңәрәк һары йөҙлө, яланбаш, һарғылт-ҡоңғор “терпе” сәстәре тырпайған, сынаяҡ ауыҙындай ҙур ҡара тирәсле күҙлеге һүрәттәге гөбөргәйел күҙҙәрен хәтерләтә. Үрә баҫып, Фәхернисаға төбәлеп ҡатып ҡалды.

-- Аб-ба-а-а! – тине тағы. Күҙлеген һалып, эре шаҡмаҡлы ҡулъяулығы менән ҡабаланып һөрттө, тағы ҡабаланып кейҙе. – Сәсме был, әллә өйәңке башына һарылған ҡуйы-ҡабарынҡы үркән -- хуш еҫле ҡомалаҡмы?!

Фәхерниса сәйерйәнде ҡарап ултырҙы-ултырҙы ла, түҙмәй, сылтыратып көлөп ебәрҙе. Тегенең күҙлеге төшөп китте, ергә еткертмәй тота һалып, өндәшмәй сығып тайҙы.

Күп тә үтмәй, Ренард менән ҡушарлап килеп инделәр. Күҙлекленең ҡыланыштары хәтһеҙ олпат, ҡиәфәте һиммәтле, тик ул һаман бер ситтәрәк, тын да алмай, Фәхернисаны күҙәтә. Ҙур түңәрәк тулы йөҙө, күҙлеге, тырпай сәсе менән май сүлмәге янында ултырған бик тәүфиҡлы бесәйҙе хәтерләтеп, ҡыҙҙың көлкөһөн килтерҙе, әммә тыйылып ҡалды.

-- Һылыуҡай, матурҡай, тағы ла бер ҡат һаумы? – тине Ренард, өҫтәлгә терәлә яҙып, уҙамандарса баш эйеп. Ситтән килгән әшнәһенә был бүлмәлә ни тиклем үҙ кеше булыуын, хатта ҡыланып алыу ҙа уның өсөн сүп тә түгеллеген күрһәтергә теләгәндәй, күнегелгән хәрәкәт менән ҡыҙҙы яурын башынан ҡыҫмаҡланы. Күҙлекле һулышын туҡтатты, күҙҙәрен серт-серт йомоп күҙәтте быны, хатта, сыҙай алмай, тыпырсынып уҡ ҡуйҙы. Ят кешенең нығ төбәлеп текләүенән Фәхернисаға уңайһыҙ, оят булып китте, ул бығаса үҙе лә белмәгән ҡырыҫлыҡ менән алабарман аспиранттың ҡосағынан һыпырылды.

-- Фәхернисаҡай, матурҡай, таныш булығыҙ: был минең дуҫым Рәхимйән, -- тине Ренард, ҡыҙҙың сикәләре уттай яныуына һис кенә лә иҫе китмәй. -- Беҙ уның менән бер микрорайонда үҫтек, бер класта уҡыныҡ, ҡулға аттестат алғас ҡына юлдарыбыҙ айырылды: ҡарттар әйтмешләй, мин ошонда әҙәм тигән йән эйәһенең эске донъяһын өйрәнеүҙе мәғҡул күрҙем, ә ул химия диңгеҙендә ҡолас ташлап йөҙөп китте. Шулай ҙа эт йән ул Рөхимйән: илдән алда кандидатлыҡты яҡлап, ҡатырға тышлы дипломды кеҫәһенә бөкләп һалып та ҡуйҙы, -- метан, пропан, фенол, радикалдар – психология түгел шул ул, әпсәһен эт тешләгере, ҡулға еңелерәк бирелә, -- тип өҫтәне Ренард һәм ул ошоно әйткәнендә Фәхерниса уның күҙҙәре әллә ниндәй ҡомһоҙ ут менән тоҡанып, ирен мөйөшөндә дуҫына ҡарата үртле көнләшеү билдәләре саҡҡыланғандай тойҙо. Әммә Рәхимйәндең быға һис кенә лә иғтибар итмәй ғәмһеҙ йылмайып тороуынан эсе бошоп, әйтә ҡуйҙы:

-- Эйе, шулайҙыр шул. Метан, пропан тигәндәрең үҙенсә -- үҙең бында сарылдатып терелә тунаған сысҡан, тәлмәрйендәр түгелдер шул...

-- Абау, ниңә уҫал тешләшәһең, һылыуым? Фән хаҡына, кешелекте ҡотҡарыу хаҡына эшләнә бит ул эштәр!

-- Ярай инде, алайһа. Танышайыҡ дуҫың менән! – Рәхимйәнгә һонған ҡулын уның усында юрый оҙаҡ ҡалдырып, артыҡ иғтибар биреп күреште, ҡунаҡ егет ысҡындырған бер-ике шаярыу ишаратына кинәнгәндәй, бүлмәне сыңратып көлдө.

-- Таныштыр ҙа таныштыр, тип йәнемә тейҙе бит, әй, -- тине Ренард, һис бер нәмә булмағандай, алсаҡ йылмайырға тырышып. – Дуҫ хаҡына ни генә эшләмәҫһең, хатта бер

таба тулы һыуҙы ла кисеп сығаһың... Тик ҡара уны, ҡыҙый, кирегә бөткән был уҫал бәндә ҡороҡлай күрмәһен үҙеңде! Сөнки ул...

-- Ҡуйсәле! – тине Рәхимйән, йөҙө сөгөлдөрҙәй ҡыҙарҙы. – Һин бит ***быны*** әйтмәҫкә һүҙ биргәйнең!

-- Нимәне? Ғашиҡ булғаныңдымы? – Шарҡылдап көлдө Ренард. -- Әллә, таныштыр, тигәнеңдеме?

Ҡыҙарынған Рәхимйән артына әйләнде, бер урында тапанды.

-- Бөттө-бөттө, Ҡояш күрҙе – Ай алды! – тине Ренард. – Һин нимә, әллә: “Бөгөн эш бөткәс тә өсәүләп киноға барайыҡ, мин үҙем әйтергә ҡыймайым, түбәһенә ҡомалаҡ һарылған шул ҡыҙығыҙҙы ла саҡыр әле?” – тип теңкәмә тейеүеңде лә әйттертмәҫкә итәһеңме?

-- Шулаймы ни әле? Ә ниңә егет үҙе өндәшмәй? – тине Фәхерниса, кинәт йөрәге тулҡынып. Рәхимйән, уғата ныҡ буҙарынып, маңлайына бәреп сыҡҡан тирҙәрен ҡулындағы йомарлап тотҡан ҡулъяулығына һөрттө.

-- Ысынлап та, ә ниңә ул үҙе әйтмәй әле? – Ренардтың ирен мөйөшөндә баяғы үртле көнләшеү ғәләмәте ҡатыш йәшерен тантана саткыһы һыҙатланды. Рәхимйәндең ҡойолоп төшөүен күргән Фәхерниса уның аҡланыр өсөн асҡан ауыҙынан өн сығыуын да көтмәй, ашығыс-алсаҡ өндәште:

-- Ундай саҡырыу булғас ни, ниңә бармаҫҡа, ти әле? Иртәгә ял бит. Етмәһә, үҙемде генә түгел, ә бергә эшләгән бынауы аспирант ағайым менән ҡушарлап саҡыра кеше! – тине. Был юлы Ренард ҡуҙға баҫҡандай булды...

Юл буйындағы кафеға һуғылып тамаҡ ялғағас (Рәхимйән ныҡ йомартланды), күңелдәре күтәрелеп, билеттары алдан уҡ алып ҡуйылған киноға киттеләр. Фәхернисаның урыны ике егет араһына тура килеп, ут ҡапҡандай иләҫ-миләҫләнде эске донъяһы, ә шулай ҙа фильмде түҙемлек менән ҡарап бөтөрҙө.

Кинотеатрҙан улар әсеүташ ҡапҡандай йөҙҙәре һытылып сыҡты. Ҡарағандары – йәнгә аҙыҡ бирмәгән, яңғырауыҡ фразаларға ҡоролған – яҙыусы менән режиссерҙың “ҡарынында” уҡ үле тыумыш бер нәмә ине. Сәғәт ярым буйына экранда буш ҡыуыҡ һыҙғырып торғандай ҡалды тәьҫир. Бөркөү залдан арынғас, дөйөм ағынға ылығып, яҡындағы баҡсаға ыңғайланылар; күкрәк кирә һулыш алып, сәскә еҫтәре мул бөркөлгән ағас араларынан әйләнделәр. Әммә өсәүҙең һүҙе һис тә берекмәй – ипһеҙ тоташҡан өҫтаған бына-бына тарҡалам тип кенә тора... Шулай итеп былар был йәмле кисәлә, өҙөлөргә әҙер нәҙек эскрипкә ҡылдарылай, бер моң да сыңрата алмай, өнһөҙ-тынһыҙ, бер-береһен йүнкетеп ҡыҙырҙылар. Фәхернисаның һул яғынан Рәхимйән, уңынан Ренард ҡултыҡлағайны, икеһе лә ниңәлер бик тә күшеккән, төҫһөҙләнгәндәй күренде, мәғәнәһеҙгә тағылған гер таштарылай тойолдо...

Шау-электр нурына ҡойонған майҙансыҡҡа сыҡтылар: көллө тирә-йүн сағыу сәскә, ә аллы-гөллө урталыҡта, дүрт яғынан прожектор менән тос яҡтыртылып, түңкәрелгән мискә һымаҡ түңәрәк-тәпәш постаментта, ҡулын күккә һоноп күрһәтеп, түңгәк умарталай йыуан һәм килбәтһеҙ бетон һын – “даһиҙарҙың даһийы” һерәйеп тора. Балта менән сабып яһалғандай тупаҫ скульптуранан алынған тәьҫорат, баяғы мөсһөҙ кинофильмдекенә ҡушылып, Фәхернисаның күңелен уғата болғатты: “Ниңә бер төрлө һөйләйбеҙ ҙә икенсе төрлө эшләйбеҙ? Көллө тормошобоҙ шулай бара бит!” – тигән йәмһеҙ уйҙар килде башына. Шуны ғына көткәндәй, Ренард һәйкәлгә бармаҡ төртөп өндәште:

-- Күрәһегеҙме сәкмән кейгән бынауы олпат алпауытты? Ҡалай тора әле! Әйтерһең дә, имениеһының бейек болдорона сығып баҫҡан да батрактарына күктәге ожмахты күрһәтә...

-- Ренард, нисек телең бара? – тине Фәхернисаб саҡ тыйылып.

-- Нимә, әллә телде тешләргәме? Уға ҡалһа һин үҙең дә, бына Рәхимйән дә, анауы йәшел эскәмйәләрҙә ултырған ағай-эне лә -- бөтәбеҙ ҙә шулай уйлайбыҙ бит, тик йәшерәбеҙ генә. Ә мин ярып әйтәм!

-- Ҡасан ғына яра башланың әле? Өйөңдөң бер мөйөшөндә Сталин тәреһе торғанын, шуға табынып йәшәгәнеңде оноттоңмо? – Ауыҙ йырып тыныс ҡына иҫкәртте дуҫына Рәхимйән. Етдиләнеп: – Егерменсе съезд тигәс тә... егетлек түгел был! – тип өҫтәне.

-- Ә һеҙҙеңсә тел тешләп йөрөү егетлеккә керәме?

-- Ҡысҡырып әйтмәй торған нәмәләр ҙә бар бит...

-- Хатта егерменсе съезд да изге нәмәләрҙе изге тип билдәләй... – тине Фәхерниса.

-- Догматиктар һеҙ! – Ҡыҙҙы Ренард.

-- Һин үҙеңде революционер тип һанайһыңмы?

-- Һанамайым. Ләкин көндәлек тормошобоҙҙа хирург бысағы кәрәклеген дә беләм.

-- Ярай ҙа ул бысаҡ таҙа ҡуллылар ҡулында булһа... Һинең...

-- Нимә “һинең”?! -- Ренард дуҫына фекерен ослап ҡуйырға ирек бирмәне, ауыҙынан өҙөп алды. – Бының менән нимә әйтергә теләйһең?!

-- Теләмәйем!

Туҡтанылар, Фәхернисаның беләктәренән ҡулдарын ысҡындырҙылар. Йөҙгә-йөҙ ҡаршы тороп, бер-береһенә әтәстәрҙәй осоп-ҡунырға уҡталдылар шикелле.

-- Етте! – тине Фәхерниса, икеһен ике яҡҡа этәреп. – Ҡайтырға ваҡыт, егеттәр. Игелегегеҙ өсөн рәхмәт, хушығыҙ!

-- Бәй, оҙатып ҡуяйыҡ!

-- Кәрәкмәй. Һеҙгә бынан тура, ә миңә теге яҡҡа. Атайым бахыр әйтмешләй, аҙғын мал түгел: үҙ аяғым менән дә ҡайтам өйгә. Бик тә булмаһа бер-берегеҙҙе оҙатышып ҡуйығыҙ, дуҫлығығыҙ селпәрәмә килмәҫе борон!

Егеттәр томһайып тороп ҡалды.

## 4

Ренард Пушкин урамы осондағы Мосолман зиратына яҡын урынлашҡан үҙҙәренең ағас өйөнә әйләнеп ҡайтҡанда, ятбауыр атаһы Кипарис ҡарт йоҡламаған – алғы бүлмәлә шау электр яҡтыһында яланғас өҫтәлгә бормас ҡапҡаслы йәлпәк шешәһен ҡуйып, уйға сумып, көтөп ултыра ине. Һәленке сал мыйыҡтарын күреү менән үк, теңкәһенә тейеп екерҙе:

-- Ниңә тексәйҙең?! – Зал аша үҙ бүлмәһенә үтеп китергә ашыҡты.

-- Улым, туҡтасы!

-- Алкаш! Какой я тебе “улың”?

-- Улым, егерменсе съезд үҙҙы бит... бынауы тутыҡҡан тәрене инде алып ташларға, утҡа яғырға ине... – Стеналағы ҡыҙыл рамға төртөп күрһәтте.

-- Дурак, күҙең аҡшайҙымы әллә? Тәре түгел, ә бөйөк атайыбыҙ Иосиф Виссарионович Сталин һүрәте ул.

-- Үҙем алып ырғытамын, алайһа!

-- Кипарис! Тик ҡағылып ҡына ҡара – ҡулыңды һуғып һындырырмын, үҙеңде сүплеккә сығарып ырғытырмын! – Ишектәрҙе шарт-шорт асып-ябып, төптәге үҙ бүлмәһенә бикләнде, ҡартты дер-ҡалтыратып, ерҙе-күкте тетрәткес сит ил музыкаһы дөһөрләне. Үҙенең Сәйфелмөлөк тигән исемен дә онотҡан, Кипарисҡа әүерелгән атай кеше мышҡылдап иланы ла, күҙҙәрен йырсайтып көлөп торған Сталинға ҡул һелтәп,

бормас ҡапҡаслы шешәһен алып ишек төбөндәге иҫке, сүс-сүбек яҫтауы араһынан тутыҡ пружиналары төртөп сыҡҡан диванға ҡыптыр тунын бөркәнеп һуҙылды, ятҡан еренән һәрмәнеп утты һүндерҙе. Ҡараңғынан Сталин уға бармаҡ янай һымаҡ ине. Кремлендә көнө етеп дөмөккәненән һуң нисәмә йылдар үтһә лә, партияның атаҡлы йыйынынан һуң портреттары алып ташланып, шаҡшы исеме мең ләғнәттәргә күмелһә лә, Ренард улы уны бер генә ниәт менән ҡурсалап тота – Кипаристың йәненә тейһен, төштәренә кереп язалаһын...

Был портреттың тарихы аянысллы.

Башҡортостан хөкүмәтенең ябай ғына, әммә намыҫлы һәм егәрле хеҙмәткәре булып етешкән Сәйфелмөлөк уҙаманды 1937 йылда шул ҡәһәр һуҡҡыры Иосифтың фарманы буйынса төндә килеп ҡулға алғастары, хәләл ефетенә лә сират еткәндер – ҡанундар ҡаты ине. Әммә Рәшиҙәһе аҡыллы булып сыҡты – ҡыҙыл тирәс фуражкалыларҙың Сәйфелмөлөк өҫтөнә өйгән бөтә гонаһтарын дөрөҫләп ҡул ҡуйҙы (хәйер, тештәре һуғып һындырылған, һыңар ҡолағы өҙөлгән Сәйфелмөлөк үҙе лә ҡул ҡуйып раҫланы уларҙы). Өҫтәүенә, тәфтишсе кабинетындағы Сталин тәреһе төбөнә тубыҡланып, халыҡ дошманы булған иренән ваз кисте, гәзиттәргә ләғнәтле мәҡәлә бирҙе. Өйөнә Сталин тәреһен алып ҡайтып элде. Шул арҡалалыр, моғайын, уны ла, Сәйфелмөлөк алынғас уҡ тыуған улын да "халыҡ дошманы" итеп алып китмәнеләр, иҫән-имен ҡалдырҙылар. Үҙ ихаталы иркен генә ағас өйҙө лә тартып алманылар. Әсә кешегә теләгән урында эшләргә, атаһын белмәҫкә тыуған малай Ренардҡа һәүетемсә үҫергә, уҡырға рөхсәт ителде. Ҡатынының ошо зирәклеге өсөн аҙаҡ ҡыуанып бөтә алманы Сәйфелмөлөк.

Ниңәлер уны атманылар – мәңгелеккә ҡатырға, тип, һалҡын тарафтарға олаҡтырҙылар. Ырыстан вагонында үлер сиккә етеп интегеп барғанында ул Рәшиҙәһенә ҡош телендәй генә шиғри хат яҙып, тәҙрәнән ташлап ҡалдырҙы; рәхмәт төшкөрө бер тимер юлсы мәрйә шуны табып алған да, конверт эсенә һалып, күрһәтелгән адресын күсереп яҙып, үтеп барыусы почта вагонының йәшнигенә төшөргән. "Кипаристар сәскә атҡан саҡта..." – тип башлана ине шиғри хат...

Иосифтан һуң килгән юғары түрәләр сәйәси тотҡондарҙы ireккә сығарғас, астан киҫелеп Өфөһөнә саҡ ҡайтып еткән Сәйфелмөлөк, икеләнеп тормаҫтан, зират янындағы йәнгә яҡын ағас өйҙөң ишеген тартып асты, тетрәнеүҙән шашынып ҡалған, таушалып бөксәйгән ҡатыны һәм ҡолғалай буй еткергән улы артындағы Сталин тәреһен селпәрәмә килтерергә киҙәнгәйне, ҡулын кире төшөрҙө: ырам быялаһы аҫтындағы Иосиф менән бер ҡатарҙан уның әллә ҡасан Себер станцияһында яҙып ташлап ҡалдырған, "Кипаристар" һүҙе менән башланған шиғырлы хат киҫәге тора ине...

Йөрәген әсенеү ҡатыш шатлыҡ бөрөп алды: Рәшиҙәкәйе көткән, нисәмә-нисә йылдар буйы һағынып-һарғайып көткән! Ҡосаҡлашып илаштылар ҙа ҡабатлап донъя көтөргә керештеләр.

Ундайҙарҙы бер кем дә өнәмәй ине, үҙе лә әүәлге тос хеҙмәткәр түгел шул. Кәнсәләрҙән кәнсәләргә ҡаңғырып, тибелеп йөрөй торғас, зиратта ҡәбер ҡаҙыусы булып урынлашты, ҡатынын илтеп күмгәнсе шунда эшләне. Себерҙән үк асы хәмергә бешегеп ҡайтҡан уҙамандың бында ла ауыҙ һалыуы: ҡәбер ҡаҙып эсәләр ҙә мәйет күмеп баш төҙәтәләр... Лаяҡын иҫереп ҡайта ла бахыр Рәшиҙәһен битәрләргә, сәсенән һөйрәкләргә тотона: ниңә миңә нахаҡ бәләләр яҡтың, ниңә кире ҡаҡманың?! Ниңә улыңды миңә ҡаршы аяҡландырҙың?!.

Ул саҡ инде институтта уҡып йөрөгән Ренарды, ысынлап та, уның ҡәбер ҡаҙыусы абруйынан, алкашлығынан ерәнеп биҙәрләнә, атайым тип таныманы, иптәштәре алдында

ҡырҡа баш тартты. Әсәһен сәсенән һөйрәкләгән сағында ҡул күтәреп, уны һуғып осорҙо ла Сталин һүрәте ҡушаһындағы шиғри хатты алып йыртып ырғытты...

Рәшиҙәһе үлгәндән һуң инде нисәмә йылдар үтте, ә улы һаман шул көйө...

“Их Рәшиҙәм, Рәшиҙәм, үҙем өйҙә булманым шул, Рәшиҙәм!.. Берҙән-бер малайыбыҙҙы, ҡарт көнөбөҙҙә таяныр, арҡа терәге буласаҡ алтын ҡаҙығыбыҙҙы үҙеге серек өйәңке итеп үҫтергәнһең икән шул, Рәшиҙәкәйем!..”

Зират эшендә һуңғы ҡәберен ҡаҙып, ҡатынын ерләп ҡайтҡанынан һуң, Сәйфелмөлөк ике аҙна буйы баш ҡалҡытмай эсте, кире әйләнеп барманы. Урам һепереү эштәренә йәтешләнеп көйләнде. Дворниктар ҙа ҡәберселәрҙән кәм түгел – шешә менән дуҫлыҡтары көр ине. Йорттар идаралығының береһенән һөрһәләр, икенсеһендә ҡушҡуллап алалар, сөнки эсмәгән дворник юҡлығы яҡшы мәғлүм; быны кадрҙарға ҡытлыҡ йылдан-йыл арта ғына...

Сәйфелмөлөк шулай байтаҡ йылдарын сарыфлағас, улы аспирант булып теркәлгән ғилем йортоноң ихатаһын бағырға ялланды ла тамам төпләнеп ҡалды, сөнки, күрәләтә эсһә лә, вазифаһына тап төшөрмәй. Ренарды менән дә төплө һүҙ ҡуйышҡандар: һин – мине, мин һине белмәйем, вәссәләм! Шул шарт әгәр боҙолһа, өйҙән ҡыуып сығарырға янап ажғыра малайы...

Йәйен-ҡышын эше теүәл барғанлыҡтан, бындағылар барыһы ла тиң күреп яраталар, ҡуйынында бормас ҡапҡаслы шешә йөрөтөүен дә һис күрмәйҙәр, хатта башы сатнаған ҡайһы бер шуғыраҡтары йәнәшәһендә баҫып тороп һемерешеп тә китәләр... Көндөҙҙәрен һауа һуларға сыҡҡандарында бер килке гүзәл ханым һәм туташтар ҙа, сирень ҡыуағы артында ышыҡланып, уның ҡасандырғы зәңгәр диңгеҙ буйында сәскә атҡан мәңге йәшел кипарис төбөндәге йәшел эскәмйәлә дөрләп ҡабынған йәшлек мөхәббәте тураһындағы шиғырын йотлоғоп тыңлайҙар. Шундайҙарҙың Ҡырымға ялға киткән береһе бер ваҡыт терһәк буйлыҡ ҡына кипарис үҫентеһе алып ҡайтып биргәйне, Сәйфелмөлөк Рәшиҙәһен күҙ алдына килтереп илап ебәрҙе. Кипаристы өйөнөң ихатаһындағы иң ҡәҙерле урынға – Рәшиҙәһе менән икеһенең элекке йоҡо бүлмәһенең (хәҙер ул Ренард кабинеты) тәҙрә ҡаршыһындағы йомарт тупраҡҡа ултыртты. Йәйҙәрен төбөн ҡоротмай, ҡыштарын өҫтөнә толь һәм ҡарҙан йылы ҡыуыш өшәләкләп, тәрбиәләп үҫтерҙе, тәҙрәне аша ҡарарлыҡ буй еткертте. Дөрөҫ, һуңғы осорҙа кипаристың ғүмере ҡул осонда тора, сөнки Ренарды, тәҙрәне ҡаплай, тип битәрләүе етмәгән, шуға өҫтәп: “Әсәйемдең Сталинына ҡул күтәрһәң, ағасыңды ҡырҡып ташлайым!” тип йәнде ала...

Хәҙер инде Сәйфелмөлөктөң ысын исемен хатта яҡын күрше-күлән дә белмәй, моғайын, үҙе лә хәтерләмәй – гелән генә Кипарис тип йөрөтөүҙәренә күнеккән. Кипарислығы йәненә үк һеңешкән ҡарт өнөндә лә, төшөндә лә баяғы зәңгәр диңгеҙ, сәскә атҡан йәшел кипарис төбөндәге йәшел эскәмйә менән илереп йәшәй. Өйө алдындағы ошо үҙе ултыртып үҫтергән йәшел кипарис төбөнә йәшел эскәмйә ҡуйып, иртә-кисен шунда сығып ултыра, эргәһендә зәңгәр күҙле, һары толомло Рәшиҙәһен тойоп тәрән хисләнә, Рәшиҙәһе менән йөрәкһеп һөйләшә...

Бер генәһенең, ир ҡорона кереп еткән малайының, шундайын да кешелекһеҙ булыуына төшөнөп бөтә алмай ҡарт: ни сәбәп? Кем ғәйепле?

Рәшиҙәһенең үлеренә бер йыл ҡалғас әйткәндәре төшә иҫенә: “Үҙең ҡаты бәғерле бит – шунан килә ул. Сәсемдән һөйрәп аҙмы туҡманың мине?!”

Малайының әүәлге сәйер ҡылыҡтарын күрше-күлән һөйләне: ҡорттай ғына сағында уҡ себен аулап, тараҡан тотоп, ҡанаттарын, боттарын ботарлап ләззәтләнде; ҡалҡына биргәс, ямғырҙан һуң асфальтҡа сыҡҡан селәүсендәрҙе тапап иҙҙе, тәлмәрйендәрҙе тереләтә ботарланы; ҙурайғасыраҡ ташландыҡ бесәй балаларын язаларға кереште...

Шуныһы ҙур фажиға: ғалимлығын да психтарҙы кире дүндерә торған, шуның өсөн гонаһһыҙ тәлмәрйендәрҙе, йорт ҡуяндарын тереләтә киҫкеләп тәжрибә туплаусы ғилем төйәгенән башлаған...

Яңыраҡ ҡына Мәскәүҙең абруйлы бер гәзитендә "В защиту подопытного кролика" тигән ҙур мәҡәлә донъяға фаш ҡылынып, ғалим-ғөләмә шау итте, һөйләгәндәре шул булды. Унда килтерелгән миҫалдарҙың: "Вот читал я недавно труды одной конференции. Кровь стынет! В одном докладе пишется, как кроликов бросают в кипяток, в другом – как обливают спиртом и поджигают"[3], тигән береһен уҡып: "Беҙ бит был... Ренард!" – тигәндәре Кипарис ҡарт ҡолағына ауырттырып салынды...

Кипарис ҡарт һулҡылдап күҙҙәрен йома ла үткәндәрҙең тулҡынына күмелә. Әммә ауыр лагерь йылдары түгел, ә бәхетле йәшлеге, сәскә атҡан мәңге йәшел кипарислы зәңгәр диңгеҙ буйы керә төшөнә. Теге бәхетле заманда хөкүмәт биргән юлланма менән барғайны ул Ҡырымға ял итергә. Яр ситендә сәскә атҡан йәшел кипарис төбөндәге йәшел эскәмйәлә моңайып ултырған оҙон һары толомло, зәңгәр күҙле Рәшиҙә исемле һылыу менән танышты, үлерҙәй ғашиҡ булышып, Өфөгә алып ҡайтты уны...

Ҡарттың ҡолағы төбөндә шаулап тынғыһыҙ диңгеҙ сайпыла, гәлсәр тулҡын сылтырауҙары онотолмаҫ шиғыр булып ҡойола:

...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...
...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...

Их, кире ҡайтарып алаһы ине үткән ғүмеркәйҙәрҙе!..

## 5

Фәхерниса был төндә йоҡлай алманы.

Кисәнең шулай боҙолоуы өсөн ул бер юлы баяғы мәғәнәһеҙ фильмгә лә, егеттәргә лә асыулы ине. Шуларҙың бөтәһе, татлы күҙйәш булып, мендәр тышына һеңде. Ни өсөндөр күҙ алдынан Рәхимйәндең һуңғы минуттағы уға ҡарап аптырап-алйып ҡалған уйпат күҙҙәре, түңәрәк йөҙө китмәне. Ниндәйҙер тәрән һағыш, ялбарыу бар һымаҡ ине ул күҙҙәрҙә, оҙатыуын кире ҡағып дорфа айырылышҡанда. Китә биргәс, Фәхернисаның йөрәк башын йәшен уты ҡыйып алғандай булды, тик ул быны һиҙҙертмәне – елеп килгән таксиға ултырып һыҙҙы, ләкин юл буйынса тилереп ҡайтты. Һис ҡасан кисерелмәгән, үҙе татлы ла, әсенесле лә тойғо ине был... Ишекте астыртып ингәс, әсәһенең ныҡыуҙарын ишетмәҫ өсөн, баш ауыртыуына һылтанып, йәһәт кенә үҙ бүлмәһенә йомолдо. Ләкин шөкәтһеҙ кисереш китмәй ҙә китмәй. Ахырҙа ул Рәхимйәнде, рәүешен кәмһетер өсөн, онотор өсөн, мөмкин булған бөтә насар сифаттарға бәйләп күҙ алдына килтерергә тырышты. Ләкин уйлап сығарған һыҙаттар егеткә йәбешмәй ҙә ҡуя. Ахыры булманы, Ренард тураһында уйлай башланы, баяғы Рәхимйәнгә тағырға иткән кире сифаттарҙы берәм-берәм уға йәбештереп сыҡты. Ғәжәп! – быныһы уға шөйлә еңел бирелде. Шулай ҙа тәтәй егет күҙ алдында һаман тәтәй килеш ҡалды, әйтерһең, Рәхимйәнгә тип уйлап тапҡан йәмһеҙ һыҙаттар Ренарды, йәбешһә лә, һис кәмһетмәй – иш кенә килеп тора, бағыр балыҡ арҡаһында тырпайған ҡупшы энәләр кеүек, уны уғата ҡупшылатып ҡына ебәрә кеүек. Ошо ҡапма-ҡаршылыҡлы хистәрендә буталып, Фәхерниса теге ваҡыт институт коридорындағы күмәк һөйләшеүҙе иҫенә төшөрҙө. Хәҙер генә шундағы бәхәстең

---

[3] "Литературная газета" №37, 8 сентябрь 1971 йыл.

мәғәнәһен аңланы. “Сослоҡ” тип аталған оятһыҙлыҡ, һөмһөҙлөк тураһында бара ине, буғай, һүҙ. Берәүҙәр, юғары матдә фәлсәфәһенә таянып, шул сифатты Ренардта хуп күреп маҡтай, икенселәре кире ҡаға. Көллө халыҡты “сосландыртыу” хаҡында һүҙ ҡуйыра. Тыңлап торған Фәхерниса, ытырғаныбыраҡ, һөмһөҙ хуплауҙарҙы күңеленән кире һөргәйне. Ә хәҙер инде үҙе лә Ренард хаҡында: “Уға барыһы ла ярай, барыһы ла килешә!” – тип уйлап тора түгелме? Ҡайҙан килә бындай ҡапма-ҡаршылыҡ?!.

Фәхерниса бер-нисә көн ошо тойғонан арына алмай йөҙәне. Күпме генә ҡул һелтәргә, онотторға тырышмаһын, үс иткәндәй, ҡапма-ҡаршы тәбиғәтле егеттәрҙең икеһе лә һүрелмәй күңел күгенән. Береһе төнгө баҙлауыҡтай үҙенең ялтыр ҡабығы менән ҡарашыңды арбаһа, икенсеһе үҙебеҙ бар тип тә белмәгән ер-һыуға, һауаға хас ябайлығы менән йөрәккә яҡын... Ахыры, нишләргә белмәй, икеһенә лә бер тигеҙ асыу тоторға, һалҡынлығы менән һынарға булды. Бизмәндең бер башы ла баҫып төшмәҫкә тейеш...

Шул уй менән эшкә барҙы, эштән ҡайтты. Ренард һаман әүәлгесә күңелдәрҙе иретеп йөрөһә лә, уға һалҡын боҙ ҡатламы аша бағырға тырышты. Теге кистең иртәгәһенә Рәхимйән дә шылтыратып маташһа ла, Фәхерниса, ярты һүҙҙән өҙөп, телефон трубкаһын һалды. Артабан да сымдан уның тауышын ишетеү менән үк өндәшмәҫ булды. Кистәрен уны осратмаҫҡа эштән иртәрәк сығып тайҙы. Бара-бара был хәл ғәҙәткә керҙе.

Ситтән тороп уҡыу йылы осланып, ауыр имтихандар осоро килеп етте, баяғы ваҡ ығы-зығылар онотолдо. Инде ҡыҙҙың бар ваҡытын, зиһенен һынауҙарға әҙерлек ғәме йотто. Ул бөтә йәшлек дәрте менән уҡыуына ылығып, ҡасан был курсты тамамлайым, икенсеһенә күсәм, тип елкенеп, шуны Ҡояш ҡалҡырын көткәндәй көтөп, күңеле илке-һалҡы килеп йөрөнө. Эшкә лә тик аҙнаһына бер-ике тапҡыр ғына барып әйләнә, -- ҡанунға ярашлы өҫтәлмә ял бирелгән. Шулай болоҡһоп йөрөгәнендә, бер көн эштә күңелле бүләк ҡаршыланы.

Иртәгә ял тигән көн, күҙ сағылтҡыс сыуаҡ көн. Ял көндәрендә Фәхернисаны, бер түгел, ике ауыр имтихан көтә ине. Ғәмләнеп эш бүлмәһенә килеп ингәнендә, хуш еҫле гөлбаҡсаға сумдымы ни! – яҙыу машинкаһына һалынған сағыу сәскә бәйләме һүрҙе зиһенен. Атлығып килеп гөлдәрҙе күкрәгенә ҡыҫты, улары шундуҡ йәнләнеп, тырпырауҙары йөрәге менән ҡуша тибә башланы – сабырһыҙ өмөттәре һымаҡ үтә ярһыу, алһыу розалар ине! Күкрәгенә ҡосаҡлап тотҡан килеш, бүлмәне бейеп әйләнде; вазаға ултыртып маташҡанында, тертләтеп, артынан Ренард тауыш бирҙе:

-- Ҡайнарҙарҙан ҡайнар сәләм һылыуҙарҙың һылыуына! – Ҡәҙимге алсаҡлығы менән шарылдап, һә тигәнсе, яурын башынан ҡыҫмаҡлап та алды, ниндәйҙер шиғри юлдар менән осланы:

Сәләм әйтә һиңә гүзәл гөлдәрем!
Сыуаҡ булһын, тиҙәр, сафлыҡ көндәрең!

-- Ә?! – Диуана хистән күңеле томаланып, башы әйләнде: “Гөлдәрем, ти – уның роза гөлдәре!” Шул уйынан тамам алйып: -- Их, шундайын да гүзәлдәр! Рәхмәт, Ренард ағай! – тип ысҡындырҙы ысын күңелдән.

-- Ә? Ни өсөн рәхмәт? – тине кинәт төҫө үҙгәргән егет. Йәһәт иҫенә килеп, аҡылын йыйып алып, күҙен ситкә йәшерҙе. Быны ҡыҙ абайламаны, ифрат тулҡынланғайны.

-- Сәскә өсөн рәхмәт, --тине, күҙҙәрен тултырып ҡарап. Ҡапыл ғына күңеленә шик ҡунып: “Әллә яңылышаммы?” – тип тел осона килгәйне, Ренард уны, ауыҙ асырға ла бирмәй, ике ҡулынан эләктереп, иҙән әйләнәһенән өйөрөлтөп алып китте:

-- Сәскәләрҙән һинең үҙеңә рәхмәт, сөнки һин үҙең – сәскәләрҙең сәскәһе! – Күбәләктәй осортоп килтереп машинкаһы эргәһенә төпләндерҙе, өҫтәл ситенә ҡуйған быуаҙ портфеленән ҡалын ҡулъяҙмаһын алып, машинка өҫтөнә һалды ла йәһәт күҙҙән дә юғалды. Фәхерниса оҙаҡ ҡына, йөрәге ҡағып, иҫенә килә алмай ултырҙы...

Шул йөрәкһеүендә талпынып эштән ҡайтты, төн ултырып конспекттарын уҡыны һәм, иртәгәһен иң ҡурҡыныс кафедраға елеп барып, кәзә һаҡаллы ҡарт профессорға бер юлы ике имтиханды ла бынамын тигән итеп тапшырҙы. Бер-нисә көндән һуң иң аҙаҡҡы һынауҙан да ҡотолоп, уҡыу йылын осланы, уны, әйтерһең, әлеге алһыу розаларҙың тылсым көсө осортоп йөрөтә ине. Студенттар йылғаһында аудиториянан ағылып сығып, ҡайтырға ыңғайланы: өйҙә ут йотоп әсәһе көтөп ултыра бит. Тик ни тиклем ашҡынһа ла, эшләгән еренә яҡынлашҡас, боролмай түҙә алманы. Аяҡтары, үҙенән-үҙе, таныш гранит баҫҡыстан юрғалатты. Эш сәғәттәре булһа ла, бина эсе тын: ишек төбөндә вахтер апай ғына йоҡомһорап ойоҡ бәйләп ултыра.

-- Бер кем дә юҡ, бөтәһе Политмәғариф йортона шылды. Ғилми конференция! – тине ул, йылтыр-оҙон энәләрен сыҡылдатып. Шулай ҙа ҡыҙҙың йөрәге тулап һаман эскә -- үҙенең эш бүлмәһенә һөйрәй ине, унда үҙен бик ҡәҙерле нимәлер көтөп торғандай ине. Яңылышманы: бүлмәнән йөҙө алланып, йәне ҡояштай балҡып, бер ҡосаҡ дөрләү ялҡын-ут – ҡан-ҡыҙыл ҡәнәфер сәскәләре күтәреп сыҡты.

-- Әй-й-й, әйтергә лә онотҡанмын икән дә. Тегең! Баяғынаҡ килтереп киткәйне, исемен әйтмәҫкә ҡушҡайны, -- тине апай. Ләкин Фәхернисаға быны әйтеү кәрәк тә түгел – былай ҙа белә уны! Ҡолағына ла элмәй йүгереп үткәнен күреп, апаһы баш сайҡаны: -- Ҡара-ҡара, бигерәк буйлата ла инде егетең. Осоноп китә күрмә тағы!

...Фәхерниса әсәһенең ҡосағына ҡуҙҙай ҡыҙыл ҡәнәферҙәр менән ҡуша ҡапланды.

## 6

Күк йөҙөкәй тигән диңгеҙҙә, алсаҡ-көләс йылмайып, алтын-уҡа елкәндәрен елгә ҡабартҡан ҡайыҡ – һары Ҡояш күлкеп йөҙә, гәлсәр тулҡындарға алтын ишкәк-нурҙарын ҡаға.

“Сылтыр-р-рт! Сылтыр-р-рт!” – Сағыу алтын ишкәктәрҙән ҡупҡан гәлсәр тамсылар, селтерләшеп көләшә-көләшә, туҙғып үргә сирғылды. “Сөмбөр-р-рт! Сөмбөр-р-рт!” – Фәхерниса, гәлсәр диңгеҙ ҡосағына иҙерәп сумып барған килеш, уянып күҙен асты. Сентябрҙең уйсан-моңһоу Ҡояшы, өй алдында һуҙылып үҫкән һомғол йүкә тармаҡтары аралығынан тәңкә-тәңкә сәрпәкләнеп, ҡыҙ баш баҫып ятҡан аҡ мендәр өҫтөнә, унан, түгелеп-сәсрәп, шыма иҙән буйына тимгелләнгән. Йыбанып ҡына күҙ йомдо: Ҡояш йөҙгән гәлсәр диңгеҙгә ҡабат сумғыһы килде.

“Сылтыр-р-рт! Сөмбөр-р-рт! Сылтыр-р-рт! Сөмбөр-р-рт!” – Көмөш тәңкәләр көлләһә бергә тирелеп төшкәндәй булды, ҡыҙ йөрәге һурылып сығырҙай типте. Һары тәңкәләр сылтыраған ҡалҡыу күкрәгенән одеялын этәреп, тәҙрәгә боролоп баҡты. Көҙҙөң тәүге бәрәкәтле һулышына иҫереп алтын төҫөн алған һалма-һалма япраҡтар уйсан ғына талыға сыбыҡтарҙа. Быйыл йәй генә буй еткереп тәҙрә-быялаға морон төрткән бөрөсыбыҡ осонда алтындай сөм-һары ҡошсоҡ, бер ни белмәй ҡанат ҡағып, түгелеп һайрап ултыра. Онотолоп китеп талпынғаны һайын, сыбыҡ һығылып әүешә, шунан тағы, ҡошсоҡ сыңрау тәңкәләрен түгеп бөткәс, өҫкә ҡалҡына. Шул саҡта ҡошсоҡ ҡанаттары, бәйле килеш осоп китергә талпынған күбәләктәй, тәҙрәне тыпырлата. Әйтерһең, ҡыҙҙың йөрәге эсендә тыпырсынып тибә ул: “Йәшәү шундай хөр, йәшлек килә бер -- әйҙә, киттек, остоҡ зәңгәр киңлеккә, бикләмәйек теләктәрҙе ситлеккә!..”

Фәхерниса ошо минутта үҙен бер сихырлы көс, быҡаса тойоп күрелмәгән мәкерле көс, аңын томалап, көрмәп алғандай тойҙо, көтмәгәндә күҙ алдында Рәхимйәндең Ҡояш кеүек түңәрәк йөҙө төҫмөрләнеп, көллө тәне буйлап эҫеле-һыуыҡлы тулҡындар йүгерҙе. Шул түңәрәк йөҙҙө яҡынайтаһы, ҡосаҡлап алып, сыңғыр-сыңғыр алтын тәңкәләр сыңламыш күкрәгенә ҡыҫҡыһы килеүҙән сыҙай алмайынса илап ебәрҙе. Сыбыҡтағы һандуғас ҡапыл тынды, ҡанат ҡағыуҙан туҡтаны. Башын сәйер ҡыйшайтып, төртөк миңдәй тере күҙен ҡыҙҙың күҙҙәренә туп-тура төбәне. “Ила, ила, шунан башҡаһы килмәй шул һинең ҡулдан!” тиә һымаҡ ине ул. Ҡараны ла “пыр-р-р!” итеп осто ла китте, тере бөрөсыбыҡ осо оҙаҡ тирбәлеп торҙо. Фәхерниса, одеалын баш осонаса тартып, әсе ләззәтләнеү аралаш туйғансы үкереп иланы, аҡ мендәрҙе күҙйәшенә сылатҡас ҡына урынынан торҙо. Тик йөрәге, буйһонорға уйлап та ҡарамайынса, баяғы бөрө осондағы һандуғастай осоп китергә әҙер. Үҙен көсләп, тигәндәй, сәй эсергә ултырҙы, сынаяғын саҡ бөтөрөп ҡапланы. Әсәһе, үс иткәндәй, табындан тиҙ-тиләмә генә ҡубынырға йыйынмай: көҙ етеүе, ҡышҡылыҡҡа кәбеҫтә, ҡыяр, помидор тоҙлап ҡалдырырға кәрәклеге, шуның өсөн бөгөн ял көндә баҙарға сығып, өс литр һыйҙырышлы быяла банкалар, уларға ҡапҡас йәһәтләүҙең ни тиклем мөһим икәнлеге тураһында ҡаңғырта башты. Атаһы балыҡҡа киткән еренән боҙға уйылып үлгәндән һуң, ундай тоҙло нәмәләрҙе кинәнеп ашаусы булмаһа ла, әсәһе һаман элекке ғәҙәтен ҡалдырмай, Фәхерниса ла әүәлгесә тырышып уға булыша; тик ҡыш еткәс кенә был эштәрҙең аяныслы мәғәнәһеҙлеге асыҡланып, банка байлыҡтарын әсәһе күрше-күләндең әселәп йөрөгән ир-атына таратып бирә ине. Бөгөн дә сәй янындағы һүҙҙәрҙән шул күңелһеҙлекте күҙ алдына килтереп, Фәхерниса тиҙерәк тороп китергә ыңғайланы. Әсәһенең йомошон үтәп баҙар йөрөп ҡайтыу һылтауы менән ул өйҙән олаҡты.

Көн салт-аяҙ, тымыҡ. Тротуарҙы ҡаймалаған газон биттәре көҙгө ямғырҙарҙан ҡурпылап, ҡуҫҡыл-йәшел ҡыяҡтары йотлоғоп ҡояш имә. Йыбанып ҡына, уйланып ҡына, йәшел үлән өҫтәренә һары япраҡтар яуа. Асфальтте лә сағыу-һары тәңкәләр – йүкә япраҡтары биҙәкләп ята. Был ғүмерҙең ҡыҫҡалығы, йәшлек ярының артталығы хаҡында моңһоу хистәр уята. Фәхерниса, үҙе бараһы баҙар ҡапҡаһын әллә ҡайҙан уҡ ситләтеп үтеп, шаҡмаҡ-шаҡмаҡ балкон-тәҙрәле яңы йорттар сурайышҡан киң урамға бороллдо, бәләкәс саҡта ололарҙан ҡасҡандағыса елбер-елбер йүгереп китеүен үҙе лә һиҙмәй ҡалды: уға тәҙрәнән башын сайҡап әсәһе ҡарап ултыра төҫлө ине. Бара торғас, яңы йорттар сылбыры ҡырт ҡына өҙөлөп, ҡарт йүкәләр ҡанаты аҫтына ҡаҙ бәпкәһеләй сүгеп һыйынған ике ҡатлы өйҙәр теҙмәһе сиратланды. Һуғыштан һуң һалынған иҫке йорттар ине, һуңғы заман шыма панель ҡоролмаларҙан айырмалы булараҡ, ҡытыршы кирбес стеналары ҡәлғәнекеләй ҡалын, балкондары киң, тәҙрәләре бейек ине. Ишек алдында алма баҡсалары, таҡта келәттәр, ҡалын ҡалайҙан автомобиль гараждары бар. Шундай бер йортҡа етәрәк ҡыҙ туҡтаны, албырғанып, ян-яғына ҡаранды. Боролоп йүгерергә итте. Шул саҡ, биғәйни, баяғы һары һандуғастың миңдәй төртөк тере күҙе күренде, биғәйни, йәнен көйҙөрөп көлдө: “Әйттем бит, әйттем бит, ул һинең хәлдән килмәй, тип!” Фәхерниса, башын баҫып, барышын ҡыҙыулатты: “Ҡала буйлап мин йөрөмәҫкә тейешме ни, был урамға мин аяҡ баҫмаҫҡа тейешме ни?!” – тип үҙен ғәйрәтләндерҙе. Барғаны һайын йөрәге йышыраҡ тибә, һулышы ҡыҫыла, ике ҡолағы шаулап, биттәре уттай яна. Бына ҡапҡа тәңгәлендә ***уның*** тауышы ишетелде, Фәхерниса салҡайып китә яҙҙы. Инде һис ни белештермәй, һәләкәтенә табан йомолоп һикергән тәлмәрйен кеүек, таныш тауышҡа ынтылды, баҫҡаны һайын, табандарын ут көйҙөрә һымаҡ ине. Өҫтөнә таушалған һәлмәк костюмын кейеп, ҡолға буйлы бер ҡыҙыҡай менән сөкөрләшеп сығып килеүсе Рәхимйән, үҙ сиратында Фәхернисаны абайлап, ярты һүҙҙән туҡталды, күҙҙәрен ҙур асты.

-- Фәхерниса... һин?! Ҡайҙа киттең? – тине ул, ҡыҙҙың, иғтибарламағандай, һәүетемсә генә үтеп барыуынан албырғанып. Фәхерниса, ҡырт-туҡталып, боролоп ҡараны:

-- Ә... Рәхимйән? Был һинме ни?

-- Ял көнө бит, бына Лира менән сыҡҡайныҡ... – Егет, ары ни әйтергә белмәй, ҙур аҡ ҡулъяулығы менән күҙлеген һөртөргә кереште. Лира тигәне, ҡыҙыҡһынып, төймәләй түңәрәк күҙҙәре менән Фәхернисаның буй-һынын үлсәп тора ине. Фәхерниса ҡарашы менән тәүҙә уны көйҙөрөп, Рәхимйәнгә бороддо:

-- Ярай, бик матур ял итегеҙ. Һау булығыҙ.

-- Фәхерниса, туҡта, һин ҡайҙа? – тип өтәләнде Рәхимйән.

-- Ошо яҡҡа. Йомошом бар.

Лира кеткелдәп көлдө.

-- Ял көнө... – тине Рәхимйән. Яулығы менән бергә күҙлеген алға һоноп тотҡан килеш, балаҡтарын ялпылдатып, Фәхерниса янына йүгереп килде. – Был яҡта ниндәй йомош ул? – тине күҙлеген кейеп, ике күҙен мызылдатып. Лира ҡалын алһыу имнекле ирендәрен бүлтәйтте, Фәхернисаға зәһәр төбәлеп ҡараны. Фәхернисала ла был һөмһөҙ ҡолға буйлыны семтеп алыу теләге уянды. Егеттең иңенә һарыла биреберәк:

-- Бына һине эҙләп килгәйнем, ләкин буш түгел икәнһең! – тине. Рәхимйән, ниһайәт, иҫен йыйып, күҙҙәрен сырт-сырт йомдо, ахыр тултырып ҡараны:

-- Мин ни... мин хәҙер!

-- Рәхим аға-а-ай, әйҙә, тиҙерәк! – тип һуҙып өндәште һаман бер ситтәрәк торған Лира.

-- Бар, Лираңды зарыҡтырма, -- тине Фәхерниса. Рәхимйән, төҫө ҡасып, уның беләгенә сат-йәбеште:

-- Фәхерниса...

-- Нимә?

-- Әйҙә, киттек баҡсаға. Ҡара, көнө ниндәй бит! – Һылыуҡайы кире ҡағып ҡуймағайы, тигәндәй, тегеһенә ҡырт боролоп белдерҙе: -- Лира һеңлем, ғәфү ит инде мине. Диссертацияңды дүшәмбе көндә кафедраға килтер, бер арала ҡарап сығырмын, йәме?

-- Беҙ бит бөгөн тип һөйләшкәйнек.

-- Бөгөн булмай шул.

-- Ярай, һау булығыҙ, Рәхимйән Ғәлимйәнович! – Лира, ауыҙын турһайтып, ҡылт ҡына бороддо ла шаҡ-шоҡ баҫып китеп барҙы.

-- Быуынға ҡорт булып төштө бит, әй. Эштә маҙаһыҙлауы етмәгән, бөгөн өйгә килеп еткән... – Баш сайҡап ҡәнәғәтһеҙләнде Рәхимйән. Үҙҙәренә саҡырып йөҙәтә...

-- Буш иттең, барырға кәрәк ине.

-- Һәй! – Ҡул һелтәне. – Нисек ҡотолорға белмәй сыҡҡайным әле!

Ҡыҙ көлөп ҡуйҙы, өндәшмәне. Күңелдәре менән бер-берећенә һырныҡышып, Лира киткән йүкәле аллеянан ҡапма-ҡаршы тарафҡа – ҡаланың бейек тау башындағы иң күркәм баҡсаһына ыңғайланылар. Киртләс ярҙан һыу өҫтөнә оҙаҡ текләп торҙолар.

Ҡышты көтөп тымығып ятҡан Ағиҙел-һылыу көмөш көҙгөләй ялтырап йылмая, уйсан моңһоулығын сиртеп-сәсрәтеп моторлы кәмәләр ҡоштай оса, арттарында ҡалған сыйырым өҫтөндә көмөш балыҡтар осоноп һикерешә; балауыҙҙай һары ишкәкле зәңгәр кәмәләрҙә ҡандай ҡыҙыл гармун күректәрен бер һуҙа тартып, бер буҫлыҡтырып, ял итеүселәр тулҡындарҙа тирбәлә; яңыраҡ төҙөлгән суйын селтәрле күперҙән Ырымбур юлы буйлап йылғыр машиналар йүгерә, ә йылға ары ҡырыйындағы аллы-гөллө кейенгән

халыҡ ҡырмыҫҡа иләүеләй ҡайнаша – һәр йән эйәһе уҙып барған көҙ айының һуңғы сыуағын туйғанса эсеп ҡалырға самалай, буғай...

Рәхимйән менән Фәхерниса тымыҡ аллеялар буйлап ҡыҙырҙы. Донъя-ғаләм һыу ситенә ағылып төшкәнлектән, бында аулаҡ, һил; ара-тирә эскәмйәлә гәзит уҡып ултырған ҡарт-ҡоро, ойоҡ бәйләп ойомош әбей-һәбей генә күҙгә салына, көҙгө моңға был күренеш уйсан бер биҙәк өҫтәп, дөйөм һиллек тойғоһон арттыра ғына.

Моңайып ойоған ҡарт йүкә төбөндә туҡтанылар, ҡара-ҡаршы баҫып, тәбиғәт ғүмере көҙөнөң серле ауазын – һары япраҡтар шыбырлауын тыңланылар. Сыбыҡ остарынан алтын тәңкәләр пыртлап өҙөлә, ҡаймаҡ һымаҡ ҡуйы һауала бөтөрөлөп төшәләр, төшәләр...

Әҫәрләнеп күҙен йомған Рәхимйән тертләп уянды: юлдашы юҡҡа сыҡҡан бит!..

Туҙйыландай бормасланып нәҙек һуҡмаҡ һуҙылған һәм барып бөткән түбәндәрәк, ҡуйы һары селектәр, өҫкат ҡыуаҡтары ураткан уйым ғына йәшел аҡланда ике тубығын ҡосаҡлап ултыра ине ҡасҡалағы. Юлдашының килеүен әллә абайламаны, әллә юрый күрмәмешкә һалышты. Өҫкат бөҙрәләре өҫтөнән ҡарайып тимгелләнгән, суйындан ҡойолған быҙаулы болан һынына төбәлгәйне уйсан күҙҙәре. Улары теп-тере кеүек: наҙлы быҙау бына-бына инәһенең тулып-ташҡан елененә морон төртөп шапылдатып имә башлар, ә тегеһе, ләззәтенән иҙрәп-мөңрәп, балаҡайының осаһын ялар...

Рәхимйән дә ошо илаһи күренештән тулҡынланып, иләҫ-миләҫ килгән ҡыҙҙың ҡабарынҡы сәс ташҡынын һыйпаны. Фәхерниса уянды, күҙҙәрен тултырып ҡараны: Рәхимйәнгә был күҙҙәрҙең ҡаралығында ике болан һүрәтләнә төҫлө ине...

-- Профессор! Ренард әшнәңә оҡшап бараһыңмы әллә? – тине Фәхерниса, егеттең сабырһыҙ ҡулын алып ташлап.

-- Ғәфү ит... Фәхерниса, беләһеңме, мин һине тәү күргәндән кемгә оҡшаттым?

Ҡыҙ көлдө:

-- Кемгә?

-- Бер ауыҙ һүҙ менән генә аңлатып булмай быны... Бер саҡ ауылға ҡымыҙ эсә кайтҡайным. Иркен тибенле, йылҡылы ауыл. Йоҡларға ятһаң, таң атҡанса баҡыр бутыл дыңғылдауы, йылҡы кешнәүҙәре шаңғырып тора. Иртән уяныуыңа һаумал-ҡымыҙҙы башың осонда гөбөрләтеп бешәләр... Бына шул ауылда Һаҡмар аша тартылған борам кәмәһе янында ҙур ғиллә ҡупты бер көн. Ни күҙебеҙ менән күрәйек, ит комбинатына тере йылҡы тейәп илтеүсе йөк машинаһы тора борамда; әҙмәүерҙәй ир-ат, күҫәк болғап, тирләп-бешеп, яр ситендә борамға керергә үрәпсегән бер аҫауҙы яралар. Илағандай әсе кешнәп, күҫәктәр өҫтөнә ырғый малҡай; башына һуғып ебәрәләр – ялын ергә һөйрәлтеп, йөгөнөкләп барып ята; тағы һикереп тора, ял-ҡойроғон ялбырлатып, үрәпсеп-кешнәп, борам өҫтөндәге машинала сарылдашып тауыш биреүсе бейәләр янына ярып үтергә тырыша... Шул арала борам ярҙан ҡубынып, ситлектәге бейәләрен сарылдата-сарылдата аръяҡҡа шылды, бейәләрҙең күҙҙәре йәшкәҙеп йылтыраны. Аҫау иһә кәренә сыҙаша алмай, болот кеүек ялдарын ялбырлатып, яр буйҙарын ярып кешнәй-кешнәй сабып йөрөнө лә буръякланып ҡайнаған һыуға текә ярҙан ырғыны... – Рәхимйән, күҙҙәре йәшкәҙеп, күҙлеген ҡулына алды.

-- Йөҙөп сыҡтымы һуң? – тине Фәхерниса, тыны ҡыҫылып.

-- Һыуға ал ҡан күлкене: яр аҫтында боронғо күперҙән осло имән бағана ҡалған...

-- Уф, ниңә шундай аяныс хәлде һөйләйһең?.. – тине Фәхерниса, йөрәк төбөнән һыҙланып. Ике ҡулын башы аҫтына ҡаушарып, йәшел сирәмгә салҡан һуҙылды. Ялтыр ҡара күҙҙәре, уйсанланып, сөм-зәңгәр күккә баҡты.

-- Профессор, күрәһеңме анауҙы?

-- Нимәне?

-- Аяҡ осомда ғына – тап шул тәңгәлдә -- күктә бер йондоҙ балҡый.

-- Йондоҙ?!.

-- Эйе. Ҡар бөртөгө һымаҡ ап-аҡ, алты мөйөшлө йондоҙ.

-- Ошо көпә-көндөҙмө?

-- Ышанмаһаң, ана тора.

-- Ҡайҙа-ҡайҙа?

-- Ана анауында! – Фәхерниса, башы аҫтынан ҡулын алырға йыбанып, ослобаш-ҡайыҡ түфлиле аяғы менән төртөп күрһәтте. Шул осраҡта күк түңөндәге ебәк күлдәк итәге аҫҡа шыуышып, шалҡандай йоморо тубыҡтары балҡыны...

-- Көпә-көндөҙ күренәкәй йондоҙҙар унда түгел, ә бында! – тине егете, уның ҡара-йылтыр күҙҙәренә кереп китерҙәй өңөлөп; -- ике ярҙың ҡайнар һулыштары түкәлеште.

-- Уф, Рәхим йән! – Ҡыҙҙың һалҡынса яланғас беләктәре ныҡ итеп уның муйынына уралды, ҡыуаҡ артында быҙаулы болан да ҡымшанып ҡуйғандай итте, ә ҡыҙыйҙың тығыҙ күкрәк тамырҙарын семерләтеп быға са татып күрелмәгән алйыткыс хис сәнсеп-ҡытыҡлап үтте...

## 7

Институтта йәйге-көҙгө ял айҙары күҙгә күренмәй үтте. Хеҙмәткәрҙәрҙең төрлөһө төрлө яҡ “ҡояшлы илдәргә” таралып, һыу-һауаға ерегеп, тәндәре майлаған ҡаҙандай ҡарайып ҡайтты. Ҡай берәүҙәр йәй буйына ауылдарҙа ғилми экспедицияларҙа йөрөп үткәрҙе. Шуға күрә айҙар буйынса ла бер-берендә осратмау һис ғәжәп түгел ине.

Фәхерниса йәмле көндәрҙе имтихандар тапшырыуға арнап уҙғарғанлыҡтан, сираттағы хаҡлы ялы һуңғараҡ ҡалдырылып, ҡара көҙгәсә машинкаһын шыҡылдатып ултырып, ергә аҡ ҡар яткас ҡына бушанды. Был юлы ул бөтә ваҡытын, һәр төрлө тоҙло ҡыяр, вареньелар араһында булышып, әсәһенә ярҙамлыҡлап үткәрҙе. Әллә ҡыш үҙенең һалҡын һулышын өргәнгәме инде, күңеле быҫҡып һүнгән усаҡтай һүрән, бер ҡайҙа ла тартмай, -- хатта киноға ла барғыһы килмәй. Уты сәсрәп торған ҡыҙының ҡапыл шымып бойоғоуына әсә кеше лә иғтибар итмәй ҡалманы. Бер көндә ул универмагтан ырҙын иләгеләй оло ҡап күтәреп ҡайтты:

-- Бәпесем, кейеп ҡарасы шуны. Сират тороп саҡ эләктерҙем, Париждың үҙенән килгән!

Әсәле-ҡыҙлы зыҡ-ҡубып, матур ҡапты астылар: бынамын тигән эшләпә ята имеш, күҙҙәрҙең яуын алып. Фәхерниса, затлы бүләкте түбәһенә элеп, бүлмәне зыр-өйөрөлдө:

-- Әсәй, йәнем, нисек таптың был мөғжизәне?

-- Бөгөн үк кейеп сыҡ, бәпесем, -- тине әсә, ҡыуанып. – Юғиһә, ялың осланып бара, һаман өйҙә ултыраһың. Һиндәй саҡта мин күбәләктәй осоп-ҡунып йөрөй торғайным әле.

-- Эй әсәй, быны кейеп Парижға барайыммы һуң?

-- Бына һиңә кәрәкһә! Киноға бар, театрға бар. Тиңдәштәреңде осрат. Барыр ер бөткәнме ни бынауы заманда?

Фәхерниса, әсәһенең күңелен ҡайтармаҫ өсөн генә, яһанып урамға сыҡты. Эшләпәгә ысынлап та бөтә ғаләм таң ҡала кеүек ине. Яңы асылған культура һарайында йәштәрҙең классиак бейеү кисәләре барғанын афишаларҙан белеп, шунда аҙыраҡ тулғанып алырға булды.

Зал түрендә тынлы оркестр шаңғыртып вальс һыҙҙыра, көҙгөләй ялтыр иҙән буйлап аллы-гөллө кейенгән йәш-елкәнсәк бәүелә. Фәхерниса таныш ҡыҙҙарын осратырға итеп туҡталып торған арала, ике яңағынан оҙон бакенбардалар һәлендергән ерән сәсле

бер фырт егет дуғалай бөгөлөп уға тәҡдим яһаны ла эләктереп тә алды, елпелдәүек йәнле өйөрмә ҡосағына кереп тә юйылдылар. Фәхерниса, бер-нисә минутҡа бар донъяһын онотоп, Штраустың сихри сыңына сумды, ысынбарлығын томалаған болот ҡосағында йөҙҙө. Һуңға табан ғына ҡыҙҙы партнерының һағыҙҙай һыланыуы, теремек ҡулының саманан тыш биленән түбән шыуышыуы маҙаһыҙлай башланы. Эйелеп һүҙ ҡушҡан булып, күкрәгенә “иҫләмәҫтән” түше менән ҡағылыуы иһә сығырҙан сығарҙы, партияның тамамланыуын саҡ көтөп алды. Фырт егеттең йәнә дуғалай бөгөлөп рәхмәт әйтеүен иғтибарламай, арыныу яйын ҡараны. Шул саҡ уны таныш тауыш һиҫкәндерҙе:

-- Аб-ба-а, кемде күрәм! Һылыуҙарҙың һылыуҡайы, һинме был?!

Көньяҡ ҡояшына янып ҡарайған, шөйлә ҡалынайып, яурындары яҫылана төшкән Ренард ике күҙен мыҙылдатып йылмайып тора. Бер тешенә саф алтындан көп ҡаптыртып йылтыратҡан, көлгәнендә матур балҡып, йөҙөнә күркәмлек һибә.

-- Фәхернисаҡай-һылыуҡай! Ниндәйен дә гүзәл һин! Принцесса!

Гәрсә егеттең яңғырауыҡ һүҙҙәр менән шаҡ-катырырға һәүәҫлеген белһә лә, рәхәт булып китте, хатта башы ла әйләнә биреп ҡуйҙы.

-- Һин үҙең дә испан грандына оҡшап ҡайтҡанһың түгелме? – тине.

-- О! Ҡырым яры! Мәңге йәшел кипаристар! Фирүзәләй күм-күк диңгеҙ!

-- Фирүзә күм-күк булмай, -- тине Фирҙәүес, көлөп. – Ул йә ҡаҙ үте һымаҡ сөм-йәшел, йә зәңгәр-йәшел төҫтә була. Бына минең түшемдәге ҡаптырма ташына ҡара.

-- О! Мин шул ҡаптырма ташы ғына булһамсы!

-- Ҡабыр ҙа тешләр инеңме?

-- Уҫалһың! Мин юҡта өлгөргәнһең -- кемдән өйрәндең?

-- Һинән башҡа өйрәтеүсем бармы һуң?

-- Шаярма! Рәхимйән дуҫтан һорарға тура килмәһен!

Быныһына ҡыҙҙың иҫе китмәне:

-- Кипаристар, тигәндән, үҙеңдең Кипарис ҡартыңды ла алып барҙыңмы әллә? Зәңгәр диңгеҙ буйына, тим.

Егет өтөрәйҙе:

-- Ниңә “үҙеңдең”? Ҡайҙан килеп үҙемдеке булһын ул?

-- Бәй, бергә-бергә көн күрәһегеҙ, тиҙәр түгелме? Хатта атайың да тиҙәрме...

-- Һа, шул алкашмы? – Ренард өтөрәйҙе. – Ғәйбәт! Эйе, бер өйҙә торабыҙ, тышта туңып ҡалмаһын тип, ҡыҙғанып ҡына фатирға индерҙем мин уны, ҡыптыр тун берәҙәкте. – Ул баш сайҡап хитланды. -- Һе, “атайың” имеш!.. Һине лә шул ғәйбәт уратып үтмәгән икән, ҡыҙый! – Хатта илар сиккә етеп үпкәләгәндәй ине.

-- Ярар, юҡҡа-барға ҡубынып барма улай. – Фәхерниса үкенә биреп ҡуйҙы. – Ишеткәнемде генә әйтәм.

-- Ә һин ундайҙы ишетмә!

-- Бөттө-бөттө!

Уғансы булмай оркестр гөрөлдәне, үпкәләүен онотҡан Ренард ҡыҙҙы мамыҡ киҫәгеләй бөрөп алып, диңгеҙ кеүек айҡалғандар-сайҡалғандар араһынан осортоп алып китте.

Был юлы үҙен болот өҫтөндә йөҙгәндәй хис итте Фәхерниса. Биле тәңгәлендә Ренардтың тарамыштай ҡаты ҡулын, терәлә яҙып йәнәшә генә йөрөгән мыҡты төҙ һынын, әленән-әле алтын тешен балҡытып алсаҡ йылмайыуын, бөтә ғаләм һоҡланып уларға иғтибар итеүен тойоуҙары ниңәлер бик тә, бик тә рәхәт, күңелгә яғымлы ине...

**8**

Ял көндәре һә тигәнсе ағылып-үтеп тә китте. Ул эшкә сығыр иртәлә тышта сатлама һыуыҡ, тәҙрәне асы ел сиртә. Тоташлай ҡаранан кейенеп алған әсәһе, өнһөҙ-тынһыҙ, сәй яһап эсерҙе, үҙе ултырманы. Ҡыҙының күңелһеҙ генә һемергәнен ҡарап, оҙон ҡара шәүләләй, ырамына ҡара бәрхәт бөркәтелгән фото-һүрәт янында баҫып торҙо. Фәхерниса әсәһен шым ғына ҡосаҡлап үбеп, өйҙән сыҡты, керпектәренә йәш төйнәлде. Бөгөн атаһы һыуға батып үлгән көн...

Эш урынына ул, ҡәҙимгесә, барыһынан элек килде. Әллә инде болоҡһоулығын белгәндәй, вахтер апай ишекте үҙе асып индерҙе, бүлмәгәсә эйәреп килде. Шыҡая баҫҡан килеш, ҡыҙҙың һәр бер хәрәкәтен күҙәтте. Ни бары сисенеп өҫтәле янына боролғас ҡына, Фәхерниса уның был сәйер ҡыланышын аңланы: гөл ваҙаһында, яңы ғына янып һүнгән ҡағыҙ күмере кеүек, ҡара бәрхәт кеүек сөм-ҡара сәскә, тере ҡайғылы бер генә бөртөк сәскә күҙгә бағып тилмереп ултыра имеш. Ни йәһәттәндер ваҙаны услап алды, күҙ күрмәгән ҡара мөғжизәгә төбәлеп баҡты. Ҡара гөл дә уға, әйтерһең, уны яңы ғына күреп танығандай, тажында бер бөртөк кенә көмөш ысыҡ мөлдөрәтеп, иламһырап текләне...

-- Хайран ҡалырһың был донъяға. Ғүмерҙә күҙ күрмәгән ҡара сәскә! Ышанмай, яһалмамы икән әллә, тип, тотоп-тотоп ҡараным... – Баш сайҡап һөйләнде апай. – Нимә, һеңлем, берәй матәмле көнмө әллә?

-- Шулай шул... атайым... – Ултырып һулҡылданы.

-- Ҡасан?

-- Бөгөн теүәл бер йыл тулды... үҙемдең дә тыуған көн... – Үкереп илап ебәрҙе. Апай уның башынан һыйпап, әсәләрсә йыуатты:

-- Тиле, тыуған көндә илайҙармы ни? Ауыр булһа ла, ҡыуан. Йөрәгеңдең һыҙлауын тойған шундай һиҙгер егетең барлығына ҡыуан. Күрәһең бит: таң-иртәнән килеп ҡалдырып китте.

“Ренард, Ренард!” -- Теленә килмәһә лә, ҡыҙ күңелендә шул исем ҡабатланды. Эйе, ул ғына таба ала быны, күҙ күрмәгән сәскәне!

-- Әгәр әйтһәң, ул егетең, моғайын, һинең өсөн ете диңгеҙ аръяғынан күгәрсен һөтө лә табып килтерер! Бына бит ул донъялар ҡайҙа бара!..

Һалҡын һыу йотоп саҡ ҡына тынысланғас, донъяһын онотоу өсөн, Фәхерниса ашҡынып эшкә тотондо. Ләкин бармаҡтарын һыҙлатҡансы төймәләргә баҫыу ҙа, машинканың ҡолаҡ ярып шыҡылдауы ла уны барыбер ғәмле уйҙарынан арсалай алманы. Үс иткәндәй, Ҡояш кеүек балҡып инеп тел сарлап торор кешеһе лә юҡ эргәһендә: өҫкө ҡатта партия йыйылышы бара, Ренард та, Йәмил дә, башҡалар ҙа, моғайын, шунан сыҡмай ултыра. Ваҙалағы ҡара сәскә уға, әйтерһең, атаһының ҙур ҡара күҙҙәре менән мөлдөрәп баға...

Болоҡһоу хистәре заңында Фәхерниса төшкө тәнәфескә сыҡты, биттәрен ялмап алған һалҡынса тышта үҙе йөрөп күнеккән баҡсаға керҙе. Таныш аллеялар буйлап уйға сумып ҡыҙырҙы. Донъя тигәнең ҡышҡылыҡтан һөттәй аҡ, ләкин аҡ ҡар өҫтөн ҡара сәскәләр баҫҡандай ине...

Ахыр сиктә урам аша ашханаға инергә ваҡыт ҡалмағанлығын абайлап, эшенә кире йүгерҙе. Хәрефтәре юйылып бөткән төймәләргә тешегеп баҫа-баҫа, кис еткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Иҫкәрткес электр сыңғырлағы тауыш биргәс кенә, һиҫкәнеп, башын ҡалҡытты. Ырғып тороп кейенде лә, ваҙанан ҡара сәскәне һурып алып, коридорға йәһәтләне. Дөбөр-шатор килеп халыҡ ағыла башлағайны. Фәхерниса тышҡы ишек яғындағы күмәк баштар араһынан Рәхимйәндең таныш күк төлкө бүркен күреп ҡалғандай итте, тик шунда уҡ онотто, сөнки тиле йөрәге уны Ренардтың алсаҡ ауаҙы килгән яҡҡа тартты, әммә ҡапыл Ренард та күҙҙән юғалды. Вахтер апай тауыш биреп туҡтатты:

-- Ҡайҙа ырғаңдайһың, ут бөрсәһе? Иллә осондоралар ҙа һуң, ҡыҙый, үҙеңде! Бына ҡара: быныһын тыуған көнөң менән ҡотларға тип ҡалдырҙы, кемдән икәнен әйтмә, сюрприз булһын! – тине. – Яҡшы хәбәр еткереүенә ҡыуанып, ҡыҙҙың ҡосағына яңы ғына өҙөлгәндәй ҡупшы-балҡыу гөлләмә һалды. Йәш ҡарҙай ап-аҡ, саф роза сәскәләре ине былар: "Шул, Ренард, Ренард!.." -- Күкрәгенә ҡыҫып тотҡан берҙән-бер ҡараҡайы шул саф аҡлыҡ аҫтында күмелеп ҡалды, танау ярып аңҡыған хуш еҫтәренән ҡыҙҙың башы әйләнде: әлегәсә ошондай ҙа нескәлекле-нәзәкәтле иғтибарға алынғаны юҡ ине!..

Дала еле һымаҡ көйҙөргөс ҡырыҫ тәбиғәтле ине уның атаһы, һәр төрлө шау-шоуҙы, тантаналарҙы бик үк хуплап бармаҫ ине. Тыуған көндө байрам итеүҙе бигерәк тә өнәмәне. "Яҡты донъяға килеүең, әсәйең өсөн ҡаһарманлыҡ булһа ла, һиңә һуҡыр тин дә түгел әле ул. Энә осондай бөжәк тә тыуа донъяға! Бөрө лә ваҡыты еткәс шартлап ярыла! Дөмбөр ҡағырға һиңә иртәрәк әле. Кешемен, тиһәң, ең һыҙғанып тәүҙә илеңә эш күрһәт: үҙең түгел, илең ҡыуанып туйлаһын тыуған көнөңдө!" – ти торғайны. Эй ҡәҙерле атаҡайым! Нимә генә тиһәң дә, күмерҙәй ҡара сәскәле ҡайғым булһаң да, бөгөн ҡыҙыңдың тыуған көнө лә бит әле! Был аҡтан-аҡ сәскәләр – уның тыуған көн билдәһе!..

Тышҡа сыҡҡас Фәхерниса йәнә лә бер секундҡа ғына Рәхимйәндең күмәк баштар араһында ағылып барған күк төлкө бүркен абайланы ла онотто, йүгереп барып, бер ситтәрәк ҡыуаҡ төбөндә һимеҙ һары портфелен тотоп көтөп торған Ренардтың киң күкрәгенә ҡапланды...

## 9

Һалма кеүек ялбырлаған, ябалаҡлап аҡ ҡар яуған ҡышҡы кистә Кипарис ҡартлы ағас өйгә Ренардтың ҡәҙерле тыуған көнө байрамына барырға йыйындылар. Урам буйындағы тарбаҡай саған ағастары, ҡойма баштары, афиша йәбештермәле күпкәк бағаналар төн сыҡҡансы ҡалын аҡ бүрек кейгән, асфальтҡа йомшаҡ мамыҡ келәм түшәлгән. Фәхернисаның был тантанаға әллә ни аяғы тартмаһа ла, йөрәгендә билдәһеҙ бер хәүеф уҡмашып торһа ла, иптәштәре ҡубынып елкенгәнгә ҡыймай ылыҡты. Йүгереп йөрөп байрам эйәһенә затлы бүләк эҙләште. Көнэлгәре аҡса һалышҡайнылар: һыу аҫтында киноға төшөрә торған ҡиммәтле камера һайланылар. Сағыу ҡумтаны ҡултыҡлап, шау-гөр килеп, бер юлы бер-нисә таксиға тейәлешеп киттеләр. Егеттәрҙең сосораҡтары ни аралалыр "яға аҫтына һалып" та алған: юл буйы шарылдашып, эс бошороп барҙылар. Салон былай ҙа бензин еҫенән бөркөү; Фәхерниса, эргәһендәге мыҡтының ауыҙынан борҡораған хәмер еҫенә тонсоғоп, сөсө шаяртыуҙарынан биҙәрләп, уң яғына әүешә бирҙе – унда даими тыйнаҡ, ипле, аҙ һүҙле комсомол башлығы Йәмил ултыра. Был болоҡһоу ығы-зығыла бер нимә лә уйламай, шундай ышаныслы егеттең яурынына баш һалып ҡына бараһы килә лә бит... Машина һелкеткәне һайын, үҙе лә белмәй яҡынылраҡ һырышып, башындағы уйҙары менән әүәрә булды. Дөрөҫөн әйткәндә, тәү ҡат барып аяҡ баҫаһы таныш түгел ағас йорт уны алыҫтан уҡ һағалап торғандай ине...

Ихатаға ингәс, яҡшы итеп көрәлгән юлдан кинәнеп атланылар. Тәҙрә ҡаршыһындағы күптәргә билдәле кипарис ағасын ҡыҫҡы һыуыҡтарға ҡаршы өшәләклап, тышын ҡар менән көпләгән суҡай ҡыуыш тәңгәленән үтеп, һары күн тышлыҡлы ишекте тартып асҡас, ҡапыл гөрләп ҡолаҡты ярған шашҡын хисле марш тауышынан шаңҡыбыраҡ ҡалдылар. Стена буйына ике яҡлап хәрбиҙәрсә тигеҙ теҙелгән егет-елкенсәк үкертеп борғо тарта, ярһытып дөмбөр ҡаға, ә Ренардтың һөйөклө әсәһенән ҡалған Мопсик тигән сәүек эт үрһәләнеп ләңкелдәп өрә. Ренард үҙе теҙем башында тороп, сыңғырлауыҡ ҡыңғыраулы "саратский гармунды тызҡылдатып-сыйнатып тарта,

гармундың ике ҡолағына һыйыр телеләй һәлендереп тағылған ал яулыҡтарҙың ялпылдауынан үрһәләнеп, сәүек эт Мопсик әсе сәүкелдәй. Ҡунаҡтарҙы ишек төбөндә өнһөҙ баҫтырытп ҡуйып, дәртле маршты аҙағына еткереп гөрләттеләр. Алдан килгән – аш өсөн, тигәндәй, төпкө яҡта залда өҫтәл һырып өлгөрөүселәр ҙә торошоп, һерәйеп тыңланылар. Шунан һуң дөйөм ҡуҙғынып сәләмләшеү, шау-шоу китте, бөтәһе лә ултырыша башланы. Ниһайәт, табын түңәрәкләнде.

Мәжлескә күрше-күлән, Ренардтың ишле таныш-белештәре, институтта бергә эшләгән кешеләр саҡырылғайны. Фәхерниса таныҡандарҙан Рәхимйән дә күренә, танымағандары ла байтаҡ ҡына. Ҡан-ҡыҙыл ауыҙлы осоҡ ҡыҙҙар, оҙон сәсле фырт егеттәр ҙә бар имеш. Кухня яғында аш яраштырыусы алъяпҡыслылар мәш килә. Күбекләнеп ажғырған шампанскийҙы, ялҡынлы телмәр теҙеп, үрә тороп күтәрҙеләр. Береһенән-береһе татлы, илһамиятлы тост әйтешеү ярышы ҡыҙҙы. Был һөнәрҙә бигерәк тә осоҡ ҡыҙҙар, фырт егеттәр ал бирмәне:

-- Ур-ра! Рәсәйҙең тимер юлдарылай осһоҙ-оҙон ғүмер, хур ҡыҙылай ҡосоп туймаҫлыҡ матур кәләш, Ильичтыҡынан да иплерәк өскөл профессор һаҡалтайы һиңә, Ренард!

-- Кәрәсин туңғансы йәшә!

Телдәр сиселеп, табын түңәрәге умарта күселәй талғын гөжләй башлағас, егеттәрҙең береһе өҫтәл аҫтынан гитара һөйрәп сығарҙы...

Гитара мәҙехтәренән һуң магнитофон таҫмаһы телгә килеп, шашҡын таҡмаҡ тирбәлдерткәс, фырт егеттәр, осоҡ ҡыҙҙар һеперелеп уртаға сыҡтылар ҙа ағас өйҙө дер-һелкетеп баҫырға, замана бейеүендә йыландай борғоланырға керештеләр. Туташтарҙың тумалаҡ тубыҡтары ҡыҫҡа итәк аҫтарын ташлап сығып китерҙәй шат уйнаны. Фәхерниса, ошоға тиклем ауыҙына алғаны булмаһа ла, табынсыларҙың өҙмәй-ҡуймай ҡыҫтауҙарынан йөҙәп, бер-ике йотом шампанский эскәйне, ике бите алланып, ҡолаҡтары шаулап, алйыбыраҡ ултыра. Ҡотороҡ шау-шоуҙан башы уғата әйләнеп, залдан сыҡты, һалҡын һыуға ылығырға теләне. Ләкин туалет бүлмәһен тәмәкесе ир-ат һырып алған – иҫерек ауаздары, шарҡылдап көлөүҙәре, нимәгәлер бәхәсләшеүҙәре яңғырай: әлеге лә баяғы шул “сослоҡ” тураһында бара һүҙ. Сәкештереп эскән тауыштар ҙа ишетелә. Яҙа-йоҙа ҡолағына салынды:

-- Үҙебеҙҙең Ренард өсөн, егеттәр! Ренард – киләсәк кешеһе! Халҡыбыҙҙың киләсәк сағылышы, образы!

-- Ур-ра! Егерме беренсе быуаттың башҡорто тап Ренард һымаҡ буласаҡ!

Ҡыҙарып-бүртенгән ҡунаҡтар берәм-һәрәм алғы бүлмәгә сығып, кейенә башланылар, дөйөм ығы-зығы ҡупты. Бераҙыраҡ ил аяғы һил булыуын көтөңкөрәп торған Фәхернисаны, көтмәгәндә, Ренард кухняға этәреп keretтe, унда кеше юҡ ине.

-- Һылыуым! – Шешә һәм бокал тотҡан ҡулдары менән көрмәп ҡосаҡланы. -- Әйҙә, икәүҙән-икәү сәкәштереп йотайыҡ!

-- Ҡуй, ебәр, ярамай. Былай ҙа башым әйләнә, -- тине Фәхерниса.

-- Туҡта, улайһа мин һиңә кофе бешереп бирәйем. – Бокалын һәм шешәһен өҫтәлгә ҡуйҙы, ҡыҙҙы ултырғысҡа ултыртты. – Айн момент, күҙ асып-йомғансы!

Фәхерниса, өҫтәлгә таянып, башын беләктәренә һалып, күҙҙәрен йомдо. Шул арала атаһы мәрхүм күҙ алдына килеп баҫты, таныш тауышы, һүҙҙәре ишетелде:

-- Ҡаҡҡылап-һуҡҡыламаһаң, кешелек тоҡомо аҙа...

Ниңә әле ошо мәлдә тәғәйен шул һүҙҙәре хәтерләнде?..

-- Оп-ләә! Бынамын тигән ҡара кофе! Бразилдарың да быны ишене эсмәйҙер!

Фәхерниса башын ҡалҡытты. Ҡыҙҙарҙың һушын китәрерлек һомғол буйлы Ренард, маңлайы Айҙай балҡып, бер ҡулына – хуш еҫен аңҡытып боҫланған кофеле сынаяҡ, икенсеһенә шарап тулы бокал тотоп тора ине.

-- Кофе генә булһа ла, минең менән сәкәштереп эс инде.

-- Уф, ҡалай әсе! – Кофе тигәне телен өтөп алды.

-- Ысын ҡара кофе шулай була ул, Ҡырым кофейняларында өйрәндем. Эс, бөтөргәнсе эс, башың шунда уҡ төҙәлер, еңеләйеп китер.

Тик баш тигәнең, үс иткәндәй, кофенән һуң уғата ныҡ әйләнде. Ренард, көлөп, уны ҡосаҡлап алды, кушеткаға ауҙарҙы...

-- Ренард, ебәр! Ҡотҡарығыҙ! – Ысҡынырға итеп тулап ҡысҡырҙы ҡыҙ. Ишек шаран асылды, кемдер инде -- күҙҙәре шарҙай кирелгән Рәхимйән ине. Өҫтәлдәге шешәне һелтәп осорҙо, Фәхерниса алдындағы сынаяҡты еҫкәп ҡараны:

-- Оятһыҙ! Кофегә коньяк болғатып эсерҙеңме? – Ренардты һуғып йыҡты. Ҡыҙҙар сырылдашҡан ыңғайға гитарасы менән борғосо пәйҙә булды, баҙап ҡалған Рәхимйәнде, ике беләгенән матҡып, тышҡа һөйрәнеләр. Рәхимйән, артына боролоп ҡарап, күҙлекһеҙ күҙҙәре менән ҡыҙҙы эҙләне:

-- Фәхерниса... ғәфү ит мине... шулай килеп сыҡты...

-- Кит-кит, күҙемә күренмә! – тине Фәхерниса, танауынан ҡан борҡорап тороп килгән Ренардҡа ярҙамға ташланып...

Табын түңәрәге таралғайны инде, бер килке “оҙон ғүмерле”ләр генә өҫтәл башына өймәкләшкән дә юлаяғына һемерә. Йыуынып-таҙарынып сыҡҡан табын хужаһы уларҙы тиҙләтеп оҙатырға маташа. Тап шул мәлдә, көтмәгәндә, зал яғынан арҡылы диван менән кәртәләп ҡуйылған төпкө бүлмәнең ишеге шартлап асылды ла, ых-бых килеп, диванды аша төшөп, бөтәһенә таныш Кипарис ҡарт, онға батҡан тараҡандай, сал мыйыҡтарын һәлендереп килеп сыҡты:

-- Улым, ул ғынам, ҡотло булһын тыуған көнөң!

-- Урра, аттракцион! – Ҡыуанышып ҡул сапты, урындарына кире-ҡабат төпләнеп, юлаяғы һөйөүселәр. Әммә Ренардты был “номер” оло хәүефкә һалды. Йөҙөнә ҡалҡҡан буҙыр-буҙыр тимгелдәрен баҫырға көсө етмәй, тештәрен шыҡырлатты; ҡаш менән күҙ араһында өҫтәл башына йәпләшеп алып юлаяҡсылар ҡулынан “штрафной”ҙы күндәм һемергән аҡ мыйыҡлы һөмһөҙйәндең нәүбәттәге бокалын һуғып осорҙо:

-- Кипарис! Кем рөхсәт итте һиңә был яҡҡа сығырға?!

-- Үҙем, улым, үҙем... тыуған көнөңдө байрам итергә, улым...

-- Алкаш! Ҡайҙан килеп мин һинең улың булайым? Әсәйемдең улы мин! – Һөмһөҙйәнде яғаһынан бөрөп алып табындан быраҡтырҙы. Ә уныһы иҙәндә аунап ятҡаны килеш илай-илай ялбарҙы:

-- Улым шул, улым! Кешеләр, ишетегеҙ: һин – минең улым! Рәшиҙәкәйем, әсәйең, минең никахлы хәләл ефетем ине бит!

-- Ана Мопсик һинең улың! Ҡарт алаша! – Яғаһынан йолҡа тартып ҡалҡытты ла, елтерәтеп килтереп, диван аша асыҡ ишектән кире теге төпкө бүлмәгә быраҡтырҙы, ишекте шартлатып япты. – Йәмәғәт, берәҙәктең һүҙен ысынға алмағыҙ! Тышта туңып ҡалмаһын тип ҡыҙғанып кереткән фатирсым ғына ул минең!

Әммә ағай-эне уның һүҙҙәрен һанламаны.

-- “Улым” ти бит һуң?!. – тине лә бер тамам “булып алған”ы, алдындағы винегретлы тәрилкәгә морон төртөп, үкереп иланы. Ренард залды яңғыратып ҡысҡырҙы:

-- Һантый, башҡорт телен белергә кәрәк: “улым” тип бит башҡа кешенең улына ла әйтәләр. Ә Кипарис миңә ят өйҙәш кенә, уның кемлеге үҙегеҙгә лә мәғлүм!

Мәжлес тамам боҙолдо, иң әрһеҙйәндәр ҙә ҡубынды. Һуңғыларын ашыҡ-бошоҡ оҙатып, өйҙә бер кем дә ҡалмауына инанғас, Ренард, диванды ситкә шылдырып, төпкө бүлмәгә керҙе, ҡартты яғаһынан бөрөп, елтерәтеп, зал һәм алғы өй аша тышҡы ишеккә үк еткерҙе лә, этеп сығарып, ихаталағы көрпәк ҡарға тәкмәстерҙе. Эстән келәне элеп, өҫтәлдәге оҙон шешә боғаҙынан бер тына ғорҡолдатҡас, утты һүндереп диванға әүшәрелде, башы зыңҡып әйләнде.

-- Уй-уй улым, туңам бит, ас! – Кипарис ҡарт тыштан ишек дөбөрләтте, ялынислы тауышы Мопсик ләңкелдәүенә аралашты.

-- Туңмаҫһың, алкашка бер ни ҙә булмай. Ана, Мопсиктан һора!

-- Уй-уй улым, тамам ҡатам бит инде... Тунымды бир, исмаһам!

-- Бер алкаш та ҡатмаған әле, һиңә лә буҡ та булмаҫ!

Дөбөрләтеү һүрелгәндән-һүрелде, ахырҙа ул Ренардтың хәмерле йоҡо томаны эсендә ойоп тынды.

Иртүк башы сатнап уянған Ренардтың иҫенә кисәгеһе төшөп, ҡурҡышынан ҡысҡырып уҡ ебәрҙе, яланаяҡ килеш тышҡа атлыҡты, ләкин ихатала төн сыҡҡансы ҡалын булып ҡар яуған, ап-аҡ ҡарҙа ҡартлас та, эҙҙәре лә юҡ ине. Күршеләрҙең берәйһенә кереп һыйынғандыр ҡарт алаша, тип уйлап, бераҙ тынысланып, кире инде, сәңгегән аяҡтарына йылы ойоҡбашын кейеп, оҙон муйынлы шешәнән йәнә һемереп, йылы урынына ауҙы.

## 10

Йәмил менән Фәхерниса ҡунаҡтарҙың береһенең машинаһына эләгеп китте. Улар ҙа, машина йөрөтөүсенең ҡатыны ла шаҡтай ҡыҙышҡан, тик хужа үҙе генә ап-айныҡ ине. Машина ҡуҙғалыу менән, әйтерһең, бая ғына ҡунаҡ өйөндә бер нимә лә булмағандай, ҡысҡырып йырлап ебәрҙеләр. Йөрөтөүсе, ҡаны ҡыҙышҡан ҡунаҡтарҙың фиғеленә буйһоноп, теләгәндәренең барыһын үтәне: йә шәберәк, йә яйыраҡ йөрөттө, йә туҡтатып торҙо. Был төн уның үҙенә лә, эсмәһә лә, моғайын, иҫерек тойолғандыр.

Йыр һүрелеп туҡтауға, Йәмил, Фәхернисаның яурынына ҡулын һалып, алъюҫыҡтан Рәхимйәнде маҡтай башланы, саҡ ҡына ҡыҙғанып та алды. Уны йәберләүселәргә әсе нәфрәтен белдерҙе. Уға машина хужаһының ҡатыны ла ҡушылды.

-- Ҡуй-ҡуй, ишеттермәгеҙ шуның исемен! Ишеткем килмәй! – тине Фәхерниса, хәйерһеҙ кухнянан Рәхимйәндең күҙлекһеҙ килеш һөйрәлеп сығып барыуын, Ренардың ҡаны борҡораған ауыҙ-моронон күҙ алдынан кисереп. Йәмил турһайҙы, өндәшмәй бара башланы. Бераҙыраҡ юл үткәс, башын Фәхернисаның башына терәп, инәлде:

-- Фәхерниса, һин мине яратмайһың. Фәхерниса, ниңә һин мине яратмайһың? – Егет күңеле тулышып, хатта мырш-мырш һулҡылдап та алды.

-- Яратамсы, ниңә яратмаһын, ти? – тигән булды быныһы, көләп. Баяғы шөкәтһеҙ хәлдәрҙе һаман онота алмай, йөрәге өтөлөп, өҙгөләнеп килә ине, был һүҙҙәрҙән һуң саҡ ҡына еңеллек тойҙо.

-- Беләм, һин минең кеүектәрҙе яратмайһың... һин теге кеүектәрҙе генә яратаһың... Теләйһеңме, үҙеңә ете диңгеҙ аръяғынан вахтер апай әйткән күгәрсен һөтөн апҡайтам? Теләйһеңме... әй, шофер, туҡтат!... теләйһеңме, анауы ҡарға ояһын төртөп ауҙарам?

-- Эйе, теләйһеңме? Әй, шофер, туҡтат! -- тип ҡушылды машина хужаһының күңелсәкләнгән ҡатыны. Йәмил менән ул уртаҡ көй, тел табып, үҙ кешеләр булышып килә ине. Машина, кире артҡа сигенеп, баяғы тәңгәлгә етәрәк туҡтаны.

-- Фәхерниса, теләйһеңме?

-- Эйе, теләйһеңме? – тине машина хужаһының ҡатыны.

-- Ҡуй, Йәмил, -- тине Фәхерниса.

-- Ҡуймайым, төртөп ауҙарам! – Йәмил машинанан сыҡты. – Ату һин мине яратмайһың!..

-- Эйе, ату һин уны яратмайһың! – тине машина хужаһының ҡатыны.

-- Ҡуйығыҙ, юҡ менән булмағыҙ! – тине, көлөп, ире.

-- Ҡуймайбыҙ!

-- Эйе, ҡуймайбыҙ!

Йәмил, көрпәк ҡарға тубыҡтан бата-сума, юл сатындағы ханзамандан ҡалған пост будкаһын уратып үтеп, ни эшләргә белмәй, ҡулдарын артҡа ҡуйып туҡтаны, иҫке ҡоролманы яурыны менән ҡуҙғатып ҡараны. Тишек ҡыйығы аҫтынан бер көтөү күгәрсен пырылдап осто. Тик будка, әллә ҡасан үҙ бурысын үтәп бөтөп, күгәрсендәр хөкөмөнә тапшырылған булһа ла, ауырға теләмәне. Йәмил, башын эйеп, байтаҡ уйланып торғас, кире ҡайтты.

-- Шофер, әйҙә, трогай!

-- Шофер, әйҙә, трогай! – тине машина хужаһының ҡатыны. Тынып ҡалған урам буйлап, аҡ ҡар диңгеҙе эсенән, яңғыҙ мотор тауышы гөрөлдәне. Ҡайһылыр урамдарҙы уҙып, бер сатҡа боролғас, машина ҡапыл туҡтаны. Пассажирҙар, арыуҙары үтеп, йоҡомһорап киләләр ине, һиҫкәнеп күҙҙәрен астылар.

-- Ни булды тағы?

-- Эйе, ни булды тағы?

-- Ауҙы! – тине машина йөрөтөүсе, моторҙы һүндереп.

-- Нимә ауҙы? Будка ауҙымы?

-- Атағыҙҙың башы! Олон ауҙы!

-- Олон? Ҡайҙа?

-- Күҙ алдында.

-- Һин! Эсмәһәң дә, әллә һаташа башланыңмы? – тине, иҫнәп, ҡатыны.

-- Һаташмайым. Күҙ алдында Ренард Сәйфелмөләкович Асылғужин тигән аҫыл олон ауҙы.

-- Философ! Бәхетемә ҡаршы, ярай әле эсмәйһең. Юҡҡа фантазияң менән башымды ҡатырып бөтөр инең!

Ләкин ире һүрелергә теләмәне:

-- Тамырүҙәге серек булған икән ҡәһәрҙең. Тыштан мөһәбәт күренһә лә. Һай Ренард Сәйфелмөләкович, Ренард Сәйфелмөләкович...

-- Ҡуйсәле, ниңә шуны күп тизыйһың? Ауған икән – ауған, яңыһын торғоҙорҙар! – тине ҡатыны.

-- Йәтеш булған! – тине ойой башлаған Йәмил, кинәт башын ҡалҡытып.

-- Эйе, йәтеш булған!

-- Йәтеш булмаған шул! – Ғыжылдатып моторҙы тоҡандырҙы. – Тышҡы килбәтенә һоҡланып, мыҡты имән, тип йөрөгәнбеҙ, ә ул... ана ниндәй аттракцион күрһәтте...

Үҙәк урам көрәлеп өлгөргәйне – тәгәрмәстәр йәһәтерәк йүгерҙе. Йәмил, өндәшмәй, ҡалғып барҙы-барҙы ла, Фәхерниса иңенә башын терәп, мышнап йоҡоға талды...

**11**

Шул аяныслы кисәнән һуң нисәмә көндәр үтеп тә китте инде. Яңы йыл яҡынлашты. Институттыҡылар, байрам алды ығы-зығыһына күмелеп, йүгереп йөрөп табын күрке хәстәрләй башланылар. Алмаш-тилмәш магазиндарға саптылар. Йәмғеһенең һөйләгәне шул бер йәшел шыршы ла шампанский ғына булды. Юҡтан ғына ла ҡысҡырып көлдөләр, һүҙ осо сыҡһа-сыҡмаһа ла, тырышып-тырмашып, бер-береһенә төрттөрөп мәҙәкләштеләр. Ләкин теге шөкәтһеҙ кисә хаҡында – ләм-мим. Бөтәһе лә күрмәмешкә-белмәмешкә һалыша, әйтерһең, үҙ-ара һүҙ ҡуйышып, йәнде иҙеп ятҡан ташты хәтерҙән алып ташларға, яҡынлап килгән байрам шау-шоуы аҫтында ҡалдырырға теләйҙәр. Икеле был тормош ҡыҙға йәнһеҙ маскарад төҫөн алды, тонсоҡторғос шул битлекте йыртып ҡысҡырып ебәреү, ялған йолаларҙы өҙә һуғыу теләге көсәйә ине.

Бына бөгөн дә таң-иртәнән шул хис тертләтеп уятты, аҡ мендәргә ҡапланып ятып йәне талғансы иларға мәжбүр итте. Шул хис менән ул, сәй янында әсәһен хафаға һалып, бер нимә лә әйтмәйенсә тороп йүгерҙе, көндәлек юлының бер өлөшөн үтеп, ҡышҡы тын баҡсаның һалҡын эскәмйәһендә иҫерек ир ҙә ҡатын ғына ғәмһеҙ турғайҙарҙай сөркөлдәшеп ултырған ҡарлы аллеяларына килеп инде. Кипарис ҡарт булмаһас, күрәлгән юлдар тар ине. Ике янға ҡайшарылған ҡар тауҙары, әйтерһең, үткәндәрҙе күҙ алдында ҡабат-ҡабат тергеҙеп, таныш-белештәре йөҙөн, көслө микроскоп аҫтына ҡуйғандай, ҙур миҡдарҙа төҫмөрләтеп, яңы күҙ менән ҡарарға, барларға ярҙам итә...

“Их тормош-тормош!” тип белмәй әйтмәгәндәр икән”, тип уйланы Фәхерниса. Әле ҡасан ғына яңы эш урыны, институт, зәңгәр томандар артында көтөп торған серле киләсәк – барыһы ла, барыһы ла сағыу йәйғор күпер аша һыҙатланмыш гүзәл билдәһеҙлек булып күренә ине, хәҙер инде ул да үтелгән тормошҡа, йөрәк башын семерләткән иҫтәлеккә әйләнде. Бөгөнгө Фәхерниса – кисәге Фәхерниса түгел, әйтерһең, Ер ҙә инде кисәге түгел ине.

Ҡала кешеһенең ҡанына һеңгән ваҡыт тойомлауынан һиҫкәнеп, хәтирәләр ҡосағынан арынды, сәғәтенә күҙ һирпене. Уның ошо эске тойомлауын дөрөҫләгәндәй, иртәнге саҫҡау һауа ҡапыл тирбәлеп шыңғырланы: Промышленность йорто манараһына һуңғы йылдарҙа ҡуйылған курантлы сәғәт туғыҙ булырға ун биш минут ҡалғанын иҫкәртеп һуҡты. Баҡса ситен ҡайыған тротуарҙа, таҡыр урамда юл хәрәкәте күҙгә күренеп ыраны: әҙәм балалары эшкә ашыға.

Фәхерниса, теге ике иҫерек бәндә йоҡа ғына эҙ сыбарлап киткән ҡарлы һуҡмаҡтан боролоп, ҙур юлға төштө, яурындары тирбәлгән халыҡ ағымында институтҡа ыңғайланы. Хәҙер ул үҙе лә ҙур ташҡынға эләккән япраҡ киҫәгеләй бөтөрөлөп, йомарланып, үҙен белештермәй ярһып-сәсәп, тигәндәй, саба: тиҙерәк, тиҙерәк барып етергә, йәһәтләп эшкә бирелергә лә эске донъяны онотторға! Бина алдындағы майҙансыҡҡа еткәс кенә, ҡапыл һиҫкәнеп туҡтаны, тирә-яғын барланы. Әүәлгенән йөрәк осон семетеп алғыс иҫтәлек кенә ҡалған: ҡар тигәнең ҡәҙимгесә ялт иттереп күрәп ҡуйылмаған, табан аҫтарына шығырлатып ыуылдырыҡтай эре ҡыҙыл ҡом һибелмәгән... Шул эштәрҙе таң тишегенән башҡарыусан һәленке сал мыйыҡлы ҡарт Кипарис, көндәгесә көрәгенә таянып, Фәхерниса ултырған бүлмә тәҙрәһе төбөндәге оҙон шыршы төбөндә һерәйеп тормай, бормас ҡапҡаслы ялпаҡ шешәһенән, тамағын ғорҡолдатып, күҙҙәрен йомоп һемермәй, шунан һуң был бар донъяһын онотоп, алыҫ-алыҫ тарафтарҙағы зәңгәр диңгеҙ, сәскә атҡан мәңге йәшел кипаристар тураһындағы моңло шиғырын һамаҡламай. Ул юҡ, ул юҡ – бөтә нәмә тик шуны хәтерләтә...

Тормоштоң бер сәйер йомғағы булып күренә ине был Кипарис ҡарт тигәндәре Фәхернисаға. Гелән тышта, нисәмә генә ҡарама, ҡыштыр-ҡыштыр эш өҫтөндә. Шымарып ялтыраған көрәк һабы, һепертке һабы төшмәй ике ҡулынан. Ҡултыҡ аҫтына ҡара икмәк, тоҙло балыҡ ҡыҫтырып ҡайтып килгән саҡтарында ғына шуларҙан буш күрәһең.

Ҡулы еткән тирә-яҡты ырҙын табағылай ҡырсып, һепереп бөткәс, урам аша сығып, мөйөштәге үҙенең һөйөклө аҙыҡ кибетенә керә. Шунда, арыш икмәге аңҡып торған прилавка аҫтында, граждандар һуғышынан ҡалған көмөш стаканы бар. Теүәл ике йөҙ илле грамм – ярты литрлы араҡының яртыһын һыйҙырышлы. Ғүмер-баҡый ҡартты танып белгән һатыусы ҡортҡа, кергәне генә һайын, көмөш стаканды мөлдөрәмә тултырып бирә, ҡарт уны ҡатып ҡалсайған тарбаҡ бармаҡтары араһында ҡыҫып тота. Мөйөшкә борола ла, стаканды бер һелтәнеүҙә тамағына түңкәреп, күндәй йылтыраған ҡыптыр тун еңенә ауыҙын һөртә. Ҡуйынынан һурып алып, бормас ҡапҡаслы йәлпәгенә тултырта. Өндәшмәй, стаканды урынында ҡалдырып, сығып китә.

Күрәгенә, йә һеперткеһенә таянып, йәне һөйгән шул урынға – мәңге йәшел кипаристы хәтерләтмеш ыршы аҫтына баҫа. Монументтай шыҡырайып, күҙҙәрен йомоп, уйға тала. Уҙғынсыларҙың туң асфальтка шаҡ-шоҡ баҫып үтеүҙәрен дә, ҡысҡырып көлөүҙәрен дә шәйләмәй ул. Шул көйөнсә, әйтерһең, ғүмере буйына шыҡайып-ҡатып торған. Фәҡәт һирәк-һаяҡ ҡына, сәғәтенә бер тигәндә генә, ҡапыл башын ҡалҡыта ла, һис кем көтмәгән моң менән баяғы сәйер шиғыр юлын ҡушарлатып ҡабатлай:

...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...
...Кипаристар сәскә атҡан саҡта...

Тауышы ҡырт-өҙөлә, күҙҙәренән ике тамсы эре йәш бөртөгө бытлығып сыға; асы көмөш бөртөктәр һорғолтланып юлаҡланған бит сырыштарынан йүгереп үтеп, ҡарҙай аҡ сал мыйыҡтары осона тәгәрләп төшә. Шул шиғыр юлын ғына буҫлығып әйтә лә ҡарт, әүәлге хәленә ҡайта – тәрән уйына сума. Әллә ҡасан йәшнәп-шаулап үтеп киткән, сәскәһе һулыған йәшлек яҙына өндәүеме был шиғыр, йәиһә башҡа изге бер нәмәгәме, һәм алыҫтағы Ҡара диңгеҙ ярҙарында үҫә торған серле кипаристар сәскә атамы ул ысынында, әллә юҡмы, атҡанда ла уны шулай моңло шиғыр юлдарына һалырлыҡ күркәм атамы – бер кем дә белмәй быны. Фәҡәт шөңгөр шиғыр юлы, һамаҡлаған сағындағы ҡарттың тын һулҡылдауы, күҙҙәренән бытлыҡҡан ике йәш бөртөгө, аңлайышһыҙ үҙе бер донъя булып, кешеләрҙе тетрәтә. Күптәренең күҙ алдына сихриәтле зәңгәр диңгеҙ, салт ҡояшлы йәшел ярҙар, тәрән моңло кипаристар килеп баҫа ла уйға һала. Һәм ул серле кипаристар ниңәлер тап ошо олпат Кипарис ҡарт ҡиәфәтендә төҫмөрләнә...

Фәхерниса эш бүлмәһенә көндәгесә кешенән элек кереп ултырҙы. Яҙыу машинкаһының сепрәк көбөн асып ебәреүгә, яңы билдәһеҙ хис ялманы йөрәген: үҙе юҡта барабанға ҡыҫтырылған ҡулъяҙмала: “**Ренард Асылғужин**. *Автореферат*. Быяла ҡалпаҡ аҫтында бикләп тотолған тәлмәрйендең тышҡы шарттарға физиологик реакцияларында психологик функцияның кәүҙәләнеше” -- тип уҡыны ул; психиатор-тәжрибәсенең үткер бысағы аҫтында тереләтә ботарланған, йәки утҡа ырғытылған тәлмәрйендәр күҙ алдына килеп, өшөмтәл ҡалтыранды: ***сос уҙаман*** *өлгөргән!* Бүтән саҡта Ренардтың был сослоғо һәм өлгөрлөгө яғымлы йылмайыу ғына уятыр ине...

Тешен ҡыҫып, машинканы шыҡылдатты. Көллө зиһене ҡалын быяла ҡалпаҡ аҫтына бикләнгән, “бөйөк фән мәнфәғәте хаҡына” ыҫпай һәм сос егет Ренард ҡулы аша тәненә электр тогы алған, осло энә тәьҫирен кисергән, скальпелдән киҫкеләнгән йәшел һыртлы тәлмәрйендәр тирәһендә уралды. Ә асылда ҡыҙҙың йөрәк иғтибары телефон аппаратында, ул унан сикһеҙ түҙемһеҙләнеп көтә, нимәлер өмөт итә... Аппарат бер-нисә тапҡыр зыңғырланы, ҡыҙ, пружиналай атлығып, трубкаға йәбеште, ләкин көткән таныш тауыш килмәне...

“Тәжрибә барышында быяла ҡалпаҡ аҫтындағы тәлмәрйендең ҡылыҡтары шуны күрһәтте, -- тип текстың хәрефтәрен берәм-берәм аҡ ҡағыҙға теркәне Фәхерниса, -- ул,

нерв системаһына яһалма тәьҫир арҡаһында, үҙенә тейешле тәбиғи яҙғы мөхиттә булмаһа ла, тап яҙғыса сарылдап йырлап ебәрҙе. Шулай итеп, *реципиент* битәбиғи тәьҫирәтте бик тәбиғи тәьҫорат итеп ҡабул ҡылды...”

Фәхерниса, төймәләргә баҫыуҙан ҡапыл туҡтап, башын өҫтәлгә һалды, күҙ алдары ҡараңғыланды. Һуңғы һөйләм, мыҫҡыл һымаҡ яңғырашлы шиғыр итеп төҙөлгән эске рифмаһы, ритмы менән, сүкешләп тиҙығандай, мейене интектерҙе: “Шулай итеп, *реципиент* битәбиғи тәьҫирәтте бик тәбиғи тәьҫорат итеп ҡабул ҡылды...” – Һыҙланып ыңғыраны: әҙәм балаларын да тап шундай реципиент яһап, яҙһыҙ йырлатырға итә түгелме?..

Телефондың шылтырауы уға йән өргәндәй булды. Теге шомло тыуған көн байрамлы кисәнән һуң да ике көн буйы телефон шулай һулығып шылтырағайны. Ғәйепле өндәшкән таныш тауыш килгәйне. Фәхерниса, трубканы алғаны, уны ишеткәне һайын, ҡунаҡ табынында табын хужаһын һуғып йыҡҡан һөмһөҙйән күҙ алдына килеп, сикһеҙ нәфрәтләнеп, бер һүҙ менән өҙгәйне. Шунан һуң ул шылтыратманы, ҡайҙалыр тәрән упҡынға сумғандай юғалды. Ҡыҙ, иңендәге тирмән ташы төшкәндәй, еңел һулап ҡуйғайны. Ә бына хәҙер һәр бер шылтыратыусының ул түгеллегенән әсенеп, уны ер аҫтынан тартып сығарырҙай өҙгөләнә, теге остағы билдәһеҙ затҡа Рәхимйән тип өндәшә...

-- Эйе, химигыбыҙ унда эшләмәй хәҙер...

Иларҙай буҫлыҡҡан Фәхерниса салт боролоп ҡараны – Йәмил ине.

-- Ҡайҙа, ни булған? – тине саҡ тын алып.

-- Башҡа ҡалаға күскән, тиҙәр. Ренард дуҫы өҫтөнән ошаҡ яҙған бит... байрам табынымда ғауға ҡуптарҙы, үҙемде туҡманы, тип... Эштәре хана уның...

-- Бахырсыҡҡынам! – Вахтер апай инеп тыңлап тора имеш. – Ҡайһындай ҙа инсафлы, мөләйем егет ине! Уҡымышлы, ғалим әҙәм булһа ла, үҙе шундайын-шундайын оялсан ине. Йәй буйына ҡосаҡлап сәскә килтерҙе. Тик шуны ла үҙ ҡулынан тапшырырға ояла: Фәхерниса ҡыҙымдың яҙыу өҫтәленә йә Ренард Сәйфелмөлөкович аша һалдырта, йә минән бирҙертә ине...

-- Ә, нимә?! – Фәхернисаның күҙҙәре шарланды. -- Уф! – Ҡыҙ ҡуш усы менән йөҙөн ҡапланы. – Ниндәй оят! Мин ул гөлдәр Ренардтан тип белдем бит...

-- Алырһың ул бөтмөштән! Раштыуала ҡар бирмәҫ *сосйән* бит ул! Улмы ул...

Вахтер апаһының һәр әйткәне йөрәгенә энә булып ҡаҙалған Фәхерниса, түҙә алмай, бүлмәнән сығып йүгерҙе...

## 12

Оло ғауғалы тамамланмыш тыуған көн табынынан һуң бер-бер артлы ялғанған ял көндәре дауамында тамам айнып, баш-күҙ алып, әүәлге ыҫпай егет хәленә ҡайтҡайны инде Ренард. Шул төндән һуң күрше-күләндең береһендә лә Кипарис ҡартты күргән-белгән булмағас, вокзалдарҙы ҡыҙырып сыҡты, ҡала үлекханаһына шылтыратып һорашты, береһендә лә ундай юҡ. Тешен ҡыҫып йәнә лә аҙна-ун көн кисергәс, башын баҫып уйланып ултырҙы ла, олаҡмыштың ҡыптыр туны менән ҡуян бүреген, баллон калушлы быймаларын ил аяғы һил мөҙҙәттә зират ҡоймаһы буйындағы сүплеккә илтеп яҡты. Бер-нисә тәүлек үтеп, шуларҙан көл ҡалыуына инанғас, тынысланып, милиция бүлегенә шылтыратты – кейенеп сығып киткән еренән алкаштың ҡайҙалыр олаҡҡанын һәм, моғайын, шешәләштәрендә һамҫып ятыуын хәбәр ҡылып, былдай хәлдәр элек тә йыш ҡабатлана торғайны, һеҙҙең ҡулға тарыманымы шул ахмаҡ, тип белеште.

Эшендә лә ошолай тип аңлаткас, бығаса прогул яһамаған Кипаристың көтөлмәгән ҡылығына аптырай биреп ҡуйһалар ҙа, айнып ҡайтып шөғөлөнә керешеүен көтөргә, шуға тиклем ваҡытлыса кеше яллап торорға килештеләр.

Ренард әүәлгесә көндәлек эшенә елеп бара, әүәлгесә алсаҡланып һөйләшә, коридор яңғыратып көлә, әммә йөрәк тигәнең урынында түгел, нимәнелер шомланып һиҙенә ине. Өҫтәүенә... өйҙә тап Ренардтың бүлмәһенең тәҙрә тәңгәлендә генә күҙ көйөгө: иҫке толь, ҡар менән көпләп суҡайтылған кипарислы ҡыуыш Ренардтан яҡты донъяны ҡаплап, эсте бошороп тора. Шул ғына етмәгәндәй, ләңкелдәк эт Мопсы ла бит тәҙрә төбөнә ырғып менә лә шунда төбәлеп өрә, хатта муйынсаҡлап хәжәтен үтәтергә сығарғанында ла, шыңшый-шыңшый, шул яҡҡа тартылып йонсота...

Ренард ошо Кипарис ҡарт ултыртҡан, кипарис тигән хәйерһеҙ ағастан кисекмәйенсә арынырға теләне. Зиратта ҡәбер ҡаҙыу шөғөлөндәге атаһының элекке таныштарын – мәңге иҫерек ике бәндәне яллап килтереп, төшөмлө эшкә йәһәтерәк керешергә ҡыҫтаны, тик тегеләре үтә яй ҡыбырланы. Береһе, ҡар аҫтынан саҡ-саҡ ҡына төҫмөрләнгән эҙ буйынса кипарислы ҡыуыштың артына үтеп, ҡыуыш төбөндә яңыраҡ ҡыш бауырында өңөлгән, әҙәм башы һыйырлыҡ тишектән үрелеп-үрелеп ҡараны, тик ҡараңғыла бер ни ҙә күренмәне. Ренардтың ашыҡтырып мыжыуына тамсы ла иғтибар итмәй, шешә боғаҙынан уртлап берәрҙе йотҡастары ғына, ҡәнәғәт тамаҡ ҡырып, суҡалтайҙы һүтергә керештеләр. Тирә-яҡҡа ҡар бураны туҙҙырып, ҡар аҫтынан сыҡҡан толь ярпыларын бырағтырып, ҡыуыш һайғауҙарын тартып ауҙарҙылар һәм... көтөлмәгән хәлдән ҡойолоп уҡ төштөләр: яланаяҡ-яланбаш, йоҡа эске күлдәксән генә Кипарис ҡарт үҙенең йәшел эскәмйәһендә кипарис олонон ҡосаҡлап ултырып ҡатҡан...

Милициянан килеп теңкәгә тейҙеләр: ҡайҙа туны, бүреге, тип ныҡынылар. Кейенеп сығып китте, алкашланып сисенеп ташлағандыр, тигәс, әгәр сисенеп ташлаһа, ҡайҙа улар, тип тере йәнде алдылар...

Ҡәбергә төшөргәндә Ренард Кипаристың табутын ҡосаҡлап иланы, зират янындағы "Батыр" кафеһында мул һыйлы хушлашыу табыны ойошторҙо.

Тәфтишселәрҙең эше оҙаҡҡа һуҙылманы -- әжәле өсөн алкаш үҙе ғәйепле, тип таптылар...

Өфө, 1971.

# ТОМБОЙОҠ

## I

Спектакль аҙағынан театрҙың арткы ишек төбө, ғәҙәттәгесә, балға һырыған һағыҙаҡ өйөрө шикелле ала-ҡола кейенгән нәҙек һираҡлы, ялбыр яллы егеттәр, шул уҡ егеттәргә оҡшаш ала-ҡола ҡиәфәтле, тик ни бары ҡаштары аҫтына күгәртеп һөрмә тартҡан, ҡаранан оҙон яһалма керпектәр йәбештергән, шул аҡшайған күҙҙәре менән генә нәҙберек енес икәнлектәрен төҫмөрләткән аҙмыш ҡыҙ-ҡырҡын – балет сәхнәһе йондоҙҙарының саманан тыш мөкиббән киткән алҡышсылары менән туп-тулы ине. Артистар ҡайтырға сыға торған, ике яндан таш арыҫландар ажырайып һаклап ятҡан бейек болдорҙоң тирәһен, бер-береһен этәрешеп, уратып алғандар ҙа ишектең һәр асылып-ябылыуын ығы-зығылы шау-шоу менән оҙаталар, ҡайберҙәре "үҙҙәренең йондоҙҙары" артынан, ат ҡойроғона тегелгән тегәнәктәй, такси машинаһына, йәки троллейбус туҡталышынаса күҙҙәрен тызырайтып тағылып китәләр.

Прима-балерина Сәғиҙә бер ҡосаҡ сәскә күтәреп болдорҙа күренгәндә был тынғыһыҙ йәмәғәттең тап шул ҡайнашып торған мәле ине. Ҡыҙҙың тупһа аша һалған тәүге аҙымы уҡ, әйтерһең, сая ҡырмыҫҡа иләүенә таяҡ тығып болғатты: тел шартлатып һоҡланыу аралаш күккә һәр төрлө берет, эшләпәләр оса башланы, фотоаппарат затворҙары шытырланы. Ә бер сеп-сей ерән һаҡал баҫҡан, ерән сәсе туҙғаҡбашланған, өҫтәүенә шундай уҡ сеп-сей ерән костюм кейгән мыҡты әҙәм, һыуыр һымаҡ йөнтәҫ тоҡом, иң алғы рәттә ҡарғып тороуы менән дә мөрәхәтһенмәй, яҫы балағын ялпылдатып килеп асфальт юлға һуҙылып ятты, ҡыҙҙың томбойоҡтай тынҡыс балтырҙарын ҡосоп алырҙай ымһынып, күҙҙең яуын ҡайтарырҙай ҡайын туҙы һымаҡ ап-аҡ туфлиҙәрҙең эҙен үбеп тилерҙе...

Юҡ, прима-балерина Сәғиҙә быңдай сөсөләнеүҙәрҙе күтәрә алмай ине. Сығырҙан сығып борғаланыуҙарҙың береһен дә күрмәгәндәй, кешеләрҙең башы аша ҡарап тыныс атланы; көндәгесә арыған, хыялһыуланған, моңһоу ине ул. Аяҡ табанын яларҙай булып ятып ҡалған баяғы ерән һаҡалтайҙың яҙғы сағыу бөжәк – еңгәсәй төҫлө ҡанһыу-ҡыҙыл күҙҙәре генә күңел офоғонда бер мөҙҙәткә тимгелләнде, ҡыҙ хатта һулышын ҡыҫты, туҡтарға итте, әммә шунда уҡ сәйер хисе онотолдо – аяҡтары аҫтында ни бары әлеге мәхлүҡ-бөжәк, ҡыҙыл еңгәсәй генә, әйтерһең, үрмәләп бара ине. Юҡ, беҙ иҫәүән тип һанаған бабаларыбыҙ төптө иҫәүән булмаған – сәнғәт һарайының болдор-тупһаларын ажарлы таш арыҫландар менән һағауыллатып яңылышмаған. Матурлыҡ арткы ишектән таратылмай, ҡыҙыл еңгәсәй күҙҙәр менән үлсәп-нарыҡлана алмай, Матурлыҡты арыҫландар ҡурсалап һаҡларға тейеш!.. Сәғиҙәнең күҙ алдында әле һаман тере тамаша залы, ундағы ҡуҙҙай янып баҡҡан йөҙәрләгән саф күҙҙәр, илаһилап алҡышлаған илһамлы йөҙҙәр һынлана, тамашасы күкрәгенең ҡәнәғәтләнеп гөрөлдәүе, йөрәкһетеп, ҡолаҡтарында шаулап тора. Ул хатта был йылы хисте, уны илһамдарға сумырып оҙатыусы илаһи көстө таш стена үтә лә һаман артында тоя ине – ҙур сәнғәттең ысын алҡышлауҙары ана ҡайһындай ул! Ә былар, -- Сәғиҙә ян-яғына күҙ һирпеп кенә ошо хаҡта уйланы, -- ә былар – саф алҡыштың йәмһеҙ төпөрәһе генә. Сөнки һәр нәмәнең үҙенең сиге бар, ә сәнғәттең сиген хәтәрлекле аша атлаған, Матурлыҡтың арткы яғына тексәйеп сыҡҡан тампашасы... себенде хәтенрләтә...

Аңғартмаҫтан болоҡһоҡан был тойғонан ҡотолорға теләгәндәй, прима-балерина аҙымдарын йышлатты, ҡосаҡлап тотҡан гөлләмәһен күкрәгенә ҡыҫмаҡланы. Ҡуҙҙай дөрләү роза сәскәләре ҡыҙҙың һулышынан ҡуҙрап тоҡана кеүек ине. Араһындағы бары бер дана сәскә -- аҡ томбойоҡ сәскәһе генә йөрәгенең ап-аҡ ҡыҙыулыҡҡа еткән хәтәр утлы үҙәгенән ҡурпығандай нурланып, утлы бәбәктәре ҡуша сатрашланып, ҡандай алһыу

таждар йәнәшәһендә ап-аҡ саҡтҡы рәүешендә балҡыған. Эйе, тере бөрө-бәбәктәрен ҡапырайтып, саҡтҡыланып нурын тирткән ошо бер бөртөк аҡ гөл ҡыҙ күңеленә әллә ниндәй утлы-ҡуҙлы тилереүҙәр һала ине... Сәғиҙә был сәскәне сәхнә түренә яуҙырылған бик күп гөлдәр буранынан айырым-асыҡ танымы, һауала килеш үк һонолоп тотоп алды. Егете, -- эйе, егете! – уға һәр саҡ Ағиҙелдең тәрән һулышын бөркөлдөрөп килтермәле танһыҡ бүләк ине был. Әммә ошо ғәҙәттәге ал ҡыуаныс араһына тәбиғәттең сихриәтле аҡ һабағы итеп ҡурпытылған ап-аҡ бер генә бөртөк – сағыу аҡыҡ томбойоҡ – бөгөн ҡыҙҙың йөрәк башын иҫләмәҫтән семетеп алған, бөрөп тотҡан, табандарҙан планетаны тибәртеп шашҡын елкендерткән тылсымлы көс ине шул. Әгәр эш улайға китһә, дөрөҫөн генә әйткәндә, ул прима-балерина булмаҫы борон уҡ әле, балет сәхнәһенә менеп беренсе “па” яһауҙан уҡ, нисәмә йылдар буйы ошо изге сәғәтте көттө...

## II

Икеһенең күҙҙәре тәүбашлап һис бер абайламаҫтан, “Томбойоҡкүл”де бейегәндә төкәште. Сәхнәгә яңы-яңы ғына сыҡҡан ҡауырһын ҡанатлы йәш солистканың һәр талпыныш-хәрәкәтен йотлоғоп тамаша ҡылған йөҙәр, меңәр күҙҙәр араһынан күңел тигәнең ни өсөндөр бер тәңгәлдә туҡталды. Унда Ағиҙел йылға пароходствоһының ҡупшы кейемен кейгән йәп-йәш матрос ултыра ине. Артҡа яллатып һыпырылған муйыл-ҡара сәс ырмауын өҫкә этәреп ҡалҡынған яҫы маңлай. Ҡаш дағалары аҫтынан сөм-ҡара күмер төҫлө яндырып, албырғатып, үҙәктәргә үткәҙгәнсе иҫәрләтеп баҡҡан күҙҙәр... Сәғиҙә сыҙай алманы: бейеп барғаны килеш ҡапыл әйләнеп, һирпелеп бер ҡараны. Егет шунда уҡ оялып башын эйҙе, аҙаҡ ҡыҙ уның яндырау-утлы ҡарашын, төндө тишеп тоҫҡалған прожекторҙай, бейеү бөткәнсе үҙ тәнендә тоҫмалланы. Әммә күҙҙәр, күңел пәрҙәһен тишеп өлгөргән күҙҙәр, инде хәҙер бер-береһенән оялып ҡасыр булды: егетте лә, ҡыҙҙы ла – икеһен дә әллә ниндәй оялсан хис сорнаны ла елкетте. Ҡараштарҙы ҡушарлатҡан тетрәндергес баяғы мәлдә Сәғиҙәнең йөрәгенән бармаҡ остарына саҡлым ҡайнар ялҡын йүгерҙе, һәм был сихри секунд уны ҡапыл ҡауырһындай еңеләйтте. Ул һуҙылып-һуҙылып һауаға осҡанында планетаның тартыу көсөн бөтөнләй тоймай башланы, үҙен күктә ағылып йөҙгән аҡ болоттай хис итте...

Шул хәйерле секундтан һуң күпме елдәр иҫеп, күпме һыуҙар аҡты; аҡ томбойоҡ булып бейегән наҙлы тәпәйҙәр аҫтына күпме ҡайнар алҡыштар, аҫыл сәскәләр яуҙы, алдағы күпме спектаклдәрҙә ул ерҙең барлығын тоймай елкенеп бейене. Шунан алып теүәл алты йыл үтте, ябай балерина – прима-балерина булып күтәрелде. Ә баяғы утлы ҡараш һаман бер тамсы ла һүрелмәй, партерҙағы шул бер тәңгәлдән уны һәр бер премьера спектаклендә кулуарҙар артынан уҡ сәхнәгә тартып ала, сәхнәнән йотлоғоп оҙатып ҡала ине. Был донъя бик ҡыҙыҡ бит ул: балерина, ирекһеҙҙән, шул тарафҡа, шул ҡарашҡа эйәләште, уны көндәренең ғәзиз бер нуры, туғаны итеп күрә, уны болоҡһоп көтә, унһыҙ йәшәй алмай кеүек...

Йәйге гастролдәрҙә йөрөп зарығып ҡайтҡаны һайын, Сәғиҙә тәүге спектаклгә урамдан уҡ йөрәге менән лөпөрләп бейеп килә, ниндәйҙер сихри яҡынлыҡ, тартыу көсө тойоп килә. Иң-иң һағыныслы ҡараш шаршау асылып киткәс тә үк, шул танһыҡлы бер тәңгәлдән уҡтала, Сәғиҙәнең ҡарашы ла шул тәңгәлгә туҡтала. Кешеләрҙе йөрәкһетеп бер-береһенән айырған, хатта уларҙы ҡаршы ҡуйған ғәмле донъя ошо мәлдә, тамаша залы менән сәхнә сәнғәт тылсымына төрөнөп арбалған иң илаһилыҡлы минуттарҙа, был икәүҙең бер ыңғайҙан өлпөрәп типкән йөрәге аша бергә килеп тоташа...

Ә бер заман көтмәгәндә сәхнәлә бейегән аҡ томбойоҡтоң яурындарын күк көмбәҙе ҡараҡурғашланып баҫты, ер көрмәге ҡаурыйҙарын ҡуҙғалтмаҫлыҡ итеп тартты, епә-еңел ҡауырһын тән суйын менән тулышҡандай тойолдо, ауырлыҡты күтәрә алмай күҙҙәрҙән йәш ҡойолдо – матросы юҡҡа сыҡты... Эйе, юҡҡа сыҡты. Айҙан һуң да килмәне, ҡыштар үткәнсе лә күҙен күрһәтмәне. Йәй башынан театр илдең алыҫ яҡтарына гастролгә китте. Сәғиҙә, матросты ла карабы менән зәңгәр юлдар ылыҡтырғанға һанап (сөнки Ағиҙел йылға кәмәләре инде диңгеҙгә лә сығып йөрөй башлағайны), таныш күҙҙәр менән ҡабат осрашыуҙы көҙөн ҡайтҡас, туған ҡала урамдарында олпат олонло йүкәләрҙең һары япраҡ бурандары уйнағас, ә сәхнәлә өр-яңы сезон башланғас өмөт итте: театрҙың тантаналы яңырып тыуыу миҙгелдәрен матрос һис ысҡындырмаҫ. Әмә икенсе сезонда ла илһамсыһыҙ ҡалырға, сөмөрөм күҙҙәрҙе күрмәй бейергә тура килде, бының ниндәй самаһыҙ асы икәнлеген сәхнәнән үҙегеҙ татып белһәгеҙ ине!.. Бер һүҙ менән әйткәндә, партерҙағы Ағиҙел матросы утлы ҡараштарын бөркөп һөйөнөп ултырыр урын, уны башҡа берәүҙәр биләһә лә, Сәғиҙә өсөн буш ҡалды, йәнһеҙ ҡалды...

Йөрәктәге иҫләмәҫтән алған яра һис кемгә лә һиҙелмәйенсә ҡанһырап бөтәшеп барғанда, матросы зәңгәр офоҡтарҙа һүрелеп юҡҡа сыҡҡандан һуң театрҙа өсөнсө сезон асылғанда, бер заман Сәғиҙә онотолоп йәнә ап-аҡ томбойоҡҡа әүерелгәндә, ҡапыл ғына ялҡын уртлап алғандай, һулышы киҫелде ҡыҙҙың, йөрәге туҡталды, тәнен залдан ойҡолған үрт ялманы. Аҡ томбойоҡ, моғайын, бейеүҙең иң күтәренке, сая хисле мәлендә, иң хәтәрле талпыныштында ҡапыл туҡталып, ҡатып, һабағын аҫтан салғы киҫкән үләндәй ҡалтыранып ҡуйғандыр: алда ултырған йәш кенә бер тамашасы "ой!" тип йөрәкһеп тертләне. Шул ҡыҫҡа мәл бөтәһен дә хәл итте: балерина партерҙағы таныш ултырғыстан тура үҙенә йүнәлтелгән утлы ҡарашҡа сумды, дөрләп китеп йәнләнде, көлдән ҡалҡынған Феникс-ҡоштай тылсымланып талпынды. Ҡапыл гөртләп ялҡынланыу тамаша залын гөрләтте, алҡышлап ҡул сабыуҙар сәхнәне тетрәтте. Балеринаға бейеүҙән туҡтап тубыҡтарын бөгөргә, тамашасыны хөрмәтләп баш эйергә тура килде. Иҫ китмәле арауыҡта Сәғиҙә егетен таныны: инде ҡупшы һалдат кейеме кейенгән һәм уға алйырҙай бағынған тамашасы – тап үҙе, теге саҡтағы Ағиҙел матросы ине! Ошонан һуң күрһәгеҙ икән күктәрҙең күкрәп киңәйгәнен, томбойоҡ тәпәйҙәре ерҙе, -- эйе, Ер шарын! – типсеп-тибәреп ебәргәнен!..

Егет тиҙҙән, моғайын, ҡабат үҙенең пароходствоһына урынлашты – йәшел һалдат формаһын зәңгәр йылғасы кейеменә алмаштырҙы. Тик был юлы матрос түгел – уҡалы погондар таҡылған етәксе ҡор мундиры ине уның күҙгә күренеп ҡалҡынған, яҫырған мыҡты иңдәрендә. Үҙен сәхнәнән оҙатҡанда аяғөҫтө баҫып тороп, юғары күтәреп сапҡан көрәк ҡулдарында моторҙар менән булашыусы ысын хеҙмәт кешеһенең тамғаһын – ҡараһыу мазут төҫөн шәйләп, Сәғиҙә хыялый егетенең берәй машина, механизм тирәһендә эшләгәнен шәйләне, был иһә уның хыялында егетте ергә тоташып үҫкән төп имәндәй ҙурайтты, серләндерҙе... Ниңә йәшереп маташырға: Сәғиҙә, әллә инде үҙе яртылаш күккә сөйөлөп йәшәгәнгә, ергә батыбыраҡ торған кешегә -- ябай хеҙмәт эйәһенә танһығып тартыла ине.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, Сәғиҙәнең артынан ҡалмай йөрөүселәр быуа быуырлыҡ әле. Ус туҙҙырып сәпәкәйләп ултырыусылар араһында ғына түгел, ә сәхнәлә бергә бейегән егеттәрең дә итәгеңә балауыҙҙай һыланып, татлы балдай яғылып ҡына бара. Әммә йылдар йүгереп үтә торҙо, теге егете булмағас, ҡыҙ күңеле еңел-елпе ғишыҡ утын әллә ни һанламаны. Ул бары тик һауала осоп бейеү менән, үҙен һауала тотҡан баяғы хыялый көс – матросының, залда үҙе булмаһа ла, күңеленә һеңеп ҡалған утлы-татлы күҙ ҡараштары менән мауығып йәшәне. Уның өсөн, бифайни, билде һындырырлыҡ ҡосҡан ҡосаҡтар ҙа, ҡанатҡансы һурып үбер ирендәр ҙә юҡ ине. Таңғы ысыҡтай мөлдөрәмә ҡыҙ сафлығын,

намыҫын да шул ике хаҡ тылсым – сәхнә һәм хыялый көҙҙәр өсөн юғары күтәреп һаҡланы. Мөхәббәттең түбән ерлекле талабына буйһонһа, баяғы ике хоҙайына бер юлы хыянат итер, күккә осорған ҡанаттары ҡыйылыр кеүек ине. Камиллыҡтың сигенә еткән һомғол тәндең ваҡыты менән үлтереп-тилертеп ымһыныуҙарын татыманы түгел татыны, әммә нәфсе тигән нәмәһен баҫырға ла өйрәнде. Алйырҙай булған саҡтарында яңғыҙ үҙе генә ҡалып сигарет ҡабып алыу ғәҙәте – хәтәр ғәҙәт – бәлки, ошоноң касафатылыр... Зарарлығын белә тороп, ваҡытында тыйылып ҡала алманы, иптәштәренә һиҙҙертмәй йәшереп тартты. Ләкин, йылдары ағылған һайын, тере йәнгә изге итеп тәбиғәттән тәғәйенләнгән нимәнеңдер етешмәүе, шунан ҡарышып баш тартыуҙың хәтәрлеге нығыраҡ тойола икән; әсе тәмәке төтөнө лә дәртте һүрелтә алмай, уғата йөрәкһетә икән: күпме генә күккә сорғолоп талпынһаң да, йәшлегеңдең һыҙылып ҡына үтеп китеп барғанлығын, Ҡош Юлдарын иңләп алырҙай ырғып осҡан буй-һыныңдың шулай ҙа ерсән икәнлеген, шуға тартылып ятҡанлығын тояһың. Һәм баяғы партерҙағы танһыҡ тылсым көҙҙәренең йәшерен-серле саҡтыһын ғына түгел, ә теп-тере эйәһен дә уның бөтмәҫ хыялыйлығынан тартып алғың, ҡосоп күкрәгеңә ҡыҫҡың, бик-бик яҡынайтҡың килә...

Дөрөҫөн генә әйткәндә, егетенең ҡыйыуһыҙлығы ҡыҙҙың теңкәһенә тейә башланы, йәшлек тигәнең елеп кенә үтеп бара бит инде...

### III

Сәғиҙәнең күҙ алдында мыҡтыланды ул егет. Тәүҙә, хәтерҙә, матрос күлдәгенең иҙеүҙәрен ала-ҡола тельняшкаһы һыртлығынан яра асып ебәргән, ҙур ҡулдарын ҡыйыу юғары күтәреп сәпәкәйләгән мыҡты үҫмер ине ул. Тора-бара эйәгендәге себей йөндәрен электр бритваһы йышып мөнтәҫләгән һөмөрө ҡамыл төптәре алмаштырҙы, ҡарҙай аҡ нейлон күлдәк өҫтөнән муйынына йоморо төйөнләп ауыр галстук бәйләнде. Ҡулдарын да йышырағын үргә күтәрмәй генә, алдына һалған килеш кенә йыбанып саба башланы. Әммә күҙ ҡарашы әүәлгесә ҡомһоҙ, яндырай-утлы ҡалды. Сәғиҙә йәнә лә бер нәмәгә үҙе лә һиҙмәй ҡыуанғанын асыҡланы: утлы ҡараш эйәһе һаман яңғыҙ килә театрға. Дөрөҫ, ҡайсаҡта уның эргәһендә Сәғиҙә ҡасандан танып белгән, үҙ итеп күнгән бер үк ҡарт менән ҡарсыҡ (ата-әсәһе, буғай), әммә һис ҡасан да янына сәхнәләгенең йөрәк итен өҙөп алырҙай ҡыҙ-ҡырҡын ултыртҡаны юҡ. Йәшермәйек: ошо хәл һуңғы ваҡыттарҙа Сәғиҙәне айырыуса болоҡһотоп уйландырҙы. Иҫең китмәҫлекме ни: нисәмә йылдар икеһе тиң йөрәктәренең төптәренә үткәҙгәнсе рампа аша ҡарашып, әммә ергә төшмәйенсә ҡанат ҡағышып йәшәне! Һәм улар инде икеһе лә күктә елкенеп арығанлығын, ер йылыһын табан менән тойорға ваҡыт еткәнлеген һиҙемләй кеүек ине. Ә бер спектаклдән һуң ошо хис уларҙың икеһенә лә көслө әҫәрләнеү бөркөп һирпелде.

Сәнғәт менән тормош ҡуша үрелеп барған ошо гүзәл заманабыҙҙа һәр бер тере һабаҡтың, Ҡояшҡа үркелеп үҫкән гөлдәй, Матурлыҡҡа йөҙ бороп тартылыуын, шуға һыуһаған халыҡ һәүәҫкәрлеге үҙешмәкәр театр түңәрәктәренә уҡмашып ылығыуын, ҡаланың байтаҡ урындарында йәмәғәт башланғысындағы сәнғәт университеттары күкрәп сәскә атыуын Сәғиҙә, әлбиттә, белә ине һәм шуларҙың бер-нисәһенә шефлыҡ та итә ине.

Бына бер заман Күк дөһөрләп ярылып киткәндәй булды: уға бөтөнләй иҫләмәгән тарафтан – Ағиҙел йылға пароходствоһында яңы асылған йәмәғәт башланғысындағы сәнғәт түңәрәгенән саҡырыу килеп төштө. Ә иң мөһиме шунда: хатты елдереүсе курьер ҡыҙ йылтыр яры ҡағыҙға төрөлгән зиннәтле һуйҙан һабаҡ – күҙе асылып ҡына килгән аҡтан да аҡ томбойоҡ сәскәһе тапшырҙы, өҫтәүенә, нисектер, хәйләле мут йылмайып: “Ә быныһы һеҙгә үҙегеҙ белгәндең сәләме”, -- тине. Иҫең-аҡылың китер: ҡара яҙҙан

томбойоҡто ҡайҙан эҙләп тапҡандыр, бының өсөн, бәлки, дәүләт Ботаника баҡсаһының сихырлы "сим-сим" ҡапҡаларын астыртып керергә лә кәрәк булғандыр – ҡыҙ өсөн тәрән сер ҡалды. Ул бары шуныһын йөрәге менән тойҙо: был – ***унан!..***

Йылға вокзалында ҡыҙҙы ысынлап та танһыҡланған ҡара күҙҙәр ҡаршыланы, һәм таксиҙан сығырға йәһәт ярҙамлашып һонолған ҡул уның ҡулы менән татлы тоташып, бөтә тәне шунда уҡ уттай ҡыҙышып, беренсе тапҡыр йән түгел, ә тән тартҡан яҡынлыҡҡа – ҡул ҡыҫышып күрешеүгә әүерелде, ошо мәлдә икеһе тиң эстән дөрләп дерелдәне.

-- Сәғит, -- тип исемен әйтеп таныштырҙы егет, бер ус яҙғы аҡсәскәләр тоттороп.

-- Сәғиҙә... – Исемдәрҙең теүәллекле тап килеше ҡыҙҙы бераҙ ҡаушатты, ҡолаҡ остарынаса ҡыҙҙыртып ҡыҙартты – хаҡ яҙмыштың үҙенең ҡушыуы булып тойолдо уға. Шулай ҙа ҡыҙ баҙауын йәшерә алды, һурылып сығып барған йөрәген ерсән тормош ҡанундарына буйһондороп, ҡәҙимге һалҡын ҡанлылығын ҡайтарҙы (һәр хәлдә, үҙенә шулай тойолдо). Сәғит, тулҡынланыуын һиҙҙертмәй, һис тә хыялый Күктән осоп төшмәгәндәй, ергә ирҙәрсә ныҡ баҫып, ҡыҙҙы ысын азаматтарса ҡултыҡлап алып китте – залда халыҡ йыйылып бөткәнсе, йәнәһе, уны үҙҙәренең "ялғашы" менән таныштырырға булды. "Ялғаш" тигәне – Сәғиҙә Ағиҙел йылғаһында йыш күргән, ҡырмыҫҡалай һарғылт кәүҙәһе даими билдән һыуға батып, үҙенән ун-егерме тапҡырға дәүерәк баржаларҙы, йәки буйы саҡрымға һуҙылмыш һалдарҙы тартып йөрөгән, мәңге тынғыһыҙ, мәңге эшсән буксир-теплоход ине. Алтын ҡомло пляждарҙа ятҡан саҡта балерина был "ҡырмыҫҡа"ларҙы ҡыҙыҡһынып күҙәтә, әммә һис тә уларҙың береһендә тап үҙенең ярты йәне атлығып китеп барғанлығын шәйләгәне юҡ ине. Ошо асыштан ҡыҙҙың йөрәге сыға яҙып талпынды, уға хәҙер йөкһөҙлөктән йүнкеп арт яғы һыу өҫтөнә ҡалҡынған ябайҙарҙан ябай буксир ҙа, унда ҡыбырҙаған ябай кешеләр ҙә донъяһының, йәненең бер иң ҡәҙерле киҫәге булып күренде, уның ошонда осоноп бейегеһе, сыңратып йырлағыһы килде...

Караптың эсен күрештереп, траптан кире ярға сығып барғанда ул түҙмәне: Сәғит менән икеһенә һушы китеп ҡарап торған, танауы ҡара мазутҡа буялған йәш матрос янында туҡталды. Ҡапыл иҫте китәргәне – бесәйҙеке һымаҡ йәм-йәшел күҙҙәре ине.

-- Исемең кем, азамат? – тип һорағанын һиҙмәй ҙә ҡалды.

-- Алеша мин, ә ниңә? – тине егет, оялышынан тимгел-тимгел ҡыҙарынып.

-- Их Алеша, Алеша... – Ҡыҙ уны Сәғиттең үҙе белгән матрос сағына оҡшатты (тик бының күҙе йәшел ине) һәм, йәшлегенең хыялыйлығы менән мәңгегә хушлашҡандай, шул йәшел күҙле матростың түш кеҫәһенә усындағы сәскәләрҙең береһен ҡаҙап китте...

Шул йәмәғәти сәнғәт түңәрәгенең мөкиббән китеп тыңлаусылары менән кинәнеп осрашҡандан һуң, Сәғиҙәнең үҙенә лә мәңге яңы, мәңге серле Матурлыҡтың бығаса күреп беленмәгән бер саҡҡыһы шаңдаҡланып һирпелгәндәй булды, әйтерһең, ихлас йылғасылар күңеле аша, уға һылыу Ағиҙелдең ҡыйылып осҡан аҡсарлаҡлы таңдары, аҡ сабаҡлы тулҡындары пакландырып яғылды. Кисә тамамланғас, Сәғит уны баяғыса ҡултыҡлап оҙата сыҡҡас, әллә инде айырылышыуҙың асыһын алдан кисереп, ғүмерҙә булмағанса, такси туҡталышында улар йөҙгә-йөҙ яҡынлашты; икеһе тиң, һулыштары ҡапланып, әйтер һүҙҙәрен йотоп, баштары әйләнеп торҙо. Ҡыҙ үҙенең ни рәүешле "Волга" салонына инеп ултырғанын да шәйләмәне. Фәҡәт такси бераҙыраҡ киткәс кенә, йөрәге асырғанып, ***уның да*** бергә ҡушарлап инеп ултырмағанлығын, тере тирәк һабағынан тартып өҙөлгән япраҡтай, тегендә тороп ҡалғанлығын абайланы. Сәғиҙә өйгә һис ҡасан да булмағанса әҫәрләнеп, йөрәкһеп, шул уҡ ваҡытта киләсәктән ниндәйҙер мөғжизә өмөтләнеп ҡайтып инде. Шул өмөтө уны киске спектаклдә бейергә аҡҡоштай осортоп килтерҙе, сәхнәлә бығаса күрелмәгән илһамиәтле осонорға насип итте. Тамашасыларҙың шаулатып ҡул сабыуҙарынан, өҙлөкһөҙ "бис!" ҡысҡырыуҙарынан ярым

алйыу, ярым иҫерек хәлдә ине ул тамаша аҙағында; сәхнәгә яуған аллы-гөллө сәскәләрҙең иҫәбе-һаны юҡ ине. Эйелеп алған гөлләмәләре ҡосағына һыймағас, артта теҙелешеп торған сәхнәләштәренә таратып биреп, сәхнә ситенә кире әйләнеп килгәйне, бөҙрә-көҙрә һаҡалы һәм туҙғаҡ сәсе төҫөндәге сағыу-ерән костюм кейгән баяғы бер баламут, заманаһының иң модалы галстугында сағыу аҫылташ балҡытып, уға бик дәү сәскә бәйләме һондо, үтенесле зәңгәр күҙҙәрен ҡыҙҙың күҙҙәренә тура төбәп ялбарҙы – теге ваҡыт ул ҡайтырға сыҡҡанында ергә ятып уның аяҡтарын ҡосорға иткән, хатта эҙҙәрен үпкән әрһеҙ бәндә ине был. Гөлләмәһен үрелеп алғаны ыңғайында уның һуҡ бармағындағы ағалтын балдаҡтың гәүһәр ҡашы (бәлки яһалма таштыр – кем белһен!), бысаҡтай саҡҡыланып, ҡыҙҙы сытырлатып күҙҙәрен йоморға мәжбүр ҡылды; шул ыңғайҙа Сәғиҙә үҙенең гөлләмә ҡосҡан беләгендә ерән түклө һөмһөҙҙөң супылдаған еүеш ирендәрен, һаҡал мүктәрен тойҙо... Ытырғанып, гөлләмәһен рампа бүкәненә һалды, ҡосағында күкрәгенә ҡыҫып тотҡан бер гөлләмә генә ҡалды. Ерән һаҡаллы, костюмлы бәндә артҡы планға күсте – йөрәген елкеткән мөғжизә көтөү тойғоһона күмелде. Сөнки ҡыҙҙың ҡосағында килеш ҡалған, йөрәгенә тамыр йәйгән йыйнаҡ ҡына гөлләмәлә берҙән-бер дана ап-аҡ томбойоҡ сәскә -- йылғасы егет менән үҙенең саф хыялый өмөтө тиртә ине. Ә томбойоҡ сәскәләре араһына беркетелгән аҡ ҡағыҙҙа тик бер тылсымлы яҙыу: “Көтәм!..”

## IV

Егет иһә был минутта театрҙан сыҡҡан ерҙә -- арыҫландар һыны янында – ысынлап та көтә ине. Өҫтөнә ҡара костюм эсенән ҡарҙай балҡыу күлдәген кейеп, айбарлы галстук бәйләгән, һумалалай сәстәрен һындырып артҡа һалған. Бағананан ҡойолған неон яҡтыһында, сыҙамһыҙланып ҡымшанһа, майлаған һағыҙ төҫлө лаклы туфлиҙары, һумала сәсе сағыуланып ялтырай. Театрҙан ағылған халыҡ тарафына уҡталып, Сәғит бер нәмә уйлай: булырмы, изге сәғәт һуҡтымы?.. Йылдар һуҙымы буйынса шул бер изге сәғәтте өмөт итеп, ул үҙенә ерсән бәхет вәғәҙә иткән аҙмы ябай минуттарҙы ҡулынан ысҡындырҙы, әкиәттәге Мәжнүндәй, ҡулдарын Күккә (йәғни сәхнәгә!..) һонған килеш йәшәне. Дөрөҫ, ул Мәжнүнсә тилереп кенә йөрөмәне, ә берҙән-бер мөхәббәте хаҡына, Матурлыҡ хаҡына үҙенең барлыҡ кешелек сифатын үҫтерҙе, тупланы. Сәхнәләге томбойоғо Күктәге Ҡош юлдарына сорғолғанында ул да уға тиң осорға теләне. Матурлыҡтың яҡынлығын йөрәк менән былай тойоу, уны ысын баһалау, уға тиң булырға теләп уҡталыу, әлбиттә, ябай ауыл малайына Күктән генә төшмәне. Тәүҙә уға үҙен уратып алған донъяны ысын таный белергә, Тәбиғилекте – яһалмалыҡтан, Матурлыҡты яманлыҡтан айыра белергә кәрәк ине. Ҡағыҙ сәскәләр, алтын бутал ялатылған ташҡурсаҡтар араһынан Тәбиғилекте, Матурлыҡты танып-белеп күтәреп алырға кәрәк ине. Дөрөҫөрәк әйткәндә, донъялағы Матурлыҡтың һис тә күктәрҙән түгел, ә табан аҫтарыбыҙҙағы ябай Ерҙән, Тәбиғәттән – үҙебеҙҙән үрккәнлеген, тимәк, тәүбашта үҙебеҙ саф булырға тейешлеген, кеше үҙен тәбиғәттең Аллаһы йә Ғазраилы итеп түгел, ә тәбиғи өлөшө, тере йәне итеп тойған саҡта ғына унда бөйөк Тәбиғилектең йәшнәп сәскә атҡанлығын, Матурлыҡтың күкрәп-балҡып тыуғанлығын тойоп-белергә, уны ямандан ҡурсаларға һәләтле булыу кәрәк ине.

Эйе, күңел түренә бейеп кенә килеп кергән ошо Матурлыҡ алиһәһе уны ла шаҡтай юғары талпындырҙы. Ҡалаға ауылдан таҡыр асфальт ялтырауығы тартып килтергән асыҡ ауыҙ бер малайҙы, сихриәтле аҡ томбойоҡ наҙы менән арбап алып, гүзәллектең етенсе ҡат күгенә ашҡындырҙы – бөгөн ул ихлас күңелендә Матурлыҡ

ҡорамының магына, ә үҙебеҙсә әйтһәк, бәгенә әүерелде. Ул ғына ла етмәһә, бергә эшләгән дуҫ-иштәрен шаҡ-ҡатырып, тигәндәй, махсус уҡыу йортоноң ситтән тороп уҡыу бүлегенә инде, уңышлы тамамланы. Күңеле менән генә түгел, эше менән дә үҙенең гүзәллек алиһәһенә -- Томбойоғона тиң булырға теләне. Кисәге матрос егет бөгөн – зәңгәр юлдарҙың бер мыҡты хужаһы, теплоход механигы. Һәм был, уның уйынса, тормоштоң да билдәле бер этабы, түҙемлек һәм матурлыҡҡа уҡталышының ҡыуаныслы һөҙөмтәһе. Хәҙер инде тәүге үҫмер оялсанлығынан арынырға, күңел тартҡаныңдың буй етмәҫтәй бейек алиһә, прима-балерина икәнлеген онотоорға, кәрәк булһа, ир-егеттәрсә ҡаты ҡосаҡлап, ҡытыршы ергә баҫтырырға, һулыштарҙан битте көйҙөртөп өндәшергә, күҙгә күҙ терәшеп һөйләшергә лә ваҡыттыр. Тураһын ғына әйткәндә, мәсьәләне ҡабырғаһына ҡуйырға. Әйтәйек, әҙәм балаһымы ул, әллә... Ерҙәме ул, әллә... Ниңә... ошо көнгәсә ул үҙен белештермәй осона, ергә төшөргә кәрәклеген онота (кейәүгә лә сыҡмай?..) Йәки, ҡәҙимге тереләрсә, кешеләрсә, ысынтылап егеттәр менән дә йөрөмәй? Әллә ысынлап та тәнһеҙ-есемһеҙ бер затмы ул – ахырғаса яңғыҙ башы ҡаңғырасаҡ, башҡаларҙы ла ҡаңғыртасаҡмы? Әгәр шулай булмаһа, бына минең эшсән ҡулым, ҡайнар йөрәгем: рампа аша күҙ атышып ҡына түгел, ә *кешеләрсә* йәшәргә лә ваҡыттыр!..

Егетебеҙ ҡыйыуланып ошо хаҡта хыяллай, үҙен батырайтып ҡуйырға самалай. Тик теҙ-быуын тигәндәрен тыйыуы ҡыйын икән. Әгәр шулай булмаһа, теге әкиәттәге егеттәй, ете йыл буйы өнһөҙ күҙләп йөрөмәҫ, күргәне һайын ҡойолоп төшмәҫ ине. Юҡ, ҡурҡыу-фәлән түгел был -- ҙурыраҡ, бөйөгөрәк. Уйлабыраҡ ҡараһаң, әллә ҡасан, Сәғиҙәнең күҙ ҡарашын тәүге осратҡанында уҡ, донъя йөҙө ҡамаштырғыс баҙрап киткәндәй булды, егеттең дә күкрәгенә, әйтерһең, баҙрап торған гәүһәр кереп ултырҙы. Теге көндә Ағиҙел ярында беренсе тапҡыр ҡыҙҙың ҡулдарын үҙ ҡулдарында тотоп, артынан такси ишеген ябып оҙатып ҡалғанынан һуң, күкрәгенән гәүһәренең һурылып сығып китеүен, такси түрен саҡкылатып әллә ҡайҙа төн ҡабына инеп барыуын тойҙо. Бушап ҡалған тоҡтай шәлпәйеп, тубыҡ быуындары бәлкелдәп инеп йығылды өйгә. Күкрәктәге шул гәүһәрһеҙ һис йәшәп булмаҫтайын, уны кире ҡайтарырға кәрәклеген, шуның хаҡына изге сәғәт һуғасағын татлы һыҙланып тойҙо. Ғәҙәттәгесә ай элгәре алып ҡуйған театр билеттарын барлап ҡараны – иртәгә лә ул осонасаҡ "Томбойоҡҡул" спектакле ине. Бына ошо мәлдә ул, ғүмерҙә булмағанса, үҙҙәренең эштәге уңышһыҙлығы – теплоходтың ватылып ремонтҡа туҡтатылыуы өсөн эстән ҡыуанды. Әгәр "ялғаш" оҙайлыға ярға килеп һырныҡмаһа, томбойоғоноң талпыныуҙарын, осоуҙарын яңынан ҡасан күрер ине!.. Төндө көскә уҙғарып, теплоходты заводҡа ҡыуғандан һуң кисен саҡ әйләнеп ҡайтып, ошо байрам кейемдәрен кейенде, ғәҙәттәгесә әсәһе ҡырҡып әҙерләп ҡуйған ҡуҙҙай алһыу сәскәләрҙе аҙһынып, үҙе баҡсаға инде, гөлләмәнең иң аҫылдарын алды. Ботаник баҡсанан эләктергән гәүһәрҙәй күҙ ҡамаштырғыс ап-аҡ томбойоҡто ҡанһыу-ҡыҙыл сәскәләргә таж рәүешле ҡурпытты...

Бына әле шул хистәрҙән гөртләп ҡабынырҙай тора: атаҡлы прима-балерина таш арыҫландар араһынан кемгә күҙ төбәп сығыр? Әгәр егет күңеле алдамаһа... изге сәғәт һуҡты, тигән һүҙ. Күпме йөрөргә инде?!. Баҡса яғына аулаҡҡа алып китергә лә, тәүәккәлләнеп, алдында теҙләнергә, изге тәҡдим яһарға... Эйе, икеһенең ғүмеренең таң йондоҙло сәғәте!

Килә, ап-аҡ беләгенә һалған алһыу роза менән ап-аҡ томбойоҡто күкрәгенә ҡыҫып килә!

Сәғит тәрән һуланы, күкрәк һандалында сүкеш ҡотороп-тулап һуҡты – прима-балерина, ҡосаҡлап тотҡан гөлдәмәһенә кинәнесле әүешеп, алыҫтан уҡ уның күҙҙәренә төбәлеп килә! Яңылышып ымһынмайым, тигәндәй, балҡыуыслы бәхетенә ышанмай,

сытырлатып күҙҙәрен йомдо егет. Асты. Юҡ, яңылышмай: прима-балерина һаман, ап-аҡ томбойоҡ өҫтөнән ап-аҡ ынйыы тештәрен балҡытып, тура уға уҡтала:

-- Һаумы, һаумы, матросым!

-- Томбойоғом!.. – Сәғит ҡыҙҙың аҡҡош ҡанатылай ҡулын ике усы араһына алып үпте.

-- Осондортмасы инде! Сәхнәлә томбойоҡ булһам да, ерҙә яп-ябай үләнмен.

-- Юҡ! Ап-аҡ томбойоҡ сәскәһе һин ерҙә лә!

Сәғиҙә бәхетле көлдө.

Ошо мәлдән алып ғүмер сәғәттәре тоташҡан һымаҡ ине. Бығаса улар араһында күренгмәҫ быяла шаршау булып тотоп торған, ике йәнде хыялый күпер аша ғына тоташтырған сәхнә менән тамаша залын беркетеүсе, шул уҡ саҡта ике яҡҡа айырыусы ҡөҙрәтле сик хәҙер инде юҡ ине, бер-береһенә тартылыусы шашҡын хистәр дауылының магнит ҡырҙары ғына әлеге тилерткес саф яҡынлыҡтың да, бер үк саҡта алыҫлыҡтың да асылмаған ишектәре һымаҡ төкәлешә ине. Ошо ҡапма-ҡаршылыҡ, тәбиғәттең күҙгә күренмәҫ кәртәһе, хәтәр мәлдең серлелеген билдәләүсе аңлайышһыҙ тылсым һағын һаҡлай ине. Дарҫ-дорҫ типкән йөрәктәре тәбиғи яҡынлашҡан һайын, ҡырыҫ магнит ҡырҙары артҡа сикте, серлелек тарала барҙы, күкрәк һандалдарының туҡ-туҡ һуғыуы ғына тоташып һулҡылданы. Пүлстәрҙең, һулыштарҙың берәгәйлеген тойоу кинәт икеһен дә айнытты, был донъяға ҡайтарҙы, ә ул донъя шундай иркен, сикһеҙ төпкөллө ине. Һәм шуны аңланылар: шаулы-гөрлө таш ҡала урамы ла, баш осонан тауышһыҙ бызырлап ҡойолған аҡһыу неон нурҙары ла, күктә күҙҙәрен ҡыҫып көлгән һибелмә йондоҙҙар ҙа – береһе лә уларҙан башҡа юҡ ине, аҡ томанға шыйыҡланған татлы донъя икеһененң мейе ярым шарларына инеп һеңешкән ине. Етте, араларҙы тамам асыҡлар ваҡыт! “Анауы аулаҡ баҡсаға инәбеҙ ҙә...”

## V

Ҡапыл әсе бензин һөрөмө аңҡыны, автомобиль боғаҙы ғыжылданы, тормозы сыйылданы. Тротуар буйлап ағылыусы ағай-эне ҡубынып шул яҡҡа эркелде, бейек бордюрға морон төртөп тынып ҡалған “Волга”ны уратып алды:

-- Уф, берәүҙе тапатҡандар...

-- Йәш кенә ҡыҙ...

Тубыҡланып бахырҙың кәүҙәһен ҡосаҡлаған бер ҡатынҡай үҙәге өҙөлөп сеңләй:

-- Уй балаҡайым, туй күлдәге кейер генә сағың бит!..

Сәғиҙә, ҡосағындағы гөлләмәне ҡанлы асфальтҡа һалып, ҡалтыранған ҡулын Сәғиткә һуҙҙы, етәкләшеп ҡаттылар. Машинаның тупаҫ тимер маңлайы, ҡыҙыл тәреле сумка, аҡ халатлы ханым юғары күтәреп сыптырлатҡан йылтыр һемәкле шприц, хәйерһеҙ тәгәрмәскә аҡ күбәләк ҡанатылай һыланып йәбешкән күлдәк итәге...

-- Аллаҡайым! Иҫән генә ҡалһа ярар ине! -- Өҙәләнде Сәғиҙә. Кемдәрҙеңдер юл фажиғәһе икеһененң аҡ томбойоҡ сәскәһеләй яҡты хыялдарына ҡарайып ара төшөүен тәрән кисергән егет өнһөҙ ҡалып һыҙланды. Шул уҡ ваҡытта икеһе лә аңлайышһыҙ бер хис-тойғоға тарып, ошо мәлдә үҙҙәренең ниндәйҙер тылсым әмере менән әлдә тере, йәш, һыу һөлөгөләй таҙа һәм саф икәнлектәрен, ә алда сикһеҙ бәхетле ғүмер ятҡанлығын, шунның ҡәҙерен белеп ҡалырға кәрәклеген тәндәренең күҙәнәктәре менән һиҙеп-тойҙолар. Әммә был йәшерен хисте тышҡа сығарырға ярамай ине, баяғы бәхетһеҙ ҡыҙ ҡаршыһында был оло гонаһ ине. Өҫтәүеннә, тәгәрмәскә уралған аҡ күлдәк итәге,

асфальттәге ҡыҙыл ҡан табы аңдарын томаланы, әллә ниндәй күңелһеҙ уйҙарға, иҫтәлектәргә тартты.

Тиҙ ярҙам машинаһы китте, һалҡын неон яҡтыртҡан юлдан өнһөҙ генә атланылар.

-- Матросым, ауыр көрһөнмәсе улай!

-- Их, ер йөҙөндәге ғүмеркәйҙәрҙең береһе лә үҙ ваҡытынан элек өҙөлмәһен ине! Ә бит мин дә... үҙ ҡулдарым менән... – Сәғит күптән оноторға теләгән бер хәтирәһен ҡабат яңыртып ҡалтыранды, үңәсен эскә тартты. Быға тиклем төпһөҙ күренгән Күк ҡабағы нисектер түбәнәйеп, ян-яҡ тарафтар тарайып, донъя ҡараңғыланғандай, ә тирәләге ҡарт йүкәләрҙең сутырмаҡлы олондары Еребеҙҙең хәсрәтле маңлайындай – кешеләрҙең һаман юҡҡа сыға барған йән шәфҡәтен ҡайтарып биреү уйын уйлап һыҙланыуҙан тәрән һырланғандар һымаҡ тойолдо. Ҡыҙ ҡырт-туҡталды:

-- Нимәне үҙ ҡулдарың менән?

-- Их!.. Алты-ете йәштәрҙә булғанмындыр... Кәртә артындағы саңлыҡта “һабан һөрөп” уйнап йөрөйбөҙ шулай. Беҙҙе, ҡара танаулы ике малайҙы, ситән өйҙә яңғыҙ башы ғына йәшәгән Хәбирә ҡарсыҡ кәртә аша ҡул болғап саҡырып алды. Өйөнә индереп, балан ҡағы менән һыйланы. Арҡаларыбыҙҙан һөйҙө. “Хәҙер инде егет булып еткәнһегеҙ – икегеҙгә бер йомош ҡушайым әле”, -- тине. Итәктәребеҙҙе бөрөп тоттортоп, мейес араһында мырылдап ятҡан, күҙҙәре лә асылмаған бесәй балаларын һалды – итәк һайын өсәр бесәй балаһы. “Барығыҙ, уландарым, ауыл һыртына сығып, дөмөктөрөп килегеҙ. Тағы ла ҡаҡ менән һыйлармын үҙегеҙҙе”, -- тине. “Дөмөктөрөү”ҙең аслан нимә икәнен, моғайын, белмәгәнмендер ҙә, сөнки, һис кенә лә иҫем китмәй, өс йән эйәһен итәгемдә бөрә тотоп әшнәм артынан йүгерҙем. Ауыл осона сыҡтыҡ, һуңғы ямғырҙан һуң тәгәрмәстәр тапауынан балта төйҙәһеләй ялтырап ҡатҡан оло юл түтәһендә туҡталдыҡ. Мин “ни эшләйбеҙ икән?” тип аптырап торғанда, әшнәм бесәй балаларын берәм-берәм артҡы боттарынан тотоп ҡаты түтәгә бәрҙе... Ҡалтырандым, итәгемдән төшөрөп ебәрә яҙҙым. “Һуҡ ошолай! – тине әшнәм. – Юғиһә, балан ҡағы тәтемәҫ!” Күҙҙәремде сытырлатып йомоп, баяғының өлгөһөн ҡабатланым... Күҙҙәремде асып, юлдағы саң ҡатыш ҡан табын күргәйнем, әйтерһең, Күк кинәт түңкәрелде, үҙемдең дә башым юлдың төйҙәһенә зыңҡылданы... Өйгә алып ҡайтҡандар, иҫһеҙ-төҫһөҙ ятҡанмын... Сирҙән арынып торғанымда, мин инде икенсе кеше – бала килеш бала сағынан яҙған, күҙ төптәре сикһеҙ хәсрәт менән тулған йән инем...

-- Абау!..

-- Эйе, фажиғә...

Сәғиҙә тәрән моңһоулыҡҡа күмелгән, ниндәйҙер үҙ ҡайғыһын кисерә ине.

-- Уф!.. Исемдәребеҙ генә түгел, йәндәребеҙ ҙә игеҙәк икән шул беҙҙең, -- тине тәрән һыҙланып. – Үтә юғары ырғып, йәнем иҙелгән, шаңҡыған саҡтарым булды бит, әй, минең дә... шуны һис онотмайым... – Егете лә ергә текләп уйҙарға талып барғас, көрһөнөп дауамланы. – Хореография училищеһен тамамлап ҡына сыҡҡан, түбәм күккә тейерҙәй булып елкенгән саҡтарым ине. Сығарылыш кисәһенән һуң таң атҡансы ҡала буйлап ҡыҙырҙыҡ, төнгө тып-тын баҡсаларҙа бейенек. Балдарын ергә түгелдереп сәскә атып ултырған бер ҡарт йүкәнең ышығында барҙы иң күркәм уйын. Тирәк беҙҙең ҡыуаныслы тойоп ҡуша елкенә, бәрхәт япраҡтары менән сикәләрҙе һыйпап һөйә, әсәйебеҙ һымаҡ иркәләй ине. Ошо минутта ул беҙгә тәбиғәттең хозур серен – ерҙәге мең-мең үләндәрҙең, таштарҙың, ағастарҙың да терелеген, беҙҙең һымаҡ уҡ йотлоғоп тын алырға, өҙә баҫып бейергә, ҡыуанырға, һыҙланырға ла һәләтле йән эйәләре икәнлеген тойҙортто. Ошо мәлдә бөтә донъя күҙ алдыбыҙҙа йәнләнде, мең төҫтә йәйғорланды. Был тылсымды кисермәгән кешеләр үҙҙәре һалҡын таш һымаҡ ине...

Шулай осондороп беҙҙе бейеткәндә, ҡарт йүкәнең иң үрҙәге ап-аҡ еңле ҡулы миңә ымһындырып һонолғандай тойолдо. Ул мине уғата юғарыраҡ ырғырға, аҡҡош һымаҡ талпынырға ҡоторта... Бына мин әхирәттәремдән уҙҙырып ырғынданым, хатта үҙемде лә уҙып киттем, буғай. Ошо изге мәлдә аҡҡош ҡанаттарым нығынып, баллы йүкәнән йомарт һонолған ап-аҡ еңле тылсымлы ҡул мине иң ҙур бейеклегемә сорғолдорасағын тойоп, аяҡ остарымдан ерҙе тибәрҙем, ҡул осомдо ап-аҡ еңле тылсым ҡулына тиңәлткәнсе һонолдом. Усыма бал яғылыуы, ергә бал түгелеүе, ап-аҡ еңле ҡулдың шартлап һыныуы, ҡулымда ҡалыуы ғына хәтерҙә. Күҙемде асып ҡараһам, әхирәттәрем йүкә төбөнән һирпелгән, күптәре иламһыраған, ә мин ҡайырылып ҡанаған ап-аҡ йүкә ботағын услап торам... – Ишетелер-ишетелмәҫ кенә һулҡылданы. -- Әйт инде, ниңә миңә тылсым ҡулын йолҡоп алырға ине?.. Иң илағыс саҡтарымда хәҙер миңә көллө донъям ошо ҡанһыраған ҡарт йүкәнең күҙҙәре менән баға... үҙемә һонолған тылсым ҡулын йәнә ҡайырып һындырмаһам ярар ине, тип ҡурҡам...

-- Эйе... – тине Сәғит. – Аяныс...

-- Тәбиғәттең ул пак ҡулын кем һуң ҡасан кире ҡайтарып бирер? Ҡасан?..

Башын егет яурынына һалып барған Сәғиҙәнең күҙҙәренән ике бөртөк тәгәрләне, юлдашының ҡул һыртын сылатып бешерҙе. Икеһенең тиң рәхәт һулҡылдап һыҙланыуы улар өсөн әсе аянысл ы ла, сикһеҙ ләззәтле лә ине. Сәғиттең күҙ алдын татлы ҡараңғылыҡ томаланы, башы, үкһеткес моңға тулышып, түбән эйелде. Сикәһендә ҡыҙҙың ебәк сәс бөртөктәренең ҡытыҡлауын тойомлап, ниңәлер аң төпкөлөндә ап-аҡ шау-сәскәгә күмелгән, әсә-олононан ҡайырып алынған баллы йүкә ботағы төҫмөрләнде, шул ботаҡтың һыҙланып-асырғаныуы, әйтерһең, көллө донъя һулаған һауаға һеңеште. “Ул мине аңлай, аңлай! Әсенеүҙәребеҙ бер иш. Әлдә донъяла ул, ул бар әле!” – Ошондай нескәлекле хистән яңырып елкенде егет, эсендәге ауырттырғыс бер яраһына һиҙҙертмәй генә бальзам һалған, әммә үҙе лә бер ҡатарҙан һыҙланып барған был иҫ киткес яҡын йәнде һулышы менән һурып алырҙай булды. Эйе, кешеләрҙе кеше итеп тойорға мәжбүр иткән изге тойғо – Тәбиғәттең аҡ еңле ҡулын, сафлығын үҙ ҡулың һәм сафлығың итеп хис итеү – беҙҙең йөрәктәрҙә тере, моңдаш һәм тоташ икән. Ошо тоташлыҡты тоймаған, йәғни тойоу һәләтенән яҙған бәндә кеше лә түгелдер инде...

## VI

Спектаклдәрҙә Сәғиҙәгә рампа аша борғаланып иң ҙур, затлы гөлләмәләр бүләк итеүсе, ә театрҙан сыҡҡан ерҙә ҡаҡ асфальтҡа һуҙылып ятып ҡыҙҙың нәфис аяҡтарын үбергә яҫҡыныусы беҙ белгән сәмле һөйәрмән, сеп-сей ерән сәсле, ерән һаҡаллы һәм бер иш ерән костюмлы ир-азамат, Авиация институтының двигателдәр буйынса шәп белгесе Алғыр Ниәтшин ине. Танауына иҫ кергәндән үк ашамай-эсмәй, ҡыҙҙар артынан сапмай, тигәндәй, ғүмерен фәҡәт уҡыуға, белем алыуға арнап, утыҙ ғына йәшендә үк үҙ һөнәре буйынса төплө белгес – техник фәндәр кандидаты булырға өлгөргәйне. Йәшлек тигән елпелдәк ғүмерҙең һиҙҙертмәй генә үтеп барыуын тойоп, һиҫкәнеп үк уйланды егетең бер заман. Яртылаш яҙылған докторлыҡ диссертацияһын туҡтатыбыраҡ торорға ла аҙ-маҙ баш-күҙ алырға йәғни башлы-күҙле булырға ниәтләнде, ә бының өсөн иң кәмендә алтындай ҡиммәтле ваҡытты сарыф итергә – мауығып йөрөп ҡыҙ һөйөргә кәрәк ине. Ҡапыл уянған күңеле уны шаулы-йәнле донъяға – гүзәл заттар эйәләшкән төрлө күңел асыу урындарына, ә йәмле йәй көндәрендә Ағиҙел буйҙарына тартты. Шунда ғына ул ҡыҙ-ҡырҡындың таҫма телдән ҡолаҡ аша ғашиҡ булыуҙарына, бармаҡтағы, галстуктағы, яға һәм ең ҡаптырмаларындағы ялтырауыҡ аҫылташтарҙы күреүҙән иҙерәп

йомшарыуҙарына һәм затлы автомобилгә, катерға ултырып гиҙеүҙәрен ысын бәхет итеп һанауҙарына ныҡ инанды ла шул йүнәлештәрҙе үҙләштерергә ғалимдарса иҫәп-хисаплап кереште.

Заманының иң шөһрәтле автомобиле һаналған "Волга"ны ул күптән үк эйәрләгәйне. Инде килеп иҙелдең һыу юлдарында ла һис кемде еткертмәҫ өсөн, үҙ һыҙмалары буйынса катер яһаны һәм уға әлегәсә күрелмәгән, елдәй осортоп йөрөтмәле двигатель әмәлләп ҡуйҙы. Беренсе һынауҙан уҡ уның һыу юлында ысынлап та бер кемде лә еткертмәйәсәге, бер кемгә лә ал бирмәйәсәге асыҡланды. Моторының ҡолаҡ ярып шарылдаған тауышынан ҡсраған һәр кем биҙәрләп, өҫтөнән жалыуҙар яҙып, милиция әһелдәре уны, йәғни "йылға хулиганын", "енәйәт өҫтөндә тоторға" итеп ҡараһа ла, күҙ асып йомғансы катерында атлығып китеп юғалды, шуға күрә, "ерән һаҡаллы"нан башҡа, исем-фамилияһын да белә алманылар.

Милиция әһелдәре торараҡ хәйләгә һалышып, кәмә туҡталыштарынан катерҙы ентекләп эҙләй, тейешле урындарға күҙәтсе ҡуйып һағалай башлағас, яңынан эшкә тотондо ла елдерткесен амфибия итеп яһап сығарҙы – инде ул һыуҙан да, ҡоро ерҙән дә берҙәй еткертмәй үтә...

Ҡапҡан һайын ҡалъя булмай, тигәндәй, ҡайһындай ғына гүзәл туташтар, ханымдар тап килһә лә, күңеленә яғылмай -- өс көндән һуң сәме ҡайта ла ҡуя. Һайланып йөрөй торғас, берҙән-бер аҫылйәргә йәне тартылыуҙан дүнмәне, ә, киреһенсә, күргәне һайын йөрәк ялҡыны нығыраҡ дөрләй барҙы – Балет театрының йәш примадоннаһы Сәғиҙә һылыу ине ул. Алғыр Ниәтшин ныҡ иҫәпле ғалимдарса ошоно теүәл бизмәнләп, артабан хисте тарҡатмаҫҡа, рампа артындағы алиһәнең күңелен көрмәкләп алыу өсөн бөтә көстө һалырға ниәтләнде...

Сәғит иһә был осорҙа эшендә яңы үҙгәрештәр кисерҙе. Ярға килтереп терәткән буксир кәмәһенең ватылыуы үтә етди икәнлеге асыҡланып, комиссия уны, кәмәне, баштан-аяҡ йүнәтеүгә мохтаж тип иҫәпләп, суднолар ремонтлау заводына оҙайлы ваҡытҡа ҡыуҙыртты, шуға күрә экипажды бүлгеләп, башҡа урындарға эшкә күсерҙеләр. Сәғит иһә йылға пароходствоһы башлығының тура үҙенә кереп, Ағиҙелдә тәбиғәтте бысратыуға һәм уның балыҡ, башҡа йәнлек байлыҡтарын йыртҡыстарса ҡаҡшатыуға, ҡоротоуға ҡаршы көрәшеүсе инспекция төҙөргә ваҡыт еткәнлеген дәлилләне, шуның буйынса үҙенең күптән үк уйлап йөрөгән тәғәйен тәҡдимдәрен әйтте. Башлыҡты ла был мәсьәлә борсоған булһа кәрәк, сөнки ихлас тыңланы ла кисектермәй хәл ҡылды: пароходствола тәбиғәтте һаҡлау буйынса инспектор һәм уның ярҙамсыһы штаттарын булдырырға, тиҙ йөрөшлө бер катерҙы шуларға беркетергә. Инспектор итеп, әлбиттә, Сәғит тәғәйенләнде, ә ул үҙенә ярҙамсы итеп ошоғаса бергә эшләгән йәш матрос Алешаны һайланы.

Бына бер заман йәмле Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары буйлап, йылғасыларҙы хайран ҡалдырып бортына ап-аҡ сәскә һүрәтләнгән һәм матур эре хәрефтәр менән "Томбойоҡ" тип исемләнгән кәмә елдерә башланы...

Сәғитте электән бер нәмә борсой ине: суднолярҙың көнкүреш ҡалдыҡтарын, сүп-сарҙы, хатта мазут һәм башҡа яғыулыҡ бысраҡтарын шапырлатып һыуға түгеп китәләр... Хилафлыҡты тамырынан уҡ киҫмәгә етәкселек тарафынан ҡаты ҡарар ҡабул ҡылыныуына, ә туҡталыш урындарында махсус сүп-сар һауыттары, яғыулыҡ бысраҡтары өсөн цистерналар ҡуйылыуына өлгәште ул, шул экологик сараларҙы инҡарлаусы әрпештәрҙе йылға юлдары буйынса көнө-төнө, тигәндәй, туҡтауһыҙ эҙәрлекләп, көн күрһәтмәй йонсотто. Ағиҙел буйында "Томбойоҡ" күҙгә салыныу менән үк суднолярҙың экипаждары һағая, итәк-салғыйҙарын йыйнарға тырыша...

Иң ҡыйыны – һыу өҫтәрен сыбарлаған эреле-ваҡлы шәхси катерҙарҙың ярым хулиган хужаларын тәртипкә күндереү ине. Бигерәк тә "ерән һаҡал" тип ләҡәпләнмеш береһе теңкәгә тейә: ошоғаса күҙ күрмәгән, ҡолаҡ ишетмәгән зәхмәт-моторын ҡолаҡ ярырҙай шарылдатып, артынан аҡ һыуҙа зәңгәр яғыулыҡ таптары ҡалдырып атҡан уҡтай осоп уҙа, ҡыуып етермен тимә...

Сәғит белә: был хулиган "ерән һаҡал" уҙған юлда томбойоҡтар киҫелә, балыҡ ыуылдырыҡтары ыуалып һәләк була, ҡамышлыҡта йоморҡа баҫыусы өйрәктәр ояларын ташлап ҡаса... ләкин "ерән һаҡал"ды тотоп булмай, шулай уҡ шәхси кәмәселәр исемлегендә лә ундай шашҡын тиҙлекле катер хужаһы теркәлмәгән. Шуныһы ла хәүефле: был азамат ҡала халҡының иң яратҡан, иң саф һыулы һәм һауалы ял итеү төйәгенә -- Ағиҙелгә тоташҡан, моторлы кәмәләргә инеү тыйылған иҫке үҙәндең – Томбойоҡкүл иңен буйлатып шарылдата икән яһил катерын...

Бер көн Сәғит Ағиҙелдә шул мөртәтте эҙәрлекләп маташҡанында ымһынып тороп ҡалды: уны еткертмәй, ҡырт ҡына боролоп, Томбойоҡкүлдең ап-аҡ сәскәгә күмелгән томбойоҡтарын яман шар-шор ярҙыртып инеп китеүен үҙ күҙҙәре менән күрҙе лә, йәһәт ярға төшөп, такси яллап, хулиганды ауламаҡҡа Томбойоҡкүл буйҙарын байҡап уҙҙы, әммә таба алманы. Шуныһы сәйер: томбойоҡтарҙы тураҡлап уҙған эҙе ярылып ята – үҙе юҡ, әйтерһең, йә һыу аҫтына сумған, йә һауаға боҫланған...

Ләкин нисек тә яһилдың эҙенә төшөү, вәхшилек һуҡмағын киҫеү – инспекторҙың мөһим бурысы ине.

## VII

Ял көнөнөң таң-иртәһе ҡарҙай ап-аҡ шау-сәскәле алма баҡсаларының өҫтөндә аҡ бурандар уйнатып, һыҙғыр елле булып килде. Ҡала урамдары буйлап атлағанда ян яҡлап баш осонда аҡҡа алһыу ҡан һыҙатлы сәскә бәбәктәре туҙрап яуа, ҡайһы саҡта был хисапһыҙ күп тере күбәләктәр яуылай күренә, аяҡ аҫтында тере сәскә бәбәктәре тырпырап ята ине. Сәғит ҡыҙҙың беләгенән ҡыҫып ҡултыҡлаған килеш, уның аҡ туҙ түфлиҙәренең шыҡылдауын йөрәгендә кисереп-һанап барҙы: ошо асфальт түтәһенә көллө донъя башы бәрелеп ауа, янындағы тереләрҙән тере ап-аҡ томбойоҡ сәскәһе лә уның ҡурсаулығынан ысҡыныр ҙа кемдәрҙеңдер аяҡ аҫтында ҡалыр һымаҡ тойолдо. Йөрәкһеткес-йоҡоһоҙ үткәргән төн шауҡымынан болоҡһоп, такси туҡтатты, йомшаҡ креслоға инеп ултырышҡас, ҡыҙҙың тығыҙ, йоморо яурын башын иңендә тойоп, саҡ ҡына тынысланды.

-- Ҡайҙа? – тине таксист.

-- Әйҙә, туп-тура дон офоҡҡа! – Сәғит үҙәк проспект осондағы күкһелләнеп томаланған йылға юҫығына ҡаратып ҡул һелтәне.

-- Томбойоҡкүлгәме?

-- Тап үҙе! – Тиҙ үк иҫенә килеп, юлдашына өндәште: -- Ғәфү ит, ҡала ситенә сығып елләнеп ҡайтыуға ҡаршы түгелме һин?

Сәғиҙә ҡапыл салон маңлайындағы көҙгөнән таксистың үҙенә төбәлгән ҡара-муйыл күҙҙәре менән осрашып, ынйыы тештәрен балҡытып ебәреп йылмайҙы:

-- Әйттем бит инде: бөгөн мин һинең ҡолоң!

-- Елдерҙек! – тине таксист. Машина, ике бөйөрөн шпор типсегән ярһыу арғымаҡтай тертләп, торған еренән ырғылды, юл буйлап теҙелгән йүкә олондарын һанай-һанай осортоп алып китте.

-- Томбойоҡкүл... Их, томбойоҡтар балҡып сәскә атҡан саҡ! – тине Сәғит, ҡыҙға бер ҡарап алғас, эстән ҡапыл яғымлы йылы ялмалыуын тойоп, аҡ сәскә буранлы борсоу ҡала урамдарының ҡотолғоһоҙ артҡа шыуып ҡала барғанлығына ҡыуанып.

-- “Томбойоҡкүл” рестораны гөрләй унда – иртәнән кискәсә музыка, эс-бауырыңды өҙҙөртә генә, малай! Ә аш-һыуы! Закускаға телеңде йоторлоҡ итеп ҡысала бешереп бирәләр, -- тине таксист.

-- Хоҙайым, ул йәнлекте ҡайҙан алалар икән?

Таксист күҙҙәре көҙгө аша Сәғиҙәгә төбәлеп-мөлдөрәп көлдө:

-- Тап шул уҡ күлдән, һеңлем. Балыҡтарын карбид ташлап тонсоҡтороп бөтөргәс ни, ҡысалаларға ҡалды...

-- Уныһы ла бөтмәҫме һуң?

-- Атайым бахыр әйтмешләй, бөгөн үҫкән үләнде үҙем өҙөп ҡабам, ә минән һуң ҡыяҡ ҡалҡмаһа ла ярай. – Таксист күңелһеҙ көлдө. – Тәбиғәтте ҡороторға барыбыҙ ҙа мастакбыҙ! Беләһегеҙме, һеңлем, баранка өйрөлтөүҙе ташлап, шунда ҡыҫала тотоусы булып китергә әле иҫәп. Тамаҡ ялы ла елле, көс тә артыҡ сыҡмаясаҡ. Яға аҫтына ҡаҙна иҫәбенән бер “сүлли”ҙе һалаһың да, ҡуш аяҡты тубыҡҡаса Томбойоҡкүлгә сумырып, бәлеш төбө кимереп туйынған бесәйҙәй, морон аҫтынан мырылдап ултыраһың. Ун биш минуттан аяҡтарыңды тартып алһаң, һәр ҡайһына берәр биҙрә ҡыҫала көрмәлеп сыға...

-- Ой, ул тиклемде ҡайҙа ҡуйып бөтәһең?

-- Борсолмағыҙ, уның барыр юлы киң. Ҡыҫала модала хәҙер, французҙарҙың устрица тигән һерелдәүек хайуанлы баҡа ҡабырсағындай. Бөгөн бит беҙҙең башҡорт та, ат итенән бүгеп, шаҡы-шоҡо кимерә.

-- Аттың йылҡы икәнен дә онота башланыҡ инде, -- тине Сәғит. – Бөтә нәмә тимер-томорға ҡалып бара.

-- Йәтеш шул: тимер-томорға һоло ла, ҡамсы ла хәжәт түгел, -- тине Сәғиҙә.

-- Уның ҡарауы ер майының төтөнөн борлата ғына – ҡала урамында тын алғыһыҙ...

-- Дәәә... – тине таксист, салонды тынлыҡ баҫты. Күпмелер уйланып барғас, креслоға арҡаһы менән кирелеп, муйынын бора биреп ҡарап өҫтәне: -- Беҙ – беҙ инде, ярар. Ҡолонсаҡтың ер тулатып кешнәүен дә күрмәй үҫәсәк әҙәм балаһы ни эшләр? Үҙе донъяның ҡамсыһына әйләнеп үк ҡуймаҫмы?..

Машина Ағиҙел аша тартылған селтәр күперҙе үтеп, аҡ күлдәкле коттеждар, коллектив алма баҡсалары, ҡусҡыл баҫыуҙар араһынан ырғылды, салонға икһеҙ-сикһеҙ киңлектең йәшел һулышы тиртте. Шул йәшеллек ҡосағына әсе бензин һөрөмдәре таратып, күҙ күреме ерҙә эреле-ваҡлы төрлө машиналар, машиналар, машиналар ашҡынышып йүгерешә ине. Ошо бөтмәҫ бәйгегә текләп барыуынан ялығып, Сәғиҙә көрһөнөп ҡуйҙы:

-- Тимер ат тигәндән иҫкә төштө. Бер йылды, “Аҡбуҙат”ты сәхнәләштергәндә, Хөсәйен Әхмәтовтың операһын әйтәм, сәхнәгә тере ат индерҙеләр... Ғәфү итегеҙ мине, тупаҫыраҡ яңғыраһа ла, бер башлағас бөтөрәйем... Беләһегеҙме, иң тантаналы кульминация мәлендә атҡынабыҙ ҡойроҡ аҫтынан тупыр-тупыр үҙенең эре сәтләүектәрен ҡойолдора башламаһынмы! Сәхнә халҡы шымып ҡалды, тамаша залы гөж итте – үле бутафория менән тулы майҙанға тормош үҙе бөркөлөп кергәндәй ине! Ошо ғибрәттән шаңҡып, режиссерыбыҙ үҙе – ул хәҙер мәрхүм инде – күнәк менән һеперткегә йәбеште. Бер һүҙ менән әйткәндә, аҡбуҙаттың тирәһендә ысын ғәрәсәт ҡупты. Әртистәребеҙ шау-яһалма кейемгә, париктарға төрөнгәнлектәрен онотоп, эстәренә ут йотҡандай, йәнләнеп киттеләр ҡапыл, быға тиклем ҡаҙмағанса рухланып уйнанылар. Аҙаҡ шаршау тамаша залының ҡотороп алҡышлауы менән ябылды.

-- Бына һеҙгә, кәрәк булһа, аҡбуҙат сәтләүеге! – Муйыл күҙҙәрен мөлдөрәтеп көлдө таксист.

-- Тетрәнгән режиссер ошонан һуң сәхнәгә ат сығарыуҙы тамам тыйҙы, хатта “Аҡбуҙат” тигән һүҙҙе лә тетрәнеп әйтә башланы. Ә әртистәр әле булһа мәрәкәне онотмай – үле ҡурсаҡ уйыны барғанда аҡбуҙаттың, тере донъяға ҡайтарып, сәхнәлә ҡапыл революция яһауын, сәтләүектәренең әскелтем хуш еҫе зерә татлы бөркөлөүен, берсә, көлөп, берсә, сабый саҡтың иҫтәлеге кеүек һағынып һөйләйҙәр...

-- Һағынып ҡына һөйләйбеҙ шул, -- тине таксист. – Тешһеҙ гуманистар беҙ.

Сәғиҙәнең, ниңәлер, муйыл күҙле был ихласйәнде семетеп алғыһы килә ине – ап-аҡ ынйы тештәрен йымылдатты:

-- Нимә, әллә үтмәй башланымы? Тештәр, тим.

-- Хәҙер улар ҙа тимерҙән ҡуйыла бит – филде лә фаршҡа әйләндерергә мөмкин, -- тине Сәғит.

-- Дәәә, тимер шул, тимер...

Әммә ҡыҙ төңөлмәне:

-- Бер уйлағанда, тимерһеҙ йәшәп ҡара хәҙер! Үҙ урынында тимер тештәр, тимер ҡулдар ҙа кәрәктер. Әйтәйек, мин белгән ҡайбер “гуманист”ар, бәғзе коллегаларымды әйтәм, үксәһенән юнып ташланған сөйәл өсөн дә әрнешеп әрләүсәндәр. Үҙе рәхәтләнеп бейей, ә хирургты “гуманһыҙ” тип тамғалай...

-- Ундай битәрләүселәрҙе мин дә беләм, -- тине таксист. – Ғәжәп нескә күңелле бер дуҫым бар – иҫ киткес сағыу хисле. Бар булмышы түп-түңәрәк: кешене лә, бөжәкте лә -- береһен дә йәберләмәй, бөтәһенә тигеҙ баға – апабыҙ Ҡояш кеүек. Шуның менән бер саҡ ауылға барып, уртаҡ һуғым алып һуйҙыҡ – “пенсияға сығарылған” аҡһаҡ ҡола. Миңә ни, эшем эйәһенә, салыусы ағай эргәһендә йылҡының башын шаҡарып торорға тура килде. Мин ат башын тотҡанмын, ағай кешем бисмилләһын әйтеп сала, ә нескә күңелле дуҫым артта күҙ йәштәрен ағыҙып үкһеп тора... Ә һуғым ашына йыйылғас, табында миңә бер ҡыҙарырға, бер буҙарырға тура килде – ни өсөн, тиһегеҙме? Көлләө йәмәғәт алдында ул, уйынлы-ысынлы, тигәндәй, салған саҡта минең нисек ат башын шаҡарып тотҡанымды, күҙ йәштәрен ағыҙа-ағыҙа, түкмәй-сәсмәй һөйләне, ҡанһыҙ, выжданһыҙ, гөманһыҙ, тип “шаяртты”. Ә табаҡ тулы һуғым ите боҫланып табынға килгәйне, күҙ йәштәрен һелкеп ташлап, ике еңен төрөп алған гөман эйәһе тирләп-бешеп ҡалъя һоғонорға, һоғондорошорға тотондо...

-- Абау!.. – тине Сәғиҙә, сирҡанып.

Таксист ялт-әйләнеп ҡараны:

-- Үҙегеҙ ҙә ҡыҫала мөнтәргә китеп бараһығыҙ түгелме?

-- Юҡ, киреһенсә. – Сәғит уйҙар сылбырынан арынды. – Тәбиғәт мәсьәләһендә һәр беребеҙ үҙен ҡаҙанға һалынған тере ҡыҫала хәлендә тойорға, үҙендәге тере донъяның теүәллеген ҡурсалап ҡырталашырға, көрәшергә тейештер, тим. Ваҡыт!

-- Тура әйтәһең, туған. Йәшерен-батырыны юҡ: иң элек беҙҙең үҙебеҙҙәге теүәллекте, сафлыҡты ҡурсаларға кәрәк, тәбиғәт-әсәйҙең балаһы булырға кәрәк. Кеше үҙенең сафлығы менән матур. Юҡһа, ҡайсағында... Кисә шулай бер ханымды яртылаш юлда әҙәпле генә төшөрөп ҡалдырырға тура килде. Ни өсөн, тиһегеҙме? Бына ошо салонда, кирелеп ятып, тәмәке тартып бара. Ул ғына ла түгел: тәмәке төпсөгөн тәҙрәнән бырағтыра... Машинаны ҡыҙыу артҡа сиктерҙем дә ишекте асып сығарҙым: был – бабаларҙың изге ере, анау ятҡан әшәкегеҙҙе асфальттән һөртөп алығыҙ, ҡәҙерле гражданочка, мин әйтәм. Үҙегеҙ гүзәл затһығыҙ, ә үҙегеҙ ауыҙығыҙҙан һаҫыҡ шайтан ыҫы таратаһығыҙ!.. Бррр!.. – Таксист сирҡаныс алғандай ҡалтыраны. – Беләһегеҙме,

шундайҙарҙың ауыҙынан төшөп ерҙә бүртенеп ятҡан тәмәке төпсөгө нимәне хәтерләтә? Ҡара башлы шаҡшы ҡортто...

Сәғиҙә тертләп ҡуйҙы, Сәғит муйынын эскә тартты – күңеле болғанды ҡапыл.

Әлеге лә баяғы тәмәке бәләһе... Сәғит үҙен күпме генә өйрәтеп ҡараһа ла, зәхмәтле ул ыҫҡа ошо көнгәсә күнә алмай... Әйтеүе лә бик сәйер: хатта романдарҙы ла ул геройҙары ауыҙынан тәмәке ыҫы борҡолоп сығыу менән үк атып бәрҙе, йәки ундай урындарын “төшөрөп ҡалдырып” уҡыны. Һуңғы йылдарҙа фильмдәрҙең сигаретһыҙ бер кадры ла булмауы уны айырыуса алйытты, шуның арҡаһында драма театрын да үҙһенмәне (унда гел тарталар ине). Балетҡа йәне-тәне менән ылығыуы, моғайын, Сәғиҙәнең аҡ томбойоҡ сәскәһеләй сафлыҡ тылсымында; йәнә килеп был театр сәхнәләренең шаҡшы ыҫтан азат булыуындалыр. Бында уның идеалы – Сафлыҡ донъяһы ине, ә Сафлыҡ менән Матурлыҡ ҡуша йөрөй... Ошо сәйер һәм ғазаплы хәлдән арынырға теләп, үҙен ауырыуға һанап, егет бер мәл психиаторға ла күренеп ҡарағайны, әммә атаҡлы профессор ҡыуып сығарҙы уны:

-- Хәҙерге көндә, минең белеүемсә, һин түгел, ә тәмәке төтәткән донъя үҙе психик ауырыу” – тине ул. – Һин, егет, аяныс ыҫлы заманда тыуған киләсәк заман кешеһе – фажиғә шунда ғына. Бар, бирешмә, киләсәк замандың колоннаһында атла. Егерме бернсе быуатта кешеләр барыһы ла һинең шикелле булһа, Ер яңырып йәшәрәсәк!

Ошо уйҙар мейеһенән йәшен тиҙлегендә ҡыйылып уҙып, Сәғит үҙен бынан күп йылдар элек, Тыуған ауылында, бәләкәс малай сағында итеп күрҙе. Ҡасып киткән тубын эҙләп келәт бураһы аҫтына үрмәләп инде, таптым, тип барып ҡағылғаны – тиреһе ейеп тарҡалып ятҡан ерәнгес сысҡан булды...

Шунан һуң бер көндө Сәғит клуб эргәһендә урамда уйнап йөрөй. Әшнәһе килеп ҡолағына шыбырлай: атайҙар кеүек ауыҙҙан төтөн борлатырға өйрәнәйек, йәнәһе. Ҡотҡо арбап ала, етәкләшеп йүгерәләр. Клуб тупһаһы төбөндәге күләүектә тәмәке төпсөгө табыла. Һарғайып бөткән гәзит ҡағыҙына төрөлгән, теге келәт аҫтындағы сысҡан һымаҡ бүртенгән, ҡағыҙы ейеп бүҫелеп киткән тәңгәленән тутыҡ-көрән бөртөктәре тарҡалып, күләүеккә һәр бөртөктән көрән-һары лайла йәйелгән... Шулай ҙа төтөн борлатырға ымһыныу көслө ине: сысҡан шаҡшылығын онотто Сәғит. Әшнәһенән уҙҙырмаҡсы, ергә түше менән ятып, күләүеккә эйелде, тәмәке төпсөгөн, әшнәһен шаҡ-ҡатырмаҡҡа, һәүкәш һымаҡ теле менән ялмап алырға итте, тик... уҡшытҡыс һаҫы һәм әсе ыҫтан һулышы быуылып ситкә ауҙы...

Оҙаҡламай өлкәндәр уның сәйер яғын абайлап өлгөрҙөләр. Ғәжәпләнмәҫлекме ни: атаһын күреү менән үк бала уҡшып ҡоҫорға тотона, өйгә башҡа ир-ат ингәндә лә шул уҡ хәл. Күҙ алдында сабый һарғайып һулый, күренмәҫ ҡот осорғос сир уны кимереп ашай, әммә фельдшер сырхау сирен аса алмай. Ә малай ләм-мим өндәшмәй. Оло ҡайғы кисергән ғаилә шуға иғтибар итә: сәйерйән көллө ир-аттан да биҙәрләмәй – ҡайберҙәре менән гелән һин дә мин, хатта муйындарына аҫылына. Ауылдың бөтә ирҙәрен энә күҙәүенән үткәреп, сәйер улан үҙ иткән һәм ысын мәғәнәһендә ҡоҫоп һырт ҡайырған ике төркөмгә бүлгәс, башы ҡатҡан ата-әсәгә асы хаҡиҡәт асыҡланды: малай үҙһенмәгән ир-ат заттары, шул иҫәптән үҙенең атаһы ла, һәммәһе бер үк тәмәке тартыусы йәндәр, ә һөйкөмлө төркөмгә ҡарағандары – тәмәке тартмаусылар... Атай кеше шул көндә үк көйрәтеүен ташлағас, был асыштың дөрөҫлөгө малайҙың шат күҙҙәрендә сағылды, атаһын биҙәрләп ауырыуынан аҡрынлап ҡына айныҡты. Ләкин тәмәкегә булған ытырғаныуы ошо көнгәсә ҡалды...

-- Урыҫтың бер классик яҙыусыһы әйткән бит, -- тине Сәғит: -- “Тәмәке тартҡан ҡатын-ҡыҙҙы ҡосаҡлағанда мин үҙемде һаҫыҡ тәмәке төпсөгөн ҡосаҡлағандай тоям”...

-- Бр-р-р!.. – тине Сәғиҙә, баш сайҡап...

Таксист иһә фекерен йомғаҡланы:

-- Бигерәк тә тәмәкесе ҡатын-ҡыҙҙы енем һөймәй шул минең. Лев Толстой әйтмешләй, ундайҙарҙы көл тубалына оҡшатам... Ғәфү итегеҙ, тартмайһығыҙҙыр бит һеҙ?

Сәғит яурыны менән тойҙо: ҡыҙ кинәт электр тогы һуҡҡандай ҡалтыранды. Ләкин тиҙ үк иҫен йыйып, сая-шаян өндәште:

-- Тартһамсы һуң? Әллә төшөрөп ҡалдырыр инегеҙме? Мине лә?

-- Юҡ, мин һеҙгә улай тимәйем.

-- Ниңә?

-- Ғәфү итегеҙ, ә мин бит һеҙҙе беләм! – тине таксист йәнә көҙгөнән муйыл күҙҙәре менән тура төбәлеп. Сәғиҙә көлдө:

-- Бәлки, бәләкәс саҡта икәү бергә ҡыҫаланан бармаҡты ҡыҫтыртҡанбыҙҙыр? Йә булмаһа теге, аҡһаҡ ҡола булып еткән, ҡырҡмыш тайҙың ялына ҡуша йәбешеп йөрөгәнбеҙҙер?

-- Юҡ, сәхнәлә мин һеҙҙе ҡолонсаҡ итеп күрҙем. Һеҙ... һеҙ... – Таксист һүҙ таба алманы.

Мөрәхәтһенмәй тыңлаған Сәғит ҡулын тегенең яурынбашына һалды:

-- Етте, туҡтатығыҙ.

Таксист тормозға баҫты, тимер ат ҡапыл, тешкә ҡом ҡыҫылғандай, үҙәккә үткәргес сыйылданы.

-- Бәй, “Томбойоҡкүл”гә етмәнек тәһә?

-- Артабан үҙебеҙ, рәхмәт. – Сәғит усындағы өс һумлыҡты һондо.

-- Кәрәкмәй. – Таксист аҡсаны ҡул һырты менән этәрҙе.

-- Нисек була инде был?

-- Рәхим итегеҙ. – Ырғып төшөп, ишектәрҙе асып сығарҙы. – Ятбауырҙар түгел бит беҙ. Тере ҡолонсаҡкайҙарыбыҙ, ҡыҫалаларыбыҙ хаҡына!

-- Бына һиңә кәрәкһә! – тине Сәғит. Борҡота сабып киткән “тимер ат”ты ҡарашы менән оҙатып, юлдашын ҡултыҡлап алды. – Был донъяла беҙ икебеҙ генә түгел икән дә. Көллө донъя, иламһырап, яндан елеп уҙып киткән ҡолонсаҡтарын һағына...

## VIII

Һыу өҫтөндәге ресторан “Томбойоҡкүл”гә ағай-эне эркелгән – ниғмәт тулы өҫтәлдәрҙә табын мәжлесе ҡыҙа, бер арала музыка саҡ ҡына тынып ял итә, умарта күсе гөжләгәндәй талғын ғына күмәк тауыш тирбәлә зал иңендә. Кешеләрҙең баш осона бормасланып күтәрелгән тәмәке төтөнө спиралдәре зәңгәр пружиналар булып түшәмде терәп тора. Әсе тормош тәжрибәһен етерлек татыған Сәғит, өйҙәрендәге үҙенең бүлмәһендә лә, теплоход каютаһында ла һис тәмәке еҫенә түҙмәһә лә, бындай күмәк ерҙең быулы һөрөмөнә күҙҙе йомоп барып инергә, кәрәгенсә сыҙамлыҡ һаҡларға күнектергәйне үҙен. Ҡолаҡҡа ҡырыҫ бәрелһә лә әйтәйек: йәмәғәт бәҙрәфенә лә бит беҙ бөтә уҡшыуҙарҙы тыйып, үҙебеҙҙе еңеп кенә керәбеҙ -- ә тартмаған кешегә иһә тәмәке ыҫын аңҡытыусы теләгән бер әҙәм тап шуны хәтерләтә... Ошо йәшкә етеп Сәғиттең йүнләп ҡыҙҙарға ла һырнығмауының сәбәбе лә, бәлки, баяғынан киләлер: ғүмер баҡый ҡыҙҙар тирәһен, хатта улар үҙҙәре тартмаһа ла, зәңгәр төтөн сырмай бит... Һәр хәлдә, Сәғит ыҫлы рестоpанға ҡыйыу аяҡ баҫырға тәүәккәлләнде, сөнки ғүмерлеккә яңғыҙ ҡалырға ла бер аҙым ғына хәҙер... Шулай ҙа ул инеү менән иҫ йыйып, йылтыр шешәләр теҙелгән барҙың арғы башына – күлгә ҡараған асыҡ верандаға ыңғайланы. Ылымыҡтар

аңҡына ҡушылып йылға битенән ағылған дымлы һауаны ләззәтләнеп һулай-һулай, юлдашына бормаслы ултырғысты йәтешләп көйләргә ярҙамлашты.

-- Йәштәр, нимә эсәһегеҙ? – тине бар артында йылмайып торған, ҡурсаҡтай кершәнләнгән ханым. Икеләнеберәк ҡалған Сәғит урынына Сәғиҙә яуапланы:

-- Француз шарабы ҡушылған коктейль болғатып бирегеҙ.

-- Ҡабымлыҡҡа ҡыҫаламы?

Был тәҡдимдән ресторан көлгә әүшәрелгәндәй булды, Сәғит менән Сәғиҙәнең ҡарашы төкәлеште. Улар, моғайын, таксисты хәтерләне.

-- Юҡ, беҙгә уныһы кәрәкмәй, -- тине Сәғит. – Беҙгә ғәҙәттәге ҡабымлыҡ ярай.

Һалам буйлатып һурған утлы коктейлдән баштар шөйлә еңеләйҙе, залдағы геүләү ҡолаҡҡа шаҡтай яғымлыраҡ тойолдо. Күл өҫтөндә, әкиәттәгеләй ғәжәйеп килеп сығып, ҡандай алһыу ҡанатлы аҡбалыҡ йөҙә, һыуға кәйелеп осҡан энә ҡараҡтарын йоторға ҡырҡышып ҡарпый. Томбойоҡтоң яҫы япрағы өҫтөндә, кемдер ырғытҡан икмәк һынығы тирәһендә, күксәпсек бөтөрөлә.

-- Их, доньялар ниндәй хозур! – Һыу ситенә яҡын ултырған Сәғиҙә, хистәргә бирелеп, күҙҙәрен ләззәтле йомоборак салҡайҙы. Шул ыңғайҙан ултырғысы ла һыуға әүешеп әйләнә биреп ҡуйҙы, ә егет, йөрәге “жыу!” итеп, ҡыҙҙы арҡаһынан тотто. Әммә прима-балеринаның былдай ғына хәрәкәттән йығылыры үҙе бер көлкө ине – кинәнеп йылмайыштылар, ә Сәғиттең ҡулында ҡыҙҙың танһыҡ-тығыҙ, баҙыҡ тәненең серле тылсымлылығы йоғоп ҡалды...

-- Әллә берәй әйләнеп алабыҙмы? – тине ул, саяланып.

-- Әйҙә, булмаһа.

Зал түренә икеһенең эйәртенешеп уҙыуын, егеттең “һыңар ҡуллы бандит” (автомат) боғаҙына көмөш тәңкә төшөрөүен бөтә күҙҙәр ҡыҙыҡһынып күҙәтә кеүек ине. Көмөш йотҡан төпһөҙ боғаҙҙан көр музыка урғылып сығып, быларҙы ла ҡоторонҡо үҙ көйөнә эйәртте, хәрәкәттәр дауылына өйөрҙө. Ҡыҙҙың һығылмалы нәҙек билен ҡул тейҙереп тотоу егет күңелендә нескә кисерештәр гаммаһын тоҡандырҙы – сабый саҡта беренсе тапҡыр күл буйында үтәҙек һыуҙы кисеп барып аҡ йондоҙҙай тырпай-балҡыу томбойоҡ сәскәһен оҙон-һуйҙан һабағынан услағанда ошондай уҡ рәхәт тойғо яралғайны йәнендә: тығыҙ һабаҡ һыу аҫтында уста шаян бөгөлөп-һығыла, ә һыу өҫтөндә аҡ йондоҙо тыныс ҡына тик тора...

Сәғиҙәгә егеттең ҡыланыш-килбәттәре, хәрәкәттәре нисектер ҡырыҫайып киткәндәй күренде. Һөнәре буйынса ир-ат һынына ни ҡәҙәр яҡын булып та, ошоғаса былдайын да йөрәккә үткес ҡырыҫ яҡынлыҡ кисермәгәнлектәнме, көллө тәне эҫеле-һыуыҡлы булды, башы еңелсә генә зыңҡып әйләнде. Күңеленең төпкөлөндә үҙенең был хәүефле хәлгә төшөүенә, хәмер еленән ҡыҙыша биргән партнерының күрәләтә “дәүләт сиге”н боҙорға, тәртәне тибеп һындырырға маташыуына ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо уянһа ла, ғүмерҙә һис булмағанса, ҡаршылыҡ ауазын баҫты, һыуҙың ағышы ыңғайына йөҙөргә тәүәккәлләнде. Үткән юлы Сәғит оҙатып ҡуйғандан һуң бүлмәһендә көҙгө алдында оҙаҡ тексәйеп торғайны, шунда, борсоулы уйҙарына тарып, ирене мөйөшөндә генә һис бер әҙәм күҙенә лә салынмаҫлыҡ ҡылдан нескә һыҙылышлы йыйырсыҡтың (тәүге киҫәтелеүенең!) хыянатсыл ҡылысын абайлағайны... Был асыш уны йөрәгенә үткәҙеп һыҡтандырҙы, шул уҡ саҡта баш китерлек тәүәккәллек тә бирҙе: әле һуң түгел, ҡарт ҡыҙ исемен күтәрмәҫ элек талпынып ҡалырға кәрәк!..

Таҡмаҡ ҡайһылай башланһа, шулай уҡ ҡапыл тынды, бейеүселәр, магниты бөткән уҡмаш тупсыҡтар кеүек, төрлө яҡҡа һибелде. Сәғит менән Сәғиҙә лә, ҡулға ҡул тотоношоп, һыу ситендәге урындарына килде. Тик уларға тыныс ҡалырға насип итмәгән

икән. Иҙеүҙәрен сисеп ебәргән, бешкән ҡыҫалалай ҡыҙарып бүртенгән иҫерек ике бәндә һөйрәлеп килеп инде лә эргәләрендә туҡталды.

-- Әй, ағай кеше, соҡортайыңды бир әле! – тине, йәмһеҙ кикереп, алдағыһы. Сәғит өндәшмәне, эйелеп, стакандан коктейль һемереүен белде.

-- Күрмәйһеңме ни: сәпелдәтеп бөтмәгәндәр, -- тине арттағыһы. – Ҡарағыҙ әле үҙҙәрен: американдармы ни – һалам аша ғына ебәрәләр!

-- Хо-хо-хо, ә беҙ Рәсәйҙә йәшәйбеҙ. Рәсәйҙә беҙ ни рәүешле түңкәргәнде күрһәтәйек уларға!

-- Ағай кеше, улай оҙаҡ бызмырлама, беҙгә стакан кәрәк, -- тип асыҡлыҡ индерҙе арттағыһы, эске түш кеҫәһендә тумпайған шешәһен һыйпап. Сикәләрен өтөп алған Сәғит бер уҡталғайны, Сәғиҙә тотоп ҡалды:

-- Ҡуй. Аңдары боларған бит.

-- Аҡыл көршәктәрен шаңҡытып айнытырға кәрәктер?

-- Ҡуй, ярамай.

Бар артындағы ханым көр сарбайланы:

-- Эй, йолҡоштар, һеҙгә ни кәрәк тағы? Милициямы?

-- Эх! – Стакан даулаусы үкенеп бармаҡ шартлатты ла ҡул һелтәне, Сәғиттән ситкә бороллдо. – Апаҡай, матурҡай, Сэм ағай һемерә торғаныңдан берҙе ҡойоп бирсәле!

-- Еткән инде һеҙгә, -- тине ханым, баш сайҡап. Шулай ҙа яртылаш морс һалынған һаламлы стакан һондо. Бәндә эсемлекте еҫкәп тә ҡараманы, йөҙөн сытырайтып, тырпай һаламы менән ҡуша күлгә һирпте:

-- Һаламлы был йыуынтыҡты анауы тәлмәрйен тыҡшынһын, хо-хо-хо! – Пинжәгенең эске түш кеҫәһендә боҫоп ултырған йәшкелт шешәнең ауыҙын түбәнерәк ауыштырып, ҡулындағы стаканға бүлкелдәтте лә әшнәһенә услатты. Тегеһе йотҡанын да көтмәй, шешә боғаҙынан тура үҙ боғаҙына ғорҡолдатты, бушанған шешәне күлгә атты. Яҫы томбойоҡ япраҡтары өҫтөндә ултырған тәлмәрйендәр супырлап һыуға сумды, ҡыҙыл ҡанатлы аҡбалыҡ юҡҡа сыҡты.

-- Бына ошолай, ағай кеше. Һаламһыҙ-ниһеҙ, ҡабымлыҡһыҙ түңкәрә беләләр беҙҙә, Рәсәйҙә! – Абына-һөрлөгә тышҡа тәпәйләнеләр. Күл өҫтөнән күҙен алмай ултырған Сәғиҙә, һыуҙағы шешәнең бүлк-бүлк батыуын күреп, әсенеп һөйләнә ҡуйҙы:

-- Эх, был беҙҙәге түңкәреү ғәҙәттәре!.. – Кәйефтәре боҙолоп, эсемлектәрен ҡалдырып сығып киттеләр. Саф һауала бераҙ хәл алып торғас, аҡ ҡайындар араһындағы һуҡмаҡтан яй ғына атланылар. Алма сәскәләрен туҙғытҡан иртәнге ел әллә тынған, әллә бында һил урман ышығымы – “ыш” иткән дә һиҙелмәй, көн алсаҡ, һыу бите ҙур көҙгөләй ялтлап ята. Сикәләргә сәпәгән ҡайын тәлгәштәренән яҙғы сафлыҡ сайырланып ағылды, тәбиғәттең һутлы еүеш ирендәре суп-суп үбеп бара кеүек тойолдо. Уларға тиҙерәк оло юлға сығырға, такси туҡтатырға, Сәғиҙәне фатирына оҙатып ҡуйырға кәрәк. Иҫләмәй ҙә ҡалдылар: алдарында ҡыҙышҡан йәнле бер төркөм ир-ат күренде, араларында баяғы икәү ҙә бар ине. Яҫы-клүш балаҡтарын ялпылдатып, тар һуҡмаҡты быуып ҡаршы киләләр. Бына улар терәлә яҙып туҡталды, был икәүҙе, таймаҫ-тайпылмаҫлыҡ итеп, бөтә “фронт” менән ҡамтарыҡлап алды.

-- Ҡәҙерлеләрем, тартырға бармы? – тине, тымаулаған танауын шурылдатып, урҙа яурынлы, урыҫ һаҡаллы береһе. Иҫнәп киң асылған ауыҙы тәмәке төтөнө һарғайтҡан шырт ҡыл араһынан тере яралай сейләнеп күренде, унан тоҙло балыҡ еҫе, махра ыҫы ҡатыш әсе хәмер быуы уҡшытып бөркөлдө, һулышты ҡапландырҙы.

-- Юҡ, тартмайым! – тине Сәғит, башын ситкә ҡайырып.

-- Әһә, ҡәҙерлекәйем, тартмайһың? Бәлки, бына был матур дамочка көйрәтәлер? Ә?! – Һаҡалтай, әшнәләренә мут күҙ ҡыҫып, тексәйеп яҡынланы, бармаҡ шартлатып киҫәтте – хәҙер әкәмәт күрһәтәм, әҙер тороғоҙ, йәнәһе. Тегеләре берҙәм хихылданылар.

-- Мырҙалар, юлығыҙҙа булығыҙ! – Сәғит, алға уҡталып, һаҡалтайҙы Сәғиҙәнән этәрҙе; тик яндағы ике әҙмәүер шунда уҡ уны, ҡулдарын тупаҫ шаҡарҙы ла, бер ситкә елтерәтте:

-- Шым! Һелкенмәй генә шыҡайып ҡат, ағай кеше. Томшоғоңдо ҡайыртаһың килмәһә...

-- Сәғи-и-ит! Ҡотҡа-а-ар! – Ҡыҙҙың үкһеүе тетрәтте. – Уй, яуыҙдар, яуыҙдар!..

Егет ярһып ҡулдарын ысҡындырҙы ла, тотоусыларын ике яҡҡа һелкеп ебәреп, ярҙамға ташланғайны, тағы ла икеһе килеп етеп, ергә бөкләп һалдылар, өҫтөнә атландылар:

-- Сеү, архар! Ҡоралайыңа зыян теймәҫ, әгәр ҙә аҡыллы булһа.

-- Прима-балерина бит ул, ебәрегеҙ!

-- Әһә, шулаймы? Сисендереп тәпәйҙәрен күрәйек, хо-хо-хо!

-- Ҡотҡарығы-ы-ыҙ! – Сәғиҙәнең тауышынан тамам йәрәхәтләнеп, йән көсөнә тартышып ҡараны егет...

Автомобиль гөрөлдәп килеп туҡтағаны, ишеге шартлап асылғаны ишетелде лә “ерән һаҡал” уҡталды, йүгереп килеп ул Сәғиҙәне айпалаусы яуыҙды һуғып йыҡты, иҫәнән яҙған һылыуҡайҙы ҡосағына күтәреп алып, машинаһы салонына индерҙе; моторын хәтәр ғыжылдатып олаҡты.

-- Әһә, булды – спектакль тамам! – тине Сәғит өҫтөндә атланып ултырыусы, ҡулдарын бушатып һәм ҡалҡынып. -- Ысҡындырығыҙ архарҙы! – Хатта береһе ҡулынан тартып торғоҙҙо: -- Бар, ялтай, беҙҙең һиндә эшебеҙ юҡ!

-- Кемдә һуң эшегеҙ бар?

-- Кем мулыраҡ сумырһа, шуға хеҙмәт итәбеҙ, хо-хо-хо! Күрҙеңме “ерән һаҡал”ды? Аҡсаһын йәлләмәгәс, танауың аҫтынан прима-балеринаңды алып һыҙҙы. Алданыраҡ түләһәң, ул туташ, һис шикһеҙ, һинеке булыр ине. Бар, олаҡ, дүрт яғың ҡибла хәҙер!

Сәғит тештәрен шыҡырлатып тыңланы...

Төнө буйы, серем итә алмайынса, әйләнеп тә тулғанып сыҡҡан егет, артистарҙың репетициялар мөҙҙәтен саҡ көтөп алып, көндөҙгө сәғәт ун икеләрҙә театрға шылтыратты, саҡ табып килтерҙеләр.

-- Әү, тыңлайым! – Йәнгә үткес яғымлы, йылы тауыш.

-- Сәғиҙә... -- Телефон сымынан ҡапыл һалҡынлыҡ бәрҙе:

-- Ваҡытым юҡ! Ниңә мине эшемдән бүлдерәһегеҙ?!

-- Сәғиҙә... – Һуңғы ваҡыттарҙа үҙенән-үҙе урынлашҡан йылы “һин”дән һалҡын “һеҙ”гә күсеүҙе шаңҡыбыраҡ ҡабул иткән егет, тотлоға-тотлоға, һүҙҙәрен йота-йота, “ерән һаҡал”дың ҡайһындай ҙа хәтәр бәндә икәнлеген, унан һаҡланырға кәрәклеген аңлата башлағайны ла, уғата артты өшөткөс һалҡынлығы:

-- Ха, кемдән ишетәм быны! Кем мине кисә яһил хулигандар ҡулына тапшырҙы, ә кем ҡотҡарып алды?!

-- Телефондан әйтеп бөтөрөп булмай, күрешәйек! Һөйләрмен...

-- Юҡ! Һеҙҙең ишене күргем дә, һөйләшкем дә килмәй! Бөттө! – Һулҡылдап илау салынып ҡалды ла элемтә ҡылы өҙөлдө.

**IX**

Балет театры быйыл, сезоны ябылыу менән үк, гастролдәргә китмәне, ә әртистәрҙең һәммәһен йыллыҡ ялдарына тараттылар. Сәғиҙә лә ҡалала юҡ – Ҡафҡазғамы, Ҡырымғамы курортҡа киткән, тинеләр. Сәғит теге ваҡиғанан һуң, шаңҡып йөрөп, ҡыҙҙы күрә һәм аңлаша алмауына үкенде, шул уҡ ваҡытта Сәғиҙәнең төптө һанламауы йүнкетте.

Әмәлгә ҡалғандай, шул мөҙҙәттә “ерән һаҡал” да юҡҡа сыҡты, һыу өҫтө һәм яр буйҙары уның шарылдаҡ моторынан арынды. Шуныһына шөкөр иткән Сәғит шөйлә тынысланды, Сәғиҙәһен әсенеп уйлаһа ла, сабырлыҡ һаҡларға тырышты. Әммә йылға буйҙарын ныҡышып тентеүҙән туҡтаманы, сөнки “ерән һаҡал”дан башҡа ла йылғырҙар, тәбиғәтте вәхшәтләүселәр бар ине.

Сәғиҙәнең китеүенә ай ярым самаһы үткәс, ярҙамсыһы Алеша менән үҙҙәренең “Томбойоғ”онда Ағиҙел үрҙәрен бер талай гиҙеп йөрөп, көндәлек дозорҙан ҡайтып киләләр ине. Көтмәгәндә йылға иңдәрен баяғыса ҡолаҡ ярғыс шарылдау ҡалтыратты, инспектор кәмәһенә ҡаршы яҡтан дөрөүсе, алыҫтан уҡ таныш катер-амфибия күренде – “ерән һаҡал” тап үҙе! Ғәҙәтенсә, ҡоштай осортоп елә, ә кәмәнең ситендә, аҡҡош ҡанатылай ап-аҡ беләктәрен ағын һыуға сумырып, яҫы һалам эшләпәһен эйәге аҫтына тарттырып бәйләгән, ап-аҡ күлдәкле бер һылыуҡай ултыра. Инспекция “Томбойоғ”он күргәс тә, азамат моторын уғата яман үкертте лә, уҡтай атылып, тура быларҙың өҫтөнә тоҫҡалдырҙы –ҡурҡышынан инспектор бер ҡырый янтайыр ҙа күҙенән ысҡынырмын, тигәндер... Тик Сәғит тә, тешен ҡыҫып, ҡаршы барыуын белде, ә Алеша рупорҙан тегегә туҡтарға бойороп һөрәнләне. Төкөшөргә илле метрҙай ғына ҡалғас, хулигандың нервыһы барыбер ҡаҡшаны: ажарлы амфибия, һул яғына ҡырт боролоп, Томбойоҡкүл йырынына инеп китеп юғалды, хатта ҡапыл ҡайырылғанда кәмә ситендәге әлеге эшләпәле һылыуының һыуға ҡолап ҡалыуын, ярҙам һорап ҡысҡырыуын да һис бер иғтибарламаны...

-- Артынан төш! – тине Сәғит Алешаға кәмәнең рулен биреп. – Юҡ! Кисекмәҫтән “Томбойоҡкүл” ресторанына туҡталып, телефондан медицина тиҙ ярҙамын саҡыр! – тип бойороп оҙатты ла һыуға һикерҙе, батып барыусы ханымды ҡоро ярға һөйрәп сығарҙы. Битенә ҡапланған эшләпәһен алып ташлағас, йөрәге “жыу!” итеп туҡтағандай, белештермәй ҡысҡырҙы:

-- Сәғиҙәм! Томбойоғом, һин бит был!..

Ҡыҙҙың күҙҙәре асылды, ирен мөйөштәрендә еңелсә аптырау һыҙатланды:

-- Эйе, мин... мин... – Һулығып-үкһеп иланы...

## X

Бөгөн опера театрында яңы сезон асыу спектакле – йылдағыса “Томбойоҡкүл” балеты. Көн һаман кискә ауыша, спектакль башланыр сәғәт яҡынлай ҙа яҡынлай...

Сәғит, бүлмәһендә яңғыҙы ҡалып, Сәғиҙә хаҡында уйлай. Теге аяныслы көндә уны тиҙ ярҙам дауаханаһына үҙе оҙатып ҡуйһа ла, башҡа күрешкәне лә, шылтыратышҡаны ла юҡ: йәйге ялында ай буйына диңгеҙ ярында Алғыр Ниәтшин менән бергә булғандарын ишетеп белә ине...

Һағышынан айный алмай, телевизор клавишаһына баҫа. Экрандағы кеше йөҙө томанланған хәлдә күҙҙәренә көскә тоташа, тауышы меңәр саҡрымдағылай тоноҡланып ишетелә:

-- Бөгөнгө беҙҙең зәңгәр планетабыҙҙың хәле – үҙен араҡы, тәмәке һәм төрлө наркотиктар менән тынҡыслаған ахмаҡ әҙәм балаһыныҡы кеүек. Ул бахырҙың бауыры,

бөйөрө, үпкәләре, йөрәге һәм башҡа эске органдары шул зарарлы матдәләрҙән нисек һыҡтап һыҙлаһа, киңгәһә, зәңгәр планетабыҙҙың да яҙмышы ҡыл осонда: күкккә ашҡан ағыулы быуҙарҙан, ергә-һыуға һеңгән химикаттарҙан, күҙгә күренмәй йәйелеүсе бысраҡтарҙан арсаланырға хәле ҡалмай бара уның. Минутлыҡ рәхәткә алданып үҙенең мәңгелек ғүмерен әжәл алҡымына һалған әҙәм балаһы бөгөн инде яңғыҙ үҙен генә түгел, ә көллө тәбиғәтте, бөтә планетаны аяныс хәлгә тарыта. Әҙәм организмының да, зәңгәр планетабыҙҙың да ағыуҙарға ҡарышырлыҡ тәҡәте ҡороп бара – уның эске резервтарының да сиге бар. Шул критик сиккә етеү – үлем... Замандаштарым, белегеҙ! Үҙенең сафлығын юйған әҙәм – донъяның сафлығын быуа. Үҙенең сафлығын ҡайғыртҡан йән – донъяның сафлығын һаҡлай...

Сәғит клавишаны батыра, зәңгәр экран тоноҡланып һүрелә. Ҡайҙа ғына һуғылһаң да, әлеге лә баяғы бер балыҡ башы. Юҡ, былай ҡалыу мөмкин түгел!

Өҫтәлдәге ҡайырма календарҙе аса. Ике дана театр билеты ҡыҫтырылған. Эйе, ике, сөнки ул Сәғиҙә бейегән иң шәп “Томбойоҡкүл” спектакленә йәнә кемделер килтерергә ғәҙәтләнгән...

Сәғит күҙҙәрен йомған килеш театр билеттарына төблеп ҡата, оҙаҡ ойоп ултыра, күҙе йомоҡ килеш барып койкаһына йығыла.

Бына ул үҙен күңеленең ҡараңғы бушлығынан алыҫтағы зәңгәр планетаға бағып торғандай тоя. Юҡ, сағыу балҡышлы саф зәңгәр, юҡ! – ап-аҡ саф томбойоҡ был! Ғаләм төпкөлөнән һомғол һабағында тирбәлә. Япа-яңғыҙ аҡ томбойоҡ, берҙән-бер аҡ томбойоҡ. Ҡайһындай саф томбойоҡ!.. Ләкин һомғол һабаҡ буйлап үрмәләй-үрмәләй ҡара быу күтәрелә, томбойоҡҡа ҡылйыландай урала. Үҙе – ҡара, ә һаҡалы еп-ерән... Сәғит, ошо ҡотосҡос ҡылйыландың беҙҙәй осло күҙҙәрен күрмәҫ өсөн, муйынын һындырырҙай артҡа салҡая, башын сатнатырҙай бәрә стенаға. Өнмө был, төшмө, әллә хәтәр һаташыумы?..

Ишек шаҡыйҙар икән. Әсәһе, кемдәрҙелер эйәртеп инеп, уның баш осонда тора. Төшлөгөн уҙған ҡояштың һүрән нурҙары тиртә тәҙрәнән. Ишек төбөндәгеләр тамаҡ ҡыра. Бәй, үҙебеҙҙең Алеша менән Дуняша – вахтасы ҡыҙыҡай бит был! Эйәртенешеп килгәндәр. Ҡарағыҙ әле: ҡыҙҙарҙың һипкел-йондоҙҙар һибелеп биҙәлгән йөҙҙәре ниндәй матур – күктәрҙең сихри яҡтылығы ошо йөҙҙәрҙән башлана!

Күкрәгенән шатлыҡ тулҡыны сайпылған Сәғит айнып ырғып торҙо, ҡунаҡтарҙы түргә уҙырға ҡыҫтаны. Ләкин йәштәр бик ашығыс ҡына килгәндәр икән. Ҡыҙҙың шаян һипкелдәре менән йәм-йәшел егет күҙҙәре яңы йоҡонан уянғандай иҫәнгерәүле Сәғиттең күңелендә, нисектер, икеһе бергә ҡушылды – йәшкелт иҙел ҡосағында шат тирбәлеүсе аҡсарлаҡтар көтөүендәй сағыу ҡыуаныс тыуҙы.

-- Беләһегеҙме, Сәғит ағай, -- тине Алеша, күҙҙәренең саф йәшеллегенә бүлмәне күмелдереп, тулҡынланыуҙан һүҙҙәрен яртылаш йотоп, -- Дуняша менән балетҡа тип килгәйнек, тик... тик... билет таба алмайбыҙ.

-- Тантаналы сезон асыу, “Томбойоҡкүл” бит әле... – тине ҡыҙ. – Шундай үкенес... Һеҙ, Сәғит ағай, телефондан шылтыратып, контрамарка алып бирмәҫһегеҙме икән?

Ошо мәлдә Сәғиткә донъя йөҙө ҡапыл яҡтырып, сафланып киткәндәй булды, уның күҙ алдында ап-аҡ томбойоҡ төҫмөрләнде. Йөрәгенең тулағанын башҡалар ҙа ишеткәндәй албырғанып, календәргә ҡыҫтырылған ике билетты алды, матростың түш кеҫәһенә төшөрҙө:

-- Хәйерле юл теләйем, дуҫтар, һеҙгә... Бөгөн... бөгөн... прима-балерина Сәғиҙә Салауатова бейей... – Ҡунаҡтарҙы ишектән оҙатып ҡалып, көҙгө янына килде, таушалған күлдәген һалып, ҡарҙай ап-аҡ нейлон күлдәген кейеп, иң айбарлы галстугын бәйләне. “Эйе, беҙҙәрҙең сезон ябыла – һеҙҙәрҙеке асыла!..” Контрамарканы үҙенә алырға тейеш...

Ҡәҙерле уҡыусым, күҙ һалһаңсы Ағиҙелдән күтәрелмеш киртләс-киртләс мәрмәр баҫҡыстар буйына! Унда, биш аҙымын бер баҫып, үҙенә ҡуша йылға елдәрен эйәртеп, мыҡты һынлы ағиҙелсе ҡалаға менеп бара. Баҫҡыстар артта ҡалды, егет, сажин аҙымдарын һалып, ике ҡулын ныҡ һелтәп, нурҙай тура урам буйлап ашыға. Елгә ҡаршы күкрәк киреп, ҡыйыу аҙымлап бара – Планетаның тәбиғәтен һаҡлаусы инспектор. Донъяның ул ағын да, ҡараһын да күрә белергә тейеш!

Сәғит шуны йөрәге менән тоя: икеһенең хушлашыу кисе түгел был. Томбойоҡтар ил күрке өсөн тыуа, томбойоҡтар хушлашмаҫҡа, мәңге бәхет килтерергә үркелә -- бына шуны белеү зарур беҙҙәргә.

Эйе, ҡара йәнле ҡылыйыландар томбойоҡто уралып быуымаһын өсөн, һәр беребеҙ үҙендәге ап-аҡ томбойоҡ сафлығын балҡытырға, Матурлыҡты арыҫландарҙай ҡурсаларға бурыслы.

Сәғит, ап-аҡ томбойоҡ сәскәһен күкрәгенә ҡыҫҡан килеш, "Томбойоҡло күл"дә йөҙгән алиһәһен тәбрикләргә ашығып-йүгереп елә...

25.12.1976

# ХЕҘМӘТ

## I

— Ғәлим, әйҙә, беҙгә хисапсы булып кил. Юҡһа, бынауы ғиззәт йүнле-башлы ерҙәрҙе лә үлсәмәй, МТС-ҡа хисапты ла һуңлата — трактористар көн һайын жалыу менән килә. Ә МТС бухгалтеры минең ҡолаҡ итен ашай... Хисапсы булманы был — эт булды! — Шулай тине егеткә трактор бригадаһының бригадиры Дәүәй. Был бригада, билдәле булыуынса, колхоздың үҙенә түгел, ә дәүләтебеҙҙең машина-трактор станцияһына (МТС-ҡа) ҡарай, сөнки бөтә техника МТС-тыҡы (кешеләре генә колхоздыҡы), шуға күрә ундағы эш хаҡы ла дәүләт юғарылығында ҡуйылып, колхоздыҡынан ныҡ айырыла — көҙгөһөн игенен дә, аҡсаһын да, ауыл халҡы әйтмешләй, “көрәп алалар”... Ғәлим уйланып килә ине, ҡапыл бүленеп, туҡтап ҡалды. Бригадирҙың тәҡдимен аңына һеңдереп еткерә алмай, йөҙөнә текләне.

— Ул һиңә, моряк хеҙмәтенән ҡайтҡан егәрле егеткә, самый ҡулай эш. Тәбиле — тәбил, аҡсаһы — аҡса, ә көҙ көнө бура тултырып ашлыҡ алаһың. Былтыр, мәҫәлән, ғиззәт бер юлы егерме центнер бойҙай кәкте, ләкин шуның да ҡәҙерен белмәй, эт кеше, тамам эскегә һабышты. Бер айыҡ көнө юҡ шылманың! Ә һин — йәш егет, ете клас грамотаң бар — йөҙөп йөрөп эшләргә лә эшләргә! Әйҙә, ғариза яҙ, мин бөгөн үк уны идараға тапшырам, — тип осланы Дәүәй. Ул тимер-томор араһында бысраҡ тимер сыбыҡҡа тракторҙан төшкән иҫке подшипниктарҙы баулап маташа, эш менән мәшғүл булғанлыҡтан, тауышы баҫыңҡы, уйсан. Бригадирҙың тәүге генә тәҡдиме түгел ине был; былтыр уҡ, Ғәлим хеҙмәттән ҡайтҡас та, уға ошо уҡ һүҙҙәрҙе әйтеп өгөтләп йөрөгәйне. Ғәлим һаман кире ҡаға килде, сөнки күңеле күмәк халыҡ эшләй торған ябай хеҙмәт яғына тартыла; икенсенән, өс бала атаһы булған яҡын ғына ағайын эшенән сығартып, уның урынын алыу уңайлы булмаҫ, тигән ялған оят борсоно күңелен. Ә хәҙерен бригадирға ҡырҡа яуап бирергә ашыҡманы, уйға ҡалды. Әллә, ысынлап та, ҡабул ҡылырғамы тәҡдимде? Ул ҡайтҡандан биреле ауыр эштәрҙә эшләне. Флотта саҡта: “Өйгә ҡайтһам, өс көн, өс төн бер туҡтауһыҙ ятып йоҡлармын, унан, ике ай бер ҡайҙа ла сыҡмай ял итермен”, тип, дүрт йыл буйы тәмле хыял йөрөтһә лә, ҡайтып бер аҙнала торманы, яласылыҡ бригадиры Фәйзерахман ағай килеп етте һәм уны “ваҡытлыса ғына йөрөп торорға” трактор санаһына һалам тейәүсе итеп сығарҙылар. Баҫыуҙарҙың ҡарын йырып бурандарҙа һалам ташылып бөткәс, ағас ҡырҡыусылар кәрәк булды колхозға. Фермала мал торлаҡтары етешмәй, йәш быҙауҙар туңып үлә, ә урманда ағас ауҙарырға кешт еҡ, тип зарланды уға ферма мөдире. Ғәлим тағы ҡыйманы, балтаһын биленә ҡыҫтырҙы ла урманға китте. Бына хәҙер бер йыл тулып үтте инде шулай эшләй башлағанына. Бынауы сөйәлләнгән ҡулдар нимә генә башҡарманы! Был яҫы устарға балта һабы ла, һәнәк-көрәктеке лә үҙҙәренән ҡаты иҫтәлек ҡалдырырға тырышҡан. Ҡаланан ҡайтҡан ҡайһы бер студент ҡыҙҙар, хатта егеттәр менән күрешкәндә улар, сырайҙарын сыйырып, һәләт кенә ысҡына ла устарына ҡарап ала. Ҡытыршы ҡулдар кәйефтәрен боҙа самаһы. Ләкин Ғәлимдең быға һис иҫе китмәй. Ундай сибек йәндәрҙе ул, имән тамырынан шытып та, “мин йүкә!” тип ҡысҡырып ултырған йәш туйраларға тиңләй.

— Ысынлап та, был һиңә ҡулайлы эш. Яҡшылап уйлап ҡара әле, — тигән икенсе бер тауыш ишетелде Ғәлимгә. һирәгәйгән тараҡ тештәренә оҡшап оҙон анкер болттары тырпайып торған яртылаш һүтек трактор маторы артында парторг Рәүеф Бикмырҙин менән тракторист Насрый улар һүҙенә ҡолаҡ һалып ултыралар икән.

— Әллә нисек бит әле. Ҡатын-ҡыҙҙар эше... — тип, уңайһыҙланып мығырҙаны Ғәлим, күҙ ҡарашын аҫҡа йәшерергә тырышып. Ҡолаҡтарының утҡа бешкәндәй ҡапыл семләп ҡыҙыуын тойҙо.

— Күрсәле һин уны, Дәүәй ағай, күрсәле, ҡайһылай эре сирттерә! Моғайын, уға һинең менән минең эш тә ваҡ, "ҡатын-ҡыҙҙар эше" булып күренәлер әле. Яурынға һалып бүрәнә ташымағас, йәки кәйлә күтәреп таш ватмағас, беҙ бахырҙарҙың ҡыбырҙауы ҡайҙан килеп ирҙәр эше булһын инде ул! — Рәүеф Бикмырҙин, күҙлеген ҡулына алып, быялаларын ҡулъяулығы менән һөртә-һөртә, шундай кинәнеп көлдө, хатта күҙҙәренән суҡмарланып йәш бөртөктәре бытлыҡты. Быны күргәс, һалҡын ҡанлы Дәүәй ҙә түҙә алманы, аҡ тештәрен ялтыратып йылмайып ҡуйҙы. Ғәлимдең ҡолаҡтары уғата нығыраҡ ҡыҙарҙы.

— Мин улай тип әйтмәгәйнем дә... — тине ул, баҫҡан урынында тапанып.

— Шулай, ҡустым, хеҙмәткә һин улай , яңылыш ҡарама. Беҙҙең илдә ирҙәр ҙә, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа бер үк почетлы бурысты атҡара — коммунизм төҙөй. Һәм партия уларҙың һәр береһен, көсөнә, һәләтенә ҡарап, ҡулдарынан килерлек эшкә тәғәйенләй. Әгәр хәҙер һине физик эштән алып аң эшенә ҡуялар икән, бының бер ҙә ғәрлегт еҡ, тимәк, һин шул эштә колхозға күберәк файҙа килтерәсәкһең. — Парторг быны көлөүенән уңалып, етди ҡиәфәттә әйтте.

"Әллә риза булайыммы икән? Ғиззәттең насар эшләүенә мин ғәйепләмe ни! Уны барыбер алмаштырасаҡтар — өс бала атаһы тип ҡарап тормаҫтар". Ә шулай ҙа төп шиген әйтмәне бит әле. Парторг үҙе керешкән икән, етди һөйләшәләрҙер.

— Һеҙ әйткән ул эшкә үҙен тәҡдим итеп йөрөүсе бар бит...

— Кем ул?

— Кәзәтәкәне әйтәм.

— Кем?! — Парторгтың Ғәлимгә төбәлгән аптыраулы күҙҙәре күҙлек быялаларынан ҙурайып, түңәрәкләнеп күренде — был ҡушаматты тәүгә ишетә, күрәһең. Сөнки Рәүеф Әхмәт улы Бикмырҙин был ауылға быйыл ғына ситтән ебәрелгән уҡытыусы булып, бер юлы колхоздың парторгы ла итеп һайлағайнылар үҙен.

— Рәүеф Әхметыч, Сәләмғолдо атай ул, — тип аңлатты Насрый.

— Ә?! Ә ниңә "Кәзәтәкә"?

Тыңлап ултырыусыларҙың парторгтан башҡалары бөтәһе хахылдап көлдө.

— Ҡушаматы ул уның. Йәғни исеменән алда йөрөгән ләҡәбе, — тине Дәүәй. Артына боролоп, Ғәлимгә текләп ҡарап, баш сайҡаны: — Атамаҫҡа кәрәк ине... яман исем тағаһың...

— Бәй, минме ни? Бөтә ауыл әйтә бит... — тине Ғәлим. Парторг һүҙҙе бүлдерҙе:

— Быныһы икенсе мәсьәлә. Ә һин, ҡустым, Дәүәй ағайыңдың тәҡдимен уйла яҡшылап. Сәләмғол өсөн борсолма — советтар системаһындағы вазифа көтә уны.

Егетте был шаҡтай хәүефкә һалды. Сөнки ауыл Советы рәйесе Хөсәйен ағай бер мәл уны саҡыртып алып: "Секретарым эштән китте, урынына кеше кәрәк. Әгәр ҙә һинең кандидатураңа туҡталһаҡ... нисек уйлайһың?" — тигәйне һәм, ыңғай яуап алғас, яҙыу-һыҙыу маһирлығыңды күрһәт, тип, юғарынан төшкән оҙон ғына бер ҡарарҙың тексын дәфтәргә күсереп килтерергә биргәйне. Ғәлим уны төн ултырып яҙҙы ла илтеп тә бирҙе, шунан биреле һағайып көтөп йөрөй...

Түрәләрҙең һүҙ ағышының ҡайһы яҡҡа боролорон самалап ултырған Насрый, бер Ғәлимгә, бер парторгка ҡарап алды ла, ҡиәфәттәре буйынса кәрәкле һығымтаны яһап, буғай, үҙенең шешәләше ғиззәтте насар һүҙҙәр менән һүгергә тотондо. Уның раҫлауынса, хәҙерге хисапсы ялҡау ҙа, миңрәү ҙә, енәйәтсе лә, тик фәҡәт , яңынан ҡуйылаcаҡ Ғәлим генә көллө сифаттары менән вазифаға тап килә. Имеш, Насрыйҙар күптән үк инде

ғиззәтте “бу̀клы сыбыҡ менән ҡыуаларға”, ә Ғәлимде уның урынына “ултыртырға” йыйынып бөткәндәр, тик бригадирҙан алға сығып һүҙ башларға ғына ҡыймағандар... Трактористың был ҡәҙәре тырышып ялағайланыуы Ғәлимгә оҡшаманы. Ул, күңеле болғанғандағылай сырай һытып, ситкә бороллдо. Икеле мәғәнәлә белдерҙе түрәләргә:

— Уйлап ҡарайым әле, ағайҙар. Өҙөп кенә вәғәҙә итмәйем — ата-бабам эшләп кинәнгән эш түгел.

Насрый, “лып!” итеп, таҙартып ятҡан головкаһы өҫтөнә ултырҙы ла, ергә “лыст!” төкөрөп, алыҫта алпаң-тилпәң атлап яҡынлап килеүсе яңғыҙ әҙәм фигураһына төбәне күҙҙәрен. Уны сырамытып алғас, ут уртаһына ултыртылған саяндай, сыҙамһыҙланып тегеләй-былай борғоланды.

— Ғиззәтте мин яманламайым. Ғиззәт тә яҡшы кеше... — тип һөйләнде ул, күҙ ҡарашын бүтәндәрҙекенә киҫештермәҫ өсөн, аяғы аҫтына ҡарап.

Килеүсе әҙәм ғиззәт ине. Әммә бында һуғылмай, бригаданың яғыулыҡ һаҡлау цистерналары һерәйеп ултырған яҡҡа бороллдо. Парторг менән Насрый ҙа үҙ йомоштарына олаҡҡас, Дәүәй, трактор майына ҡарайған тупыс бармағы менән ымлап, Ғәлимде яҡыныраҡ килтерҙе:

— Һин, ҡустым, “Кәзәткә”не хәйерһеҙ сәғәттә ысҡындырҙың. Түрә кешене ярамай улай хурларға.

— Бәй, ул да булдымы түрә?

— Булды шул. Парторг юҡты тумбыта, тиһеңме әллә? Урындағы Совет власының алтын тотҡаһы — ауыл Советы секретары ул хәҙер.

Башына шаулатып һыуыҡ һыу ҡойҙолармы ни:

— Ҡайҙан алып әйтәһең?

— Хөсәйендең үҙенән ишеттем. Ул, һынамаҡҡа, Сәләмғолдан да, башҡаларҙан да текстар яҙҙыртып алған. Почерктарҙың иң шәбе — Сәлемғолдоҡо икән. — Күҙҙәрен мут сөкөрәйтеп, һынағандай итте егетте. — Ә һинеке, ҡустым, тәпәндәге он өҫтөнән тараҡан юлаҡлағандай, кәкес-бөкөс имеш...

— Шулай шул... — тине егет. Ысын һүҙгә ни үпкә?..

— Танауыңды төшөрмә, ҡустым, беҙгә ярай ул һинең яҙыу. Иң мөһиме, эсеңдә йәнең булһын да иҫәпте теүәл апар.

# II

Йылы апрель Ҡояшы, йомшаҡ, ялбыр йәпле телен ергә һуҙып, соҡорҙарға, ағас төптәренә боҫоп ҡалған һуңғы ҡар яҫтыҡтарын ялай. Тау үҙәктәренән аҙаҡҡы йырғанаҡтар аға, яҙ башындағы кеүек мул һыулы, көслө түгел улар хәҙер. Оҙаҡ илап арыған баланың күҙ йәштәренә оҡшап, көскә генә ҡар аҫтынан селтерәп сығалар ҙа, яҡындағы шишмә ярына ла барып етешә алмай, ҡуйы бүтәгә араһына һеңәләр. Йығылып кейеҙләнеп ятҡан ярым серек иҫкене тош-тош урындан йәшел энәләр көр тишеп, ҡыяҡтары менән Ҡояш йәптәренә аҫылынып үрләй. Тос нурҙарҙы йотлоғоп-йотлоғоп эсәләр, йәшәү рәхәтен мул татып кинәнәләр. Бер-нисә айҙан дала иңенә Каспий диңгеҙенең ҡыуан һулышы бөркөлөрөн, был нурҙарҙың ҡотолғоһоҙ көйҙөрткөс утҡа әүерелерен белмәйҙер әле улар...

Дала күкрәгенә тәрән бураҙналар ярып тракторҙар үкерә. Береһе сиҙәм күтәрә, икенселәре былтыр туңға һөргән ерҙәрҙе тырмата — һәр тәңгәлдә эш ҡайнай. Ғәлим, трактор бригадаһының хисапсыһы, һары таңдан алып ҡара кискәсә ер үлсәү менән мәшғүл, шунда ла эш артынан өлгөрөп етмәй. Өйгә бик һуңлап ҡайта. Батҡаҡлы

итектәрен һыпырып ташлап, арылы-биреле генә ҡапҡылап ала ла, һикегә ауа тиҙерәк. Төнө буйы аяҡтары һыҙлай, сажин таяғының тотҡаһы уйған ус төптәре әсетә. Иртүк тороп тағы тракторҙар янына барырға, бактарындағы яғыулыкты, эшкәртелгән ерҙәрҙе үлсәргә кәрәк. Ә төн шундай ҡыҫҡа, шундай ҡыҫҡа...

Колхоздың ер биләмәләре гелән таулыҡ булғанлыктан, иген баҫыуҙары шул тау араларындағы үҙәндәрҙә ҡыҫылышып яталар. Шуға күрә тракторҙар тырым-тыраҡай таралған. Бөтәһен йөрөп әйләнеп сығыу өсөн, иң кәмендә утыҙ саҡрым ара үтергә кәрәк. Ғәлим уны тура килгәндә — ылауға эләгеп, тура килмәгәндә йәйәүләп уҙа. Эшкәртелгән ыҙандарҙы ғына түгел, өҫтәүенә баҫыуҙарҙың һәр береһен тулыһынса үлсәп сығырға тура килә. Сөнки былтырҙан туңға һөрөп ҡалдырылған майҙандарҙың ҡайһыныһы нисә гектар тәшкил итеүе мәғлүм түгел — Ғиззәт ағаһы уға эшен туғарғанда бының хаҡында бер мәғлүмәт тә бирмәне. Бөтәһен үҙ аяҡтарың менән йөрөп, ҡулың менән сажин таяғын атлатып үлсәргә кәрәк.

Ғәлим, оҙон ыҙан буйын сажинлап сыкты ла, маңлай тирен һөртөп, кәҫ өҫтөнә ултырҙы. Насар тойғо борсоно күңелен. Хафаланып, ҡуйын дәфтәре биттәрен аҡтарҙы. Туңға һөргән баҫыуҙарҙың аҙаҡҡыһы үлсәнде инде, әммә уларҙың дөйөм майҙаны идаранан алынған мәғлүмәттәргә тап килмәй. Былтырғы хисап-сводкалар буйынса, ул өс мең дә ике йөҙ гектар тәшкил итергә тейеш икән, ә хәҙерен теүәл өс мең генә сығып тора. Етешмәгән ике йөҙ гектар ҡайҙа? Әллә онотолоп үлсәнмәй ҡалған майҙандар бармы?..

Ғәлим колхоздағы бөтә ҡыйыҡ-ҡыйпысаҡ баҫыуҙарҙың береһен-бер ҡалдырмай, күңел ебенән үткәреп сыкты. Юҡ, үлсәнмәй ҡалған ерҙәр булырға тейеш түгел. Бәлки, иҫәпләүҙә , яңылышҡандыр? Шикләнеүҙәренә түҙә алмай, орсоҡтай ырғып торҙо. Тәүге тура килгән баҫыуҙы, ҡыҙыу-ҡыҙыу, , яңынан үлсәй башланы. Шундай ҙа тулҡынланды — маңлайынан, танауы һыртынан бөрсөк-бөрсөк бүртеп тир сыкты. Үҙ-үҙен тикшереү ине был. Тик ҡуйын дәфтәрендәге кисә үлсәгәндән һуң яһаған ер һыҙмаһын , яңы ғына үлсәп алынған күрһәткестәр менән сағыштырғас ҡына, тынысланып хәл йыйыҙы. Бүтән майҙандарҙы тикшереп ҡарау ҙа уның тәүге үлсәүҙәрен дөрөҫләнеләр. Был хәл егетте шатландырҙы ла, хәүефләндерҙе лә.

...Ғиззәт ағаһының өйө ауыл осонда ине. Былтыр ғына күсереп һалыныуға ҡарамаҫтан, түбәһенең асамайҙары ҡыйшайып, ҡыйығы артҡа салҡайған, япҡан ҡамышы һүтелеп, ҙур-ҙур ҡара тишектәр өңөрәйгән. Соландағы беренсе аҙымында уҡ Ғәлим “тәкмәс атып” китә яҙҙы: иҙән, аҫтағы бер өрлөгө һыныу сәбәпле, воронкалай өңөлөп аҫка төшкәйне. Өй эсендә лә күренеш яҡшынан түгел: иҙән таҡталары, яҡындағы тимер юл станцияһының тәпәш барак йәки землянка ҡыйығын хәтерләтеп, урта өрлөк тәңгәле ҡалҡыуыраҡ, ә ике яҡҡа һөҙәгерәк түшәлгәйнеләр. Таҡта остары, әкиәттәге төндә яр ситенә баштарын сығарып йоҡлаған суртандар кеүек, урта өрлөк буйында кәшкәйешеп өҫкә ҡалҡып яталар; бармаҡ йыуанлыҡ ҡаҙау ҙа, болтлап тарттырған планка ла, бер нәмә лә батыра алмаған уларҙы. Өҫтәүенә, түшәм ярығынан Ғәлимдең башына шыбырҙап туҙан ҡойолдо... Абайламай аяғыңды ярыҡҡа ҡыҫтыртып һөрлөгөү йәки тәгәрәп танауыңды емереү кеүек ҡурҡынысты аҙым һайын көтөргә була бында. Сөнки иҙәнде ғиззәт, урыҫтар әйтмешләй, “косой” (йәғни араҡы эсеп күҙе ҡылыйланған) сағында түшәгән, шуға күрә үлсәүҙәре ошолай ҡыяраҡ, “косойыраҡ” килеп сыҡҡан, тип мәҙәкләйҙәр уҫал телдәр. Ғиззәттәр ғаиләһендәге үҙ-ара мөнәсәбәт тә ошо иҙән таҡталарына оҡшап ҡыйыш-мыйыш төҙөлгәйне; тормош күркен унда әленән-әле ләүкеп торған талаш-ҡысҡырыш, үҙ-ара мәсхәрәләшеү боҙа. Шуға күрә Ғәлим бында һирәк килә, килгәне һайын ағаһының балта оҫталыҡ сәнғәте тыуҙырған йорттоң әле былдай, әле тегендәй хилафлыҡтарға дусар булғанын күрә. Ә был юлы уны әллә ни ҙур үҙгәреш көтмәне: ни бары аш өйөнөң түшәм өрлөгө һығылған да мейес ҡаҙнаһының бер мөйөшө

иҙән аҫтына умырылыу ҡурҡынысы аҫтында... Карауатта йыйыштырылмаған урын өҫтөндә баш тарап ултырған ташбыҡ күҙ Еңгәһе Хөмәйрә уны күреү менән сәсен туҙғытып торҙо ла:

— Ана, күр безталкауай ағаңдың эшен. Мине өс балам менән ҡуша бүрәнәнән баҫтыртып үлтерә инде ул, тфү! — тип түшәм өрләгенә төкөрҙө. Төпкө бүлмәнән Ғиззәттең ҡыҙып һүгенеүе ишетелде. Ғәлим, еңгәһенең сәрелдәүенә ҡолаҡ һалмаҫҡа тырышып, тиҙерәк төпкә үтте.

— Сәләм! Бүрәнәләр баҫылып етмәйме ни әле? — тине, тыуып килгән ғауғаны уйынға һабыштырып. Тарағын услап тотҡан хәлдә Хөмәйрә эйәреп инде.

— Һи нишана, ҡулыңдан буҡлы йүкә лә килмәй, үҙең һаман һүгенеп маташаһың! — тине иренә. — Кеше һымаҡ эшкә аштырып эш эшләгәнең бармы ни һинең? Яһаған бер әйберең өс көнгә лә сыҙамай ҡыйралып төшә. Шул өрләктө йыуаныраҡтан ҡуйырға була ине бит һиңә!

— Һи... — тип һүгенеп алып китте ғиззәт. — Фәләнсә һин! Өрләк әллә һығылмай тора тип беләһеңме? Һинең кеүек ҡатҡан бил түгел бит ул! Таяу ултыртҡанмын бит, әллә таяуҙан үтеп ары китер тип беләһеңме? Һин, ташбыҡ, минең эшемдә тикшергәнсе, үҙеңдең мейесеңдә ҡара, сүлмәктәрең иҙән аҫтына тумарлап китмәгәйе. Ашарһың шунан әпсәңдекен...

— Һи дөмпөш!

— Ә һин һеңераяҡ!

— Салыш ауыҙ!

— Баҡа күҙ!

— Ҡыҙыл танау!

Күҙ йәштәрен йылғалай ағыҙып, Хөмәйрә ҡабат аш өйөнә сығып китте. Өҫтөнлөк алған ир, еңеүсегә хас ҡиәфәт менән диванға кирелеп ятты ла, тубыҡ өҫтөнә тубыҡ ҡуйып, ауыҙына төтәткес мөштөгөн ҡапты.

Һүҙ башлауы ҡыйын ине Ғәлимгә. Ағаһының өндәшеүен көттө ул. Уның эштән сығарылыуына үҙен ғәйепле тойҙо. Ләкин Ғиззәт әйләнеп тә ҡараманы, өндәшмәне лә. Бер нөктәгә төбәлгән килеш, бороллатып тәмәкеһен тарта бирҙе. Былай ятыуының аҙағы булмаҫтай ине.

— Бөгөн  мин туңға һөргәнде үлсәп бөтөрҙөм... — Ғәлим артыҡ дауам итә алманы, ҡарлыҡты. Ғиззәт, башын ҡалҡытып:

— Шулаймы? — тине лә, әйткәнен шунда уҡ онотоп, йәнә уйҙарына сумды. Ахыры булманы, Ғәлим китергә йыйынды:

— Ярай, ҡайтырға ла ваҡыт...

Ғиззәт башын ҡалҡытты:

— Нишләп ултырмайһың? Ултыр.

— Беҙҙең туңға һөргән ерҙәр етешмәй бит әле... һинең былтырғы сводкаң буйынса, өс мең дә ике йөҙ гектар икән, ә минеңсә өс мең генә килеп сыға. Массивтарҙың майҙанын күрһәткән берәй карта-маҙар юҡмы һиндә?

— Өсөнсө йыл, эшләй башлағас, төҙөгәйнем мин ул ғәмәл дәфтәрен. Әллә ҡайҙа булған, таба алмайым.

— Хәтерҙән белмәйһеңме? Самалап ҡына булһа ла? — Ғәлим унанниндәй ҙә мәғлүмәт йолҡорға тырышты. Ағаһы һаман киреһен аңлатып баш ҡаҡты. Шулай уҡ Ғәлимдең:

— Былайғас, ни эшләйбеҙ инде? — тигән ҡыйыуһыҙ һорауына ла, иҫе китмәҫтән:

— Белмәйем, — тип кенә яуапланы.

# III

Йәшлек — йәшен уты, тиҙәр. Тимәк, ул, ваҡытында күҙ сағылтҡыс көслө нурҙар менән йәшнәп-күкрәп китә лә кинәт юҡҡа сыға. Шунан һин уны бер нисек тә кире ҡайтара алмайһың. Ҡартайған һайын, һин уны йышыраҡ хәтерләйһең, нығыраҡ һағынаһың. Сәстәрең ағара барған һайын, йәшлегеңдең заяға үтеүен тойоу көсәйә. Эшләнмәгән эштәр, әйтелмәй ҡалған һүҙҙәр һаны өҙләкһеҙ арта ғына, тора-бара ул ауыр йөккә әүерелә лә һыҙлатып өйкәй йәнеңде. Бына шул саҡта йомарт тәбиғәт бүләк иткән эске байлыҡтарыңдың күбеһен үҙ ваҡытында донъя ҡаршыһына сығарып һалмай һәләк итеүеңде тойоуҙан тыуған үкенес һинең ғүмер көҙөңдәге аҙаҡҡы шатлыҡтарыңды ла ағыулай...

Ә Ғәлим нисек аңлай был мәсьәләне? Егерме дүрт йәш уға. Йәшлегенең сәскә атҡан матур дәүерен тыуған иленән алыҫта, диңгеҙ тулҡындары шаулаған осһоҙ-ҡырыйһыҙ киңлектә Ватан сиген һаҡлап үткәрҙе. Хәрби флот тормошо үҙенең ҡаты ҡанундары менән йәшлек хистәренең сәскәгә бөрөләнеүен һүңлатты. Дүрт йыл буйына ул үҙен ил һағына ебәрелгән һәм теләһә ҡайһы минутта ҡанлы көрәшкә әҙер торорға тейешле яугир итеп кенә тойҙо. Ә әҙәм балаһына тәбиғи булған барлыҡ татлы хыялдарҙы, йөрәгенең дәртле тибешен ул хәрби хеҙмәт һуңынаса бикләп ҡалдырҙы. Инде, тыныс тормошҡа ҡайтҡас, шул электән йыйналып килгән бөтә йәшлек хыялдарын бер юлы ҡәнәғәтләндерергә теләй. Өҙөлөп-өҙөлөп һөйгөһө килә уның. Ә мөхәббәт серҙәре бик ҡатмарлы, уға асҡыс табыуы ҡыйын икән. Ауылдағы ҡыҙҙарҙың береһе лә йөрәгенә һуҡмаҡ һала алғаны юҡ әле. Сөнки Ғәлим идеаль мөхәббәт хаҡында хыяллана. Ни өсөн тормош — роман, йәки кинофильмдәрҙәге кеүек тоташы менән күтәреңке, күңелле йыр түгел икән?.. Ғәлим, мөхәббәт серҙәрен хикәйәләүсе әҙәбиәт йәки сәнғәт әҫәрҙәрен уҡып, йәки тамаша ҡылып бөткәс, оҙаҡ ҡына һушын йыя алмай тулҡынланып, йөрәге һыҡтап йөрөй. Һәр ваҡыт ул әҫәрҙәге иң китәргес гүзәл героиняға үлерҙәй ғашиҡ була һәм: “Их, ул егет урынында мин булһамсы, аңлар инем мин ул һылыуҙың мөхәббәтен, сәбәпһеҙҙән рәнйетмәç инем уны!” — тип үкенә. Тормоштан ул шундай уҡ идеаль ҡыҙҙы эҙләй, ләкин ул табылмай. Ысын тормош кинолағы кеүек ялтыр түгел шул, уның ҡараңғы мөйөштәре лә, кәкере һуҡмаҡтары ла бар, етерлек. Сөнки ҡайҙа ҡояш — шунда күләгә, ә күләгә юҡ ерҙә йә ҡояш юҡ та, йә күләгәһен төшөрөрлөк тормош юҡ. Тормош ул һис бер ваҡытта ла күләгәһеҙ булмай.

Ғәлим, уйланып, мал тояҡтары тапап туҡмаҡлаған көтөү юлынан тау арҡылы төшөп бара. Үҙе әтмәләп алған һүтеп-йыймалы сажин таяғын, мылтыҡ һымаҡ итеп, яуырын башына һалған. Егетебеҙ бошоңҡо, ауыр тойғолар борсой күңелен. Туңға һөргәндең шаҡтай кәм сығыуы хафалар өҫтәне уға. Түрәләре шикләнеп ҡарай башланы. Комиссия сығарып, һынамаҡҡа баçыуҙарҙың ҡайһыларын , яңынан үлсәттеләр. Комиссия Ғәлимдең хаҡлығын раçланы. Шау-шоу ҡупты; һөрмәгән-сәсмәгән ер өсөн ялған юл менән эш хаҡы, “янда ҡалдырылған” (экономияланған) яғыулыҡ өсөн бүләк аҡса алған кешеләр үҙҙәрен аҡларға, баштарынан себен осororға керештеләр. Бигерәк тә бригадир Дәүәй туҙынды, ошо күңелһеҙлектәрҙең бөтәһе өсөн Ғәлимде ғәйепләне. Трактористар: “Хисапсы , яңылыш үлсәй, беҙҙең эш хаҡыбыҙҙы ҡырҡа”, — тип мыжый башланылар. Дәүәй улар күҙе алдында битәрләне Ғәлимде:

— Һиңә ни етмәгән инде? Үҙ ғүмереңдә тракторға ултырып бер бураҙна һөргәнең юҡ, ә таҙа һыуҙы болғатаһың! — тип ғәйепләне. Уныһы ғына етмәгән, осраған һайын уны туҡтатып:

— Бөтәһе нисә гектар туңға һөрөлгән ер бар әле беҙҙә? — тип һораусан булып китте. Ғәлим тәүҙә, түҙемле рәүештә:

— Өс мең гектар, — тип яуаплар ине.

— Ә МТС-тағы өлкән аграном уны, өс мең дә ике йөҙ гектар, ти ине... — Шулай ти ҙә Дәүәй, шикләнеп, Ғәлимдең күҙҙәренә оҙаҡ текләп тора. "Һин алдайһың, һин , яңылыш үлсәйһең. Ике йөҙ гектар ерҙең башына еткәнһең. һине беҙ яратмайбыҙ", — ти уның күҙ ҡарашы.

— Ҡайҙа кем ни тигәне миңә ҡараңғы. Әммә-ләкин былтыр туңға һөрөлгәне ғәмәлдә өс мең гектар, — ти Ғәлим, тамағына ҡаты төйөр тығылып.

— Ни өсөн улай? — Дәүәй юрый аңламағанға һалыша, йәнә шикләнеп мызылдата күҙҙәрен.

— Сөнки күп массивтарҙың ситтәре һөрөлмәй ҡалған — трактористар хәрәмселәгән. Унан башҡа ла рыялар бар етерлек... — тип аңлата Ғәлим, нисек тә тыныс ҡалырға тырышып. Бындай диалогтар көн һайын, тип әйтерлек, ҡабатлана, был, аҡрынлап, хисапсының теңкәһенә тейә. Ул Дәүәй менән осрашыуҙан ҡаса, әйләнеп үтергә тырыша. Ниһайәт, бер көндө түҙеме бөтә: бригадирҙың урынһыҙға төпсөнөүҙәренә ҡаршы асыулы ябырыла: "Мин быға тиклем намыҫымды юйғаным юҡ. Әгәр ышанмаһағыҙ, үҙегеҙ сығып үлсәгеҙ йәки урыныма бүтән кеше табып ҡуйығыҙ, бындай шикләнеүҙәр аҫтында мин эшләй алмайым!"

Ошо ваҡиғанан һуң, Дәүәй тоҙһоҙ һораүҙарын туҡтатты, өндәшмәй, түҙемһеҙләнеп күҙҙәре ҡыҙарған бүгәйҙәй, аҫтан ҡарап йөрөнө.

Шул турала уйланып бара Ғәлим. "Кешенең намыҫы эстән ни ҡәҙәре таҙа булһа ла, әгәр ул, тирә-яғындағы ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы ғәййәр көрәшеп, үҙенең хаҡлығын иҫбатламаһа, ул әҙәм, намыҫын юймай тороп та, намыҫһыҙ булып күренеүе мөмкин икән..." тигән фекер ярала...

Ғәлим көтөү һыулауына һуғыла; унда ҡара халат кейгән һауынсылар һыйыр һауа. Тау итәгендә уйнаған таң нурҙарында алюмин фeләктәр көмөш төҫлө ағарып күренә.

— Һаумыһығыҙ! һауыныгыҙ күп булһын! — тип иҫәнләшә егет. Ҡыҙҙар тиҙ генә сәс-күҙҙәрен ипләштереп, матурайып алалар.

— Ә һинең ыҙандарың оҙон булһын. Үлсәй-үлсәй һин ары, ура-ура комбайнер арыһын! — тип көлөшәләр. һөт үлсәп торған хисапсы Нәфисә генә өндәшмәй, һылыу йөҙө мәк сәскәһeләй ҡыҙарып, оялсан рәүештә башын түбән эйә.

— Йә, иҫәнмеһең, нәфис һылыу Нәфисә! — Яҡын уҡ килеп, айырым сәләмләй уны Ғәлим.

— Арыу әле, — ти Нәфисә, аҡрын ғына. Ғәлим уның менән оҙаҡ итеп үҙенең хафалары тураһында һөйләшкеһе килә. Нәфисә аңлар, уртаҡлашыр һәм йөрәге ауыр йөктән арынып, бер аҙ бушап ҡалыр кеүек. Ни өсөндөр, егет күңеле бөтә ҡыҙҙар араһынан ошо тыйнаҡ, тотанаҡлы Нәфисәне генә айырып күрә, башҡаларға ҡарағанда ла күберәк уға әһәмиәт итә ине. Бәлки, уның менән осрашҡанда ҡыҙарынып оялғаны, оҙон керпекле күҙҙәрен түбән һәлендергәне өсөн шулайҙыр? Ул бер ваҡытта ла, бүтән ҡыҙҙар кеүек ҡылансыҡланып, уға шаян һүҙҙәр ташлағаны йәки үҙе башлап һүҙ ҡушҡаны юҡ. Ләкин егет күңеле үҙенең йәшерен төпкөлөндә ҡыҙҙың серле күҙ ҡарашын, яғымлы йылмайыуҙарын һаҡлай. "Бәлки, шулдыр минең һағынып эҙләгәнем?" тип тә ҡуя ҡай саҡта. Ләкин кино экранындағы ҡыҙҙар: "Юҡ, ул түгел. Ул — беҙҙең кеүек булырға тейеш. Ул — беҙ, беҙ!" — тип ситкә тарталар егет күңелен.

— Бәй, нишләп икегеҙ тиң түфлиҙәрегеҙҙең моронона текләп тораһығыҙ? Әллә шунда телевизор ҡуйғандармы? — тип ҡысҡыра уларға бер апай. Кинәнеп көлөүенән икеһе тиң һиҫкәнә.

— Йоҡлап йөрөмә, егет. Ҡоштоң ҡанаты бәйһеҙ — осоп китеүе мөмкин! — тип бармаҡ янай тегеһе. Ғәлим иһә уңайһыҙланып йылмая. Һауынсы шопторҙатып һөтөн үлсәгескә ауҙара ла, икеһенә хәйләле күҙ ҡыҫып, һыйырҙары араһына инеп юғала.

— Нәфисә, минең һиңә әйтәһе бер һүҙем бар, — ти Ғәлим, йөрәгенең дөпөлдәп һуғыуын тойоп.

— Китсе, ниндәй һүҙ ул? — тип ҡыҙарына Нәфисә, үҙе яҡыныраҡ килә.

— Нәфисә, мин... мин...

— Әйт инде, әйт! — тип ҡыйыуландырта һөтөн бушатырға килгән икенсе апай. Ғәлим уның һиҙенеүенән ҡойолоп төшә:

— Нәфисә... һыйырҙарҙың һөтө артамы?

Һауынсы шарҡылдап көлә. Нәфисә ситкә тартыла, күҙҙәрен йәш томалай. Ҡапыл һыуыҡҡа бәрелгәндәй бойоғоп, кенәгәһенең биттәрен аҡтарына.

— Арта... әгәр ашатһаң... — ти ҡыҙый, илай яҙып, һәм егеткә арҡаһы менән борола. Ғәлим, ни әйтергә лә белмәй, телен йотҡандай ҡала; сажин таяғын яурын башына һала ла, юлды-ниҙе абайламай, бүтәгә "һаҡал"дарына әлләгә-һөрләгә, тракторҙары гөрләгән тарафҡа тура тарта.

Егет булһа, мут булһын,
Ике күҙе ут булһын.
Ике күҙе ут булмаһа,
Бар булғансы, юҡ булһын! —

тип шаян йыр оҙата арттан.

"Юҡ, былай булмай! Беребеҙ ояһа, икенсебеҙ ҡыйыу булырға тейеш!" — тип өмөтһөҙләнеп уйлай ул. Йөрәге, бензинға манып яндырылған факелдай, әсетеп-әсетеп әрней. Эйе, киноэкрандарҙағы ут сәсрәтеп һөйәкәй ҡыйыу ҡыҙҙар юҡ бында...

# IV

Таныш булмаған был ауыл Ғәлимәне көр әтәс һөрәндәре менән ҡаршыланы. Иң остағы береһенең ауазы әсе-нескәлеге һәм һуҙыңҡылығы яғынан дөйөм хорҙан айырылып, көйгә сағыу Яңғыраш биреп тора. Был матур тауышлының йырын күтәреп алғас ҡына, бүтән әтәстәр ҙә дәртләнеп ҡушылыуына иғтибар итте ҡыҙ. "Солист!" тип уйланы ул, йылмайып.

Әрәмәлекте уратып үткән типһәндә, юл ситендә генә, ултырғыс кеүек шыма итеп бысылған төп һерәйеп тора. Ғәлимә, сумаҙанын ергә ҡуйып, шул бүкәнгә йәпләнде. Моғайын, әллә нисә тиҫтә йылдар буйына үҙенең сәтләүеккә оҡшаш тос орлоҡтарын әрәмәлектең бөтә мөйөштәренә таратып ултырған, йәйге эҫеләрҙә юлаусыларҙы еләҫ күләгәһендә ҡунаҡ иткән, ә һыуыҡ ҡыштарҙа ауылды көслө бурандарҙан ышыҡлаған мыҡты, бейек, мөһәбәт имән булған был. Ғәлимә уның ғүмере быйыл ғына киҫелгәнен аңланы, сөнки бысындыҡ түтәһе тамырҙарҙан тирткән — ябалдаш өсөн тәғәйенләнгән татлы һутҡа сыланып илай ине. Юлсы түҙемһеҙ өмөт менән күҙ йөрөттө юҡҡа сыҡҡан имәндең тирәһенә. Тәбиғәт ҡанундары буйынса, мәрхүм ҡарт имән арымай-талмай үҙ тоҡомон таратҡанлығын — күҙ күреме ерҙә ҡуйы йәш имән туйралары үҫеп ултырыуын күрҙе ул. Әммә элекке баһадирҙың ошо сабый балалары ла күбеһе әжәл кисергән — балта туйынан тороп ҡалған, һерәйеүҙәре ҡәбер ҡаҙыҡтарын хәтерләткән үле төптәр

бихисап. Кәйефе ҡырылып, сумаҙанына тотондо, әрәмәлек яғына әйләнеп ҡарамай, юлын дауамланы.

Әтәстәр инде йырҙарын туҡтаттылар, көнсығыштағы оҙон ҡырлалар ситендә аҡһылланып ойоған офоҡ һыҙығына шыйыҡ ҡына алһыу буяу таралды. Ул торғаны һайын ҡуйырҙы, алһыу төҫ ҡыҙылға әүерелә барҙы. Өйҙәрҙең һалам түбәләренән саҡ ҡына ослайып сыҡҡан мөрйәләр көллөһө бер юлы, тип әйтерлек, кинәт кенә оҙонайҙылар, үргә һуҙылдылар. Улар туҡтауһыҙ һаман-һаман күккә үрләнеләр ҙә, ниһайәт, ауыл өҫтөндә аҙашып йөрөгән бер аҡ болот киҫәгенә етеп тоташтылар. Һәм ул болот, баяғы өй ҡыйыҡтарына шул төтөн арҡандары менән бәйләп ҡуйылған ҡалын яҫтыҡҡа оҡшап, бер урында хәрәкәтһеҙ ойоно.

Ғәлимә урамға ингәндә, ил аяғы һил — бер кемдең дә йөрөгәне күренмәй. Сәйерһенеберәк, ике янда ла әллә ниндәй яғымлы безелдәүме, әллә гөбөрҙәүме ишеттт елсы. Иң ҡыҙығы — был хикмәтле ауаздың, ул күпме атлаһа ла, һаман ҡалмай эйәреп, хатта алғараҡ та уҙып, оҙатып барыуында ине. Ахырҙа ул, ҡала ҡыҙы, сәмен тыя алманы, урам уртаһында килеш, туҡталып ҡолаҡ һалды. "һәүкәш, һәүкәш!" — тип иркәләп ашыҡтырған ҡатын-ҡыҙ тауышы салынды һәм шул үҙен "һәүкәш"ләттерткән оҙон мөгөҙлө ҡашҡа апаҡай, маңлайын ялтыратып, ҡойма аша яҫы ҡарама япраҡтарына үрелеп маташҡан йөнтәҫ кәүҙәле бура һыйыр булып сыҡты. Көтөүсенең ауыл осонда сыбыртҡы шартлатыуынан тертләп, бер-нисә япраҡты ашығыс ялмап алды ла, кесе ҡапҡаға лырҡыш яндары менән ҡыҫылып, урамға йәһәтләне.

— Һәш, Ҡашҡаһыйыр, һәш! һөттө күп алып ҡайт! — тип арбаулап, малҡайын йөнтәҫ арҡаһынан һөйҙө бисәкәй. Шунда ғына урамдың ике яғындағы серле гөбөрҙәүҙең нимә икәненә төшөндө ҡыҙ һәм шул ябай нәмәне лә башына килтерә алмауына аптырап, көлөп ебәрҙе. Был көлөү, таңғы саф һауа арҡылы, саф көмөш кеүек сыңлап таралды алыҫҡа. Бисә, ғәжәпләнеп, уға ҡарап тора башланы; һыйыр, боролоп, беләктәй оҙон теле менән ҡабырғаһын яланы ла, ялҡау ғына аҙымлап, һырт яҡҡа ыңғайланы. Мал ҡыуып бүтән ҡапҡаларҙан да кешеләр сыҡҡаны күренде, улары ла, ҡыҙыҡһынып, Ғәлимәне күҙләнеләр. Ҡыҙ иһә уңайһыҙланып яулығын төҙәтте, илдең күҙ ҡараштары киҫешкән был хәтәр нөктәнән тиҙерәк тайырға ашыҡты.

Урам оҙон ине, уның Ғәлимә алдында һуҙылған өлөшө ҡыҫҡара барған һайын, тегендә-бында һертәндәүселәр йышайҙы. Офоҡ өҫтөндәге ҡыҙыллыҡтың шәүләһе ағастар, өйҙәр, кешеләр өҫтөнә төшөп, бөтәһен утлы тимгелдәргә буяны. Өй алдарында ҡолас киргән ҡарт өйәңкеләр уянып, шат сыйырсыҡтар телендә йырлап ебәрҙеләр, ауыл һыртында, унарлаған бәләкәс алтын ҡыңғырауҙарҙы бер юлы ҡаҡҡан кеүек, өҙлөкһөҙ һәм оҙон һандуғас тереллдәүе шаңғырҙы; әрәмәлек өҫтөнә, кинәт кенә меңәрләгән күмер киҫәктәрен сирғытып ебәргәндәй, сәүкә тубы күтәрелде лә доньялағы булған бөтә тауышты баҫырға тырышҡандай, ҡолаҡты ярып саңҡылдарға тотондо.

Ғәлимә, урамдың өстән бер өлөшөн үткәс кенә, үҙенә кәрәкле вывесканы тапты: "Дуҫлыҡ" колхозы идараһы". Аҡ кирбес бина алдында энәнән-ептән сыҡҡан күкшелт брезент көймәле "газик" тора, суҡайыраҡ танаулы урыҫ егете — шофер, капотты ҡайырған да, һыҙғанған еңле беләктәрен төпкә тығып соҡсона. Ғәлимә уның менән иҫәнләште лә, тиҙерәген инерция буйынса: "Колхоз идараһы ошо буламы?" — тип белеште. Егеттең күкшелт күҙҙәре хәйләле йылтыранылар һәм ул, һис көтмәгәндә саф башҡортса өндәшеп, ишек башына ымлап күрһәтте:

— Нимә яҙылған һуң унда, матурҡай? Урыҫса яҙылғас ни, әллә үҙем тәржемәләп бирәйемме?

Ғәлимә яурын башын һикертте, егет киҫәтеүе әһәмиәткә эйә түгеллеген белдереп, ситкә боролдо. Урыҫ булһа ла, белеп тумбыта: Каруанһарайлы Ырымбур өлкәһенең

башҡорт ауылдарында башҡортса вывеска ғына түгел, хатта гәзит-журналдар ҙа күрмәҫһең. Һирәк-һаяҡ һаҡланып ҡалып, башҡортса уҡытҡан мәктәптәрҙә лә лозунгылар, стендтар, стена гәзиттәре урыҫ телендә яҙыла... Бейек күтәрмәле туфли үксәләре менән шаҡылдата баҫып, таш баҫҡыстан күтәрелде.

Тәүге бүлмә — оҙон ғына солан булып сыҡты; эскеләренең ишектәре һәм мейес ауыҙҙары ошо соланға сыға. Стеналарҙың һаңғырау өлөшөнә агитплакаттар, диограммалар һәм стена гәзите эленгән, һәр квадрат сантиметр майҙанды коммунистик сәйәсәт хаҡына файҙалы ҡулланырға тырышып эш итеү күренә. Быларҙың бөтәһен Ғәлимә кергән тышҡы ишектең ике яғынан уйылған ҙур тәҙрәләр яҡтырта, ә түшәмдән оҙон шнурҙа электр лампаһы төшкән һалынып. Ошо мәлдә соланды ишектәрҙең береһе артындағы асыулы ир-ат тауышы ярһыта: кемдер, ҡыҙып-ҡыҙып, кемделер ҡаты шелтәләй; әйтелгән һүҙҙәр йоҡа ишек үтә айырым-асыҡ ишетелә — стена гәзитенә бәйле “аполитичность”, “хвостицизм” тураһында һүҙ бара. “Кем икән был бөтә совет халҡы киң аҙымдар менән яҡты коммунизм иртәһенә дөргән осорҙа коммунистик политиканан ситкә янтайыусы, ябай халыҡтың алдынан башлап бармайынса, ҡойроғонда һөйрәлеүсе?” — тип, баяғы яңғырауыҡ терминдарҙы уйлап көләмһөрәне ҡыҙ. Тамаҡ ҡырған тауыш бүлде уйҙарын. Мөнтәп ҡырҡылған сал һаҡал-мыйыҡлы бер бабай мыштым кергән дә стена гәзитен ҡарай; ҡарттың һырған көпәйкә тышынан биле яҫы брезент бау (комбайн ҡайышы) менән быуылған, мехы ҡырылып йылтыраған кәпәсенең ҡолаҡтары үргә ҡайтарылып ҡуйылһа ла, бәйләнмәгәнлектән, кәзә ҡолаҡтарылай яртылаш һалынып төшкәндәр. Бабай, башын болғап-болғап, үҙ алдына “һем...һем...” тип өн сығарғылай, ҡайһы ваҡыт телен таңғайына һуғып цыҡылдатып ала, ә теге бүлмәләге әрләүсенең тауышы киҫкенерәк Яңғырай башлаһа, бәйҙә торған ярһыу аттай, сыҙаша алмай, бер урында тапанырға тотона. Дәғүә ҡаҙанына барып төшөүҙән тартынып, Ғәлимә туҡталып ҡалды. Тик былай тик тороу — ыҙғышты тыңлау һымаҡ ине; бабай эргәһенә яҡынлап, стена гәзитенә күҙ йүгертте. Ғәжәпләнеүенә ҡаршы, гәзиттең башын (исемен) таба алманы ул, баш урынына күҙҙең яуын алып ҡып-ҡыҙыл булып ялтырап торған борос һүрәте төшөрөлгәйне.

— Ишетәһеңме, ҡыҙым, “Борос” нисек әсеттерә түрәбеҙҙең сей урынын? — тип, йылмайып һүҙ ҡушты бабай һәм ғауғалы ишек яғына эйәге менән ымлап, күҙ ҡыҫты. Ғәлимә төшөнмәне. Ҡарт иһә: «ғүмерле ғүмәр бабай буламын!” — тип ҡуш ҡул биреп күреште лә:

— Бынауы “Борос” аҫтындағы рәсем хаҡында әйтәм, — тип, гәзиткә төртөп күрһәтте. — Ныу ибаҙҙарына бирә лә һуң был Ғәлим! Ҡара әле анауы кәпәйҡорһаҡ әзмәүерҙе. Үҙе иткән дә ҡуйған бит рәйесебеҙҙе! Нәсәлниктәр, шуның гурыһына сыҙамай, ридакторҙы “мунса индереп” яталар ҙаһа, рәйестең бүлмәһендә...

Әһә, Ғәлим икән “аполитичность”, “хвостицизм” менән сирләүсенең исеме!

Ғәлимә гәзиттәге бабай әйткән “әзмәүер”гә күҙ һалды. Урмандай бейек әрем, киндер һәм башҡа сүп үләндәре араһында торбаһы ғына күренеп, ашлыҡ сәскестәре тағылған трактор эш ҡыра. Баҫыу ситендә китеп барған “газик”тан портфель тотҡан “кәпәйҡорһаҡ” ир һонола биреп: “Ниңә сәсеү агрегаты күренмәй?” — тип һорай шайтантаяҡ башындағы ҡарғанан. Түбәндә бәйет бирелгән:

Ҡарға әйтә: “Ҡар-ҡар,
Бында эштәр бар-бар.
Сөнки “Дуҫлыҡ” баҫыуында
Бер төптән тарта дуҫтар!”

Дуҫтар бойҙайҙы сәсәләр
Үлән араларына.
Культиватор ҙа кәрәкмәй
Әҙәм балаларына.

Баҫыуҙары арыҡтыр,
Ыҙан буйы ярыҡтыр.
Этесәгенә сырмалып,
Туҡтап тора трактор.

Етәкселәр, етәкселәр,
Һеҙ — бөйөк агрономдар!
Исемдәрегеҙ сүп үлән
Үҫтереп данланырҙар!

Ғүмәр бабай һүрәттең был мөләйем ҡыҙға ла көслө тәьҫирен күреп ҡәнәғәтләнде.

— Оҡшанымы? Һе-һе-һе! Ғәлим — бик ҡыйыу егет ул. Матрос! Ҡурҡып-нитеп тормай, туп-тура яра ла һала. Тик саҡ ҡына ҡыҙыуыраҡ — шуныһы миктәтеп ҡуймағайы... — тине ғүмәр бабай. Ғәлимә, агрегатлы тракторҙы күмеп үҫкән сүп үләндәренән күҙҙәрен алмай, ғәмләнеп тора ине. Аграном булып килде лә ул, килеүен, әммә майлы бутҡа бешереп көтмәгәндәр икән шул. Үлән өҫтөнә сәстертеүселәрҙе еңергә кәрәк. Ә был эштә беренсе таянысым — ошо "аполитичный" матрос буласаҡ, әлбиттә, тип уйланы ла Ғәлимә, ғәжәп! — үҙен бер ҡасан да күрмәгән егеткә ғашиҡ та була яҙҙы...

— Кем ул Ғәлим?

— Яҡшы егет. Беҙҙең трактор бригадаһының хисапсыһы.

— Ә-ә-ә... — тине, аңлап, Ғәлимә һәм килеп етер-етмәҫе егет тураһында төпсөнөп тороуынан уңайһыҙланды. Һүҙҙе бороу өсөн тағы һораны:

— Ғүмәр бабай, һеҙҙә ашлыҡты шулай үлән араһына сәсәләрме ни?

— Ерекмән һәр ерҙә лә бер инде ул, ҡыҙым. Күпереп бешкән икмәк ашағыһы килһә, күпереп ятҡан ҡараға сәсергә тырыша. Һеҙ ни, ҡала кешеләре, моғайын, икмәк сүрәкләнеп магазиндың үҙендә өлгөрә, тип беләһегеҙҙер әле. Икмәк үҫтереү — уны ултырып ашау кеүек ябай эш түгел ул, ҡыҙым. Һөнәрең буйынса кемһең үҙең?

— Иген үҫтерергә өйрәнеүсе, — тип йылмайҙы ҡыҙ.

— Бәрәкалла, бәрәкалла!

— Ә бынауы портфелле кешенең исеме кем?

— Кем, тип ни... әйтәм бит, үҙебеҙҙең самай ҙур түрә инде. Йәғни ҙә кем, колхозыбыҙҙың рәйесе Йәрмит уҙаман.

Ғәлимә, эсенән генә көләмһөрәп, тәҙрә эргәһенә күсте, кеҫә көҙгөһөнә йәһәт ҡаранып, үҙен ипкә килтерҙе. Боролоп ауыҙ асырға ла өлгөрмәне, дәғүәле ишек шартлап асылды ла унан, ысынлап та, мунса эләүкәһенән төшкәндәй ҡыҙарып-бүртенгән урта буйлы, яҫы балаҡ матрос салбарлы бер егет атылып сыҡты. Тонған күҙҙәрен төбәп, тирә-яғына ҡаранды, эҙләгәнен таба алмай, ят ҡыҙ Ғәлимәгә төптө иғтибар ҙа итмәй, ахыры, дөбөр-шатор тышҡа олаҡты. Ғәлимәнең кәйефе ҡырылды: "Шул тиклем дә ямаҡмынмы — күҙенә лә салынманым..." Ихатала Ғүмәр бабайҙың мөңгөрҙәп егеттән һорашҡаны ишетелде.

— Ну шуны, сәнселеп китһен! Талпан кеүек ҡаҙалды ла ҡалды! — тип асыуланды тегеһе; Ғәлимә егеттең нисек ярһыулы ҡул һелтәүен, шәп атлап китеп барыуын күҙ алдына килтерҙе. Йөрәгенең ҡош кеүек осоноп-талпыныуын тыя алмайынса, ишекте

шаҡылдатты. Рөхсәт тауышын ишеткәс тә, йәһәт үтеп инде. Бүлмә эсе балта аҫырлыҡ төтөн. Йомшаҡ ҡыҙыл буҫтау ябылған тос имән өҫтәл артында, берҙән-бер ҙур тәҙрәне арҡаһы менән ҡаплап, ишек яғына ҡарап ултырған ыҡсым кәүҙәле, ҡалын эйәкле, 30-35 йәштәрҙәге ир кеше тороп ҡул бирҙе:

— Әһә, агроном! Шап-шаҡтай килеп еттегеҙме? Районан хәбәр иттеләр, поезда йүнәлде, тип. Станцияға төшкәс, ниңә шылтыратманығыҙ, машина ебәрер инек. — Колхоз рәйесе Йәрмит ине был.

— Әлләсе... юлайҡан йөк машинаһы тура килгәс... Күпер төбөндә төшөрөп ҡалдырҙы.

— Һем... Аяҡтарығыҙ ҙа беҙ үксәле генә икән — батып этләнмәнегеҙме? Кирза итектәр кейергә тура киләсәк...

— Уныһына башығыҙ ауыртмаһын.

Рәйестең һул яғында, өҫтәл башына терһәге менән таянып, тәбәнәк ҡаҡса кәүҙәле, күҙлекле берәү ултыра.

— Ултырығыҙ, ултырығыҙ. Сумаҙанығыҙҙы ҡуйығыҙ, ниңә баҫып тораһығыҙ? — тине ул.

— Рәхмәт, — тине Ғәлимә ҡоро итеп һәм, сумаҙанын ҡуйһа ла, аяғөҫтө ҡала бирҙе. Күҙлекле йәнә уға ҡараны:

— Бик шәп булды — беҙгә аграном һулар һауа, эсер һыу һымаҡ кәрәк! Парторг Рәүеф Бикмырҙин булам мин. — Күҙ ҡарашы аҡыллы, ышаныслы ине. Был иһә Ғәлимәнең күңелендә уға ҡарата яҡынлыҡ хисе уятты.

Йәшел китель кейгән лырҡыш кәүҙәле өсөнсө ир, күн көплө иҫке диванға ҡырын төшөбөрәк төпләнгән дә, ҡалын ирендәренә ҡыҫтырыулы йыуан тәмәкеһен торомбаш кеүек төтәтеп, түшәм аҫтындағы күк болотто ҡуйыртыу вазифаһын үтәй, буғай. Ғәлимә унын, машина майлы өҫ-башына ҡарап, трактор бригадаһы бригадиры икәнлеген шәйләне.

— Дәүәй ағай, күпме әйтергә була, бынауы һылыуындан оял, исмаһам! — тине уға парторг. — Боҙоҡ форсункалы тракторҙарың кеүек төтәтәһең!

— Виноват! — Йәшел кителле торомбашын һүндереп иҙәнгә ташланы ла, табаны менән иҙгәндән һуң, , яңыһын алып ҡапты. Күҙҙәрен ҡыҫып, Ғәлимәнең аяҡтарын һәрмәне:

— Һе! Беҙгә йылтыр түфлиҙәр бик кәрәкмәй. Портфель тотоп йөрөүселәр ҙә үҙебеҙҙә етерлек, — тине ул, һүҙҙәренең ҡиммәтен белгән ғырылдауыҡлы ҡәнәғәт тауыш менән. Ҡыҙҙың сикәләре алһыуланды, эстән дөргән ялҡынды көскә тыйып, тыныс булырға тырышып әйтте:

— Мин, ағай, йылтыр түфлиҙәр кейһәм дә, портфель мәсьәләһендә белгес түгелмен. Ләкин һеҙгә бер ниндәй ҙә портфелдең иш килмәҫе күренеп тора.

— Беҙ — ябай кешеләр, ярманы тура ярабыҙ...

Ғәлимә уға тағы ла әйтергә йыйынғайны ла, рәйес үҙе ара төштө:

— Һеҙ улай минең алтын ҡуллы бригадирыма үпкәләмәгеҙ. Шундай ҡыҙыҡ һүҙле кеше ул... — Ғәлимә биргән ҡағыҙға күҙ йүгертеп, һөйләнде. — Тимәк, ең һыҙғанып эшләргә, тип килдегеҙ? Ҡайҙа уҡынығыҙ?

— Ырымбур ауыл хужалығы институтында.

— Һем. Ярай, ярай. Буйҙаҡһығыҙҙыр бит? — Ҡыҙ аптырабыраҡ ҡалғас, аңлатты. — Яңғыҙ башһығыҙмы, йәғни?

— Ә, эйе. Башым да күҙем, дипломым да үҙем, — тине йылмайып.

— Ярай. Сәлимә апай хәҙер үҙегеҙҙе фатирға урынлаштырыр. Бөгөнгә ял итегеҙ, тирә-яғығыҙҙы байҡаштырып, үҙләшегеҙ. Ә иртән иртүк — как штык баҫыуға! Сәсеү!

Йоҡлап ятыр саҡ түгел! Сәлимә апай, бына һеҙгә бер иптәш, арыуыраҡ төйәк табышып бирегеҙ! — тип бойорҙо идара йыйыштырыусыһына. Ғәлимә шул апайға эйәреп сығып китте. Етәкселәр, аулаҡ ҡалғас, , яңы килгән белгес тураһындағы хистәрен уртаҡлаштылар.

— Йөҙө картиналай һылыу булһа ла, өлгөрөүе үтеп барған алма был. Кисә үк кейәүгә бирәһе булған үҙен... — тине Дәүәй. Әммә рәйес был йүнәлештә иғтибарға алманы:

— Бөгөн генә вуздан сыҡҡан тәжрибәһеҙ туташты ошондай ответственный колхозға ебәрәләр. Уның йөҙөнә ҡарап ултырырғамы ни беҙгә?

— Шыйыҡ күренә. һис науа сыҡмаç унан! — тип, башын сайҡап ҡушылды бригадир. Рәүеф Бикмырҙин, күҙлек быялаларын һөртөп, тиҙ-тиҙ генә уларҙың икеһенең дә күҙҙәренә ҡарап алды. Тыныс ҡына әйтте:

— Ниңә, берәү ҙә әсәнән үк бөтәһен белеп тыумай бит. Эшләй килә тәжрибәләнер, ҡуйырыр.

Тегеләр өндәшмәне.

# V

Тракторист Насрый үҙенең шикле ҡылыҡтары менән тамам ҡаҡшатты Ғәлимдең сабырлығын. , яңы хисапсыға дуçлыҡ һәм бирелгәнлек билдәләре күрһәтергә тырышып, шундай ҙа ялағайлана ки, хатта, ҡарттар әйтмешләй, Ғәлим кикергән генә һайын "ярхамикалла!" тип торорҙай. "Фәлән һине шулай тип әйтте, фәлән былай тип әйтте" тип, оялмай, үҙе менән бер үк ыҙанда һөргән иптәштәрен ошаҡлай, һүҙенең аҙағында:

— Һин, Ғәлим, мине үҙең ҡара инде, әй! — тип өçтәкләй. Күбеһенсә, эсеп, ҡыҙмаса хәлдә йөрөй, быңдай хәлендә күҙҙәре майланып йылтырай, үтенестәре талап һымаҡ яңғырай башлай. Ғәлим иһә өндәшмәй генә тыңлай, аҙағында, һүҙҙе оҙайтмаç өсөн:

— Шулайҙыр шул, шулайҙыр... — тип кенә өҙә ине. "Майға сумып сыҡҡан йылан" сағыштырыуы килде башына.

Бер көн шул Насрый арҡаһында тауыш ҡупты. Иртә менән, төнгө алмаштың эшен үлсәп йөрөгәндә, кисә Насрый һалған бураҙнаның бер метрға ла ырамағанын шәйләне Ғәлим. Нәфрәтләнеп килде ул ыçтанға. Насрыйға алмашсы булып практикала йөрөгән йәш курсант Бакир тракторға май һала ине. Ғәлим Насрыйҙың ҡайҙалығын һораны.

— Белмәйем шул, ағай. Тракторҙы ҡарашырға ла килмәне.

Ауылға ҡайтҡас ҡына осратты уны. Сәстәрен туҙғытып, магазин тупһаһында тоҙло балыҡ ҡойроғо кимереп ултыра.

— О Ғәлим дуç, һинме был? Әйҙә, индек, Иван Иванычтан икешәр йөҙ грамды ҡойҙортоп, яға аçтына сәлдереп сығайыҡ! — тип еңенән һөйрәне уны.

— Ниңә эшкә сыҡманың? — тине Ғәлим, асыуланып.

— Ҡуйсы әле, әй, бушҡа ваҡланма! Кисә эшләгәндең яртыһын бөгөнгә бүл дә яҙ. Етмәгәнен еткереп ҡуй. Иван Иванычҡа инәйек, тим бит!

— Юҡ инде, әшнә, мин һинең прогулыңды баçырып ҡалмам. Ҡулың менән эшләгәнде иңең менән күтәрә бел! — Ҡырт боролоп, идараға йүнәлде. Насрый, өндәшмәй, тупһала ултырып ҡалды. Ғәлим тыҡрыҡҡа боролоп, магазин ишеге ситәнгә ҡапланғас та, артынан әшәке һүгенеү ишетелде.

Дәүәйҙе ул кис булғас ҡына осратты. Бригадирҙың ҡобараһы осҡан, Ғәлимгә һөҙөп ҡарай, сәләмен дә теләкһеҙ, танау аҫтынан мыңғырҙап ҡабул итте. Өндәшмәй текләп тора-тора, Ғәлим китергә ҡуҙғалғас ҡына, ауыҙынан һүҙ сыҡты:

— Кисә Насрый күпме һөрҙө?

— Ете гектар.

— Ә норма буйынса күпме тейеш?

— Биш һикһән.

Дәүәй, өндәшмәй, хисапсыһының күҙҙәренә текләп тора башланы. Был хәл Ғәлимде сығырынан сығарҙы.

— Шулай булғас, ни өсөн һин бөгөн Насрыйға прогул яҙҙың? — тине Дәүәй.

— Прогул яһағаны өсөн.

— Ә ниңә шул кисәге ете гектарҙың яртыһын бөгөнгөгә бүлеп яҙманың?

— Сөнки улай итеп прогулсыларҙы баҫырып ҡалдырырға намыҫым ҡушмай.

— Ә бригаданы позорить итергә ҡушамы? — Дөрләп тоҡанды Дәүәй. — Ниңә өй эсенән сүп сығараһың? Иҫерек ғиззәт тә шәберәк булған икән һинән! Трактористар булһын, һабансылар булһын — өҫтөңдән жалыу бирәләр; сөнки ерҙәрҙе үлсәмәйһең, заправкаға йөрөмәйһең. Кешеләр менән ҡырыҫ һөйләшәһең. Бригадирҙы тыңламайһың. Ғиззәт заманында яғыулыҡҡа экономия булһа, бөгөн — сплошной перерасход. Былайһа, эшеңдән бушатырға тура килер һине!

— Ну что же, бушатығыҙ. Ялынып тормайым. Ләкин һеҙҙән үҙемә нахаҡ яла яҡтыртмам — төбө-тамырығыҙ менән фашлармын. Белеп ҡуйығыҙ шуны! Әгәр мин ерҙәрҙе үлсәмәһәм, ике йөҙ гектарығыҙ етмәй сыҡмаҫ ине.

— Һин унын менән козырять итмә. Билгеһеҙ әле кемдеке етмәгәне!

Шул ыҙғыштан һуң Дәүәй, уңайы тура килгән һайын, идараға барып, Ғәлимде ошаҡлап йөрөр булды. Уҫал ғәйбәт машинаһы хәрәкәткә килеп, аҫтыртын һәм ныҡышмалы рәүештә, Ғәлим өҫтөнә бысраҡ өйөпмө-өйә. Ошо уҡ машина уны, идараға саҡыртып, колхоз рәйесенән һүктертте, парторгты уға ҡырын күҙ менән ҡарарға мәжбүр итте. Ошаҡсылар ҡәнәғәтһеҙлектәрен хисапсының күҙе алдында әйтмәйҙәр, унан асыҡтан-асыҡ бер нәмә лә талап итмәйҙәр, фәҡәт Ғәйбәт ыраталар. Эш, әлбиттә, , яңылышһыҙ ҙа булмай. Өлгөрә алмау сәбәпле, Ғәлим ҡайһы саҡта кемдең дә булһа эш ыҙанын һуңлабыраҡ үлсәй һәм быны, йәшермәй, трактористың үҙенә үк белдерә; һуңлабыраҡ үлсәнһә лә, хеҙмәтенең юғалмағанлығын һәр кем белеп барһын, ти ул. Ләкин ошо бер ҡатлылығы үҙенә килтереп һуға, "ерҙәр үлсәнмәй" тигән ғәйбәтте көсәйтеберәк ебәрә...

Ғәлимде быйыл ғына партия ағзалығына кандидат итеп алғайнылар; шуға ла был ығы-зығыларҙы йөрәге менән кисерә. Тештәрен ҡыҫып, иртәнән алып кискәсә бушанмай эшенән. Йә йәйәүләп йүгерә, йә велосипедҡа атланып дөнә, йә һыбай юртаҡлай, ләкин эшләгәне күҙгә күренмәй. Йыш ҡына ул көрәк-һәнәк тотоп ябай эштә йөрөгән көндәрен һағына. Ул саҡта һиңә билдәле бер йөкләмә бирелә торғайны; тырышып шуны үтәйһең дә тыныс күңел менән рәхәтләнеп ял итәһең. Һинең эшеңде бүтәндәр эшенә бәйләп баһаламайҙар; маҡталыуыңды йәки хурланыуыңды, мускулдарыңдағы физик көс-ҡеүәтте егеп, үҙең хәл ҡылаһың. һәм бер кем дә бәйләнә алмай һиңә, намыҫың теүәл булһа; етәкселәр һинең турала кемдеңдер тамаҡ ярыуы буйынса түгел, ә хеҙмәт тәбиғеңә ҡарап һөҙөмтә сығаралар... Ҡайһы ваҡыт: "Мин әллә, ысынлап та, булдыҡһыҙмы икән?" тигән ауыр шөбһә ята егет күңеленә. Нисек тә был хәйерһеҙ эштән тиҙерәк ысҡынып, ошо уҡ вазифаны бүтән кеше нисек башҡарғанын, дорфа түрәләргә ҡайһылай ярағанын ситтән генә ҡарап йөрөү теләге уяна ине...

Бер көн трактористарҙың, өйкөмләнеп, ҡыр вагоны эргәһендә мыжғыуын күрҙе. Бөгөн иртән Ғәлим килтереп элгән “Боевой листок”ты (бәләкәй стена гәзитен) көлөшә-көлөшә уҡыйҙар. Эргәләренә килде.

— Ныу, Ғәлим дуҫ! Беҙҙең Насрый туғанды ҡайһылай итеп биҙәп ташлағанһың, әй! Ырымбурға күргәҙмәгә оҙатырлыҡ! Хәҙер бөтә ҡыҙҙар ғашиҡ булалар инде уға! — тип, егеттең бөйөрөнә төрттө ҡартайыуҙы белмәгән, шаянлығын ташламаған һыу ташыусы ғүмәр бабай.

— А как же. Насрый ағай — бригаданың йондоҙо! — тип ҡыҫтырҙы Насрыйҙың алмашсыһы тәбәнәк буйлы Бакир, егеттәрҙең ҡултыҡ аҫтынан оҙон муйынын һуҙып. Шул һүҙҙәре менән йәмәғәт алдында шөйлә уңыш ҡаҙанғанын тойоп, ҡыйыулана төштө. — Беләһегеҙ килһә, йондоҙҙоң нурлы “эш”тәрен бында яҙып бөтөрмәгәндәр әле. Киләһе һанға мин үҙем мәҡәлә бирәсәкмен! Мин...

— Шым, болван! — Вагон аҫтында хырылдап йоҡлап ятҡан еренән һуҡыр себендәй дөрөп сыҡҡан Насрый алмашсыһын, бесәй балаһылай елкәһенән бөрөп тотоп, үргә күтәрҙе. — Тәүҙә бынауы йоҙроҡто еҫкәп ҡара, көсөк, шунан мәҡәлә яҙырһың!

Бакир шулай ҙа әҙмәүер ҡулынан ысҡынып, ситтәрәк оҙон һаплы сүмес менән ҡаҙан һапырып торған ашнаҡсы Зөбәйҙә апай ҡанаты аҫтына тайҙы, артынан, ажғырып, Насрый ташланды. Әммә Зөбәйҙә апай, йыуан беләктәрен ике яҡҡа йәйеп, баһадир кәүҙәһе артына Бакирҙы ышыҡланы:

— Кит, шеш танау, күҙемә күренмә! — тине күҙҙәре ларған Насрыйға. — Юҡһа бынауы сүместәге бутҡа менән һылармын танауыңды. Һи эскесе мәхлүҡ!

— Эсһә, һинекен эсмәгән — үҙемдекен! — тип ажарланып ҡараһа ла, Насрый артҡа сигенергә мәжбүр булғас, Бакир ҙа батырланды:

— Тағы боҙоҡбашланып килгәнһең! Бөгөндән башлап мин һиңә алмашсы булмайым! — Бакир вагонға инергә шәйләгәйне, Насрый, аяғы менән юлын быуып, тракторға ҡыуаланы үсмерҙе:

— Ярай-ярай, күп һөйләнмә. Бар, һабандарыңды майла. ЮҒиһә, үтә күп белеп китәһең. Йоморткa тауыҡҡа өйрәтергә иртәрәк әле! — Шулай йәнен тындырғас, тамашасылар араһынан йырып инеп, стена гәзитен шатырҙатып йыртты. — Художник!.. — Ирендәрен йәмшәйтеп һүгенә-һүгенә, гәзит йыртығын Ғәлимдең битенә бәрҙе лә Бакир артынан туйтаңданы.

— Һи свинйә, әгәр күҙеңде тондороп күбенеп алғанһың икән — свинйә көйөңсә хорхолдап ята бир инең. Ул ҡағыҙҙа ни үсең бар? — тип әрләп ҡалды Зөбәйҙә апай. Шул арала Насрый тоҡандырған пускачтың — трактор дизелен тоҡандыртыусы кесе моторҙың —зәһәр дырылдауы баҫты шау-шоуҙы.

— Бөгөн дә Насрыйҙың градусы юғары. Юғары рекорд бирергә китте, — тине аранан берәү, ҡара төтөн борҡотоп барған трактор артынан күҙәтеп.

— А как же. Күҙ буярға кәрәк тә инде. Ул, моғайын, бөгөн тағы ике норма бирер әле, шунан һуң ике көн эшкә сыҡмай типтерер.

— Гектар һаны бармы — бар, ә сифатында эшт еҡ.

— Беҙҙең түрәләргә бары гектар күберәк булһын...

— Барыбыҙға ла намыҫ кәрәк шул бында! — тине Ғәлим.

— Көллө көтөүҙе бер сыҫҡаҡ һыйыр буяған, тигән һүҙ ошолор инде... — тип ҡушылды ғүмәр бабай. — Бындайҙарҙың биргән эреҡорто[4] кире ҡорт булып ҡайта колхозға. Ярып һөрәһегеҙ, балалар, ярып һөрәһегеҙ... Борон беҙ ат һабаны менән дә иген

---

[4] Эре□орт — “рекорд” һү□ен шулай әйтә.

үçтерә инек. Былайһа, икмәк ашатмайһығыҙ икән һеҙ, мырҙалар... Их, ошоғаса агроном булмауы ҡырын һуҡты, түрәләрҙең һуҡырлығы тейҙе теңкәгә!

Эйе, агроном булһа, эштәр бүтәнсәрәк барыр ине шул, тип уйлана Ғәлим. Ул, исмаһам, алмаш һайын, эшкәртелгән ерҙең сифатын тикшерер ине, трактористар, әлегеләй, һан артынан ҡыуып брак яһамаҫтар ине. Бер ниндәй сифат контролө юҡ. Рәйес менән парторг килеп ҡарап китәләр ҙә ул, ләкин бынан ни файҙа? Һөнәрҙәре буйынса икеһе лә мәктәп уҡытыусылары — Ғүмәр бабай тиклем дә белмәйҙәр ерекмәнлекте. Белгестәр булмағас, бөтә етешһеҙлектәр ҙә сағылып бөтә аламы ни улар күҙенә! — Шулай көйөндө Ғәлим, , яңы ғына һөрөлгән ыҙанды буйлап. Эйелеп, дымлы тупраҡты йомарлап ҡараны усында. Ул хәҙер, сәсеүгә төшкән тәүге көндәрҙәге кеүек, бер бөтөнгә уҡмашмай ҡойолоп төшә — кибеп тотанаҡһыҙланған. Эйе, үтеп бара шул ваҡыт. Орлоҡто был ҡоро ергә күмеү менән дә ни ала алырбыҙ икән? — Уйлана ла уйлана Ғәлим, көйөнөп. Туңға һөрөү планы былтыр тултырып үтәлгән булһа, яҙғы сәсеү иртә тамамланыр, дым да һаҡланыр ине. Хәйер, быныһына Ғәлим үҙе «ғәйепле”: туңға һөргән ерҙәрҙе ул үҙе кәм сығарҙы бит! Әгәр шулай итмәһә, бөтәһе үҙ урынында ал да гөл көйөнсә ҡалыр, бригадаға баяғы етмәгән ике йөҙ гектарҙы тултырыу өсөн яҙғы ер һөрөү мәшәҡәте өҫтәлмәҫ ине. Дәүәй аҙым һайын уға шул турала туҡый бит. Бөтә бригада хисапсыға ҡырын ҡарай. Фәҡәт уның арҡаһында күпме кеше еңел “заработка”һын юғалтҡан. Инде элекке хисапсыны — Ғиззәт ағаһын маҡтап, нык һағынып һөйләйҙәр... Әммә Ғәлимдең иҫе китмәй, теште ҡыҫып, кешеләргә яман булыуҙан да ҡурҡмай, дөрөҫөн эшләй бирә. “Халыҡҡа ярауы ҡыйын була икән ул...” тип уйлана.

Насрый өҫтөнән акт төҙөгәйне тағы. Тракторын туҡтатып ҡырға сыҡҡан да, һабансыһын ҡайтарып ебәреп, үҙе тракторы менән күрше урыҫ ауылына бәрәңге баҡсалары һөрөргә — “һулаҡай кәсеп”кә киткән. Иртә менән Ғәлим барып үлсәгәндә, бағындағы яғыулыҡ яртыға төшкән, ә һөргән ерт юҡ. Ләкин Дәүәй актҡа ҡул ҡуйманы.

— Ҡуйсәле, юҡҡа-барға ваҡланып йөрөмә улай. Ир булһаң, йорттан сүп сығарма, эсеңдә эйәрле-йүгәнле ат кешнәмәй ятып ҡалһын. Ә яндырылған яғыулыҡ өсөн иҫең китмәһен. Өҫтәлмә рәүештә бер норма тырматыу йәки культивациялау күрһәтеп ҡыҫтыр ҙа ебәр хисапҡа. Ерҙең нисә ҡат эшкәртеп сәселгәнен, әҙәм балаһы түгел, этем килеп еҫкәнеп-соҡсонһа ла белә алмай уны! — тип өйрәтте ул. Дәүәй менән ирешеп йөрөү теңкәһенә тейеп бөткәйне инде, бәхәсләшеп торманы. Ләкин үҙенсә эшләне: туҡһан кило яғыулыҡты хисап ҡағыҙында Насрый елкәһенә яҙып, һигеҙ сәғәтлек прогул күрһәтеп ҡуйҙы. Дәүәй быға иғтибар итмәне, ҡул ҡуйып ебәрҙе.

# VI

Ғәлимәне Сәлимә апай үҙ өйөнә һыйындырҙы. Ире ташлап бәхет эҙләргә сығып киткән һәм ҡайҙалыр Ташкент яғында өйләнеп, , яңы ғаилә ҡороп ҡалған тол ҡатын ине ул.

— Кемгә алып барайым инде мин һине? Үҙемдә тор ҙа ҡал. Өйөм иркен, балаларым башлы-күҙле булып бөткән, тигәндәй, — бергә-бергә йәшәрбеҙ әле ошонда, — тине.

Сәлимә апай ҡасҡалаҡ иренән мираҫҡа ҡалған серек өйөн былтыр ғына колхоз ярҙамында һиплэтеп кергән. ңур-ҙур тәҙрәле алты босмаҡлы өй бик оҡшаны Ғәлимәгә. Эсе лә йыйнаҡ итеп йыһазландырылған. Яҫы ҡарағай таҡталарҙан теҙелгән шыма иҙәндең балауыҙ һарылығы сығарып йыуылып ҡуйылыуы йәш аграномдың күңелен күтәрҙе.

— Бына һиңә йоҡларға урын, — тине Сәлимә уға, төпкө өйҙөң урам яҡ стенаһы буйындағы карауатты күрһәтеп. — Бына өҫтәл. Шәм тураһында ҡайғыраһы юҡ — былтырҙан биреле электр яна беҙҙә.

Былары ла ҡыҙ күңеленә хуш килде. Икеһе лә , яңыраҡ ҡына шымартып яһалған булып, һөйән аҡлығы менән күҙҙең яуын алып торалар, күңелдә яҡты тойғолар уяталар. Ғәлимә, сумаҙанынан алып, өҫтәлгә тиҙ генә аҡ етен скатерть япты (быны ул район үҙәгендә, ошо колхозға юлландыртма бирелгәс, һатып алғайны), бер мөйөшөнә китаптарын өйҙө. Мыйыҡлы уйсан гусар поручигының артлы кескәй рамға ҡуйылған портретын ҡаршыһына ултыртты. Өйҙәшенең хәрәкәттәрен бәйнә-бәйнә күҙәтеп торған хужабикә тартынып ҡына һораны:

— Кемең ул һинең, әллә һөйгән егетеңме?

— Эйе, өҙөлөп һөйгән егетем, — тине Ғәлимә.

— Кейгән кейеме сәйерерәк булһа ла, бигерәк аҡыллы күренә.

— Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул бынан йөҙ егерме йыл элек үлгән шул.

Сәлимәнең һис ни аңлай алмайынса аптырап тороуын күреп, төшөндөрөргә ашыҡты:

— Шағир ул, апай, урыҫтың бөйөк шағиры Михаил Юрьевич Лермонтов. Мин уның шиғырҙарына ғашиҡмын.

— Ә-ә-ә, — тине Сәлимә. — Әйтәм, күҙҙәреңә тура ҡарап тора...

Иртәнге сәйгә бер ғаиләләй йыйылдылар. Ике ҡыҙы бар икән. Өлкәнен кейәүгә биреп оҙатҡан, ә Әминә исемле кесеһе үҙ бауыры аҫтында. Күгәрсендәрҙәй гөрләшеп эстеләр сәйҙе. Ун ете йәшлек Әминә, , яңы алланып бешеп килгән еләк кеүек, үҙенең саф йәшлеге, матурлығы менән һөйөндөрә күҙҙәрҙе; шат күңелле, алсаҡ ҡыҙ булып сыҡты ул. Бер туҡтауһыҙ тәтелдәп, Ғәлимәне һорауҙар менән күмде: Ғәлимә апай ҡайҙа уҡыған, Ырымбурҙамы? Институтта нисә йыл уҡыйҙар икән? Ырымбур ҡалаһының урамдарына шыма асфальт түшәлгәнме? Йырҙа йырланған Каруанһарай бинаһы хәҙер ҙә бармы Ырымбурҙа? Ә аҙағынан, кәйефһеҙләнеп: "Ошо йәшемә етеп тә, Ырымбурҙы күргәнем юҡ..." тип көйөнөп ҡуйҙы. Әсәһе йомош менән киткән арала, йөҙөнә фетнәсе ҡиәфәте сығарып, шыпырт ҡына һораны:

— Апай, һин егет һөйгәнең бармы?

Йылмаймайынса булдыра алманы Ғәлимә. Бына ниндәй бит ул йәшлек! Үҙенең ун ете йәшлек дәүере килде күҙ алдына. Уның да йөрәген ошондай уҡ һорауҙар ныҡ борсой торғайны...

— Бар, һеңлем, бар... — тип яуапланы.

— Әйтсе, апай, егеттәрҙең бөтәһе лә шулай оялсан булалармы икән?

Ғәлимә көлөүен һиҙҙертмәҫкә тырышты. Ҡыҙҙың диңгеҙ күперәге һымаҡ йомшаҡ сәстәренән һыйпап:

— Эйе, күптәре шулай була, — тине. Ниңә кәрәк таңғы ысыҡ тамсыһына кер ҡундыртырға?..

Көпәй ҡорһаҡлы һары еҙ самауыр, сынаяҡтарға мөлкәтен мул ағыҙа-ағыҙа, табын уртаһында сыжлап ултыра. Ауыл муллығын данлап йырлай һымаҡ ул. Ҡыҫып тотһаң мамыҡ һымаҡ йомолоп, ебәргәндә ҡабат ҡабарып китеүсән аҡ бойҙай икмәгенән ҡомалаҡ сүпрәһенең нәфис хуш еҫе аңҡый, тәрилкәләргә өйөп һалынған май һәм йомортҡаларҙан йәмле май айы сәскәләренең шифалы таты килә. Ятаҡтағы ҡыҫыңҡы студент тормошонан һуң, Ғәлимәгә былар барыһы ауыл муллығының балҡышы булып күренде.

Сәйҙән һуң Ғәлимә өҫтөндәге өй кейемдәрен эш кейеменә алмаштырҙы. Ябай тауарҙан тегелгән сыбар юбкаһын кейеп алды, аяғына тупаҫ кирза итектәр һәм өҫтөнә

һырған көпәйкә кейҙе. Күҙҙәрен шарҙай асып аптырап ҡарап торған Әминә ҡысҡырып көлдө:

— Апай-апай, ҡара әле үҙеңә! Ҡырға эшкә китеп барған ябай ауыл ҡыҙына оҡшап ҡалдың... — Карауат аҫтына ҡыуылған бейек күтәрмәле ялтыр туфлиҙәргә үкенеп ҡараны.

— И һеңлем, — тине Ғәлимә ябай ғына. — Мин бит ысынлап та ауыл ҡыҙы булырға килгәнмен. — Итек ҡунысынан сығып торған сылғау осон тыҡҡылап, йомғаҡланы. — Ҡыр эштәрендә ул, һеңлем, ябай кейемдән дә уңайлыһы юҡ.

— Ҡырға сығаһың дамы ни? Персиҙәтел һиңә иртән керешергә ҡушты бит? — тине эшен бөтөрөп кергән Сәлимә.

— Сығам, апай. Иртәгәне көтөп ятыуҙан ни файҙа? Бөгөнмө, иртәнме — ҡасан да бер башларға кәрәк бит инде...

— Уныһы шулай инде ул, — тип ризалашты хужабикә.

Ғәлимә, ҡапҡаны ашҡас туҡталып, шаҡтай уйланып торҙо. Идараға барырғамы, юҡмы? Унда барһаң да бит әле тиҙ-тиләмә ат табып бирмәйәсәктәр. Колхоз етәкселәре уны ни өсөндөр ҡырын күҙ менән ҡабул иткәндәй. Әллә агрономһыҙ ғына йәшәргәме ниәттәре? Бигерәк тә анауы трактор бригадаһы бригадиры: “Беҙгә йылтыр туфлиҙәр кәрәкмәй!” — тигән була... Ҡыҙ йөрәгендә уға ҡарата асыу ҡуҙғалды. “Ҡытыршы сабата” тип үсекләне уны, эсенән. Идараға мәшәҡәт һалмай ғына, ат-арба мәсьәләһен туранан-тура ат ҡараусыға барып хәл итергә булды.

Матур икән был ауыл. Урамдарын ҡалын келәмләгән ҡуйы ҡаҙ үләнен Ғәлимә бүтән бер ерҙә лә осратҡаны юҡ. Урамдарҙы, майҙандарҙы, ишек алдарын тоташ йәшелгә күмеп түшәлеп ята ул үлән (күп хәрәкәтле оло юлдар ғына келәм өҫтөнә ҡара туҙан таҫмаһы һуҙып уҙған). Атлағанда табандарың аҫты йомшаҡ, туҡылдау юҡ, туҙан юҡ — әйтерһең, тәбиғәт-әсә үҙе ҡайғырта әҙәм балаларының һиллеген. Нәҡ анауы ҡараморон балаларҙай, һуҙылып ятып, ошо үлән-келәмдә аунағыһы, тәкмәс атып уйнағыһы килде агроном ҡыҙҙың. Моғайын, ҡусҡыл япраҡ-ҡыяҡтарының араһында йәнгә рәхәт һалҡынса дым еҫе, йәшеллек аңҡы мул сырмалып торалыр!

Иртәнсәк уҙғанда кешеләрҙең иғтибарын Ғәлимәнең матур ҡала кейеме йәлеп иткәйне, буғай. Хәҙер инде йәһәт кенә алмашынған тышҡы киәфәтенә ҡыҙыҡһынып ҡарайҙар. Ысынлап та, ниңә ҡырыҫ кирза итектәре һөйрәп сыҡты һуң әле был ыҫпай ҡыҙ?..

Ғәлимә тәҙрәләрҙән, ситән арттарынан үҙенә һаҡ төбәлгән ҡараштар һиҙҙе. Күбеһенсә ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ ғына ине, башҡалары ҡырға эшкә таралышып бөткән. Эскерһеҙ текләүселәренә иғтибар итмәҫкә тырышты. “Текләһендәр, әйҙә, текләһендәр, яйлап күнегерҙәр әле”, тип уйланы, йылмайып. Бына тап ҡаршыһына, өлкәндәрсә олпат һәм ҡыйыу атлап, бәләкәс малай сыҡты. Ололарса ҡулдарын артҡа ҡуйып, ят апайҙы баштан-аяҡ ентекләп тикшерҙе.

— Тешләйем бит хәҙер, ау-у-у! — тип өшкөттө уны Ғәлимә. Ә малай шөрләмәне.

— Мин һинең кем икәнеңде беләм. һин агланум! — тине ул етди. Ғәлимә уның керпе арҡаһылай тырпай башынан һыйпаны:

— Абау, сәнсә икән!

— Эһе, алдатаһың! — тине малай, керле ҡулы менән түбәһен ҡапшап ҡарап. Ғәлимәнең артынан ҡысҡырҙы: — Апай, бойҙайҙы һин нисек итеп үҫтерәһең?

— Мин уны Ҡояшҡа бәйләйем. Ҡояш уны үҙе тарта ла үҫтерә.

Аптыраған малай бармағын ауыҙына ҡабып, яуаптың төбөнә төшөргә тырышып, уйланып тороп ҡалды.

Ауыл осона сыҡҡас, һырт яҡтағы һоро бүтәгәле тау итәгендә суҡайған ике цистерна, эргәләрендә суҡандаған ир-ат күреп, тура ыңғайлағайны, көтмәгәндә артынан, дөбөр-шатор, мотоцикл ҡыуып етте лә уҙа биреп шып-туҡтаны. Матайға атланған мыҡты кәүҙәле, ҡаҙаҡҡа ныҡ тартым ҡара-һимеҙ түңәрәк йөҙлө ("көлсә бит!" тип билдәләне Ғәлимә) ҡупыҡ егет, оҙон боттарын ике яҡҡа тарбайта баҫҡан килеш, ынйылай аҡ тештәрен йылтыратып, беҙҙәй осло күмер күҙҙәрен тура төртөп көтөп алды:

— Һаумы, сибәрем Ғәлимәкәй!

— Һауғайным да, түгелде шул.

— Оһо! Оторобикә икәнһең.

— Беренсенән, "һең" түгел, ә "һеҙ"! Икенсенән, "сибәр" тип матур егеттәргә генә әйтелә беҙҙең яҡта. Ә ҡыҙҙарҙы "һылыу" тиҙәр.

— Ярар, һүҙемде кире алам, ул тиклем гордый түгелбеҙ. Татар менән, урыҫ менән буталып бөткән шул телебеҙ. Бынан һуң "һылыуым" тип кенә һоҡланырмын. Ул әйтеүем китапсараҡ килеп сыҡты, шикелле.

— Татар китаптарын ғына уҡығанығыҙ күренә.

— Башҡортсаһын ҡайҙан алаһың уның? Килеп етмәй бит.

— Үҙегеҙгә барып етергә кәрәк.

— Абау, телемде тешләнем, улайһа. һылыулығығыҙ алдында баш эйеп, дуҫлығымды тәҡдим итәм. Әгәр рөхсәт итһәгеҙ, урыҫтар әйтмешләй, яҡындан танышайыҡ. — Егет ихлас ҡул бирҙе. — Сәләмғол, ауыл Советы секретары.

— Дуҫлыҡты һис кире ҡаҡмайбыҙ. Бигерәк тә Совет власын. Әйтмәһәм дә, беләһегеҙ, буғай: агроном Ғәлимә булам.

— Бик шатмын. Ҡайҙа йүнәлдегеҙ?

— Башым анауы тарафҡа ҡарағайны.

— Менгәшегеҙ, алайһа, арғымаҡҡа. Минең дә тап аяҡ тартҡан яҡ ине.

Матай тигәнең, күҙ асып йомғансы, цистерналар төйәгенә алып барып та төшөрҙө. Яғыулыҡ ташыусы Яхъя, ғүмәр бабай ярҙамында, оҙон арбаһынан мискәләрен тәгәрләтеп маташа. Тракторист Насрый, һары гәзит ҡағыҙына уралған йыуан тәмәкеһен ҡабып, ситтәнерәк күҙәтеп тора.

— Булдымы? — тине Сәләмғол Яхъяға.

— Булыуын булды ла ул, анауында осло күҙ бар бит әле...

Сәләмғол тирә-яғына ҡаранды:

— Ҡайҙа?

— Кем?

— Кем түгел, ә үҙең белгән нәмә!

— һаҡ ҡыланмайһың, ҡустым.

— Күрмәй ул, минең трактор багында соҡсона, — тип тынысландырҙы Насрый.

— Насрый үҙебеҙҙеке, егет ул. — тине Сәләмғол, матайын ҡалдырып. — Ҡайҙа, ваҡытым тар!

— Ана, цистерна аҫтында. Йәһәт кенә ал да тай, ҡустым, күреп-фәлән ҡалмаһын.

Сәләмғол цистерна аҫтынан канистр һөйрәп сығарғайны, көтмәгәндә килеп юлыҡҡан Ғәлим канистрға аяғы менән баҫты:

— Туҡта әле, нимә уның эсендә?

— Нимә булһын, бензин! — тине ғүмәр бабай. — Сәүит власының матайына кәрәк бит, ябай һыуҙы һемермәй икән ул сәсрәп киткере тимер арғымаҡ...

Ғәлимдең ҡаштары йыйырылды:

— Тәк, егерме литр. Рөхсәт ҡағыҙың бармы?

— Һуңынан килтереп бирермен.

— Килтереп биргәс алырһың. Яхъя ағай, мә, цистернаға кире бушатып бир. Канистры беҙгә кәрәкмәй.

Төҫө ҡасып ҡулдары ҡалтыраған яғыулыҡ ташыусы, башын эйеп, бойороҡто үтәне.

— Һин нәмә, үҙ урыныңды белмәйһең? — тип ғыжылданы ҡаҡ ергә доңҡолдап төшкән буш канистр эйәһе.

— Беләмен, үҙ урыным — иҫәп-хисап. Үҙең дә беләһеңдер: Совет власы теүәл иҫәп-хисап ярата — шунһыҙ коммунизм төҙөп булмаясаҡ, тигән Ленин бабабыҙ. Һин быны яҡшы белергә тейеш!

— Белгертермен әле мин... Запомни! — Сәләмғол буш канистрын алып матайына атланды, моторын шарылдатты. Иҫ китерлек һис нимә булмағандай, Ғәлимәгә тештәрен йылтыратты: — Әйҙә, һылыуым, менгәш, фатирыңа елдертеп ҡуяйым.

— Юҡ, мин ошонда ҡалам, — тине ҡыҙ, шул ыңғайҙа туҙан туҙҙырып дөнгән матай артынан баш сайҡап.

— Бына бит ул, эштәр ҡайһылай... — Көйөндө ғүмәр бабай. Ғәлим иһә быныӊ өсөн төп ғәйеплегә ябырылды:

— Яхъя ағай, күпме әйтергә була, ниңә яҡын юлаттың?

— Йәнемде алып бара бит... Силсәүиткә саҡыртып алып екерҙе... Былтырғы алдаҡ туңға һөргән яғыулыҡты ғиззәт менән минең өҫкә һалдыртып, төрмәгә ултыртырға янай...

— Килгән берәүгә ошолай ҡойоп бирһәң, тиҙерәк ултырырһың! — тине Ғәлим. — Белеп тор: үҙем ултыртышырмын! — тип тә өҫтәне. Ҡыҙыҡһынып ҡолаҡ һалған Ғәлимә янына килеп, ҡул бирҙе. — Таныш булайыҡ: трактор бригадаһы хисапсыһы Ғәлим.

— Ә мин агроном Ғәлимә! — тип йылмайҙы ҡыҙ, егеттең ҡытыршы усынан ҡулын алырға ашыҡмай. — Һе!.. Ғәлим менән Ғәлимә... иллә тура килгәнбеҙ ҙә икән, әй!

— Шулай шул... — Егет, сағыу нурға тура ҡарағандай, сытырҙатып күҙҙәрен йомдо — тылсымлы кинофильмдән тылсым көсө менән сыҡҡан һылыуҙарҙың һылыуы үҙе баҫып тора лаһа алдында!..

— Баҫыуҙар иңен бергәләшеп ҡыҙырабыҙ икән, әй.

— Сеү! Ҡайҙалыр күргәйнем шикелле һеҙҙе? — тине, ҡыҙҙың ҡулын, ниһайәт, ысҡындырып.

— “Һеҙ”ләмәһәгеҙ ҙә ярай, бер үк эш кешеләре бит. “Һин” тип кенә һөйләшәйек.

— Иншалла, мин дә шул теләктәмен. Ә шулай ҙа... ҡайҙа, ҡасан күрҙем әле был һылыу йөҙҙө? — Егет ҡыҙҙың сер һәм хис тулы күҙҙәренең төбөнә үтеп керергә теләгәндәй ҡараны. Ҡыҙ көлдө:

— Ҡайҙа булһын, үҙебеҙҙең колхоз идараһында. Ғүмәр олатай менән мин коридорҙа ҡыҙыл боросло гәзит уҡый инек. Шартлап торған ташлы ҡыҙыу мунса эләүкәһендә селек һепертке менән сабындырылғандай, борос һымаҡ ҡыҙара-бүртеп килеп сыҡтың да, күҙең тоноп тышҡа атлыҡтың...

Рәхәтләнеп көлдөләр.

# VII

— Алло, ҡайҙа йүнәлдең? Туҡта әле!

Аяғөҫтө уйланып йөрөүсән Ғәлим һиҫкәнеп башын күтәрҙе. Ҡара атҡа егелгән ҡара ҡырандаста, тимер-томорҙары араһынан һерәйеп, Дәүәй үҙе килә икән. Ғәлим яҡынланы.

— Ни эш ҡырып йөрөйһөң әле?

— Ер үлсәйем.

— Ер үлсәйем, тиһең инде. һе. Ярар, һуңынан үлсәрһең. Әйҙә, ултыр, киттек.

— Ҡайҙа?

— Уныһын юлда һөйләшербеҙ.

Ғәлим бригадир ҡушағаһына менде. Арҡаһына сыбыртҡы эләккән ҡарат һалпаң-һолпаң юртып китте. Бераҙ һөйләшмәй барҙылар. Егет һүҙ ҡатырға теләмәне, ҡарашын юл ситендәге аллы-гөллө сәскәләргә төбәгән хәлдә, башлығының өндәшеүен көттө.

— Йә, эштәр нисек? Өлгөрөп буламы? — тип белеште Дәүәй. Элек быны һорамай торғайны, хисапсы өлгөрәме, өлгөрмәйме — был мәсьәлә аҙ борсоно уны. Хәҙер иһә хисапсыһының хәле менән ҡыҙыҡһынғандай итә, етмәһә, тауышында ла ниндәйҙер яғымлылыҡ билдәләре бар. Ғәлимде был һағайтты, ҡоро ғына яуапланы:

— Бара шунда, аҡрынлап.

— Нисек уйлайһың һин, быйыл сәсеү бөтәме шул, юҡмы?

— Сәсеп бөтөрһәк, бөтәр.

Бригадир быны хуп күрмәне.

— Гәзит уҡыйһыңмы һин? Беҙҙең колхоздың сәсеү буйынса нисәнсе урында торғанын беләһеңме?

— Нишләп белмәй, ти? Беләм.

— Арттан икенсе урында тора беҙҙең колхоз. Нехорошо.

— Эйе, нехорошо.

Дәүәй, һарыуы ҡайнап, ҡыҙып һөйләне:

— Бригада яҙмышы аҙ ғына булһа ла ҡағыламы һиңә, юҡмы? Әллә ул һиңә бөтөнләй ҡағылмаймы? Ҡылыҡтарыңа ҡарағанда, бригадала эшләмәйһең, ә Мәскәүҙән туризмға килгәнһең, тип уйларға мөмкин. Бына нисәмә йылдар инде техника тирәһендә әйләнәм, ләкин һинең кеүек хисапсыны осратҡаным юҡ ине. Аҡламаның һәм аҡламайһың беҙҙең ышанысты! Бына нимә әйтәм мин һиңә, брат: эшләйһең икән — эшлә как следует, эшләмәйһең икән — эшләмәйем, тип өҙөп әйт. Колхозға посторонний наблюдатель кәрәкмәй.

— Нимәне эшләмәйем мин, нимәне?! Ерҙәрҙә үлсәмәйемме, әллә берәүҙең тәбилен юғалттыммы? — тип тоҡанды Ғәлим. Хәҙер ул Дәүәй менән бер ҙә тыныс һөйләшә алмай ине.

— Беҙ өндәшмәгәс тә, әллә эштәрең ал да гөл тип беләһеңме? Юҡ, брат, һинең менән бәйләнергә генә ниахута. Әммә-ләкин күңел биреп эшләргә кәрәк. Күрше колхоздар ни өсөн алда? Түлке блгаҙарә яҡшы хисапсы арҡаһында. Уларҙың беҙҙән артыҡ бер ние лә юҡ.

— Моғайын, уларҙа трактористарҙың ыҙанда эшләп еткермәгәнен хисапсы эшләй торғандыр... — тине Ғәлим, әсе көлөп.

— Тап өҫтөнә баҫтың!

— Үҙемә бер трактор беркетегеҙ, алайһа, һөрөрмөн. Ә һеҙ үлсәрһегеҙ.

— Һиңә берәү ҙә трактористар өсөн ер һөрөргә ҡушмай. Шулай ҙа бригада, колхоз тураһында ҡайғыртырға кәрәк бәләкәй. Бөгөн үк сәсеүҙе бөтөрөп сводка бир.

Эш бына нәмәлә икән! Башына таяҡ менән һуҡҡандай булды.

— Быны көтмәгеҙ минән! Йөҙ илле гектар һөрөп, сәсәһе бар бит әле беҙҙең. Килеп тикшерһәләр, баштан һыйпамаҫтар, башыңды ҡырҡып алырҙар.

— Ерунда! Берәү ҙә тикшермәйәсәк тә, белмәйәсәк тә уны. һәм белергә лә теләмәйәсәк. Йөҙ илләһен һуңынан яйлап ҡына тултырасаҡбыҙ. һәр ҡайҙа ла шулай эшләйҙәр быны. Элек-электән килә инде ул. Ниндәйҙер йөҙ илле гектар өсөн ҡойроҡта

һөйрәлергә, Ҡыҙыл байраҡһыҙ ҡалырға ярамай ҙа инде беҙгә. Яҡшылап көсәнһәк, артабанғы аҙнала түңәрәкләп ҡуябыҙ беҙ уны.

— Былтыр туңға һөргән һымаҡмы? Ҡайҙа ул ике йөҙ гектарығыҙ, ниңә уны ла, үҙегеҙ әйткәнсә, һуңынан "көсәнеп" үтәмәнегеҙ?! — Ҡаны ҡыҙҙы егеттең.

— Һин, ҡустым, маңлайың менән ҡая ярып маташма — башың ярылыр. Беҙ ҡушҡанды үтә лә ҡуй, ҡалғанын үҙебеҙ белербеҙ.

— Кем ул үҙегеҙ?

— Бөтә етәкселек. Һинең ошолай сығынсылауың арҡаһында яҙғы сәсеү буйынса, колхоз ғына түгел, бөтә район артта һөйрәлә — беҙҙең колхоз тотҡарлап һөйрәлтә уны. Әйтәм бит, бөтәһе шиты-крыты буласаҡ!

— Ә партия райкомы?

— Беҙ, коммунистар, һәр аҙымыбыҙҙы партия райкомы етәкселегендә баҫабыҙ. Һин үҙең дә йәш коммунист бит әле!

— Юҡ, булдыра алмайым мин быны, булдыра алмайым! Нимә уйлаһағыҙ ҙа уйлағыҙ, ләкин намыҫыма ҡаршы бара алмайым! — Егет үҙен йәтмәгә эләккәндәй тойҙо; был йәтмәнән ысҡынһаң, бригадир һәм бөтә етәкселек, хатта райком ҡаршыһында уғата яманға әүереләсәгең хаҡ; ысҡынмаһаң, үҙеңде-үҙең намыҫ яҙаһына хөкөм итәһең. Ахыры, түҙмәне, ҡырандастан ырғып төшөп ҡалды. Дәүәй атын туҡтатып, артынан уҫал төбәлеп, ғәйепләүсән, түбәнһетеүсән баш сайҡаны. Был ишараның мәғәнәһен Ғәлим тәрәнтен ҡабул итте; үҙен тағы кешегә ылыҡмаусан яман, ҡырыҫ әҙәм итеп тойҙо һәм, кәйефһеҙләнеп, муйынын эскә тартты. Көндән-көн үрсей барған дошмандары уға һәр ваҡыт ошо түбәнһенеү тойғоһон һеңдерергә тырышалар...

Кәзә һаҡалына оҡшап елгә елпелдәгән һипмә ҡыяҡлы йәш бүтәгә сиҙәменән атлап, тау аша төштө Ғәлим. Унда, Насрый һалған ыҙан башындағы селеклектә, велосипеды йәшерелгән. Атланып, ҡыҙыу ишә-ишә, баҫыу ситендәге яғыулыҡлы мискәләр эргәһендә ике автомобиль күреп туҡталды — уҙғынсыларға оҡшай. Эргәлә, торбаһынан һағыҙ һымаҡ ҡара һөрөм аттыртып, Насрый тракторы тора тырҡылдап. Насрый үҙе, мискә ауыҙын усы менән бер ҡаплап, бер асып, тегеләрҙең канистрына бензин ағыҙа. Ғәлим ҡырыҫ өндәште:

— Ҡайҙа, килтерегеҙ ҡағыҙығыҙҙы!

— Һин кем, ниндәй ҡағыҙ? Әллә үҙебеҙҙекеләрҙе танымайһыңмы?

— Колхоз идараһының йәки МТС-тың бензин ебәрергә биргән бойороғон.

Насрый хисапсының еңенән тартты:

— Ярар инде, дуҫ, ҡуй, бушҡа ваҡланма. Үҙебеҙҙең МТС кешеләре бит...

— Эйе, МТС-тыҡылар беҙ.

— Ә яғыулыҡ — трактористар елкәһе! — тине Ғәлим.

— Ә мин кем? — Насрый кәперәйҙе.

— Тракторист һин.

— Шулайғас? Барыбер минең елкә бит. Үҙ елкәмә күтәрәм!

— Күтәрер инең дә, елкә соҡороң һай шул! Ә һеҙ, хөрмәтле МТС-сылар, канистрығыҙҙы кире бушатығыҙ!

— Тот бына бынауҙы! — тинеләр автомобилселәр, осло ҡуҡышҡа йәпләнгән ҡара йоҙроҡтарын күрһәтеп; ишектәрен шартлатып яптылар ҙа дөнөп китеп тә барҙылар. Арттарында, төлкө ҡойроғолай ҡабарып, йыуан туҙан болото ғына ҡабарҙы. Шул арала Насрый тракторы ла бураҙнаға төшөп һөрөп китте, Ғәлим бер үҙе ҡалды. "Их, яртылаш бүҫкәрткәндәр!" — тип мискәне торғоҙоп ултыртты. Нәфрәтләнеп, Насрыйҙың шунда онотолоп ҡалған фуражкаһын тибеп осорҙо. Ниһайәт, үҙ күҙе менән күреп аңланы ул бригадала дизелде тоҡандыртыу моторсығы бензиненең ни өсөн саманан тыш яғылыуын.

Ҡайҙа ғына ҡарама, алдау ҙа урлау — ни булған был халыҡҡа?.. Тракторҙың әйләнеп килеүен көтөп тормай, велосипедына атланып, ары йүнәлде. Үтә торған, үлсәй торған ерҙәре күп ине әле. Ишә-ишә, тәрән уйланып бара.

Былтыр ғына колхоздарҙы берләштереп ташлағайнылар. Ғәлим эшләгән колхоз шөйлә ҙурайҙы: үҙ эсенә элекке бәләкәй хужалыҡтарҙың икәүһен алған. Әгәр картаға баҡһаң, дөйөм хужалыҡтың ер биләмәләре һуҙып һалынған оҙон таҫтымалға оҡшаш. Буйлап сығыу өсөн әллә нисә ауылды, әллә нисә тау һәм йылғаларҙы үтергә кәрәк. Элекке "сит" колхоздың ерҙәре әллә ни таныш та булмағас, тырым-тыраҡай һибелгән техника артынан сабыу, барыһын үсәп һәм күҙәтеп өлгөрөү ауыр ине. Колхоз етәкселеге, йылдың-йылына, техниканы бер урынғараҡ туплап файҙаланыу, эштәрҙе тоташ фронт менән, биләмәләрҙең бер осонан икенсе осонаса бер юлы алып барыу һәм шул ысулдың хужалыҡҡа күпме экономия, ваҡыт отошо бирәсәге тураһында аҡыллы докладтар һөйләй; ләкин, яҙ башланыу менән үк, матур аҡыл кинәт онотола, эштәр үҙ ағышына ҡуйыла. Етәкселек инде план-маҙар тураһында уйлап та ҡарамай, ул, ҡағыҙға яҙылған килеш, туҙанлы шкафтарҙа ятып сереүен көтә. "Даешь! Даешь!" тип һөрәнләп дошман өҫтөнә ташланған эскадрон атлылары кеүек, үҙ-үҙҙәрен белештермәй ярһып, эшкә тотона кешеләр; шау-шоу ҡуба, буталыш китә, ләкин эш алға бармай, сөнки был ваҡыт кешеләр, дөйөм шау-шоуға әүрәп, төп йүнәлеш тойғоһон юғалталар, кәрәкмәгән яҡҡа саба башлайҙар, улар менән айыҡ аҡыл түгел, стихия етәкселек иткәндәй... һөҙөмтәлә халыҡ арый, тәүге эш сәме һүрелә, хәрәкәттәр һүлпәнәйә һәм хеҙмәт аҡһай башлай. Йыл һайын, яҙғы сәсеү йәки ураҡ кампанияларының ағышын күҙәтеп, Ғәлим ошондай фекергә килә торғайны.

Быйыл да шул килеш ҡалды...

Ауыл янындағы ике йөҙ гектарлы массив башына еткәс, Ғәлим, туҡтап, велосипедын әрем араһында ҡалдырҙы. Колхоздағы иң ҙур, иң тигеҙ баҫыу был — тракторҙар йырлап йөрөп эшләрлек. Бөгөн уны культивацияларға тейеш инеләр. Культиваторҙың етемһерәп ер башында тороуын күргәс, Ғәлим албырғанып ҡалды. Көҙҙән насар һөрөлгән ергә эләгә-һөрлөгә, баҫыу эсенә инде. Эйе, һиҙенеүҙәре дөрөҫ: культивацияһыҙ сәсә башлағандар. Культиватор менән ер ситенән сыйҙыртып ике генә урағандар ҙа ташлағандар... Тупраҡ таба төбөләй ҡаты, бөрсөкләнеп ятҡан балсыҡ киҫәктәре араһынан күгелйем-ҡыҙыл сүп үләндәре үркегән — кейеҙләнеп тығыҙ шытҡандар. Бер ус тупраҡ тырнап алып тикшерҙе: ундағы сүп үләндәре бармаҡ битендәй майҙанда ла бихисап...

— Бына һиңә кәрәк булһа... Бына һиңә кәрәк булһа... — тип, үҙе лә һиҙмәҫтән, әллә кемгә мөрәжәғәт итеп һөйләнде хисапсы. Баш һөйәге эсендә утлы осҡондар сәсрәгәндәй, хафа тойғоһонан башҡа бер нәмә лә ҡалманы... Ҡабаланып, теге баштан сәсеп килгән агрегатҡа ҡаршы йүгерҙе; ҡул болғап ҡысҡыра-ҡысҡыра, төмөзгә эләгеп "тәкмәс атты"... Аҙыраҡ һыуына төшөп, ҡаршы йүгереүҙең кәрәкһеҙлеген аңланы, ыҙанда көтөргә булды. Агрегат килеп еткәс, ҡул болғап уны туҡтатты. Кабина ишегенән трактористың туҙанлы башы күренде.

— Ни булған? — Кәйефһеҙләнеп һораны ул.

— Ниңә культивацияланмаған ергә сәсәһең?

— Уныһын үҙенән һора! — тине артҡа ымлап һәм, ишеген ҡалдор-ҡолдор ябып, ҡара төтөн урғылдыртып газ бирҙе. Ҡорос ҡарышлауыҡтары шылтырҙап үрмәләне, Ғәлим ситкә тайпылды. Туҙан көлтәһе араһынан йүгереп барып, сәскес баҫмаһына менде, унда Дәүәй тора имеш.

— Нишләп эште булдерәһең? — тип ҡысҡырҙы бригадир, шау-шоуҙы еңергә көсәнеп.

— Ер культивацияланмаған!

Дәүәй ҡулын һелтәне, тупаҫ брезент плащлы яҫы арҡаһын күрһәтеп бороллдо. Орлоҡ үткәргестәрҙе көйләп маташҡан өлкән сәсеүсе (төп һөнәре — комбайнер) Ғирфан иһә Ғәлим ҡолағына ҡысҡырҙы:

— Былай булмай, мырҙам, дискылар батмай бит! Ер ҡаты!

Ғәлим бригадирҙың бөйөрөнә төрттө:

— Орлоҡ ер өҫтөндә ҡала. Үлән дә мыжғып сыҡҡан. Туҡтатырға кәрәк!

— Нишләргә икәнен өйрәтмә безгә! Үҙ эшеңде бел! — Дәүәй сәскестән төштө. Эйәргән хисапсыһына, ҡолаҡ һалыу түгел, боролоп та ҡараманы...

# VIII

Аттар һарайында Ғәлимәгә биш-алты ир осраны. Утлыҡсаға теҙелешеп ултырып, мөкиббән китеп, тәмәке көйрәтәләр.

— Әйтегеҙ әле, идара аттарын ҡараусы бындамы икән? — тине ҡыҙ, дөйөмләтә иҫәнләшкәс. Бесән араһына айырата ныҡ сумылып төтәп ултырған һимеҙ йөҙлө, шаҙрараҡ бер абзый теләмәйенсә генә ҡалҡынып ҡараны:

— Бында булһа, һеҙ уны ни эшләтер инегеҙ?

— Муйынына боғалаҡ һалып, йылғаға сумырыр инем.

Һимеҙ йөҙлөнөң бөйөрөнә төрткөләп хихылданылар. Ә унныһы, иҫе китмәй генә, ҡуйы төтөн йомарлаҡтарын осора-осора һораны:

— Ни өсөн ул былдай ихтирамһыҙлыҡ?

— Бесән өҫтөндә ултырып көйрәткән кеше шуға лайыҡлы ла инде!

— Сафа ағайҙы критиковать итмәгеҙ — кире тәкәһе төкөр. Сөнки ул үҙе нәсәлник пожарной охраны! — тине күк галифе салбарлы, тупаҡ танаулы ҡупшы егет һәм диҡҡәтләнеп ҡыҙҙың күҙҙәренә ҡараны.

— Күренеп тора: ошонда ут сығарып, үҙенә эш яһарға тырышҡаны. Кем булаһығыҙ, Сәләмғолдоң ағаһымы әллә? — тине Ғәлимә.

— Шулайыраҡ...

— Әйтәм, бер ҡалыптан сыҡҡандай оҡшашһығыҙ. — Ҡупшы егеттең маңлайы, танау өҫтө пасталап шымартҡандай ялтырай, уның шулай ҡупшы егет булып йөрөүе лә үтә оҙаҡҡа һуҙылғанлығы күренеп тора.

— Егетлегеңде күрһәтергә өлгөрмәнең бит, әй, — ҡустың һемәйткән үҙеңде! — тип көлөштөләр. Галифеләр эйәһе ҡаштарын йыйырҙы:

— Ни йомош, ат кәрәктер, моғайын? — тине. — Улайһа, ана Сафа ағайҙың үҙенә обращаться итегеҙ инде, ошонда ултырып үҙен дә, правленский аттарҙы ла һимертә ул.

— Һин әйтмәһәң, белмәҫтәр ине, ни... Бында инструктор кәрәкмәй, иптәш Муллаҡаев! — тине Сафа, урынынан күтәрелеп һәм, Ғәлимәгә көрәктәй ҡулын һуҙҙы:

— Ҡайҙа, килтерегеҙ.

— Нимәне? — тип аптыраны Ғәлимә.

— Распоряжениены. Неграмотный булһаҡ та, яҙыу таныйбыҙ, һеңлем. Бында ат бойороҡһоҙ бирелмәй. Һылыуҙарҙың һылыуы килгәндә лә. Атаң ҡураһы түгел.

— Бәй, Йәрмит Вилданович һеҙгә әйтермен, тигәйне бит.

— Я ничего не знаю. Дауай ҡағыҙ!

— Мин агроном бит. Миңә тиҙ үк баҫыуға сығырға кәрәк, — тип ныҡышты Ғәлимә.

— Миңә тимәгәйе, әллә кем бул. Төп Ҡанунибыҙ СССР Конституцияһында “агроном законға буйһонмай” тиелмәгән. Әгәр ҙә , яңылышһам, тейешле пунктын

килтереп күрһәтегеҙ, ҡарарымды отменять итермен, — тине Сафа, эре сирттереп. Ғәлимә буш ҡул китергә мәжбүр булды.

— Ҡара уны, абзый, аттарыңдан баҫыу йүнәлешен онотторт. Ҡалансаңда йоҡлап ятып ҡарамай, игенде тапатһаң, аттарыңа ҡушарлап тышаулармын үҙеңде! — Конституция белгесенә мәғәнәле бармаҡ янаны.

— Тәүҙә үҫтер әле игенеңде, шунан һөйләшербеҙ! — Асыу-фәләнһеҙ мығырҙап ҡалды Сафа. Ғәлимәнең йөрәгендә тәүҙә нәфрәт тоҡанһа ла, бара-тора һүрелде. “Ысынлап та, ҡағыҙһыҙ бирә алмай шул. һәр ҡайҙа ла тәртип кәрәк. Быуынһыҙ урынға бысаҡ салғанмын икән дә”, тип уйланы. Әле йәйәүләп сығырға, аяҡ еткән ерҙе әйләнеп ҡайтырға. Бәлки, берәй ылау ҙа тура килер.

Ауылды артта ҡалдырғас, велосипедҡа атланған Муллаҡаев ҡыуып етте.

— Әйҙәгеҙ, үҙем алып йөрөйөм, — тип тәҡдим итте, тимер атының алғы һыртын күрһәтеп. Ғәлимә тағы ҡыҙыҡһынып уның маңлайын, танауын ҡарап алды. “ФамилиЯң муллалы ла ул муллалығын, әммә үҙең шымарған өйрәккә оҡшайһың”, тип һөҙөмтә яһаны тиҙ генә һәм, яғымлы өндәшеп, тәҡдимдән баш тартты.

— Әйҙәгеҙ инде, любой теләгән ерегеҙгә алып барып еткерәм! — тип ныҡып ҡараны егет.

— Велосипедта пассажир булып йөрөүҙе яратмайым! — Ҡырт киҫте ҡыҙ.

— Пардон. Как хотите! — Муллаҡаев та ҡырт боролоп, педалдәрен йән-фарманға иште. Осло галифеләре байтаҡ ара ялпылдап күренеп барҙы.

Күп тә үтмәй, ҡырандаслы ат ҡыуып етте, Ғәлимә тәңгәленә килеп туҡтаны. Ҡуҡырайып Сафа ултыра ине.

— Агроном туташ, дилижансҡа рәхим итегеҙ! — Ҡырандас ҡырынан һалындырған аяҡтарын бейетеп, хәйләле йылмайҙы.

— Рәхмәт, атсы уҙаман, йәйәү ҙә йөрөй алам мин, — тине Ғәлимә, Сафаның үҙ ауазы менән.

— “Атсы” түгел, ә өлкән конюх һәм өлкән пожарник иптәш Сафа Тоҡомбаев! — тине тегеһе, ифрат мәғәнәле кәперәйеп. Шаярыпмы, ысынтылапмы әйткәнен төшөнә алманы ҡыҙ. Сафа ҡырандастан төштө һәм дилбегә башын тантаналы рәүештә ҡыҙҙың ҡулына тапшырҙы:

— Ҡабул ҡылып алығыҙ, иптәш агроном.

— Ҡағыҙ кәрәкмәйме ни?

— Бер юлға был хатағыҙҙы иҫәпкә алмаҫҡа булдыҡ.

— Рәхмәт, Сафа уҙаман! — тине Ғәлимә, аҡ кейеҙ түшәлгән ҡырандасҡа менеп ултырып. — Ут һүндереүсе булһағыҙ ҙа, йөрәк утығыҙ һүнмәгән икән әле. — һәм дилбегә ҡағып атты ҡуҙғалтты.

— Рәхмәт иҫертәме икән һуң? — тине Сафа. Ғәлимә атты юрттыртып китеп барғас, ашығып ҡысҡырҙы: — Иртән ҡағыҙ килтерергә онотмағыҙ, ҡағыҙ!

Юл ҙур массивлы баҫыу ситенән үтә. Сәскес сыйып киткән дискы эҙҙәрен, тере үлән араһында һары гәрәбә юлағылай һуҙылған — күмелмәгән бойҙай бөртөктәрен күргәс, агроном барыһын аңланы. Атын ҡалдырып, баҫыу эсенә йүгереп инде. Итек ҡунысынан йылтыр ҡорос линейка сығарып тыҡты ергә. Уныһы өс-дүрт сантиметрҙан да ары үтмәне: “табан” тип аталмыш ҡаты ҡатлам ята. “Агротехникаға төкөрөп ҡарайҙар икән бында!..” — тине; үҙе лә белештермәй, гәрәбә бойҙай бөртөктәре өҫтөнә тырнап тупраҡ ышырҙы. Бер көтөү ҡарға, ерҙе ябырып, бөртөктәрҙе сүпләп кинәнә. “Их, өлгөрмәнем, — тип әсенде Ғәлимә, йәне көйөп. — Ваҡытында килеп етмәнем!” һәм үҙенең урынға тәғәйенләүҙәрен көтөп, район ҡунаҡханаһында аҙнанан артыҡ ҡаҡланыуына үкенде. Ниңә уны шунда уҡ ебәрмәгәндәр?..

Баçыуҙың арғы башынан, ҡара матрос салбарының яçы балаҡтарын ялпылдатып, хисапсы Ғәлимдең йүгергәне күренде.

— Бауыр аçтынан ел үткәрергә сыҡтыңмы, һылыу? — тине ул, ых-был килеп, йыш һулыш алып.

— Баçыуыбыҙ һылыу түгел бит әле, — тине Ғәлимә. — Ниңә былай сәстегеҙ?

— Әлә генә шуның өсөн Дәүәй менән ирештем.

— Эш ниҙә һуң?

— Түрәләрҙе еңеү ҡыйын. Улар өсөн төп маҡсат — эш пландары ваҡытынан элек үтәлде, тип районға сводка биреү. Күҙ буяуҙың сигт еҡ.

— Таптыртырбыҙ ул сикте! — Ҡул болғап йүгереп барып, сәсеп килеүсе агрегатты туҡтатты. Кабина ишегенән башын һонған трактористы яғаһынан һөйрәп төшөрҙө. — Кем һин? Ниңә брак яһайһың, әҙерләнмәгән ергә сәсәһең?

— Уй-уй апай! Дәүәй ағай үҙе ҡушты бит!

— Ә мин һиңә хәҙер үк эште туҡтатырға, агрегатты баçыуҙан сығарырға бойорам!

Сәскестән ырғып төшөп, өлкән сәсеүсе ғирфан йүгереп килде:

— Һаумыһығыҙ, кем һеҙ? Ни хаҡығыҙ бар?

— Уның хаҡы ҙур, — тине Ғәлим. — агроном Ғәлимә һылыуың был. Уның һүҙе — закон. Кисекмәçтән бойороғон үтәгеҙ!

— Ауыҙың ни һөйләгәнен ҡолағың ишетәме һинең, Ғәлим?

— Ә һин, ғирфан ағай, үҙеңдең, сәсеүсе генә түгел, ә урыусы ла икәнеңде онотма. Көҙгөһөн комбайныңдың бункерына нимә һуҡтыртырһың икән? Анауы үçеп ултырған билсән тупалсыҡтарынмы?

— Уныһы шулай ҙа ул... — тине ғирфан. — Ә бына бригадир, рәйес иптәштәр алдында кем яуап бирер икән?

— Үҙем бирермен яуапты! — Ғәлимә ҡул һелтәне. — Сығарығыҙ агрегатты баçыуҙан!

— Ә һин, ҡустым, — тине Ғәлим трактористҡа, — тиҙ генә анауы культиваторыңды таҡ та йомшартырға кереш. Бер аяғың — бында, икенсеһе тегендә булһын!

Агрегат ер башына туғарылып, культиватор баçыуға төшкәс кенә, аҙыраҡ тынысланып, ҡырандас эргәһенә килделәр.

— Ҡарале, әй, ваҡытың бармы? — тине Ғәлимә.

— Һинең өсөн, һылыуым, ваҡытымдың сигт еҡ.

— Алайһа, ултыр әле янproblems ма, баçыуҙарыбыҙ менән таныштыр.

Бөйөргә бөйөр терәшкәс, яҡынлыҡтарынан икеһе тиң тулҡынланып, өндәшмәйерәк барҙылар.

— Айһай, һылыуым, тәтәнһеҙ дөрләп янмаһаҡ ярар ине...

— Фани донъяла янһаҡ, баҡыйында янмабыҙ, ти торғайны олатайым.

— Эйе... "Башҡортостан әгәр йәшәр, тиһәң,/Бер үҙемә миллион үлем бир!" — Шәйхзада Бабич.

— "Беҙ үҙебеҙ өсөн йәшәмәнек — /Башҡортостан өсөн йәшәнек!"

— Быныһы кемдән әле?

— Уныһы мөһим түгел.

Тауҙан — тауғаса йәйрәп ятҡан йыһан киңлегенә етеп, шул киңлектең ситендә туҡталдылар. Өçтәл кеүек иç китмәле тигеҙлек битләүендә, күкәй һарыһылай тос сағыуланып, һары сәскә баçыуы айбарлана; бал ҡорттары быжылдашҡан шул һары сәскәләр араһында, ара-тирә, ҡусҡыл арыш ужымдары уйпатланып тимгелләнә. Ғәлимә төшөп йүгерҙе:

— Әһәлүк! Бына ҡайҙа икән ул татлы ҡаҡылыҡ! — һары сәскәлектең иң ҡуйы урынына етеп, ҡосаҡ тулы көпшә һындырып алып килде. Ғәлимгә ҡайнар тәнен терәп ултырып, атты ҡыуаланы ла, һынығынан һуты бытлығып торған көпшәнең ҡабығын ынйы тештәре менән һыҙырып, күҙҙәрен ләззәтле йомоп, бер осон кертелдәтеп ҡапты, икенсе башын Ғәлимгә ҡаптырҙы. — Ҡаҡынан да татлы сихәт юҡ донъяла!

Ҡаҡы көпшәһен ике осонан кертелдәтеп ашай-ашай ирендәр яҡынлашты ла бер-береһенә тоташты... Ғәлим ҡыҙҙың танһыҡ һынын ҡыҫып ҡосаҡланы, баяғы романдарҙа тилереп уҡыған, кинофильмдәрҙә күргән һәм үҙенә матурлыҡтың, гүзәллектең эталонын тыуҙырған һын, хыялдарҙа иҫертеп һынланған һын, тап ошо ҡыҙ икәнлеген аңланы...

— Етте, кәрәкмәй! — тине ҡапыл Ғәлимә, ирендәрен ирендәрҙән айырып, ике араға һалҡын бушлыҡ ҡалдыра биреп ситләште. Егет тә айный биреп, әле генә бар есемен өтөп алған кисерештән йыраҡлашырға тырышты.

— Ҡайҙа килеп эләктем, әллә бында Совет власы юҡмы? — тине Ғәлимә, һүҙҙе ҡапыл ғәмәли тормошҡа ҡайтарып.

— Бар, нишләп булмаһын. Секретарь Сәлемғолдо күрҙең бит.

— Фи, Сәлемғол... Танауын сыйырҙы ҡыҙ. — Әгәр ҙә ки Совет власы унан торһа, йәшәргә теләмәҫ инем.

— Ә шулай ҙа матайына атланырға әҙерһең.

— Минең нимәгә әҙерлекте кем белә? Хатта үҙең дә шәйләмәйһең, тельняшкалы матрос була тороп та...

— Ҡыҙ-ҡырҡындың эсендә лә ҡырҡ арба сер ята, тиҙәр...

— Ярар, һиндә лә сер аҙ түгел... Ә хәҙер бер ябай серҙе асыҡлайыҡ: ниңә һуң был гүзәл яҫылыҡта, өҫтәл өҫтө кеүек тигеҙ баҫыуҙа, мин яратҡан ҡаҡы гөрләп сәскә ата? Ҡаҡы сәсеп үҫтерҙегеҙме әллә?

— Яңылышаһың, һылыуым. Колхозыбыҙҙың эш йәһәтлеге буйынса данланған, әммә уңышы буйынса һанға һуғылмаған арыш баҫыуы ҡаршыһында торабыҙ!

— Ә?! Ни ишетәм?!

— Дөп-дөрөҫ ишетәһең. Быйыл да уңышын урып аласаҡ арыш баҫыуыбыҙ был.

— Булмаҫ!

— Беҙҙең заманда, беҙҙең колхозда бөтәһе лә була ул.

— Беҙ һыйланған ҡаҡы ла әллә арыш бөртөктәре бирәме?

— Шау һары сәскә араһында уйпат-уйпат йәшеллек күрәһеңме? һирәк-һаяҡ ысын арыш шытҡан унда. Дөрөҫөрәге, тыу арыш.

— “Тыу арыш” тигән сорт бармы һеҙҙә?

Ғәлим көлдө:

— Бына һиңә агроном... тыу арышты ла белмәгәс...

Йөҙө бурҙатланып оялған Ғәлимә, ниһайәт, төшөнгәнлегенә ҡыуанды:

— Ә, беләм! Үҙе үҫкән арыш!

— Тап үҙе! һөрмәйһең дә, сәсмәйһең дә, — бер нисә йыл дауамында үҙе шытып, үҙе үҫеп, үҙе башаҡ ҡыҫып-бешеп тик ултыра. Тик һуңлатып ҡына урырға кәрәк — бөртөктәренең яртыһы ергә ҡойолоп, ужымға шытһын өсөн...

— Ә бынан ни мәғәнә?

— Бик ҙур мәғәнә! Йыл һайын колхозыбыҙ, өс йөҙ гектар арыш ере һөрөлдө, сәселде, урып алынды, тип хисап бирә юғарыға, планды үтәүҙең тиҙлеге буйынса районда алдынғы урын тота, гәзиттәрҙә маҡтала, хөрмәтләү грамоталары, хатта күсмә Ҡыҙыл байраҡтар ала... Трактористарға ла йәтеш: эшләмәгән өсөн — эш хаҡы, ә яғыулыҡҡа экономия... Бына шул атаҡлы арыш баҫыуында баҫып торабыҙ.

— Күҙ буяу бит был, юҡ, улай ғына түгел, — енәйәт!

— Унының ҡарауы, ваҡытынан элек үтәп сыҡтыҡ, тип сводка бирелгән.

— Тимәк, былтыр туңға һөргән ике йөҙ гектарҙың юҡмышлығы ла ысын булып сыға?

— Кем әйтте уны һиңә, ысын түгел, тип?

— Бөтәһе лә... Мәҫәлән, үҙең белгән "совет власы" Сәлемғол...

Ғәлим йөҙөн һытып ситкә төкөрҙө:

— Ишеткем килмәй исемен!

— Башҡа һыймай: ҡайҙа булған ул ике йөҙ гектар?

— Киттек, алайһа, бармағым менән төртөп күрһәтәйем!

Атты яй ғына атлатып, "арыш баҫыуы"ның буйлыҡ ситенә сыҡҡас, Ғәлим дилбегәне тартып туҡтатты:

— Иғтибар: күрәһеңме ер ситендәге йылдан-йыл һөрөп еткерелмәй ҡалдырылған ике-өс сажин киңлегендәге ҡарағураны (йәғни, һеҙҙең китапса әйтһәк, залежды)? Йыл да шулай ҡалдырылып, массив тарайғандан-тарая, әммә бөтә ҡағыҙҙарҙа тәүге киңлегендә иҫәпләнә. һәр массивта ошондай уҡ хәл. Шуларҙы үлсәп сыҡҡас, фашланды етешмәгән утыҙ гектар.

— Да-а-а... инаныслы. Ә ҡайҙа һуң ҡалған йөҙ етмеш гектарың?

— Унының ана анауы тау артында көтөп ята.

Ҡалҡыулыҡты артылғас, ике оҙон ҡырла араһында күҙ күреме һуҙылып киткән тигеҙлек хасил булды.

— Ошо инде былтыр "туңға һөргән" нәҡ йөҙ етмеш гектар ер.

— һин, әй, йәш агроном тигәс тә, һөрөлгән ерҙе сиҙәмдән айыра алмаған шыр тилегә һанайһыңмы мине? — Ысынтылап үпкәләне Ғәлимә. Көлөүен саҡ тыйған егет, ырғып төшөп, ҡыҙҙы ҡырандастан күтәреп алды ла битен супылдата үбеп баҫтыртты:

— Әйҙә, баҡтыртып күрһәтәйем! — Ҡыҙара-бүртенгән агроном өндәшмәҫтән эйәрҙе.

— Бына ул баҫыуҙың сиге! — Күп йыллыҡ ҡуйы бүтәгә ҡаплаһа ла, буй һырланып беленеп ятҡан элекке ситке бураҙна соҡорон күрһәтте. — Үҙәндең арғы ситендә лә ярылып ята ошондай уҡ иҫке сик бураҙнаһы. Сиҙәмгә әүерелһә лә, был үҙәндең исеме лә иҫкесә, баҫыуҙыҡынса — "Йөҙ етмеш гектар" тип йөрөтәбеҙ...

— Уф, йығылып үлерлек!..

— Ә бөгөн генә минән, сәселмәгән ерҙе сәселде, тип сводка биреүҙе талап иттеләр... Әгәр шуны яҙып бирһәм, майлаған һымаҡ китәсәк, бөтәһе "шиты-крыты" буласаҡ...

— Ә намыҫ тигәнең ҡайҙа?

— Где была совесть — там фәлән нәмә вырос, тиҙәр бит урыҫтар...

— Юҡ! Юл ҡуймабыҙ! Яҙма ул сводканы! — тине Ғәлимә.

Шатор-шотор матай тауышы һиҫкәндертте, ҡылғанлыҡ араһынан, тимер атына атланып, Сәләмғол пәйҙә булды, былар эргәһенә етеп туҡтаны. Төшөп, Ғәлимгә һис иғтибар итмәгәндәй, ҡыҙҙы ғына ҡысҡырып сәләмләне:

— Привет, моя красавица! Ниңә был яҫы балаҡлыны тыңлайһың?

— "Һың" түгел, ә "һығыҙ"! — тип киҫәтте агроном.

— Ярай, "һығыҙ" так "һығыҙ"... Тыңламағыҙ уны! Унының һөйләгәне — көллө ялған! Эшкинмәгән негодяй ул — яҙғы сәсеү бөтөү менән үк эшенән ҡыуыласаҡ!

Өндәшмәй тыңлап торған Ғәлим тештәрен шыҡырҙатты:

— һин, мәхлүҡ!— Саҡырылмаған ҡунаҡты ул һә тигәнсе яғаһынан бөрөп алып ергә йыҡты, өҫтөнә атланып ултырҙы. Ике ҡулын ергә ҡыҫып, битенә төкөрҙө. — Ниңә араға керәһең, һуҡыр себен!

Бәләкәй саҡтарында ла ул бер мәртәбә үҙенән бер йәшкә өлкән ошо Сәләмғол-малайҙы, тап ошолай, ҡаҡ ергә ләпәштереп тотоп яҡкайны. Сөнки, йылғаға һыу инергә төшөү һуҡмағы улар янындағы тар тыҡрыҡтан үткәнлектән, Сәләмғол, ситәндәре артында боҫоп тороп, малайҙарҙың башына таш бәрә ине. Ҡаны ҡыҙған Ғәлим-малай, ситән аша ырғып төшөп, уны салҡан әйләндерә һалғайны; мәсхәрәгә батырып, икенсе улай итмәмен, тип ант иткәненәсә, ысҡындырмай тотҡайны... Инде шул хәл баҫыуҙа ҡабатлана...

— Һин үҙең ул, гад, беҙҙең араға керәһең! — тине лә Сәләмғол, һыңар ҡулы бушаныуҙан файҙаланып, Ғәлимдең күҙенә бер ус тупраҡ тырнап алып һипте, көтөлмәгән хәлдән Ғәлим ике күҙен ыуалап артҡа янтайҙы. Тегеһе ырғып торҙо ла уны ҡанығып типкеләргә тотондо, Ғәлимә икеһен айырып сарылданы. Шул арала Ғәлим ырғып тороп, Сәләмғолдо йәнә йыға һуҡты һәм шунда уҡ пинжәк иҙеүенән тартып торғоҙоп, матайы яғына елтерәтеп алып барҙы ла ҡаты итеп осаһына тибеп ҡалды:

— Бар, кәзәң янына олаҡ, Кәзәтәкә!

— Я запомню! Ответишь за все это! — тип йоҙроҡ болғаны ла Сәләмғол матайынан күк төтөндәр борхота-борхота тайҙы.

— Я тоже не забуду! — тип ҡалды быныһы. Башын сайҡап аптырап торған ҡыҙ уға яҡыныраҡ килде:

— Ғәлим... мә ҡулъяулыҡ. Ниңә уны Кәзәтәкә тип атаның?

Егет өндәшмәне, сөнки әйтеүе оят. Быныһы ла тиктән түгел — Сәләмғолдоң “айғыры”на баш була алмай алйып йөрөгән үҫмер сағының мәсхәрәһе... Уны күрше кәзәһенең осаһына ялғанғаны хәлендә тоттолар ҙа ыштанын һалдыртып туҡманылар, өҫтәүенә, ҡушамат йәбештерҙеләр...

— Ни тигән һүҙ ул, ни өсөн? — тип ныҡыны Ғәлимә.

— Уныһын үҙенән һора. Ғәфү ит... — Ғәлим, ҡыҙҙың йөҙөнә ҡалҡынып ҡарарға ҡыймай, ер башында ташлап киткән велосипеды тарафына йәйәүләне. Ғәлимә лә, башын сайҡап бер талай аптырап торғас, ҡырандасына ултырҙы, дилбегәһен тартты.

# IX

Көн һайын иртәнге сәғәт һигеҙгә ҡырҙағы эштәрҙең барышы тураһында хисапсы колхоз идараһына сводка бирергә тейеш. Мәғлүмәттәрҙе шунда уҡ телефон арҡылы райкомға тапшыралар: унда айырым бер кеше даими ошо мәсьәләләр менән генә шөғөлләнеп ултыра. Шуға күрә эш бик ҡәтҒи ҡуйылған: “Сәсрәп кит, ә сводканы үҙ ваҡытында килтереп еткер!” — тиҙәр ине Ғәлимгә. Хисапсы хеҙмәтендә иң мөһим нәмә икән ул сводка биреү. Уны төҙөү өсөн, тәүҙә, тәүлек эсендә эшләнгән эштәрҙең бөтәһен үлсәп, хисаплап сығырға кәрәк. Сводка — көндәлек хеҙмәттең йомғағы, уға ҡарап хисапсының кемлеген белеп була.

Бөгөн Ғәлим эшен иртәрәк бөтөрҙө. Ул идараға ингәндә, сәғәт етене лә һуҡмағайны әле. Иркенләп ултырып яҙҙы. Был сводка элеккеләре кеүек ашыҡ-бошоҡ ҡына эшләнмәне, Ғәлим уны шыма аҡ ҡағыҙға бөхтә графалар һыҙып, эре матур хәрефтәр менән ләззәтләнеп атҡарҙы. Аҙаҡҡы цифрҙы сәпәп, ҡул ҡуйғас, ручкаһын һалды ла арҡаһын ултырғыс артына терәп киреллде. “Бына тәүлек тә үтеп китте һәм мин үҙ вазифамды шул тәүлектең ҡойроғонда һөйрәлтмәй үтәп бөтөрҙөм”, тип уйланы ул, ҡәнәғәтләнеп. Сводка яҙып биргәне һайын, ошо тойғо шатландыра уны.

Бухгалтер Ибәт, бөтә эшен туҡтатып, сводканы өйрәнергә кереште. Ул быға тиклем уны, уҡып-нитеп тормаҫтан, делоға теркәр ҙә ҡуйыр ине. Талған күҙҙәрен Ғәлимгә төбәне:

— Егет, бөгөнгө көндө нисә гектар бойҙай сәселде?

Ғәлим әйтеп бирҙе.

— Яҙғы сәсеүҙе бөтөрмәнегеҙме ни әле?

— Юҡ.

Мейес ауыҙы алдында тәмәке көйрәтеп ултырған ағайҙар хихылдашты.

— Бына, ишеттегеҙме уның нимә әйткәнен? — тип, тотанаҡ-ярҙам көткәндәй, уларға төбәп өндәште Ибәт. — Бая ғына Дәүәй үҙе килеп яҙғы сәсеүҙе бөтөрөп киткәйне, хисапсыһы тағы килеһен һөйләп тора. Што һеҙ, егеттәр, улай ярамай ҙа инде! Хәҙер һиңә немедленно сводкаңды төҙәтергә кәрәк. Сөнки Дәүәй биргән мәғлүмәт районға китте инде.

— Юҡ, мин төҙәтә алмайым. Ул мәғлүмәт өсөн уны биргән кеше үҙе яуаплы. Бойҙай сәселеп бөткәнт еҡ әле! — Ғәлим китергә ашыҡты. Был хәл Ибәткә аҫтына ут ҡапҡандай тәьҫир итте:

— Туҡта әле, егет, туҡта! Былай булһа, мин председателгә еткерәм, үҙе менән һөйләш! — Атылып рәйес бүлмәһенә инеп китте. Ағайҙар йәнә хихылдашып алдылар ҙа, тәмәке төпсөктәрен йәһәт мейес эсенә ырғытып, ҡыҙыҡһынған хәлдә ваҡиғаның үҫешен күҙәттеләр.

Ғәлим рәйес кабинетына саҡыртылды. Ашыҡмай ғына, ҡағыҙҙарын йыйып кеҫәһенә һалды. Теләр-теләмәҫ атлап сыҡты — рәйес менән ниндәй һүҙ булырын яҡшы белә.

— Ну, эләгә-тек эләгә хәҙер мырҙаңа! Ҡыҙған табаға баҫтыртып бейетәсәктәр! — тип устарын ыуаланы тамашасылар.

Йәрмит өҫтәле артынан һөҙөп ҡарап ҡаршыланы. Ибәт, аяғөҫтө хәлдә өҫтәлгә эйелеп, тиҙтеккестән рәйескә бөгөнгө сводканы күрһәтә.

— Ана, егет үҙе килде, — тине ул, Ғәлим ингәс, һәм, иркенләп, күн көплө диванға ларҡайҙы. Ғәлим рәйескә сәләм бирҙе.

Йәрмит, өҫтәленә эйелеп китеп, нимәлер яҙа ине. Ғәлим кабинет эсенә күҙ йөрөтөп алды. Ҡыҙыл буҫтау ябылған тос имән өҫтәлдең урта тошонда яҙыныу быялаһы һәм ҡалын һары мәрмәрҙән ҡара приборы; шунда уҡ никелләнгән ялтыр сыңғырҙауыҡ; уң яҡта матур ҡара телефон, ә һулда бейек гәзит өйөмө. Бүлмә мөйөшөндә, рәйестең уң ҡулы һуҙылырлыҡ алыҫлыҡта күккә буялған өр-, яңы китап шүрлеге, унда колхозға килмәле гәзиттәр, журналдар, китаптар өйөлөп ята. Бүлмәнең хәтһеҙ ҙур итеп уйылған бер генә тәҙрәһе бар; Йәрмит уның тап урта тошонда симметриялы рәүештә яҡтыға арҡа биреп ултыра, тыштан төшкән нурҙар уның кәүҙә килбәтен яҡшы яҡтырта, шуға күрә ирҙең замана партэлита модаһынса хәрбиләштереп тектерткән , яңы, ҡиммәтле күкшелт кителе буй-һынын оҫта скульптор ҡасауы ҡасағандай кәмселекһеҙ балҡыта. Түрә эйәге аҫтына китекләнеп үҫкән май ғына был тәьҫирҙе кәметә төшә.

Йәрмит рәйеслек вазифаһын икенсе генә йыл башҡара ине әле, гөрләтеп эшләй башлаған “утыҙ меңсе” рәйес ҡапыл ғына үлеп киткәс, шуның урынына һайлатҡайнылар, ә быға тиклем ул ете йыллыҡ мәктәп директоры ине.

— Иҫәнме, Ғәлим. Ниңә һин беҙҙең бухгалтерҙың бойороҡтарына буйһонмайһың әле? — Быны Йәрмит, түшәктә хәл өҫтөндә ятҡан ауырыу төҫлө, бик яй, бик ҡыйынһынып әйтте; был иһә ошо минутта уның бүтән бик мөһим мәсьәләләр менән мәшғүл икәнен белдерергә тейеш ине. “Бухгалтер бойороҡтары”ның нимәлеген белһә лә, хисапсы тура яуапларға ашыҡманы.

— Үҙ эшемде төгәл алып барам. Минең ерҙәремде бухгалтер сығып үлсәгәнт еҡ, — тине.

— “Әйтһәң — һүҙ, төртһәң — күҙ”, тигәндәй, һинең нисек эшләүең беҙгә мәғлүм. Көн һайын өҫтөңдән жалыуға киләләр. Непосредственный начальнигың бригадирҙың да ҡушҡанын үтәмәгәс, һинән ни эш көтәһе ҡала? Ни өсөн сводканы Ибәт ағайың күрһәткәнсә яҙмайһың?

— Яҙғы сәсеүҙе тамамлапмы? Көтмәгеҙ минән ундайҙы. һәм: “фәлән жалыу итә лә төгән жалыу итә” тип тә ҡыйырһытмағыҙ! Күҙемде баҡтыртып үҙемә әйтһен ул бәндә, әгәр ғәйебем булһа. Ә һеҙ ғәйбәт өйәһегеҙ!

— Социалистик критиканы һин , яңылыш аңлайһың икән, Ғәлим. Беҙ һине ҡыйырһытырға түгел, ә төҙәтергә, ярҙам итергә теләйбеҙ. Насар уйлаһаҡ, беҙ һине күптән сығарып ташлар инек. Ышанмаһаң, бына Ибәт ағайыңдан һора: нисә тапҡыр Дәүәй беҙҙең ҡаршыла һине эштән бушатыу мәсьәләһен күтәрҙе! Трактористар аҙмы тупһа шымарталар! Дошманлыҡ уйлаһам, мин һинең менән һөйләшеп тә тормаç инем. Ә һин шуның ҡәҙерен белмәйһең, ашаған табағыңа сысаһың. Колхозсылар араһында етәкселеккә ҡаршы яла таратаһың. һәр ваҡыт ниндәйҙер наҙан люмпендарҙың һүҙен һөйләйһең. Стена гәзитен булһын — минең менән личный счеттарыңды сводить итеү өсөн ҡулланаһың. Ә бит һин партия членлығына кандидат — матбуғаттың шәхси интерестар өсөн файҙаланырға тейеш түгеллеген белергә тейешһең. Кем ҡуйғандыр һине редактор итеп, белмәйем!

Йәрмиттең был сүкеүе, юғары көсөргәнешле электрҙың металл тишкес осҡондары кеүек, Ғәлимдең мейе төпкөлөнә үттеләр. Танауы һыртына бөрсөкләнеп тир сыҡты, ҡолаҡтары ҡар менән ыуалағандағылай янып ҡыҙарҙы. Йәрмит әйткән тыныс йөмләләр артында оҫта йәшерәлгән мәкер барлығын һиҙҙе егет һәм ул мәкерҙе тышҡы кейеменән нисек арындыртырға, энәләрен тырпайтып яланғасландыртырға икән, тип уйланды. Әгәр шулай эшләһә, бөтәһе асыҡланыр, кемдең ҡайҙа тартҡаны күренер ине.

...Стена гәзитенә редактор итеп һайланғас, Ғәлим бик дәртләнеп тотондо эшкә. Бала саҡтан уҡ әҙәбиәтте һөйә, хатта шиғыр ҙа яҙып маташа ине. Шуға күрә партйыйылыштың был йөкләмәһен ихлас күтәрҙе. Аҙ булһа ла, әҙәбиәткә яҡынайғандай тойҙо үҙен. Элек парторг төрткөсө арҡаһында ғына һирәк-мирәк сыға торған гәзит тиҙ үк тәртипкә килтерелде, һәр һаны үҙ ваҡытында, йөкмәткеһе байыраҡ булып донъя күрҙе. , яңы редколлегия шуның менән генә ҡәнәғәтләнмәне, “Борос” исемле сатирик ҡушымта ла барлыҡҡа килтерҙе. “Борос” ялҡауҙарҙы, булдыҡһыҙ етәкселәрҙе, оғроларҙы әсеттереп көйҙөрә торған яугир ҡоралға, колхоздың кескәй генә үҙ “Крокодил”ына әүерелде. Колхозсылар һәр һанын көтөп алалар, “Борос”тоң үткер куплеттары шунда уҡ телдән-телгә күсеп тарала башлай, берәүҙәрҙе кинәндертеп көлдөртә, икенселәрҙе сырай һытып ҡаты һүгенергә мәжбүр итә. Ләкин гәзиттең абруйы күтәрелгән һайын, Ғәлимдең тирәһендә кенә тотоп йөрөүселәр күбәйҙе. “Борос” әсеһен татыған һәр бәндә быны Ғәлимдән күрә, уға ҡырын ҡарап, хас һалып йөрөй. Ғәлим уларҙың аңһыҙлығы, тәнҡит тигән нәмәне дөрөç ҡабул ҡылмауҙары тураһында уйлап көйөнә. Бүре булып ҡараусылар араһында колхоз рәйесе Йәрмит тә бар шул...

Бер саҡ, ҡарынына тимер сыбыҡ ҡаҙалыу сәбәпле, колхоз һыйырын һуйып алғайнылар. Ҡыш көнө ине, ит айҙар буйы келәттә аçыулы торҙо. Уны турғайҙар суҡыны, ҡомаҡтар кимерҙе. Ниһайәт, баҙарға илтеп һатырға ла “аяҡ урынына тояҡ” алып ебәрергә ҡарар итәләр. Келәтте асып ҡарағас, ревкомиссия ағзалары ҡаушауҙарынан ултыра төшә яҙғандар: түшкә ҡомаҡ тарафынан мөнтәлеп, сөйҙә ҡаҡ һөлдәләр шауҙырҙап тора... Шул көн урамда утиль йыйыусы йөрөгән икән; һөйәктәрҙе шуға һатып, колхоз быҙауҙары өсөн резинкә имеҙлектәр алып ҡалғандар...

Был әкәмәтте “Борос” үҙенең нәүбәттәге һанында бик әсеттертеп тамғаланы. Үткер бәйет бер көн эсендә бригадаларға, фермаларға таралып өлгөрҙө. Кискеһен уны йәштәр,

гармунға ҡушылып, урамда йырлап үттеләр. Хатта быға тиклем гәзиткә иғтибар итмәгән ҡарт-ҡоро ла, сәмләнеп, рәйестең яуабын көттө. Тик Йәрмит сер бирмәне: хатта гәзиттең барлығын да белмәгән кеүек, баҫалҡалы, тыныс холоҡ күрһәтеп, эре, ныҡ аҙымдар менән ғорур атлап йөрөнө. Ғәлим, тик һуңлап ҡына, был тыныс-баҙыҡ ҡиәфәттең тышҡы ҡабыҡ ҡына икәнен аңланы. Сөнки Йәрмит шул көндә үк рәсем төшөрөүсене кабинетына саҡырып алып бик ныҡ "бешерҙе". Редакторға нисектер теше батманы — парторг ҡамасаулаған, тиҙәр. Гәзит, бер тәүлек эленеп торғас, ҡапыл ғына стенанан алынды: етәкселек боростоң әсеһен яратманы, ахыры.

Шул ваҡиғанан һуң Йәрмит, уңайы тура килгән һайын, редколлегияны ҡыҫҡыҫка алыусан булып китте. Күберәген Ғәлимгә, әле генә әйткәненсә, "печатте шәхси интерестарың өсөн файҙаланаһың" кеүек һүҙҙәр менән бәйләнергә ярата ине. Был яла Ғәлимде бүтәндәрҙең нахаҡ һүҙҙәрен ишеткәндәгеләй һыҙлатмай, фәҡәт нәфрәтләндертә генә. "Уҡымышлы кеше лә ошондай дорфа булыр икән!" тип уйлана ул, көйөнөп...

Йәрмит, ауыҙынан сыҡҡанының бөтәһе лә кире ҡаҡҡыһыҙ саф алтын йомарлаҡтары икәненә тамам инанған ҡиәфәттә, тыныс ҡына яҙыныуын дауам итә. Битендә тулҡынланыуын һиҙҙертерлек бер ҡан әҫәре лә юҡ, ирендәре, боҙҙан уйып эшләнгәндәй, хәрәкәтһеҙ йомолғандар, керпектәре лә, аҫҡа һалынған килеш, һелкенмәйенсә тик тора. Күк күкрәүеләй ҡаты гөрөлтө сығарып ҡысҡырғыһы, бәндәнең тәрән һәйкәл тыныслығын селпәрәмә иткеһе килде егеттең. Ләкин тауышы яй, ни өсөндөр, ғәйепленеке һымаҡ көсһөҙ сыҡты:

— Нисек телегеҙ барып әйтәһегеҙ, ағай, бындай һүҙҙәрҙе! Әгәр мин шәхси мәнфәғәтемде йәмғиәттекенән айыра алмайым икән — бындай наҙан, өлгөрөп етмәгән кешене һайламаҫҡа кәрәк ине редактор итеп. һеҙ үҙегеҙ партбюро ағзаһы бит! Ә "наҙан люмпендар"Ға килгәндә, мин һеҙгә улар тураһында һағыраҡ фекер йөрөтөргә кәңәш итер инем. Улар һеҙҙең менән минән биш тапҡырға аҡыллыраҡ!

— Ошибаешься! Беләһеңме, ни тип атала һинең был демагогиЯң? Хвостицизм ул! Йәғни ҡойроҡта һөйрәлеүсе. АҢһыҙ массаларҙы үҙ артыңдан эйәртеү урынына, һин, киреһенсә, улар һүҙен һөйләйһең, уларға эйәрәһең. Коммунислыҡҡа кандидат кешегә килешмәй улай. Етәкселек артынан барырға кәрәк.

— Яңылыш барған етәксегә эйәреп, ярҙан оҫком килмәй минең! Хәҙерге мәлдә мин һеҙҙең етәкселегегеҙҙә авангардлыҡ билдәләре күрмәйем! — тип, тураһын ярҙы Ғәлим.

— Яланғас политикан! Аҡыллы баш булып һүҙ һөйләргә шәпһең! Ә Ғәмәлдә ниндәйҙер ничтожный хисапсы вазифаһын да йүнләп үтәй алмай илайһың — минең эшемде эшләһәң, ярылып үлер инең!

— Нишләгәндә лә, һеҙҙең һымаҡ, культивацияланмаған ергә бойҙай сәстертмәҫ инем! — Ғәлим рәйестең күҙҙәренә мылтыҡ көбәгеләй тоҫкап ҡараны. Йәрмиттең йоҡомһорап тонған күҙҙәре шар-асылды һәм ул, боғаҙына үрләп килгән асыуын тыя алмай, ярһып башын ҡалҡытты. "Оҫкон барып тейҙе, хәҙер дары шартлай" тип көттө Ғәлим. Йәрмиттең сикәләре буйлап ҡыҙыл тулҡындар үтте, ул, оҙаҡ яфаланып, төкөрөгөн йотто — әйтерһең, боғаҙына икмәк ҡатыһы ултырған. һәм кинәт ағарынды, буҙарынды, алдында ятҡан таҙа ҡағыҙҙы йомарлап ырғытты. Ажғырып, аяғүрә баҫты:

— Һин, молокосос! Не твое собачье дело минең нимә эшләгәнемде тикшереү! — һәр һүҙен өҙөп-өҙөп, ҡаты баҫымлап сүкене. Бер аҙ тын алғас: — Ҡасан минең йәшәме етеп, минең белгәнде белһәң, шунда минең менән һөйләшерһең! — тип өҫтәне. Үҙенсә, Ғәлимде үлтереү ине был. "Эйе, эйе, мин — наҙан. Ҡасанмы юғары белемгә өлгәшмәй тороп, юғары белемлеләр менән бойондороҡһоҙ һөйләшергә хаҡым юҡтыр, күрәһең..." — Әсе фекер яндырып үтте есемен. Ләкин бер тойғо, йөрәк тапҡырында ләүкеп торған бер тойғо, уны ваҡытһыҙ сигенештән тота ине.

— Эйе, йәшем һеҙҙекенән кесе, ләкин мин йәшәрмен, һеҙҙе ҡыуып үтеп тә китермен әле, ағай. Минең белемем һеҙҙекенән түбән, ләкин мин арттырырмын уны. Кеше — һыйыр түгел, ул үҙ ғүмерен ашап-эсеп кенә үткәрмәй... Ә хәҙерге ваҡытта һеҙҙең менән типә-тиң һөйләшергә миңә партиялы намыҫым, ниһайәт, кешелек выжданым хоҡуҡ бирә!

— Һин башҡаларҙы тәнҡитләү өсөн генә партияны иҫеңә төшөрәһең, ә үҙеңде тәнҡитләгәндәрендә онотаһың! — Йәрмит ярһып ҡысҡырҙы: — Һинең тәнҡитең — серек тәнҡит! Һин кеше өҫтөнә сүп өйөп кенә йөрөйһөң. Ә һин беләһеңме "Ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институтының Тәҡдиме" тураһында? Белмәйһең! Унда какраз сүпһеҙ ерҙәрҙе культивацияламай сәсергә рөхсәт итәләр. Сөнки иртә сәселгән иген сүп үләндәренә күтәрелергә ход бирмәй. Һин, тимәк, һәр аңлы колхозсының ҡуйын китабына әүерелгән рекомендацияны ла уҡымағанһың, ә ауыҙ тултырып һүҙ һөйләйһең!

— Уҡыным мин ул брошюраны, ярһымағыҙ!

— Уҡығас, ниңә сығынсылайһың?

— Һин... һеҙ барып ҡарағыҙ ул ерҙең нисек "сүпһеҙ" икәнен! Кәҫ өҫтөндә — кәҫ, сүп өҫтөндә — сүп, сәскес дискылары бата алмай. Бер нәмә лә белмәйһегеҙ, ә һөйләйһегеҙ. Кабинет бүкәне һеҙ! Күҙле бүкән! — тине Ғәлим, ғәрләнеп.

— Ладно, ладно, не болтай. Делом надо заниматься, ә һин буҡ тибеп ғүмер уҙҙыраһың. Йәки йоҡлайһың. Эйе, йоҡлайһың — бер ваҡытта ла иртә тороп ҡырға сыҡҡаның юҡ. Бөтәһен түшәмдән алып яҙаһың.

Белә ине шул Йәрмит егеттең йөрәгенә нисек сәнсергә! Иртә тороп йөрөүен дә күрмәмешкә һалыша. Бәхәс ыҙғышҡа әүерелә башланы. Коридорҙағы ағай-эне, ишекте һаҡ асып, берәм-берәм кабинетҡа эркелде, кәпәсте аҫҡараҡ баҫып ҡына, "хужа" менән хисапсы араһында барған дауҙы ләззәтләнеп тыңланылар. Йәрмит, тамашасыларынан теләктәшлек ҡаҙанырға тырышҡан артист һымаҡ, һәр һүҙен үҙенә файҙа килтерерлек итеп, һайлап ҡына ысҡындыра, ә сәме тоҡанып ҡыҙып киткән Ғәлим дә унан өҫтөн сығырға тырыша ине. Тойғоларҙың тап шул сатнау мәлендә генә парторг Рәүеф Бикмырҙин килеп инде лә, күҙлек быялаларын ипләп кенә яулыҡ осо менән һөрткән хәлдә, оҙаҡ ҡына, һүҙһеҙ, тыңлап ултырҙы ғауғаны. Һәм хисапсы үҙенең ҡолағы төбөндә уның уның тынысөнәфрәтен ишетте:

— Бес-совестный икән һин! Һинең ҡаршыңда ниндәй ҙә булһа урам малайы түгел бит — руководитель! Ә һин уның менән нисек һөйләшәһең. Бессовестный һин!

Ғәлимдең башына һуҡтылармы ни! Ҡаушаны, ни өсөн быndай нәфрәткә юлығыуын аңларға тырышып, үпкә ҡатыш әсенеү менән парторгтың йөҙөнә баҡты. Ләкин унда нәфрәттән башҡа бер ни ҙә шәйләмәне.

—Һеҙ бит ишетмәнегеҙ уның мине нисек мыҫҡыллауын! — тине йотлоғоп, күҙҙәренә йәш бөртөктәре яҡынлап килеүен тойҙо.

— Беҙ әле быға тиклем һинең грубый выходкаларыңа түҙеп килдек. Инде бюро ҡаршыһында яуап бирерһең! — тине Рәүеф Бикмырҙин.

— Беҙ һине бер таҡтаға баҫтыртып тикшерербеҙ һәм ҡыуып та сығарырбыҙ эшеңдән, хатта ауылдан! — тип өҫтәне Йәрмит. Ғәлим күкрәгендә был һүҙ ут йомарлағындай яндырып, эйәге май үҫентеле хәйләкәр әҙәмгә ҡарата ысын дошманлыҡ хисе уятты. Тауышының, ағыуланғандай, әсе үскә мансылып сығыуынан ләззәтләнеп әйтте:

— Бөгөндән сығарығыҙ. Рәхмәт әйтермен. Ләкин ауыл һинеке түгел — ата-бабам нигеҙләгән уны! Аңлашыламы?

Йәрмит яҡшы аңланы. Һәм аңлатырлыҡ яуапланы:

— Ләкин һин былай ғына ыҫҡынырмын тип уйлама. Сезон бөткәнсе эшләтеп, позор менән ҡыуабыҙ беҙ һине. Позор менән!

Рәйес менән парторг, бер төптән ҡуҙғалып, тышҡа сығып киттеләр, бухгалтер ҙа ҡуҙғалды.

Әгәр Йәрмит урынында ябай бер колхозсы булһа, Ғәлим, уның өлкәнлеген хөрмәтләү йөҙөнән, ауыҙы тулы ҡанды йотор, ыҙғышын туҡтатыр ине. Әммә аргументтарыңдың дөрөҫлөгөнә иманың камил була тороп та, ғәҙелһеҙлек ҡаршыһында сигенеү — ялағайлыҡҡа тиң хурлыҡ, тип һананы. Тыңлап ултырған колхозсылар һуңынан: "Әһә, батырланып йөрөнөң дә, түрә ҡаршыһында ҡойроҡто ҡыҫтыңмы? Арт яғың таҙа түгелдер, таҙа булһа, сикмәҫ инең!" — тип әйтерҙәр кеүек ине. Үҙ сиратында тотанаҡ эҙләп, шулар яғына күҙ һалды. Бында пожарник, төнгө ҡарауылсы, өлгөрмөш ғүмәр бабай һәм шуның кеүек башҡалар бар ине. Ҡараштарын йәһәт ситкә ҡасырҙылар, ә ҡайһылары асыҡтан-асыҡ хөкөм итеп ҡараны. Ғәлимгә был ярһып ҡыҙған башын бер күнәк боҙло һыуға сумырғандай киҫкен тәьҫир яһаны. Бөтә асыуы, дөрләү сәме — бышылдап һүнгән торомбашҡа оҡшап ҡалды.

— И улым, улым... Мин һине бер аҡыллы егет тип йөрөһәм, сәпсим пустой икәнһең. Йәшем алтмышты ашҡан — шулай ҙа мин колхозыбыҙҙың хужаһы булған кеше менән улай һөйләшергә баҙнат итмәйем. "Яманлыҡ яуға килешһен", тигәндәр боронғолар. Яҡшы итеп һөйләшергә кәрәк, улым.

Ғәлим шымды, күҙҙәрен сырт-сырт йомоп, оҙаҡ моңайып ултырҙы.

— Быйыл да икмәк ашай алмайбыҙ икән, тип һыҡтап йөрөүсе үҙең түгел инеңме, олатай? Әллә һин дә тере үлән араһына сәсеүҙе хуплайһыңмы?

— Сүп араһына сәсһәң, сүп ураһың инде ул... Мин дә тап шул турала һөйләшергә килгәйнем дә идараға... "Арыу итеп һөйләш", тигәнгә генә үпкәләргә ярамай, улым...

— һөйләшеп ҡара. Бәлки, тәмле ауыҙҙан сыҡҡан татлы һүҙ йомшартыр "хужа"Җдың сайыр ҡатҡан ҡолағын! — Ғәлим әсе йылмайҙы ла ишекте ҡатыябып сығып китте. Ҡолаҡтары сыңлап шаулаған хәлдә, бухгалтерия бүлмәһенә үтте лә өҫтәл эргәһенә ултырҙы. Ҡуйын дәфтәрен сығарып, дерелдәүек бармаҡтары менән аҡтарҙы. Ҡағыҙға яҙылғандар аңына үтеп инә алманылар.

— Йә, аҡылға ултырҙыңмы инде, егет, сводка бирәһеңме? — Өҫтәле артында бөксәйеп ултырған Ибәт һиҫкәндертеп өндәште.

— Ә? — Ғәлим мейеһенә бухгалтер һүҙҙәренең ҡабығы ғына керҙе, үҙәген һеңдермәне.

— Сәсеүҙе бөтөрөп сводка бирәһеңме? — тим.

— Әәә. Юҡ, бирмәйем.

— Бушҡа играть итәһең, егет. һинең биреп-бирмәүеңдән бер нәмә лә үҙгәрмәй. Уны һинән түгел, ә беҙҙән һораясаҡтар. Беҙ яуап бирәбеҙ отчетность өсөн. — Ибәт, зәһәр һалҡын йылмайып, уның күҙҙәренә текләне.

— Райкомды ҡыуыҡ мәғлүмәт менән алдаған өсөн һеҙгә ысынлап та яуап бирергә тура килер! — тине Ғәлим, Ибәттең үҙе кеүек үк һалҡын йылмайырға тырышып.

— Тимәк, юғарыға жалыу яҙмаҡ булаһың, егет? Яҙ, яҙ, һинең писанинаң барып еткәнсе, бойҙай ҙа сәселеп бөтәсәк. Тикшерергә килһәләр, үҙең тишек кәмәгә ултырырһың. "Клевета" тигән нәмәне ишеткәнең барҙыр бит һинең?

— Юҡ. Мин "мошенник" тигән һүҙҙе генә ишеткәнем бар.

— Ярлы икән телең.

— Подлецтар менән аралашмағанға күрә ул.

Ибәт телен тешләне, яңаҡтарын өрөлдөрөп, ҡағыҙҙары өҫтөнә эйелде. Йәнә башын ҡалҡытты ла тамағынан боҙ һалҡынлығы сығарып ғыжылданы:

— Һин улай, бағра кеүек, сәнскеләреңде тырпайтма — үҙеңә хуже будет. — Тауышы йомшай төштө. — Яҙ көнө, Һаҡмарҙан балыҡ үрләгәндә, һыуға мурҙа һалып ҡарағаның барҙыр бит? Шамбылар башы һыйған тишектән сығып тая, сөнки тиреһе шыма, лайлалы. Ә бағра, лайлаға бай булһа ла, тоҡондан ысҡына алмай — сәнскеләре тотоп ҡала. Үҙ сәнскеһе арҡаһында һәләк була ул. Бына һин дә хәҙер шул бағраға оҡшайһың. Һинеңсә, тормошта һәр кешегә шыма асфальт юл түшәлгән. Һәр кем, абынмай-һөрлөкмәй, шул төҙ юлдан барырға тейеш. Әгәр кем дә кем асфальттең ҡубырсыған ҡытыршыһына эләгеп, шул төҙ юлынан саҡ ҡына ситкә тайпылһа, уны янындағы иптәшенең “критика” тип аталған бағра сәнскеһе сәнсергә тейеш, шулаймы?

Ғәлим дә һыуына төштө:

— Яңылыш аңлайһығыҙ. Бағраға бит сәнскестәр үҙенең ҡан дошмандарынан һаҡланыу өсөн бирелгән. Ә мин дошмандар араһында түгелмен. Әгәр мин, күмәкләшеп һалып ятҡан дәү йортобоҙҙоң баҙыҡлығын ҡайғыртып, эргәмдәге ташсы-иптәшемдең ярыҡ кирбес тотҡан ҡулын ситкә этәрһәм, ул рыялы кирбесте ситкә ташларға мәжбүр итһәм, был һис тә һеҙ әйткән бағра сәнскеһе менән сәнсеү булып сыҡмай.

— Ләкин быны һинең иптәшең аңламаясаҡ. Ул, кеше араһында мәсхәрә иткәнең өсөн, ҡуйынында таш йөрөтәсәк.

— Ул да яңғыҙ йәшәмәй. Дөйөм йортобоҙҙоң именлеген ҡайғыртҡан һәр кем уға минең хаҡлығымды аңлатасаҡ һәм аҡрынлап ул быны төшөнәсәк.

Ибәт, сырайын һытып, кенәгәһен япты:

— Ярар, күп һүҙ — буҡ һүҙ, тигәндәр. Һинең урыныңда булһам, начальствоның һүҙен тыңлар инем, бригадаңда көндән-көн арта барған перерасходты ҡаплатыу сараһын яйлар инем. Сөнки норманан тыш яндырылған яғыулыҡ, трактористың ғына түгел, бригадир менән хисапсының да кеҫәһенә һуға. Ә шуны булдыртмау юлдары бар. Нисек итеп эшләргә икәнен мин һиңә өйрәтеп тормайым, сәйнәп ҡаптырғанды йоторға һәр кемең дә мастак ул.

— Аңланым. Эшләнмәгәнде эшләнде, тип, ялған нарядтар тултырырға тейешмен...

— Сәнскеңде тырпайтма, бригадирыңды тыңла. Дәүәй был юлда эт башын ашаған кеше ул. Элекке хисапсылар уның һүҙен тыңлай торғайнылар, шуға күрә һарыҡ та бөтөн, бүре лә туҡ ине. Начальство менән ыҙғышмай ине улар...

Ғәлим бухгалтерҙың тел төбөн яҡшы төшөндө. Түрәләр ҡушҡанса Юғарыға ҡыуыҡ сводкалар осорорға, перерасходты ялған эштәр күрһәтеп ҡаплатырға. Колхоз елкәһе ҡалын, көлләһөн дә күтәрә...

Сығып китейем генә тигәнендә, Ғәлимә килеп кереп һаулыҡ һорашты:

— Ниңә төҫөгөҙ ҡасҡан, ағай, әллә хисапсыбыҙ баш бирмәй ыҙалатамы? — тине Ибәткә.

— Тап өҫтөнә баҫтың, һеңлем. Сводка биреүҙән баш тарта.

— Бойҙай сәселеп бөттө, типме?

— Тап үҙе. Агрономдан йәшерен-батырын түгел, һеңлем: беҙҙең сводкала колхоздың сәсеү кампанияһы тамам. Ә был егет һаман шуны аңламай, бына бында тегеп ҡуйырға үҙенең сводкаһын бирмәй.

— Дөрөҫ эшләй. Тәүҙә йөҙ илле гектар бойҙайҙы сәсеп бөтәйек, шунан һуң сводка бирелер.

Ибәт ҡыҙға ғәйепләүсән текләне:

— Был ни һүҙ?! Етәкселәрсә алдан ҡарап фекер йөрөтмәйһең, һеңлем, ҡойроҡта һөйрәләһең. Районға беҙ бөтөрөп сводка бирҙек...

Ғәлимәнең күҙҙәре ялтыраны:

— Әле генә мин дә бирҙем... телефон аша. Йөҙ илле гектар сәсәһебеҙ бар, тиеп.

Бухгалтер, осаһына энә ҡаҙалғандай ырғып тороп, башын тотоп рәйес бүлмәһенә йүгерҙе. Колхозсылар хахылдап көлөп ҡалды.

# X

Йәрмит бала сағын хәтерләргә яратмай. Уның атаһын Кәкүк Вилдан тип йөрөтәләр ине, сөнки ул, ер талымлап, ғүмере буйына бер урындан икенсе урынға күсенеп йөрөнө... Вилдандың атаһы (ә Йәрмиттең ҡартатаһы) революцияға тиклем үк урта хәлле нығ ҡына ерекмән ине. Вилдан улын ул, арымай-талмай, хужалыҡ серҙәренә өйрәтте: үҙе фани донъяны ҡалдырып киткәнгә ҡәҙәр алтын ҡаҙығын ауылды дерһелкетерлек көслө хужа итеп өлгөртөргә тырышты. Ә Вилданы атаһының изге ниәттәрен аҡламаны: ул ялҡау ине. Улының эйелеп сыбыҡ һындырырға ла яратмауын, көллө ғүмерен йылға буйында балыҡ ҡармаҡлап йәки бай малайҙары менән сәкән һуғып үткәреүен күргән ҡарт, өмөтһөҙләнеп, түшәккә ауҙы ла, бер йыл самаһы ниндәйҙер йәшерен сир менән эстән һыҙып ятҡас, мәшәҡәтле фани донъяны улының ҡарамағына ҡалдырҙы. Атаһының үлемен Вилдан ысын һөйөүсән бала хәсрәте менән күтәрҙе. “Бынан һуң игенде кем сәсер, бесәнде кем сабыр?” тип ҡайғырҙы ул, ҡарттың иртә китеүенән әсенеп. Шулай хәсрәтләнеп ҡыш үтте, яҙ етте. Йылы Ҡояш, һары һыйыр телен һуҙып, ерҙең йөнтәҫ арҡаһын ялай башланы. Тау биттәре көндән-көн Вилдандың бауырын һыҙлатып ҡарайҙы.Апрель аҙаҡтарында Ҡояш үҙ эшен тамамланы. Инде һабансылар ер арҡаһын ағас һабандар менән сыйып, ҡар аҫтынан ялығып сыҡҡан ер-әсәгә, аҫырап үҫтерергә, гәрәбә орлоҡтар игергә тейештәр ине. Вилдандың күрше-күләне һабандарына тмер төрән ҡаҙаҡланы, тырмаларына осло тештәр ҡуйҙы. Вилдан, ҡото осоп, тиҙҙән үҙенә лә шуны эшләргә кәрәклеген шәйләне. Ҡарттан ҡалған бура төптәре таҡырланғайны инде, малай ялларлыҡ хәл юҡ ине. Күп уйланып йөрөгәс, ҡартайыуҙан алйый башлаған әсәһенә үҙенең өйләнергә йыйыныуын белдерҙе. Быжырлығы арҡаһында онотолоп ҡартайып барған Мәхүбә исемле бер етем ҡыҙ бар ине ауылда. Уның ун дүрт йәшлек энеһе бар ине һәм улар икеһе тиң эшкә бик салт булып, үҙ донъяһын үҙҙәре көтөп тора инеләр. Вилдан хәләл ефетлеккә бына шул ҡыҙҙы һайланы һәм, беренсе бураҙнағаса туй яһап, өйләнеп тә алды. Мәхүбә был йортҡа мәһәр итеп үҙенең һәм энеһенең эшсән ҡулдарын килтерҙе. Ошо ваҡиғанан һуң Вилдан атай үлеме килтергән хәсрәтте өс йыл буйына онотоп йәшәне. Сәүит тип аталған , яңы хакимиәт тә уға ҡырын ҡарамай, ваҡытында ситсаһын, һабын-шырпыһын килтереп тора, юҡсылыҡ йылда орлоҡ менән дә тәьмин итә, ә “ысхут” тип аталған йыйындарҙа уға иң алдағы, элек имам хәҙрәт менән тирмәнсе бай ғына ҡуҡырайып ултырмалы хөрмәтле урынды бирә торғайнылар. Сөнки ул хәҙер “битнәк” (ярлының-ярлыһы) тип атала ине. Шул йылдарҙа аңланы ул “битнәк” исеме күтәреүҙең тәнгә сихәтле икәнен.

Көндәрҙән бер көн Вилдандың ҡәйнеше “хамсамул»ға яҙылды һәм, тимер төрәнле һабанды Вилдандың үҙ ҡарамағына ҡалдырып, әллә ниндәй “магнит тау»ға әллә ниндәй “завот” төҙөргә тип ситкә сығып китте. Был ваҡытта уларҙың Йәрмит исемле йүгереп йөрөгән улы бар ине инде, ә Мәхүбә, ире урынына китеп тирмән тартҡанында ҡапсыҡ күтәрәм тигәнсе билен биртендертеп, ауыр эшкә яраҡһыҙ булып ҡалғайны. Был хәл Вилдандың биленә һуҡты, донъяһын бөлгөнлөккә төшөрҙө, ул уғата “битнәгерәк” булып ҡалды. Хәҙер ирең “ысхут”тарҙа, түбәндәге халыҡ араһында түгел, ә юғары сәхнәлә, ауыл Советы рәйесе менән бер ҡатарҙан буй эскәмйәлә ҡуҡырайып ултыра, ә һөрәнләп ҡысҡырышҡан саҡтарҙа уның әсе тауышы дөйөм шау-шоу араһынан, ауылдағы иң шөңгөр әтәстекеләй, башҡаларҙыҡынан элеккегә ҡарағанда ла айырылыбыраҡ ишетелә

ине. Эштәр һаман ошолай барһа, ул, бәлки, “сәүит” урынбаçары дәрәжәһенәсә күтәрелер ине лә... Көтмәгәндә мал-тыуарҙы бер дөйөм һарайға ябып, “халхуз” тигән нәмә ойошторҙолар, ошонан һуң, хәҙер инде “йыйылыш” тип аталған “ысхут”тарҙа уның ултыра торған урыны һәр көҙ һайын арткараҡ күсә барҙы. Көҙгө уңыш бүлгән һайын, элекке “битнәк”тәрҙең тырыш-тарамыштарының тормошо күҙгә күренеп көрәйҙе; улар инде шөйлә иркенерәк һулап, күкрәктәрен киреберәк йөрөйҙәр, шанлы “битнәк”лектәрен дә онотоп, элекке мөслө байҙарҙыкынан да мөслөрәк доньъя көтәләр, шатлыҡлыраҡ ҡысҡырып көләләр, тик, ниңәлер, Вилдан ғына һаман “битнәктең-битнәге” көйөнсә ҡалып, күшеккән тауыҡтай сөршәйеп йөрөй бирә. Күкрәп йылдар уҙа торғас, “битнәк” исеменең элекке абруйы тамам Юғалды, әүәлге “битнәк”тәр хәҙер инде мул тормошло “ударник”тарға әүерелеп, Вилдандың һаман “битнәк” булып йөрөүенән эстәрен тырнап көлә башланылар. Ауылдағы “колхоз идараһы” тигән бер ҙур өйҙә аҡбур һыҙып яҙмалы ике ҙур таҡта барлыҡҡа килде, уларҙың береһе — ҡыҙыл, икенсеһе ҡара төçкә буялғайны. Ҡыҙл таҡтаға матурлап “ударник”тарҙың исем-фамилияһын яҙалар, уларҙы ҡыҙыл трибунанан, хатта радио аша маҡтап һөйләйҙәр, байрамдарҙа хөрмәтләп бүләкләйҙәр; ә ҡара таҡтаға , яңы заман “битнәг”е Вилдандың исеме теркәлә лә бөтөн ғәләмгә фаш итеп уны әрләйҙәр, “луҙыр” тип көләләр ине. Оҙаҡламай уны шулай “луҙыр” тип кенә атай башланылар. Заманында “битнәк”лектең татлы емешен ейеп күнеккән Вилдан күңеле күтәрә алманы быны, ул уйға ҡалды. Ҡырҙа ыңғырашып һабан һөрөп йөрөгәненә уға: “Ыстансыла бесән төктәрен өйгән ергә бесән ҡарауылсыһы кәрәк икән” тип ишеттерҙеләр. Ә ошоғаса янғын һүндереүсе булып ҡалансала төйәкләнергә хыялланып йөрөп тә, моратына ирешә алмаған Вилдан, аяҡтарына текләп, дала эçеһенә сөрөшөүҙән ҡарт әбейҙең тештәре кеүек һирәгәйеп ҡалған сабатаһының табанын бейәһе артынан шабырҙаған шыйыҡлыҡҡа сылата-сылата хыялланып торҙо ла хас та “ударник”тарса сыртлатып төкөрҙө ергә. Ваҡытынан элек эшен туҡтатып, сыбыртҡыһын һабан тотҡаһына элеп, бураҙна буйынса яй ғына тәпәйләне.

— Ҡайҙа тайҙың, ағай? Ярыш байрағына етмәнек бит әле! — тип ҡысҡырып ҡалды уның артынан ат ҡыуыусы малай һәм ике ыҙан араһында үҙҙәрен ялҡынлы хеҙмәткә саҡырып ялпылдап торған ҡыҙыл әләмгә төртөп күрһәтте. Был әләмде яулау өсөн, беренсе булып шунда ҡәҙәр һөрөп барып етергә кәрәк һәм ул йола “социалистик ярыш” атала ине. Һалмаҡ елдә ҡыҙыл ҡарға ҡанатылай көйәç-көйәç ялпылдаған ул тынғыһыҙ сепрәкте күреү Вилдандың аҙымдарын уғата ҡыҙыулатты. Сөнки байраҡ, ялпылдағаны ғына һайын, “битнәк-битнәк” тип унан көлгәндәй...

Вилдан өнһөҙ бойоғоусы серек өйөнөң ҡарындыҡлы тәҙрәләренә арҡыс-торҡос таҡта ҡаҙаҡланы ла бисәһе менән малайын һәм барлы-юҡлы ҡаралтыһын яңғыҙаҡ Хәсән биреп торған арыҡ арбаға тейәп, ҡараңғы бер төндә ауылдан олаҡты. Шул китеүҙән оҙаҡ йылдар кире әйләнеп ҡайтманы. Бесән өçтөндә серем итеп ятып ҡына тамаҡ туйҙырыуын доньъялағы иң ҙур бәхет һананы. Тик был бәхете лә оҙаҡҡа барманы: тәмәкеһенән ут ҡабып, төкләргә тип килтереп бушаткан бер йөк бесән янып китә яҙҙы — саҡ һүндереп алдылар. Шунан һуң ул бынан да сығып китте...

Бер урындан икенсеһенә күсенеп, һаман бәхет эҙләне, шул арҡала “Кәкүк” тигән , яңы ҡушамат та алды, әммә ҡайҙа ла был ер өçтөн бер үк Ҡояш яҡтырта икән... Аҙаҡ килеп: “Мин — бәхетһеҙ. Мин — даланһыҙ”, — тигән нәтижәгә килде ул...

Вилдан улы Йәрмит үҙенең бала сағының беленер-беленмәç тәүге хәтирә һыҙаттарын яҡынса шул осорҙан башлап хәтерләй. Ә был хәтирәләрҙе иçкә төшөрөү — серек помидор ҡабыу һымаҡ яғымһыҙ ине уға. Атаһын шул йәнгә тейгән “Кәкүк”тән башҡа исемләмәй торғайнылар. Ғәрле ләкәп аҡрынлап үҙенең йәбешкәк ҡулдарын

Вилдан улы Йәрмит итәгенә лә һуҙҙы. Йәрмитте лә "Кәкүк малайы" тип, һуңынан ябай ғына "Кәкүк" тип йөрөтә башланылар. Иҫке ҡуласа әйләнеп килеп баҫты...

Был ваҡытта Йәрмитебеҙ урта мәктәптең һигеҙенсе синыфында уҡып йөрөй ине инде. Егет булып етеп килгән кешегә бындай ҡушамат күтәреп йөрөүе бик ғәрле ине. Ә шулай ҙа уны төйгөсләгән яҙмыш уҫмаҡтары араһында бынығынан да яманыраѓы бар — атаһынан мираҫ булып ҡалырға торған әсе "нужда һурпаһы"... Кәкүк Вилдан, шулай итеп, тәки мандый алманы шул; донъялар шөйлә уңалып, тормош һаман еңеләйеп барыуға ла ҡарамаҫтан, ғаиләһен өҙөлмәҫ ҡара юҡсылыҡ эсендә интектерҙе. Йәрмит иһә әшнәләре өҫтөндәге кейемдең, һүреүе сыға башлаѓас та, йәһәт , яңыға алмаштырылыуын, улар ашаған икмәктең мамыҡтай йомшаҡ һәм аҡ булыуын күреп ҡыҙыҡты күҙе. Мәктәптә ул үҙ икмәген, ҙур тәнәфестә, оғро кеүек ситкә китеп, йәшереп ашай ине. Өҫ-башы үҙенекенән арыуыраҡ булған иптәштәренә ҡарата эсендә йәшерен үс һаҡлап йөрөүсән булды. Уларҙы, гәрсә ябай колхозсы йәки эшсе ғаиләләренән икәнлектәрен белһә лә, үҙенсә кәмһетеп, "серек интеллигент балалары" тип баһаланы, үҙен-үҙе шуға ышандырырға тырышты. Шул уҡ ваҡытта үҙе, барлыҡ көсөн һалып, шулар ҡатламына күтәрелергә — интеллигент булырға хыялланды. Уның фекеренсә, ғаиләләге муллыҡ — интеллигент йәки начальство категорияһында йәшәүселәрҙең өлөшө ине. Уҡытыусыларының бүтәнсә өйрәтеүен Йәрмит емештең эсендәге һуты өсөн ҡуша ҡабырға тура килгән татһыҙ ярыһы итеп кенә ҡабул итте. Ҡайһы бер Еңел уйлаусан әшнәләренән айырмалы буларак, мәктәпте ул белем алыу төйәге итеп кенә ҡараманы. Мәктәп уның өсөн киләсәктә еңел шәхси тормош яулау ҡоралын сүкеү тимерлеге һаналды. һәм ул теше-тырнаѓы менән йәбешеп ятып сүкене шул ҡоралды. Һабаҡташтарының күбеһе, етенсене тамамлаѓас уҡ, еңел тойғо менән ҡанатланып тракторға ултырҙылар йәки һәнәк-көрәк тотоп мал тирәһенә киттеләр. Йәрмит, һыңар күҙе менән генә йылмайып, уларҙың алйотлоғо тураһында уйланы. Ленин бабай һүҙҙәрен иҫтә тотоп, уҡытыусы булып сыҡҡанға тиклем уҡырға, уҡырға, уҡырға ҡарар итте ул. Уҡытыусы — Йәрмит уйынса иң еңел хеҙмәтле, шул уҡ ваҡытта ҙур килемле интеллигент ине.

Педучилищене тамамлап сыҡҡас, Йәрмит, тыуған ауылынан ете генә саҡрым алыҫлыҡта, ауыл башланғыс мәктәбенә уҡытыусы булып килде. Мәктәп директоры йомшаҡ ҡына холоҡло ҡатын кеше ине. Йәрмит уның мәктәпте һылатыу, утын әҙерләү мәсьәләләренә һалҡын ҡарауы тураһында роноға оҙон-оҙон шикәйәттәр яҙып ебәрә башланы. Килгән инспекторҙарға ла "эске етешһеҙлектәр", "ҡулланылмай ятҡан резервтар" тураһында сағып, аҡыллы фекерҙәр ҡуҙғата торған булды. Һөҙөмтәлә роно эшмәкәрҙәре мәктәпкә энергиялы, булдыҡлы, аҡыллы педагог килгәнен аңланылар. Әжере оҙаҡ көттөртмәне: йомшаҡ холоҡло ҡатын урынына мөдир итеп Вилдан улы Йәрмит тәғәйенләнде. Ә алдағы уҡыу йылында мәктәпте ете йыллыҡҡа әүереллерҙеләр һәм Йәрмит директор креслоһына менеп ултырҙы. Бер шатлыҡҡа икенсеһе ялғанды: партияға кандидатлыҡ танытмаһын тулы хоҡуҡлы ағзалыҡ билетына алмаштырҙы ул. Хәҙер Йәрмиттең үҫеше өсөн аҡ юл асылғайны инде. Тамам ысын интеллигент булыу өсөн, юғары белем алаһы ғына ҡалды. Директор окладын һәм дәрәжәһен ҡалдырып киренән уҡыу йортона кереү Йәрмитте һис рухландырмай ине, әлбиттә. Бүре лә туҡ, һарыҡ та бөтөн ҡалһын өсөн, ситтән тороп уҡырға булды. "Ни тиһәң дә, ундайҙарға талаптар ҙа кәмерәк", тип фекер йөрөттө. Яҡшы "үҫеш" өсөн юғары белемгә генә эйә булыуҙың етмәүен, партлиния буйынса ла өлгәшергә кәрәклеген һиҙенеп, "йәмғиәт эштәре" тип аталған тармаҡта ла үҙен танытырға тырышты. Колхоздағы етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләп, район гәзитенә мәҡәләләр яҙып торҙо, партияның райком вәкилдәре ҡатнашлыҡ иткән йыйылыштарҙа колхозсыларҙы "планды арттырып үтәргә", "хеҙмәт

уңыштарына ирешергә" саҡырып ялҡынлы телмәрҙәр һөйләне. Үҙенең "эш итогоһы"н бүтән агитаторҙарҙыҡына ҡарағанда һәр ваҡыт артығыраҡ итергә тырышты, уңайы тура килгән һайын, тыңлаусыларын энциклопедия томдарынан һоҫоп алған төрлө мәғлүмәттәре менән шаҡ-ҡатырҙы. Ошо юл менән ул колхоз партойошмаһының секретаре (парторг) дәрәжәһенәсә иреште. Инде колхоз күләмендә лә тәьҫире ныҡ киңәйҙе. Колхоз тормошоноң бөтә мәсьәләләре буйынса ла кешеләр уның абруйлы фекеренә мохтаж була торған булдылар. Шул парторг итеп һайланған йылдың көҙөндә ул Уральск пединститутының тарих факультетын тамамлауы тураһында диплом алып ҡайтты. Уҫал телдәр уның кеҫәһендә ятҡан алтын буталлы был "ҡатырға"ның бик үк таҙа булмаған юлдар менән алынғанлығын бәйән иттеләр, ләкин был һүҙҙәр — ябай һүҙҙәр генә ине, ә диплом — тормоштоң бик күп мөмкинлектәрен һәм хоҡуҡтарын ҙурайтҡыс линзалағы ҡояш нурҙары кеүек итеп бер нөктәгә туплаған матди ҡиммәт булып, һәр аҙымда хужаһына тоғро хеҙмәт итергә әҙер тора. Йәрмит ошо йылдарҙа: "Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын", — тигән иҫке мәҡәлдең йөкмәткеһен бик яҡшы үҙләштерҙе. Район үҙәгендә хәҙер уның "дуҫы" йәки "танышы" ултырмаған учреждение һирәк ине. "Илдән берәр һүренте", тигәндәй, ул үҙенең ошо таныш-белештәренән мул ғына уңыш йыйнаны. Ҡылыҡ-киҙәнештәре ҡыйыуланды, һүҙҙәре үҙ-үҙенә тәрән инаныслы яңғыраны. Ир үҙендә ҙур көс уяныуын һиҙҙе һәм юҫығын һәр урында ҡыйыу рәүештә үткәрҙе. Уҡытыусылар коллективын, аҡрынлап, үҙе менән килешә алмаған, йәки үҙенән артыҡ белгән бәндәләрҙән арындырҙы. Шулай уҡ колхозда ла етәкселек рычагы тирәһенә үҙенә яраҡлы элементтарҙы тупланы. Уның өҫтөнән бирелгән жалыуҙар, броняға бәрелеүсе пуля кеүек, һис бер зыян килтермәй кәйлектеләр.

Йәрмит "үҫеш"е шулай күкрәп сәскә атҡас ҡына, "утыҙ меңсе" рәйес килде колхозға. Элекке МГБ капитаны булып сыҡты ул. Быны белгәс, Йәрмит ҡойроҡто ҡыҫа төштө, , яңы "хужа"ның йөрәгенә юл эҙләне. Ләкин , яңы рәйескә тышҡы ялтырауҙы тойоу һәләте етмәне. Ул, парторгының сағыштырғыһыҙ сағыу сифаттарына иғтибар итмәҫтән, Йәрмит тырышып төҙөгән сәйәси бинаның стеналарын аҙаҡҡы кирбесенә тиклем һүтеп ташланы. Ярыҡ кирбестәр йәтешләнгән урындарынан ҡуптарылып, ситкә бырағтырылды. Йәрмит тә ярыҡ кирбестәр иҫәбенә инде: уның урынына парторг итеп Рәүеф Бикмырҙинды һайланылар — МГБ-нан сыҡҡан был , яңы һепертке, һис шикһеҙ, сүпте һепереү яғын яйланы. Ләкин был рәхимһеҙ сантаҙартыу аҙағынаса еткерелмәне: эшләй башлауына бер йыл да үтмәҫтән, кинәт кенә, рәйес үлеп китте. Райкомсылар уның урынына, әлбиттә, юғары белемле, энергиялы, ошо уҡ колхозда парторг булып эшләү тәжрибәһенә эйә булған, тимәк, ауыл хужалығын һәм колхоздың бөтә йомшаҡ яҡтарын ҡулындағы биш бармағылай белгән Йәрмиттән дә арыуыраҡ кандидатура таба алманылар. Йәрмит, директорлығын , яңы парторг Рәүеф Бикмырҙинға тапшырып, тағы ла ҙурыраҡ окладлы һәм дөйөм хужалыҡ байлыҡтарына ла "хужа" — "утыҙ меңсе" рәйескә әүерелде. Шулай асылды ҡаршыһында , яңы "үҫеү" офоғо...

Йәрмит электән командалыҡ ҡылырға, "үҙ рухына массаларҙы буйһондорорға" ярата ине. , яңы вазифаһы элекке мәктәп директоры эшмәкәрлегенә ҡарағанда ла киңерәк офоҡтар асты. Инде уның ҡулы аҫтында ете-һигеҙ уҡытыусынан торған бәләкәс колектив түгел, ә бөтә төбәк халҡы тупланды. Йөҙәр мең һумлыҡ байлыҡтар уның ҡулы аша үтә торған булды. Йөҙәр төрлө үҙ өмөтөн һәм кисерештәрен һаҡлаған йөҙәрләгән ғаилә яҙмыштары уның ҡарамағына тапшырылды. Ул хәҙер уларҙың бәләкәс хоҙайы, һәр төрлө белемдәргә зирәк аҡылы менән киләсәктә тура юлдар һыҙып бирә торған юлбашсыһы булып әүерелде. һәм ул ошо бөйөк миссияһын үтәүҙә йәнен-тәнен аяманы. Уның барлыҡ хыялы, бөтә энергияһы, тап һөйөклө партиябыҙ бойорғанса, колхозсыларҙың киләсәк — эйе, *киләсәк!* — быуындарына яҡты тормош төҙөүгә

йүнәлдерелгәйне. Матур йорттар, ыҫпай кейемдәр — килер быуындар өсөн! Туҡлыҡлы аҙыҡ һәм ғаилә бәхеттәре — килер быуындар өсөн! Гүзәл сәнғәт мөғжизәләрен ҡарап ләззәтләнгән күңелле ял минуттары — килер быуындар өсөн! Хәҙерге быуын, билбауҙы ҡыҫыбыраҡ быуып, өҙләкһеҙ эшләргә лә эшләргә тейеш. Зауыҡлы ял кәрәк, тиһегеҙме? Ике эш көнө араһында бер мәртәбә бисә ҡуйынында баш аҫтына йоҙроҡ ҡуйып хырылдап үткәргән ябай ял да еткән һеҙгә. Зауыҡлыһын килер быуындарға ҡалдырығыҙ. Яҡшы кейем, тиһегеҙме? Эштә һырған көпәйкә менән ситса салбар ҙа ярай. Хатта уңайлыраҡ та улар. Ә пальто менән йөн костюм — килер быуындар кейеме! Аҙыҡ тураһында һорайһығыҙмы? Хәҙерге быуын ҡара икмәк менән грузин сәйе эсеп тә йәшәй ала. Врачтар, грузин сәйе йоҡо килтермәй, тиҙәр. Тимәк, килер быуындар өсөн янып хеҙмәт итергә сәм бирә! Ит, май, йомортҡа кеүек юғары калориялы аҙыҡтар — килер быуындар файҙаһына ҡалдырылһын. Сөнки улар Марсҡа осасаҡтар. Бөтәһе килер быуындар өсөн! Йәшәһен килер быуындар! Ә хәҙерге быуындың билбау аҫты бушағыраҡ булғаны яҡшы: туҡ кеше эшләмәүсән була ул!

Шулай уйланы Вилдан улы Йәрмит хәҙерге быуындың тормош шарттары хаҡында. Ул үҙенең ошо теорияһын партияның генераль линияһына һәр яҡтан тура килтереп, йәпләштереп ҡуя белә. Килешмәүселәрҙе “аполитичность”, “хвостицизм” мөһөрҙәре менән тамғалай. һәм был дөйөм теорияла ябай халыҡ тигән киң даирә өсөн асылмаҫ сер булған бәләкәй генә лирик сигенеш бар ине. Был сигенеш — Йәрмиттең үҙе кеүек үк интеллигент әхлаҡлы лирик геройҙар хаҡында. Интеллигент — ул юғары белем эйәһе. Ул үҙенең аң-белеме буйынса хәҙерге быуындан айырылып алға сыҡҡан, йәғни ул хәҙер үк килер быуындар заманаһында — коммунизмда йәшәй. Шулай булғас, уның тормош шарттары ла килер быуындарҙыҡы — яҡты коммунизм осорондағы һымаҡ булырға тейеш. Ул килер быуындар кейәсәкте кейергә, килер быуындар ашаясаҡты ашарға — бер һүҙ менән әйткәндә, мораль яҡтан ғына түгел, материаль яҡтан да килер быуындар паегы менән тәьмин ителергә тейеш. Шул шарттарҙа ғына ул хәҙерге быуынды етәкләй ала, килер быуындар күҙе менән зирәк ҡарап, коммунизмға тура юл күрһәтә ала!

Был һоҡланғыс лирик тайпылышты Йәрмит, үҙенең лирик шәхесе өсөн, эҙлекле рәүештә тормошҡа ашырҙы. Яҡшы бала тәүҙә үҙенең тыуҙырыусыларын ҡайғырта, тиҙәр. Колхоз машинаһына тейәп оҙатылған колхоз ағасы тиҙҙән кәкүктәр ауылына ҡайтып, Кәкүк Вилданды ҡартайҡан бөкөрө өйҙөң серек ҡабырғаларын һипләтте. Туҡһан йәшлек ҡарт өй ғорурланып билен турайтты, тәҙрәләр, арҡыс-торҡос таҡталарынан арынып, быяла күҙҙәрен ялтыратып көлөп ебәрҙе. Ҡарт Кәкүк, ниһайәт, станциялағы ҡабат барып оялаған бесән ҡарауылсылығын ташлап, тыуған ояһына ҡайтты. Ләкин был юлы уны, ҡасандыр илдән сығып киткәнендәге кеүек, яңғыҙаҡ Хәсәндең күсәрҙәре майһыҙлыҡтан сыйылдап торған арыҡ арбаһы түгел, ә буяуҙары күҙҙең яуын алырлыҡ, ултырғанда арт яғың мамыҡ өйөмөнә ырғытылған суйын герҙәй батып китеүсән йомшаҡ урындыҡлы “газик” килтереп төшөрҙө. һәм күп йылдар татлы ризыҡ тәтемәгән етем өйҙә шат усаҡтар ҡабынып, Вилдан ҡарттың танауына улының колхоз келәтенән килеп еткән һимеҙ һарыҡ түшкәһененең тәмле араматы ҡағылды.

“Яҡыныңа ярҙам ит, ләкин үҙеңде лә онотма”, ти бит мәҡәл. Күпме мөмкин, үҙ нигеҙеңдә һалмай, бураңды күтәрмәй, колхоз өйөндә фатирсы булып торорға?! Йәрмит, хөрмәтле атаһының йәнен тындырғандан һуң, үҙ эштәрен уғата сәмлерәк юлға һалырға кереште. Был саҡта инде уның йәш кенә хәләл ятрыһы — һылыу бисәһе бар ине, эш бына шул һандуғас затын һайрамаҡҡа арбау өсөн алтын ситлек ҡороуҙа ғына ҡалғайны. Ул йөрөгән ерҙәрендә осраҡҡан һәр бер зиннәтле йорттоң уға күркәмлек биреп тороусы иң үҙәк элементын, Йәрмит һүҙе менән әйткәндә, сәскәһен өҙөп, хәтер моҡсайына туплай барҙы һәм мөҡәддәс хыял дәфтәренә буласаҡ һарайҙың шул сәскәләрҙән генә төҙөлгән

гөлләмәһен — гүзәл контурын һыҙҙы. Әммә кәкүклек тәбиғәте үҙен барыбер танытты: был алтын нигеҙ, төбәктә төпләнеп ҡалыу өсөн түгел, ә күсенгәндә һатып аҡса итеп алып китеү өсөн һалынған капитал ине...

## XI

“Дуҫлыҡ” колхозында яҙғы сәсеү етәкселәр юғарыға биргән сводкалағынан бер аҙнаға һуңлап тамамланды һәм райондың күсмә Ҡыҙыл байрағы тәтемәне. Колхоздың исеме йылдағыса район гәзитенең “Хөрмәт таҡтаһы”на ла теркәлмәне. Бының өсөн, баҫыуҙарҙағы эштәрҙең барышы түгел, ә иҫәп-хисаптың торошо — “эштәр эшләнеп тә, үҙ ваҡытында сводка бирмәү” ғәйепле, тип һөйләнеләр һәм был “енәйәтсел әрпешлек” өсөн беренсе сиратта “үҙ вазифаһын дөрөҫ башҡармаған” хисапсыны һәм уны “дөрөҫ ҡалыпҡа ултырта алмаған” бухгалтер менән агрономды ғәйепләнеләр. Күренеүенсә, таяҡтың башы иң әүәле Ғәлим башына төштө. Колхоз идараһы тирәһендәге түрә-ҡара һәм уларҙың ҡойроҡтары сәйнәгән ғәйбәт ине был, әлбиттә. Ә ябай халыҡ, ғәҙәттәгесә, күп көс һәм көсөргәнеш талап иткән, ерекмән өсөн иң яуаплы булған яҙғы сәсеүҙең, ниһайәт, осланыуынан ҡыуанды һәм үҙенең иң ҙур байрамдарының береһен — һабан туйын дәртләнеп көттө.

Бына был шатлыҡлы көн дә гөрләп килеп етте. Күк йөҙө зәңгәр-аяҙ, шунда көлкеп йөҙгән ҙур йомарлаҡ майҙай көләс Ҡояш ерҙе йылы нурҙарына күлкетә. “Ыш!” иткән дә ел юҡ, донъя һил. Аллы-гөллө сәскәләргә күмелгән туғайлыҡта һыу буйында кистән ҡаҙып әҙерләп ҡуйған оҙонса ер-усаҡтарға ауылдағы ҡаҙандарҙың иң ололарын килтереп ултырттылар. Колхоздың наҡыҫ һауынлы бер һыйырын етәкләп килтереп, саҡ ҡына ситтәрәк ҡыуаҡ артында һуйып ботарланылар ҙа, ҡаҙандарға тултыра аш һалып, усаҡтарҙы дөрләттеләр — ауылдың аш-һыуға иң оҫта ҡатын-ҡыҙҙары яуаплы һәм һауаплы эшкә тотондо. Олон әйләнәһе өс-дүрт ҡолас йыуанлыҡ, ялбыр ябалдашы күккә олғашҡан иң дәү тирәк төбөнә ҡыҙыл буҫтау япмалы оҙон өҫтәл ултыртып, радиоалғыс ҡуйҙылар, яғаһы аҫтына “төшөргөләп” саҡ ҡына ҡыҙмасаланып өлгөргән тракторист Насрый баҡыр антенна сымының бер осон ауыҙына ҡабып, дәү тирәк башына бесәйҙәй үрмәләне лә ботаҡтарҙың өҫтәл тәңгәлендәге береһенә беркетте. Парторг Рәүеф Бикмырҙин радиоалғыстың ҡолағын борғослағайны, ҡапыл көллө әрәмәлекте Өфөләге сыңрау моңло Камил Вәлиевтың Шәйхзада Бабич һүҙҙәре менән Хөсәйен Әхмәтов көйөнә һалынған саф ауазы шаңғыртты:

Айға үрләп, нурҙа уйнап,
Күкрәгемде нурланым.
— Ит ғәфү әй, Ай, — тинем мин, —
Нурҙарыңды урланым.

— Һис зарар юҡ, ал, — тине Ай, —
Ал да сәс нур халҡыңа;
Мин дә бит төн хаҡына
Алдым Ҡояштың нурҙарын.

Бабич рухы кешеләрҙең йөрәгенә үтеп инде, был донъя һәм ундағы үҙенең урыны тураһында тәрәнерәк уйланырға этәрҙе. Шул хистәрҙән тулҡынланған Ғәлим мыжғыу халыҡ араһынан һағыныслы һылыу йөҙҙө — Ғәлимәне эҙләне, тик осрата алманы. Хуш

еҫтәрен аңҡытҡан ҡыуаҡлыҡтар араһындағы аҡландарҙа ихлас серләшеп ҡыҙырыусы байрамсылар араһынан йырып үтеп, магазин палаткаһы алдына килде, унда күк халатлы Иван Иванович тәм-том һәм хәмер менән сауҙа итә, теләгәндәргә шешәнән ҡойоп та бирә. Ситтәрәк бер төркөм тракторист егеттәр, күңелле гөжләшеп, бер шешәне сиратлашып "гурлы"һынан бушата.

— Әй, сажин түрәһе, һыйлайһыңмы әллә беҙҙе? — тип һөрән һалды Насрый.

— Ҡуй, борсома. Солярка, бензин, автол ғына ҡойоп бирә бит ул.

— Закускаһына солидол һылап ебәрә! — Хахылдашып көлдөләр. Насрый тағы телләште:

— Әсәһенең улы бит ул — дүрт йыл буйы флотта ла диңгеҙ һыуы ғына һемереп йөрөгәндер!

Ғәлим Иван Иванычҡа өс һумлығын һондо ла, бер ҡулына — "ярты", икенсеһенә стакан тотоп, егеттәргә яҡынланы, соҡортайҙы яртылаш тултырҙы:

— Йә, кемебеҙҙән башлайбыҙ?

— Минән, әлбиттә! — тине Насрый, ҡулын ҡабалан һуҙып.

— Ярай, алайһа, — тине лә Ғәлим, "утлы һыу"ҙы үҙенең тамағына аҡҡарҙы. — Диңгеҙҙекенән ҡайтышыраҡ икән шулай ҙа, — тигән булды.

— һай, маладис икәнһең дә, белмәйерәк йөрөгәнбеҙ!

— Белерһегеҙ! —Ҡомһоҙланып яланып торған Насрыйға шешә менән стаканды тотторҙо. — Ҡалғанын үҙегеҙ самалағыҙ, бөркөттәр.

Иртәнсәк йүнләп ашамай киткәнгәме, эскә яндырып төштө лә башты еңелсә әйләндерҙе. «ғиззәт ағайым кеүек, гелән уларға ҡушылып эсеп йөрөһәм, яҡшы хисапсы булаһым икән дә ул... — тип йылмайҙы. — Юҡ, уныһы булмай минән!"

Түңәрәк аҡландарҙа дәртле гармун, ҡурай моңдары тирбәлде, парлашып бейеүҙәр ҡыҙҙы. Бер киң майҙанда баһадирҙар суйын гер күтәреп көс һынашты; аяҡтарға тоҡ кейеп йүгерешеү, күҙ бәйләп сүлмәк ярыу, баҡанға үрмәләү уйындары гөрләне. Ара-тирә ваҡытынан элек иҫереп туйтанҙаған, хатта ҡыуаҡ төбөндә төңкәйгән ир-ат та салынды күҙгә. Атҡа менеп бәйге сабыу ғына юҡ — һуғыш йылдарында аттарҙы Ҡыҙыл Армияға алып киткәс, ҡабат ялғана алмай әле был йола...

— Яҙғы сәсеү алдынғыларына бүләк бирәләр, ти! — Сәмле хәбәр таралды ла халыҡ ҡыҙыл буҫтаулы өҫтәл ҡаршыһына ағылды. Унда, өҫтәл ҡырына ҡарғаларҙай теҙелеп, колхоз рәйесе Йәрмит, парторг Рәүеф, бухгалтер Ибәт һәм колхоз идараһының бер-ике ағзаһы ултыра. Баҡтиһәң, ҡәҙимге ялҡытҡыс оҙон доклад һөйләнеп бөткән дә бүләкләнеүселәрҙең исемлеген тотҡан рәйес бәхетлеләрҙе өҫтәл ҡырына саҡырып килтерә башлаған. Берәүҙәренә күлдәклек ситса, икенселәренә яулыҡ, ҡайһыларына кирза итек йәки түфли, салбар-фәлән эләгә, бухгалтер Ибәт уларҙы алыусыларҙың ҡулын ҡыҫып, әйберҙәрен биреп тора. Алдынғыларҙың бер төркөмөн бишәр тәңкә (бер шешә һәм ҡабымлыҡ!) аҡса менән бүләкләү башланғас, сикәләре ҡыҙышып өлгөргән ир-ат халҡы гөжләшеп ҡул сапты. Шунан ҡала тағы ла бер төркөмгә колхоз идараһы һәм партбюроһының рәхмәт хаты тантаналы ҡысҡырып уҡылып, парторг шул рәхмәткә ирешеүселәрҙе исемлектән берәмләп атай башлағас, баяғы биш тәңкә алыусылар дәррәү ҡубынып, Иван Иванычтың палаткаһы тарафына олаҡты. Рәхмәтле исемлектән нәүбәттәге итеп тракторист Насрый аталғас, баҡыр антенна сымы аҫылған дәү тирәк ботағы һелкенеп тә тирбәлеп, ҡыҙыл япмалы өҫтәл менән "халыҡ массалары" аралығындағы үләне тапалған түтәгә үрҙән буш шешә даңғырҙап төштө лә күптәрҙең һушын һүрҙе. Артынса уҡ тирәк башынан Насрый үҙе аҡырҙы:

— Протестую! Рәхмәтегеҙҙе кеҫәгеҙгә һалығыҙ! Даешь миңә биш тәңкә!

— Ур-ра! Тарзан килгән, Тарзан! — тип сәрелдәне бала-саға, өҫтәл тәңгәлендәге ботаҡта бәүелеүсе Насрыйға бармаҡ төртөп күрһәтеп (ҡыш көнө ауылға Американың “Тарзан” фильмен килтереп күрһәткәйнеләр).

— Биш тәңкә кәрәккәс, ниңә сәсеүҙе тоткарланың, алдан сәсеп бөтмәнең? — тине бухгалтер Бикмәт, үргә салҡайып ҡарап.

— Мин бөттөм, хисапсығыҙ алдаған! Долой, ундай хисапсы беҙгә кәрәкмәй!

— Ә һин үҙең кәрәкме икән колхозға? — Йәшел сиҙәмдә өйкөлөп ултырыусы баштар араһынан ҡалҡынып, Ғәлимә алғараҡ сыкты. — Ғәфү итегеҙ, Рәйеф Әхметыч, шул рәхмәтлегә бер ауыҙ һүҙ әйтәйемсе. — Үргә ҡарап киҫәтте. — Һин, Насритдин, аҙ ғына , яңылышаһың: һин үҙең ул алдаҡсы, һөргәндә лә, сәскәндә лә хәрәмселәп, баҫыуҙарҙы боҙоусы. — Хатта бармаҡ яныны. — Шытып ҡына сыҡһын әле бойҙайҙарың: күҙеңә баҡтыртып, ҡуш табаныңды ҡыҙыу табаға баҫтыртырбыҙ.

— Тарзан! Тарзан! — һөрәнләүен белде малай-шалай. Өҫтәл тәңгәлендә ботаҡта мөсһөҙ баҫып бәүелгән Насрый, көтмәгәндә, Тарзандың әсе тауышы менән һөрәнләп, шул ыңғайҙа уҡ тигеҙлеген юғалтып, ботаҡ осонан ҡаҡ өҫтәлгә “лап!” итеп ҡолап төштө, түрә-ҡара ҡурҡып ситкә сирғыны. Уларҙан да ныгыраҡ шөрләгән Насрый йәшендә тиҙлектә өҫтәлдән бырақты, башын баҫып йүгереп барғаны ыңғайы, еләтергә тоҙ һибеп йәйеп һалынған һыйыр тиреһенә табандары тайып, эргәләге эркетле ҙур ашлауға таяна төштө лә күкрәгенәсә эркеткә сумды, көллө кәүҙәһенә аҡ юлаҡтар ағыҙып, сәсәй-сәсәй тороп йүгерҙе. Бушлай кәмит күргән халыҡ алҡышлап оҙатты ирҙе...

Аҡландарҙа эркелеп табын ҡора, ҡор-ҡор булып өймәкләшеп ултыра башланылар, һабан туйының ослана барыуы ине был. Бер ҡыуаҡ төбөндә Сәләмғолдоң Ғәлимәне ҡултыҡлап алырға ҡырҡышыуын күреп, хисапсыбыҙ эргәләренә барҙы, һөмһөҙйәнде этеп ебәрҙе. Ҡаны ҡыҙышҡан Сәләмғол да йоҙроҡтарын эшкә егергә киҙәнгәс, Ғәлим дә ажырайғас, Ғәлимә араға төштө:

— Етер һеҙгә! Тағы сәкәләшһәгеҙ, берегеҙ менән дә һөйләшмәйәсәкмен, белегеҙ шуны! — тип икеһен дә һыуындырҙы. Сәләмғолдо яурынынан этәрҙе. — Ә һеҙҙе, хөрмәтле хакимиәт, түрәләр табынында көтәләр, рәхим итегеҙ!

— Һеҙҙең дә урын шунда, мин һеҙҙе алырға килдем. Йәрмит Вилданыч менән Рәүеф Әхметыч ебәрҙе!

— Барығыҙ, барығыҙ, урын ала тороғоҙ! — тине Ғәлимә, ныҡыш егеттән көскә арынып. — Ә мин саҡ ҡына торараҡ барып етермен. — Тегеһе күҙҙән юйылғас, Ғәлимде ҡултыҡлап алды ла икенсе яҡҡа ыңғайланы. Табын ҡоролған аҡландарҙың барыһын уҙып китеп, туҡталдылар:

— Ҡайҙа барабыҙ?

— Башыбыҙ ҡараған яҡҡа. Бына был хазина һандығында, — тине, беләгендәге йәтеш сумкаһын һелкетеп, — “зәм-зәм һыуы” менән ҡабымлыҡтар бар — икебеҙҙең өлөштө һалдыртып алдым. Берәй матур урын табып, һөйләшеп ултырайыҡ. Һинең менән шундайын һөйләшкем килә...

— Ә минеңсе!..

— Киттек, алайһа!

Йылға аша күперҙе үтеп, Олобай тигән осһоҙ-ҡырыйһыҙ һыубаҫар болон ауыҙында юлдың һул яғына боролғас, мал аяғынан да, бәндәнекенән дә һил ҡуйы йәш имәнле бөгәл бар — йырып шунда керҙеләр ҙә ҡарт имәндең төбөндә төйәкләнделәр. Ғәлимә сумкаһын асып, ергә ашъяулыҡ йәйҙе, аҡ алюмин һауыттағы туралған ҡалъяларҙы, шешә менән ике рюмканы сығарып ҡуйҙы.

— Быларын да ашнаҡсы еңгәйҙәр бирҙе, — тине, соҡортайҙарҙы аҡ сепрәк менән һөрткөләп. Ҡыйыу тура ҡарап йылмайҙы: — Йә, уҙаман, башлайбыҙмы?

— Хәйерле сәғәттә, изге минутта! — Ғәлим шешәне асып, соҡортайҙарҙы тултырҙы, күҙ йомоп күтәрҙеләр. — Һинең менән ошолай ултырыр көнөм дә бар икән, Хоҙайға шөкөр! — тине.

— Ҡапҡыларға ла онотмайыҡ. Ара-тирә эс серҙәребеҙҙе бушатыша торайыҡ.

— Минең серем бер генә — ул һин! — тине егет.

— Минеке лә шулай уҡ...

— Беренсе күреүҙән үк...

— Ә минсе?..

Шешә шөйлә бүҫкәреп бара ине. Ғәлим ҡыҙҙың янына күсеп ултырҙы, биленән ҡосаҡланы. Ғәлимә ҡаршылыҡ билдәһе тойҙортманы.

— Эргәңдә баяғы “майлы көлсә”не күрһәм, өҙгөләп ташларҙай булам!

—Сәләмғолдомо? — Ҡыҙ көлдө. — Әллә ул һине өнәй тип беләһеңме?.. Бер көн шулай уға: “Ниңә һине Кәзәткә тип ҙурлайҙар? Ғәлим шуны үҙеңдән һорарға ҡушты”, — тигәйнем, тештәрен шыҡырҙатып ярһыны...

— Ниңә шуны янына килтерәһең?

— Бәй, кейәүгә бирмәле ҡыҙ икәнемде күрмәйһеңме әллә? Артымдан ҡалмай йөрөй, ниәтем бик етди, ти...

— Ә һин?

— Үҙең нисек уйлайһың? Майлы көлсә тип, йөҙ сыйырып йөрөргә, ун һигеҙ йәшлек кенә ваҡытым түгел. Алдағыны ҡайғыртмаҡ кәрәк...

Ғәлим рюмканы тултыра ҡойоп эсте, ҡайнар тулҡыны башынаса йүгерҙе. Ҡыҙ иһә тотҡан соҡортайын кире ултыртты:

— Уф, башым әйләнә, Ғәлим... — Күҙҙәрен йомоп, салҡан төшөп һуҙылып ятты. — Кил минең яныма! — тине. Ғәлим уның эргәһенә ҡырынлап, ҡалҡыу күкрәге аҫтынанырaҡ ҡыҫып ҡосаҡланы, сикә тамырҙарына ҡан бәрҙе:

— Һылыуым, Ғәлимәм, һинһеҙ тора алмайым!

— Эш ниҙә һуң? — тине ҡыҙ, күҙҙәре йомоҡ килеш. Өҫкә менеүен егет үҙе лә һиҙмәй ҡалды; көллө тәне дерелдәп, ҡыҙышып, танһыҡ һындың ныҡ тоташҡан тығыҙ боттарын айырырға көсәнһә лә, хәленән һис килмәне. Үҙен шулай интектереп ыҙалаусыһының күҙҙәре йомоҡ көйөнсә лә көлөп ятыуын күреп, ялынды:

— Һылыуым, түҙемлегем ҡалманы... Бушатсы ҡапҡаныңды?..

— Бушатһам, кемгә кәрәгем ҡалыр?

— Һин бит минең һылыуым, йәнейем... Миңә бик-бик кәрәкһең...

— Кәрәгеңде бирермен...загсҡа барып яҙылышҡандан һуң. — Ғәлимә, егетте этеп ебәреп, тороп ултырҙы. — Ошоғаса бер кемде лә белмәнем... Иртәгә үк никахлашайыҡ, бергә йәшәй башлайыҡ!

Ғәлим тағы ҡойоп эсте, ике ҡулы менән башын тотоп уйланды.

— Юҡ, иң элек миңә вузды бөтөргә кәрәк. Шунан һуң...

— Бергә торһаҡ, үҙем ярҙам итермен, уҡытып сығарырмын. Әсәйеңде лә, үҙеңде лә ҡарарға хәлемдән килә, күрерһең...

— Юҡ, хәҙер үк! Ә ҡалғаны — шунан һуң!

Ғәлимә ырғып торҙо:

— Хыялый һин, хыялый... Беләһеңме нисә йәштә мин? Егет түгел икәнһең!

Һәр икеһе үҙ уйҙарына сумып, өндәшмәй атланылар.

# XII

Яҙғы сәсеү менән бесәнгә төшөү араһындағы иркенләп тын алыу сулаһында ауыл халҡы йортон һипләү, кәртә-ҡураһын ипләү менән шөғөлләнеүсән. Былтыр ҡора башлаған нигеҙҙе бөтөрөп иреү йәки , яңыһын төҙә башлау өсөн дә уңайлы ваҡыт был. Колхоздың да элекке рәйес осоронда таштан һалына башлаған һәм бөтмәй ҡалған оҙон иген келәтен көҙгәсә тамамлап ҡуяһы, мал-тыуар өсөн таш нигеҙгә ағастан бурап , яңы ҡура күтәрәһе бар ине. Бер килке ир-атҡа ауылдан күренеп торған оҙон ҡырланан таш сығарырға ҡушылды, икенселәре күрше Башҡортостандың Йылайыр районы урманында алынған диләнкәлә ағас ҡырҡырға ебәрелде.

Колхоз рәйесе Йәрмит Вилдан улына ла ошо , яңы вазифаһына керешкәндән һуң үҙ алдына ҡуйған иң мөһим бурыстарының береһен — матур итеп үҙ йортон һалып кереү өсөн изге сәғәт һуҡты. Юғары белемле элекке математика уҡытыусыһы булараҡ, башы теүәл иҫәп менән фекерләп яҡшы эшләй, шуны ижади ҡуллана белеү ҡеүәһенә лә эйә. Ошоға тиклем бер етәксенең дә башынан килмәгәнсә, ябай ғына колхоз эштәрен дә бер юлы үҙ мәнфәғәтенә хеҙмәт иттертә белде.

Иң элек буласаҡ йортоноң ихатаһын, ҡасандырғы башҡорт байының малдарынан тороп ҡалып борхоп ятҡан аршин ҡалынлыҡ үле тиреҫтән ҡырсыттыртып, йөк машиналарына тейәттертеп, “колхоз баҫыуҙарына “ҡиммәтле органик ашлама — тиреҫ сығартыу кампанияһын” гөрләтеп ойоштороҙо — колхоз файҙаһына булғас, бөтә сығымдар ҙа колхоз иҫәбенән, әлбиттә. Ә малсылыҡ фермаһы артында оҙон ҡырлалай өйөлгән, баҫыуҙарға оҙатылыуҙы көтөп ятҡан ысынлап та ҡиммәтле ашлама “тере тиреҫ” бер көйө ҡала бирҙе.

Колхоздың ер биләмәләре Һаҡмар уң яғындағы таулы дала булғанлыҡтан, баҫыуҙарҙа ҡамасаулап аунап ятҡан таштар күп һәм шуларҙан арыныу хаҡында район гәзитендә туҡып ҡына торалар. Дөйөм хужалыҡ өсөн бик файҙалы ошо бурысты башҡартып, бер төркөм йәштәрҙән баяғы тиреҫте илтеп бушатҡан машиналарға таштарҙы тейәтеп ҡайтартты (һалынасаҡ үҙенең нигеҙе буйына, әлбиттә). Ләкин быныһы күҙ буяу өсөн генә ине. Самосвалдар оҙон ҡырлала етештерелгән таштарҙы колхоздың баяғы төҙөлөп ятҡан иген келәте янына ташый башлағас, таш тейәлгән машиналарҙың кәрәкле өлөшө рәйестең шәхси төҙөлөшөнә бушатылды, ә ҡағыҙҙа, әлбиттә, колхоз келәтенә, тип иҫәпләнде.

Аҙаҡ килеп Йылайырҙан йөк-йөк бүрәнә ҡайтарылды: бер өлөшө — колхоздың буралаасаҡ мал аҙбарына, бер өлөшө — иген келәтен ҡыйыҡлауға, ә тос ҡына бер килкеһе Йәрмит Вилдан улының шәхси төҙөлөшөнә. Таҡта ярғыстан сыҡҡан таҡталар менән дә ҡабатланды шул тылсым. Ситтән килеп, колхоз мал аҙбарын бурарға ялланған әрмән-шабашниктар бер ыңғайҙан рәйес йортон да энәнән-ептән эшләп бөтөрөп бирҙе — колхоздың баяғы мал аҙбары ҡороу иҫәбенән, әлбиттә...

“Дуҫлыҡ” исемле был колхозда үҙенә күрә дуҫлыҡ ҡануны булып, колхозсыларҙың күпселеге “колхоз” тигән дуҫты үҙҙәренең йән дуҫы итеп түгел, ә Сталин бабай тылсымлап тыуҙырған һәм ҡурсалап һимерткән дөйөм суҫка итеп ҡарай, һәр колхозсыға унан кәмендә бер ҡыл тейеш, тип һанай, шул ҡылды кеше күрмәгәндә суҫка ҡойроғонан йолҡоп алырға самалай. Бының өсөн ябай халыҡ ихтыяжы баштан ашҡан — һәр береһенә һәр мөҙҙәттә колхоздан нимәлер кәрәк. Теүәл һиме аҡыл эйәһе Йәрмит Вилдан улы, шуны иҫәпкә алып, һәр мохтажлының ауыҙына баяғы суҫка ҡойроғонан бер ҡыл йолҡоп алып ҡаптырта белә, ә ҡыл ҡапҡан ауыҙҙан уны ҡаптыртыусының мутлыҡтары хаҡында ҡыл нескәлек тә өн сыҡмай — ҡапҡан ҡыл ҡамасаулай. Йәрмит Вилдан улы шуны алдан уҡ иҫәпкә алып, күпселек ауыҙҙарҙы ҡыл менән бөтәштерҙе, инде бер-нисәһен генә бөрәһе ҡалды.

Уның өсөн иң хәтәре — үҙенең урынына парторг итеп һайланған һәм, ике күҙе ҡылый булһа ла, күҙлеге үтә күпте күрергә, күргән береһен тилбер теле аша үткәрергә һәләтле Рәүеф Әхмәт улы ине, әммә уның ғаиләһе менән тар ғына колхоз фатирында тороп интегеүе мәғлүм. Шуны салт тойоп, Йәрмит Вилдан улы уның ике күҙен дә, ауыҙын да бер юлы йомдортто — урындағы урман хужалығынан колхозға тирәк ҡырҡырға рөхсәт алыуын, шул ағастан парторгка ла өйлөк бүрәнә килтертәсәген белдереп өмөтләндерҙе.

Ауыл Советы рәйесе Хөсәйен иһә күрше “кәкүк ауылы”нан йөрөп эшләгәнлектән һәм ундай-быңдай мәсьәләләрен үҙҙәрендә үк хәл иткәнлектән, уның секретары Сәләмғолдоң күңелен табаһы ҡалды. Сәләмғол иһә Йәрмиткә үҙе килеп, икәүҙән-икәү бер “ярты”ны бушатҡан аулаҡ табында быйыл башлы-күҙле буласағын, әммә киләсәк килендең ҡайны һәм ҡәйнә ҡоло булып бер нигеҙҙә торорға теләмәүен һөйләп, үҙенә башҡа нигеҙ ҡороп керергә колхоздан ярҙам өмөт итеүен тумбытты. Рәйес уға ла баяғы тирәктәрҙән өлөш сығарырға һүҙ бирҙе. Дөрөҫ, йәнә лә бер осло күҙ — хаҡлыҡ юллап илгә хафа һалып йөрөүсе Ғәлим бар, ләкин яңғыҙ ҡарға саҡырып яҙ килтермәүе билдәле...

Бана шул ваҡиғалар ҡосағында колхоз бесәнгә лә төштө, Ғәлим, яландан-яланға сабып йөрөп, эшләнгән эштәрҙе һәм тотонолған яғыулыҡтарҙы үлсәне, бөтәһенә бер юлы өлгөрә алмай йөҙәне. Ғәлимә менән һабан туйындағы һалҡынайышыуҙарынан һуң яҡынлаша алғандары юҡ, дөрөҫөрәге, бер-береһен ситләтеп үтәләр ине. Егет йөрәге әрней, ҙур юғалтыу кисергәнен һиҙенә, әммә алдына ҡуйған изге хыялынан — Ғаилә тоҙағына эләкмәҫе борон юғары белем алып сығыу ниәтенән төңөлөргә теләмәй. Ғәлимәне лә яҡшы аңлай — йәштәштәренән һуңлабыраҡ вуз бөтөп сыҡҡан һылыуға, ҡарт ҡыҙ булып Яңғыҙаҡ ҡалмаҫы өсөн, тимерҙе ҡыҙыуында һуғырға кәрәк. Икеһенең мәнфәғәте ике яҡҡа ҡайырылғас, ҡарышыуҙан ни мәғәнә?..

Шулай йөрөп алтын сентябрь етте, арыш урыу тамамланды. һуңғараҡ өлгөрмәле иген баҫыуҙары ла көндән-көн һарыраҡ төҫ алды — бына-бына уттай ҡыҙыу ураҡ ваҡыты етәсәк. Ошо ғәмдәр утында янып йөрөгәндә, көтөлмәгән хәбәр егетте тетрәндерҙе — ауыл Советы секретары Сәләмғол, имеш, агроном ҡыҙ Ғәлимәгә өйләнә... Бөтәһенә лә әҙер, ләкин Сәләмғол ғына булмаһын ине!..

Йөрәге уттай янып, кисләтеп ауылға ҡайтты, өйгә лә инеп тормай, тура Сәлимә апайҙарға йүгерҙе: алынмаған юғары белемдәре алынмайынса уҡ сәсрәһен — һылыуымды ҡулымдан ысҡындырмам!

Ишектәрен ашҡынып шаҡылдатты, Ғәлимәнең яғымлы күкрәк тауышы рөхсәт бирҙе. Ләкин егеттең килеп инеүе көтөлмәгән хәл булды, буғай, уға — дүрт күҙ менән төбәлеп, ни әйтергә белмәй тик тора... Сәлимә апай ҙа аптырабыраҡ ҡалды. Егет сәләмен алһалар ҙа, күңелдәре иремәне.

— Ғәфү итегеҙ... Ғәлимә, һинең менән күҙмә-күҙ генә һөйләшәһе бар ине.

—һөйләш, Сәлимә апайҙан серем юҡ, — тине Ғәлимә, ҡәнәғәтһеҙлеген йәшермәй.

— Ғәлимә... мин ишеткән хәбәр... дөрөҫмө?..

— Дөрөҫ.

— Йәғни... йәғни ҙә...

— Эйе, Сәләмғолға кейәүгә сығам.

— Ниңә?! Минең менән һөйләшмәй...

— Һөйләшкәйнек бит инде.

— Мин ул саҡ , яңылышҡанмын... эйе, , яңылышҡанмын! Баҫма ул хата юлға! һинән башҡа йәшәй алмайым... Иртәгә үк барып яҙылышайыҡ!

— Ниңә иртәрәк уйламаның, нимә көтөп йөрөнөң?

— Әле лә һуң түгел...

— Һуң шул инде, Ғәлим... Бынан өс ай элгәре яҙылыштыҡ... һинең менән һуңғы һөйләшеүҙән һуң...

Егеттең күҙ алдары ҡараңғыланды, ләкин һуңғы өмөт бар ине әле:

— Булһын! Юҡҡа сығарайыҡ уны, икәү яҙылышайыҡ!

Ғәлимә артына әйләнде. һулҡылданы ла, ике ҡулы менән башын тотоп, төпкө бүлмәгә олаҡты, үкһеүе ишетелде. һөйөклөһө артынан атлығырға талпынған егетте Сәлимә, юлына арҡыры тороп, ҡырҡа туҡтатты:

— Аҡылыңдан яҙҙыңмы әллә, ҡустым? Кеше ҡатынына... буйында өс айлыҡ бәпесе бар инде уның... Бар-бар, яҡшы сағыңда ысҡын! — Этәреп сығарып ебәрҙе...

Ошонан һуң Ғәлим, башын ҡайҙа илтеп бәрергә белмәй, илке-һалҡы йөрөнө, ҡулына эш барманы, күҙенә йоҡо ҡунманы. Туңға һөрөү тамамланып, хисап табелен илтеп тапшырғас та, ғариза яҙып эштән сығыу, ҡайҙалыр китеү тураһында уйланы.

Сәләмғол колхоз ташынан нигеҙ ҡорҙорткан, инде буралыҡ ағасын да тракторҙан һөйрәттертеп килтерәсәк, Насрый менән килешкән, тип һөйләнеләр. Шуны дөрөҫләгәндәй, Һаҡмар буйындағы колхоз диләнкеһендә шатор-шотор тирәктәр ауҙарыла...

Алйырҙай булып башы тоноп йөрөгән Ғәлим, аҙналыҡ хисап бирер өсөн, яғыулыҡ ташыусы Яхъя ағай арбаһына эләгеп, МТС-ҡа юлланды. Ҡыҙыу ураҡ өҫтө килеп еткән, баҫыуҙарҙа, ырҙындарҙа тиҫтәләрсә мотор көнө-төнө гөрөлдәй — бөтәһе лә цистерналарҙағы яғыулыҡ иҫәбенә. Әрәм-шәрәм итмәйенсә, һәр тамсыһының ҡәҙерен белеп кенә тотонор ваҡыт, сөнки йыл буйына көтөп алынған уңыштың яҙмышы яғыулыҡҡа бәйләнгән. Электән үк шуны яҡшы белеп эш иткән Ғәлим был осорҙа уяулығын айырыуса көсәйтте. Цистерналарҙың һемәгенә , яңы йоҙаҡтар алып ҡуйҙы, ике асҡыстың береһе — уның үҙендә, икенсеһе яғыулыҡ ташыусыла ине. Бына бөгөн дә Яхъя ағаһына мискәләрҙе тейәште лә: "Үҙем юҡта асҡысты бирәүгә лә бирмә!" — тип ҡаты киҫәтеп, ҡайтарып ебәрҙе, ә үҙе хисабын тапшырырға МТС бухгалтерияһына инде. Башҡа колхоздарҙан да килгәйнеләр. Хисап тапшырыу шөйлә оҙаҡҡа һуҙылып, ауылға төн уртаһында ҡайтып инде.

— Кистән Сәләмғол һине таптыртып килде, — тигәйне әсәһе, ҡолағы "ҡарп!" итеп ҡалды:

— Ни өсөн?

— Насрый тракторынан бүрәнә һөйрәтмәкселәр. Яғыулыҡ кәрәк, ти. Ғәлим ҡайтып етмәне, барығыҙ Яхъяға, тип ебәрҙем.

— Ишкәнһең икән ишәк сумарын! — тине лә Ғәлим күҙе йомолоп ауҙы. Әммә ниндәйҙер яманлыҡ һиҙенеп, йөрәге тынғы бирмәй, таң алдынан уҡ уянды.

Иртүк тороп барғанында дизель яғыулығы цистернаһы янында бер төркөм механизатор сыуала, ҡобараһы осҡан яхъя цистерна башында маташа.

— Бөткән... һуңғы тамсыһынаса ағып бөткән... — тине ул, ергә төшөп. Цистерна һемәгенең аҫты — майлы һаҙ — төндә аҡҡан яғыулыҡ ергә һеңгән, бер өлөшө, түбәнгәрәк һарҡып, бураҙна соҡорон буйлаған. Кисә Ғәлим үҙ ҡулы менән бикләп киткән һемәк йоҙағы, сылбыры менән ҡуша, ерҙә ята.

— Был ни хәл?!

— Белмәйем, мин бер ни ҙә белмәйем! — тип ялбарҙы Яхъя, яғаһынан алған Ғәлим ҡыҫымынан ысҡынырға тырышып.

— Асҡыс һиндә ине бит!

— Уны кистән, Насрый менән бергә тракторҙа килеп, Сәләмғол алып киткәйне...

— Ниңә бирҙең?

— Сәләмғол түрә йәнде алып бара... Ялҡау Ғәлимдең ҡыҙырып йөрөүе арҡаһында техника туҡтап тора. Һәр сәғәте-минуты өсөн яуап бирәсәкһегеҙ! — тип яналы...

— Ниңә үҙең барманың?

— Мунса инеп ята инем... Яланғас көйөмө сығып йүгерәйемме?

АҢлашылды. Һемәген япмай киткәндәр ҙә яғыулыҡ ергә һеңгән. Ураҡ эштәренә тип күҙ терәп торған байлыҡ...

Ҡаза шунда уҡ районға ла фашланып, прокурор үҙе милиционер эйәртеп килеп төштө. Ғәлимде һәм башҡаларҙы ауыл Советына саҡыртып тәфтишләнеләр. Хәлде һөйләп бирһә лә, дөрөҫләүсе булманы: иртәнсәк цистерна янындағы аңлашыуҙы береһе лә ишетмәгән... Яхъя ла Сәләмғолға асҡыс биреүен таныманы — соланда сисенеп мунсаға инеп киткәнемдә асҡыс салбар кеҫәмдә ятып ҡалғайны, сыҡҡас та шунда ине, тип аҡланды. Насрый иһә төндә иҫерек Ғәлимдең үҙ ҡулынан тракторының багына яғыулыҡ ҡойҙортоп алыуын, иҫерек килеш уның шунда һемәк янында тороп ҡалыуын һөйләне. Тәфтишләнеүселәрҙең һәр береһен Ғәлим менән күҙләштертеп тә һоранылар. Аҙаҡ Сәләмғол да Ғәлимдең күҙҙәренә тура ҡарап үҙенең был енәйәткә бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡлығын белдереп сығып киткәс, прокурор иптәш милиционерға Ғәлимде һаҡ аҫтына алырға бойорҙо, ҡороҡҡослоҡта ғәйепләүсе енәйәт эше асыласағын белдерҙе. Ләкин һуңғы минутта хәлдәр ҡырҡа үҙгәреп китә яҙҙы: колхоз агрономы, Сәләмғолдоң никахлы ҡатыны Ғәлимә килеп инеп, бөтәһен аптыратты:

— Яғыулыҡты кем ағыҙғанын беләм, әммә ул хисапсы Ғәлим түгел! — тине.

— Кем һуң?

— Улмы, ул... минең ирем Сәләмғол.

— Ә?! Ниндәй дәлилдәрегеҙ бар? — Прокурорҙың күҙҙәре маңлайына күсте.

— Иремде саҡыртығыҙ — күҙенә ҡарап әйтермен.

Ғәлимдең башына сүкеш менән һуҡҡандай тәьҫир итте, аҡылына һыйҙыра алманы быны. Шул уҡ ваҡытта теге көндә Сәлимә апайҙарҙа булған һөйләшеү киҫте йөрәген: өс айлыҡ... буйында өс айлыҡ... Юҡ! Ҡарынында саҡта уҡ бәхетһеҙ итергә теләмәйем!

Йән әсеһе менән ыңғырашҡан Ғәлим, ырғып тороп, прокурорҙың күҙҙәренә тура ҡараны:

— Ышанмағыҙ, ул алдай. Ире менән юҡҡа ғына ыҙғышҡандар ҙа, шуның асыуынан... Ә цистерна һемәген мин, ысынлап та, иҫерек көйөмсә асып, ябырға онотҡанмын...

— Аңлашылды. Алып китегеҙ, тегендә асыҡларбыҙ! — тип ҡул һелтәне прокурор. Милиционер Ғәлимде оҙата сығып, ихатала көтөп торған шомло машинаға ыңғайлатты.

1959.  
Һунарсы ауылы.

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ:

ТЕГӘНӘК.............................................................
КИПАРИСТАР СӘСКӘ АТҠАН САҠТА............
ТОМБОЙОҠ..........................................................
ХЕҘМӘТ..............................................................